# Ағиҙел

Өфө,
март
2011

3(1055)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.03. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 440 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0031.11.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (3,1055)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Марат Кәримов.** Бер ҡатлы. Ш и ғ ы р ҙ а р. ....................................5
**Инсур Артур.** Гөргөлдәк. П о э м а. ..................................................15
**Мәрйәм Күсмәева.** Сит яҙ күңелемә ситен булды…
Ш и ғ ы р ҙ а р. .........................................................................................21

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Иҙрис Ноғоманов.** Һаҡмарбаш. Т а р и х и р о м а н. Аҙағы. ...........25
**Исмәғил Аҡъюлов.** Миңһеҙбикә. Х и к ә й ә. ................................109

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Харис Сәғитов.** Ҡайтып киләм. Ш и ғ ы р ҙ а р. ............................125
**Флүрә Низамова**. Рәми рухы менән һөйләшеү. Ш и ғ ы р ҙ а р.
**Рәйлә Нәҙерғолова.** Телем. Ш и ғ ы р ҙ а р. ...................................129

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Мөҙәрис Мөсифуллин.** Яҙыусы. Д р а м а - у й л а н ы у. .................133

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?
**Фәнил Күзбәковтың Суфиян Поварисов** менән әңгәмәһе. ........160

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Рәүеф Шаһиев.** Шағир йәшнәүе. .................................................171

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Әхмәҙин Әфтәх.** «Ҡариҙел буйында ҡалам…»
*(Ярулла Вәлиевтың тыуыуына 90 йыл).* ......................................170

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Хәмиҙә Минһажитдинова.** Сәсәндән һүҙ ҡала. ..........................175

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Марат Әминев.** *Ю м о р е с к а л а р.* ............................................183

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**М. Каримов.** *Стихи.* **Инсур Артур.** *Поэма.* **М. Кусмаева.** *Стихи.*

ПРОЗА

**И. Нугуманов.** Сакмарбаш. Исторический роман. *Окончание.*
**И. Акъюлов.** Девчонка без родинки. *Рассказ.*

ТВОРЧЕСТВО НАШИХ ЧИТАТЕЛЕЙ

**Х. Сагитов, Ф. Низамова, Р. Надергулова.** *Стихи.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**М. Мусифуллин.** Писатель. *Драма-раздумье.*

*Встречая съезд писателей Башкортостана*

Является ли литература учебником жизни? **Интервью Ф. Кузбекова с С. Поварисовым.**

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Р. Шагиев.** Поэт, как гром.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Ахмадин Афтах.** «Остаюсь у Каридели» *(90 лет со дня рождения Яруллы Валиева).*

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**Х. Мингажитдинова.** Слово сэсэна.

САТИРА И ЮМОР

**М. Аминев.** *Юморески.*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаçары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаçары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәçкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баçҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

# *Шиғриәт*



**Марат**
**КӘРИМОВ**

## *Бер ҡатлы*

*Бер ҡатлы өй, ҡабыҡ башлы,*
*Асыҡ сырайлы...*
*Көн дә төштәремә кереп,*
*Мине һынаймы?*

*Уның быға хоҡуғы бар,*
*Һынаһын, әйҙә!*
*Мин бер ҡатлы булып үҫтем*
*Шул тәпәш өйҙә.*

*Донъя аҡлығын күреүем*
*Ошонда булды.*
*Ихлас булдым, эсемдәге*
*Тышымда булды.*

*Кем тыялған йәшлек тигән*
*Баш бирмәҫ атты?*
*Ҙур хыялдар, ҙур маҡсаттар*
*Ҡалаға тартты.*

*Йорттар бында ҡатлы-ҡатлы,*
*Болотҡа саҡлы.*

---

*Марат Кәримов (1930) Ейәнсура районы Күгәрсен ауылынан. Педучилище тамамлап, балалар уҡыта, армияла хеҙмәт итә. «Ленинсы» гәзите, «Пионер», «Һәнәк» журналдары редакцияларында эшләй. Башҡортостандың халыҡ шағиры.*

*Унда йәшәүселәре лә*
*Бер нисә ҡатлы.*

*Миндәге шул бер ҡатлылыҡ*
*Һорарға өндәй:*
*«Күңелегеҙ, хыялығыҙ,*
*Уйығыҙ ниндәй?*

*Ҡайҙа, ҡайҙа йәшерҙегеҙ*
*Асылығыҙҙы?*
*Әллә шулай яманлыҡтан*
*Ҡасыуығыҙмы?*

*Күп ҡатлы йорт бер ҡатлыны*
*Өнәп бөтмәйме?»*
*Минең кеүектәрҙе шундай*
*Яҙмыш көтмәйме?*

*Күҙ алдымда бер ҡатлы өй*
*Яҡты сырайлы.*
*«Ә һин үҙгәрмәнеңме?» — тип*
*Ҡарай һынаулы...*

## Ҡорбан байрамында

*«Был ғәмәлем — һиңә яҡынайыу, Алла!» —*
*Ҡорбан сала хаҡ мосолман, ҡорбан сала.*

*Ә салғаны уның һимеҙ һарыҡ булыр,*
*Бер өлөшө үкһеҙҙәргә аҙыҡ булыр.*

*Һарыҡ нимә! Булды шундай заманалар,*
*Яман улар, күҙ алдында һаман улар:*

*Иблис ялсылары байрам итә илдә,*
*Байрам булғас, ҡорбан кәрәк — балта билдә.*

*Улар өсөн кеше һарыҡтан да түбән,*
*Иблис хуплап ҡарап тора, ҡашын төйгән.*

*Язаһынан, ана, ләззәт ала-ала,*
*Ҡорбан сала зобаныйҙар, ҡорбан сала.*

*Ҡорбан менән төрмә тулған, Себер тулған,*
*Ағасынан да күберәк бында ҡорбан.*

Ә ул иҫән ҡалды, ҡанға буялманы,
Тупаҫланған балта ғүмерен ҡыялманы.

ВЧК-аһы, НКВД — төш, әллә өн?
Ҡайтмаҫмы ул ҡанға батҡан кисәге көн?

«Раббым, берүк, ғәмһеҙ бәндәләрҙе аңғарт,
Ныҡ торһалар, иблис ҡорбан салмаҫ ҡабат».

Раббыһына ышаныста ҡала-ҡала,
Ҡорбан сала хаҡ мосолман, ҡорбан сала...

## Алмаш быуын

Дәүер тыуҙыра
Үҙенең улын.
Беҙҙән һуң килә
Өр-яңы быуын.

Быуыны һаман
Ҡатмаған быуын,
Ел ыңғайына
Атлаған быуын.

Беҙ кем әле, тип
Янмаған быуын,
Меҫкенлек бүркен
Һалмаған быуын.

Екмәгән атын
Туғарыр быуын,
Тарихта эҙе
Юғалыр быуын.

Беҙҙең быуынға
Оҡшаш был быуын.
Ниңә был шулай?
Әйтеүе ҡыйын.

## Гөбөргәйелгә мөрәжәғәт

Урман юлы. Көтмәгәндә
Гөбөргәйел ҡаршы сыҡты.
Мине күргәс, ҡурҡып, ахыры,
Панцырына башын тыҡты.

*Гөбөргәйел, ярай, һинең*
*Урының бар йәшенергә.*
*Минең күңел һәр саҡ шәрә,*
*Уны нисек йәшерергә?*

*Яуыздар бар, улар йәшәй*
*Ҡылғанынан ғәйеп иоймай.*
*Күңелдәрҙе тырнап алыу*
*Улар өсөн бер тин тормай.*

*Шулар һалған һанһыҙ яра*
*Айҙар-йылдар буйы бара.*
*Яраларҙан һаҡланырға*
*Барҙыр бит ул берәй сара?*

*Гөбөргәйел, гөбөргәйел,*
*Хәлдәремә керһәң икән,*
*Теш тә үтмәҫ панцырыңды*
*Миңә генә бирһәң икән!*

*Ят-яуыздан күңелемде*
*Шуның менән ҡаплар инем,*
*Изгелегеңде онотмай,*
*Хәтеремдә һаҡлар инем.*

*Өндәшмәне гөбөргәйел,*
*Тик һыҙғырҙы тилергән ел.*
*Ҡайҙа киттең? Тауыш бирсе,*
*Гөбөргәйел, гөбөргәйел!*

## *Йәшлектән бер хәтирә*

*Аэропорт юлында тирәктә*
*Был нимә? Ҡомасмы ҡыҙара?*
*Ҡомастан хәрефтәр ҡысҡыра:*
*«Мин һине яратам, Дилара!»*

*Юлсылар яҙыуҙы уҡый ҙа*
*Һөйләшеп алалар үҙ-ара:*
*«Ҡара һин! Ниндәйҙер егетте*
*Арбаған ниндәйҙер Дилара!»*

*Аһ, ниңә һуң әле һулҡылдай*
*Күңелдә онотолған бер яра?*
*Яңынан алдыма баҫҡандай*
*Ауылдың сибәре Дилара.*

*Нисә йыл шул һүҙҙе әйтергә*
*Баҙманым мин ғашиҡ – бисара.*
*Ғүмерлек үкенес ҡалдырып,*
*Юлымдан юғалды Дилара.*

*Алып ос, самолет, йәшлеккә,*
*Нимә ул осҡосҡа был ара!*
*Мин унда ҡысҡырып әйтәйем:*
*«Мин һине яратам, Дилара!»*

*Осмай шул самолет үткәнгә,*
*Тик юҡҡа уйҙарым болара.*
*Ҡауышып йәшәгеҙ, билдәһеҙ*
*Ғашиҡ һәм билдәһеҙ Дилара!*

## Бай бисә

*Керемдәрҙе декларациялау тураһында*
*закон сығыу менән бай ҡатынлы*
*чиновниктар һаны бермә-бер артты.*

Гәзиттәрҙәге хәбәрҙәрҙән.

*Эй бай бисә, бай бисә,*
*Ҡояш бисә, ай бисә.*
*Өйҙә ятып байлыҡ йыйҙың,*
*Нимәң бар ине кисә?*

*Эй бай бисә, бай бисә,*
*Йондоҙ бисә, ай бисә,*
*Йортоң нисә, дачаң нисә,*
*Машиналарың нисә?*

*Эй бай бисә, бай бисә,*
*Шәкәр бисә, бал бисә,*
*Кемдең харам малы шулай*
*Һинең исемгә күсә?*

*Эй бай бисә, бай бисә,*
*Зифа бисә, тал бисә,*
*Түрә ирең ниңә фәҡир?*
*Бының серен кем сисә?*

## Үҙгәреш

*Бер танышым, юлын табып,*
*Депутат булып китте.*
*Ошо депутатлыҡ уны*
*Танып булмаҫлыҡ итте.*

*Ахыры, яңы статусы*
*Уны шуға этәрә:*
*Нимә генә тиһәләр ҙә,*
*Хуплап ҡулын күтәрә.*

*Дөрөҫмө был, түгелме был —*
*Ул уйлап та ҡарамай.*
*Уға үҙе һымаҡтарҙан*
*Ҡалышырға ярамай.*

*Ул һәр ваҡыт һәр хуплауға*
*Әҙер булырға тейеш,*
*Шуға хәҙер йоҡлай, тиҙәр,*
*Ҡулын күтәргән килеш.*

## *Кем нимә эсә?*

*—Әйт, һыраны кем эсә?*
*Уны ни әлегәсә*
*Танау аҫты кипмәгән*
*Йыйын тай-тулаҡ эсә.*

*—Йә, әйт, аҡты кем эсә?*
*Яп-ябай халыҡ эсә,*
*Ҡайҙан да табып эсә,*
*Селедка ҡабып эсә.*

*—Ә коньякты кем эсә?*
*Һаман да элеккесә*
*Йәнә шул халыҡ эсә,*
*Шоколад ҡабып эсә.*

## *Йөрөштәр*

*Кешеләрҙең бер-береһенә*
*Оҡшамаған йөрөштәре,*
*Шул йөрөштә бар эштәре.*

*Берәү дәрәжәле урын биләп,*
*Морон сөйөп йөрөй,*
*Беҙгә ҡашын төйөп йөрөй.*

*Берәү илде һыйыр итеп,*
*Биҙрәһенә һауып йөрөй,*
*Шулай сереп байып йөрөй.*

*Берәц — кемдәр юғарыла —*
*Уңлы-һуллы маҡтап йөрөй,*
*Ҡырын эште аҡлап йөрөй.*

*Берәц, зарҙан бушай алмай,*
*Бар донъяһын һүгеп йөрөй,*
*Бысраҡ атып-түгеп йөрөй.*

*Был хәлдәрҙә эшем юҡ, тип*
*Берәц күҙен йомоп йөрөй.*
*Йә эсенә йыйып йөрөй.*

*Ә сатирик, барыһын фашлап,*
*«Ғәҙеллек!» тип янып йөрөй,*
*Утлы шиғыр яҙып йөрөй.*

*Әммә кеше һис үҙгәрмәй,*
*Нисек йөрөгән — шулай йөрөй,*
*Файҙаһына ҡулай йөрөй...*

## Ҡарсыҡ килен һайлай

*Туҡталыш... туҡталыш...*
*Автобус юлында.*
*Ултырҙы бер ҡарсыҡ,*
*Төйөнсөк — ҡулында.*

*Ултырыу менән үк*
*Екте һүҙ-хәбәрен,*
*Тыңлайбыҙ ҡарсыҡтың*
*Ғаилә хәлдәрен:*

*—Өйләнә малайым,*
*Уңмайым килендән,*
*Тегеһе ебегән,*
*Быныһы ебегән.*

*Алған бер ҡатынын, —*
*Етмәгәс сыҙамым, —*
*Ҡыуҙым да сығарҙым,*
*Ҡыуҙым да сығарҙым.*

*Нисек һуң әле мин*
*Киленһеҙ ҡалайым:*

*Унынсы тапҡырға*
*Өйләнде малайым.*

*Ниһайәт, оҡшаттым*
*Унынсы киленде.*
*Ул холҡо-фиғеле —*
*Торғаны мин инде!*

*Ҡарсыҡты бүлдерҙе*
*Пассажир тауышы:*
*—Әллә шул киленгә*
*Ҡунаҡҡа барышың?*

*—Ҡайтышым, — тип ҡарсыҡ*
*Һүҙ-атын туғарҙы, —*
*Киленем оҡшатмай*
*Ҡыуҙы ла сығарҙы...*

## Һуҡырлыҡ

*Нимә етмәй ҡалған инде*
*Мин-йүләргә:*
*Күрең менән күҙем төштө*
*Бер сибәргә.*

*Күҙе төшкәс, кеше нимә*
*Күрә инде!*
*Насип булған яҙмыш йөгөн*
*Һөйрәй инде.*

*Нисәмә йыл йөрөнөм мин*
*Һуҡыр килеш.*
*Сибәр хаҡында ишетеп*
*Имеш-мимеш.*

*Күрмәгәс ни, ышанманым*
*Һүҙҙәренә.*
*Кеше шулай тейешме ни*
*Үҙгәрергә?*

*Бына булдым һуҡыр килеш*
*Уның ире.*
*Төшкән күҙем урынына*
*Ҡайтты кире.*

*Күҙе булған кеше күрә*
*Әллә ниҙәр.*
*Шулмы ни һуң мин фәрештә*
*Тигән сибәр?*

*Шулмы ни һуң өлөшөмә*
*Төшкән көмөш?!*
*Эх, ҡалаһы ҡалған икән*
*Һуҡыр килеш!..*

## *Эш өҫтәле янында уйланыу*

*Бер кире яғы бар*
*Ижади эшемдең,*
*Нисә йыл яҙышып,*
*Мин шуға төшөндөм:*

*Иң һәйбәт яҙыусы —*
*Яҙмаған яҙыусы.*
*Онота мәкерен*
*Һиңә баҙ ҡаҙыусы.*

*Юҡ һинең уңышҡа*
*Көнләшеп йөрөүсе,*
*Алдыңда йылмайып,*
*Артыңда өрөүсе.*

*Үрҙәргә менгәндә*
*Юҡ аяҡ салыусы,*
*Юҡ һинең өҫтөңдән*
*Аноним яҙыусы.*

*Ҡолағым тып-тыныс,*
*Ишетмәй ғәйбәт һүҙ.*
*Һәм һинең турала*
*Йөрөй тик һәйбәт һүҙ.*

*Яҙмаған яҙыусы —*
*Иң тыныс яҙыусы.*
*Был һүҙ бит ижадҡа*
*Юлдарҙы ябыусы!*

*Әй меҫкен ҡәләмдәш,*
*Бик еңел һулама,*

*Яҙыуҙан был туҡтар,*
*Тыныр, тип уйлама.*

*Күңелдә күпме йыр!*
*Сыҡҡандар ирекҡә,*
*Осһондар, моң сәсеп,*
*Бейектән-бейеккә!*

*Күпһенһен ваҡ йәндәр,*
*Китмәй һис иҫтәрем.*
*Үҙенә саҡыра*
*Мине эш өҫтәлем.*

## Срогы сыҡҡан

*Көтмәгәндә сырхап киттем,*
*Ниндәй сир йоҡҡан икән?*
*Дарыу йотам, файҙаһы юҡ —*
*Срогы сыҡҡан икән.*

*Магазиндан ҡарбуз алдым,*
*Алыуым юҡҡа икән.*
*Эсе боҙоҡ булып сыҡты —*
*Срогы сыҡҡан икән.*

*Срогы сыҡҡан әйберҙәрҙән*
*Күпме зыян күрәбеҙ.*
*Шулай тигәс, иҫкә төштө*
*Һауалы бер түрәбеҙ.*

*Башта ябай бюрократ тип*
*Һананыҡ был бәндәне,*
*Тора-бара ныҡ үҙгәрҙе,*
*Бүрекратҡа әйләнде.*

*Бүренән тик зыян ғына,*
*Унан файҙа кем күткән?!*
*Ә ул һаман урынында,*
*Срогы сыҡҡан күптән.*

*Шулай оҙаҡ ултырырға*
*Кем биргән хоҡуҡ икән?*
*Әйберҙәрҙең срогы бар,*
*Түрәләргә юҡ микән?*



**Инсур**
**АРТУР**

# ГӨРГӨЛДӘК

**ПОЭМА**

*«Бер бабай юлға сыҡҡан,*
*Тәгәрмәсе боҙолған.*
*Тәгәрмәсен йүнәтергә*
*Нисә сөй кәрәк булған?»*

*«Етәү!»*

*Түңәрәккә баҫҡан бала сағым,*
*Унда ла бар һынау-һанамыш.*
*Етенсебеҙ "гөр-гөр" тигән мәлдә*
*Һирпеләбеҙ,*
*Ҡарап ҡуйма инде яңылыш.*
*Гөргөлдәктең үҙе йәшенгәндәй,*
*Ҡылт иткәнгә көн дә тертләне.*
*Эҙләүсенең генә ҡыланышы*
*Мәрәкәләп бөйөр төртмәле.*
*Ауыҙ ҡаплап көлгән булабыҙ беҙ,*
*Зыңлап китер кеүек ымдар ҙа.*
*Юҡ, барыбер йайлап табылабыҙ,*
*Күпкә йәшенмәй бит шымдар ҙа.*

---

*Инсур Артур (1951) Бөрйән районының Иҫке Мөсәт ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар ваҡытлы матбуғатта эшләне. Иҫке Собханғолда йәшәй. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе 60 йәше менән ихлас күңелдән тәбрикләйбеҙ!*

*«Таптым! Таптым!» —*
*Яуы эҙләүсенең,*
*Уятырлыҡ уйҙың сырымын.*
*Ул ҡыуанған өсөн ҡыуанабыҙ,*
*Белмәнек шул уйҙың ҡырынын.*
*Гөргөлдәк — нур бала күңелендә,*
*Уйын ғына унда аулаҡлау.*
*Үҙ сереңдә ҡала белеү өсөн*
*Һанамыштар булды һамаҡлау:*
*«Бер бабай юлға сыҡҡан,*
*Тәгәрмәсе боҙолған...»*

* * *

*Ғүмер бары йылдар көнө икән,*
*Ялтлап ҡына ҡала нур һымаҡ.*
*Аңғармай ҙа уны үткәрәбеҙ,*
*Ер йөҙөнә ятыр юл сырмап.*
*Инде бына бала саҡтан ашып,*
*Өлкәнлеккә кергәс — беҙ бүтән.*
*Ниңә шулай булып китәбеҙ беҙ,*
*Ни үҙгәртә беҙҙе,*
*Ни үртәй?!*
*Гөргөлдәктән күптән сыҡҡанбыҙ бит,*
*Уйын түгел тормош көтөүе.*
*Ҡыланыштар әммә — хәйлә менән,*
*Һын итмәйбеҙ яҙмыш өтөүен.*
*Ә мин, тормош,*
*Һиңә һыйған килеш,*
*Йөрәгемә урын тапмайым.*
*Һыйынырлыҡ аулаҡ шулдыр, тиеп,*
*Шул йөрәктә ҡалып сатнайым.*
*Ҡайҙа ғына башҡа барырға һуң,*
*Юғалырмын бүтән ҡайҙарҙа?*
*Үҙ йөрәгем генә мине аңлай*
*Упҡын һымаҡ саҡта һайҙар ҙа.*
*Тормошомда күргән ғәләмәттәр*
*Мең   һорауҙар менән йөҙәтте.*
*Бәкәлдәргә һуғып, яуаптары*
*Теҙләндерҙе*
*Йәки төҙәтте.*
*Һабаҡ алған саҡтар үкһетмәне,*
*Күҙҙәремде асты,*

*Йәм бирҙе.*
*Ҡыйыунлыҡты еңеүҙәрҙән башҡа,*
*Ҡеше итһен нимә,*
*Йә, ирҙе?!*
*Тик ниңәлер бәхет таныуҙарҙан,*
*Изгелектең хаҡын белеүҙән*
*Ҡилгән уйым-хисем күберәк һуң,*
*Йөрәгемде,*
*Йәнде телеүҙән?*

* * *

*Ҡурғашлыла* —*
*Оло юлды ташлап,*
*Ышыҡ ҡына тапҡан ауылда*
*Балаларға әсәй булған йорт бар,*
*Етемдәрҙе һаҡлай дауылдан.*
*Бында ла шул*
*Сабый — сабый инде:*
*Телдән төшкән һүҙҙәр —*
*Тәғлимәт.*
*Тик уйындар ғына һис бүктермәй,*
*Булһын да, ти, хәс тә әкәмәт.*

*«Гөр-гөр, гөр-гөр, гөр әтәс,*
*Ике тауыҡ, бер әтәс.*
*Ҡетәктә юғын һанарға*
*Ней хәтлем кәрәк йәтәс?*

*«Етәү!»*

* * *

*Уйындарҙы көйләү мәшәҡәте*
*Бәләкәстәр алыр өлөш бит.*
*Ул заманды үткәс — мин дә беләм,*
*Ауыр бурыс — төшкән көмөш бит.*
*Юл-йомошҡа һаман йүгереүҙәр...*
*Ҡапҡа һаҡлау сәкән һуҡҡанда...*
*Ағайҙарға апай саҡырыуҙар...*
*Тоҡойоуҙар ҡай саҡ уҡтай ҙа...*
*Барыһы ла тейә бәләкәскә,*
*Ошо мәлдән өлкән булына.*

---

* *Ҡурғашлы — ауыл исеме, унда балалар приюты урынлашҡан.*

*Кәрәк икән,*
*Хатта шыңшый-шыңшый,*
*Беҙ баҫабыҙ тормош юлына.*

* * *

*Хәҡиҡәтте ниңә сурытырға?*
*Әкиәт юҡ бала йортонда.*
*Бәрбәс кенә йылы иркәләү ҙә*
*Ҡабатланмаҫ тәмле йотомдай.*
*Бында ла шул танһыҡ гөргөлдәктәр,*
*Ә етенсе булды бәләкәс.*
*Гөр-гөр килеп мөйөш ҡаплай бала,*
*Ҡалайтаһың,*
*Өлөш — йән-йәтәс!*
*Эй, сослоғо үткер бәләкәстең! —*
*Йәшенгәндәр шундуҡ табылды.*
*Шырлыҡта ла булмай һис йәшереп*
*Аңғармаҫлыҡ бала сағыңды.*
*Тик бәләкәс менән ниҙер булды,*
*Гөр-гөр килә һаман мөйөштә.*
*Күҙҙәренән тамған күҙ йәштәре,*
*Ҡул тейҙермәҫ үкһеү көмөштәр.*
*Үҙәктәрҙе өҙҙө был уйындың*
*Ысыҡ тиклем генә уймағы.*
*Тәрбиәсе апай теҙләнерлек*
*Һүҙ ҡабатлай бала,*
*Уй яҙып:*
*—Гөр-гөр, гөр-гөр, тиеп оҙаҡ әйтһәм,*
*Был уйында нишләп сәсәйем?*
*Дилбәр апай, әйтсе, гөргөлдәктә*
*Табылыр ҙа микән әсәйем?*
*Ошо мәлдә яңғыҙ бер болот та*
*Булыр ине күкрәр йәшенлек.*
*Гөрләп йәшәр мәлдә ниңә беҙгә*
*Инсебикә кургән йәтимлек!?*

* * *

*«...Бер бабай юлға сыҡҡан,*
*Тәгәрмәсе боҙолған...»*

*Ҡалайтаһың,*
*Булған шундай заман,*
*Иҙел булған йылғыр оло юл.*

*Һалдары ла,*
*Ипле кәмәһе лә*
*Йүнсел йөксө һымаҡ тойолор.*
*Хәҙер нимә?*
*Таҡыр юл һалына,*
*Зыйтлап ҡына саба машина.*
*“Һә!” — тигәнсе барып етеп була,*
*Хет һөйәркәң,*
*Йәрең ҡашына.*
*«Ярты» менән ҡуйған ашына...*
*Шуға микән Иҙел ҡәҙере юҡ,*
*Гөр-гөр килеп шаулар шаршы һай.*
*Туғайҙарҙа, гүйә, яу «йыуылған», —*
*Табын ҡалдыҡтары ҡаршылай.*
*Үҙебеҙҙә,*
*Төйәк үҙәгендә,*
*Япа-яңғыҙ утрау зар етем.*
*Күпме була инде уны соҡоп,*
*Ағыҙыр ҙа инем һал итеп.*
*Ағыр ине!*
*Бер мәл ағыр инде,*
*Гөргөлдәрлек урын юғалыр.*
*Унда хәҙер ҡош та йәшенмәй бит,*
*Ниндәй моңға тирәк ураныр?*
*Йәшлеккә лә бында аулаҡ бөттө,*
*Һандуғастың моңо аҙашҡан.*
*Ҡысҡырғандан тауҙар ауыр кеүек,*
*Иҙелем, һин ҡайҙа,*
*Яҙ ашҡан?*

* * *

*Тыуған ерем!*
*Һин кисәге түгел,*
*Бөгөнгө лә түгел иртәгә.*
*Ә шулай ҙа һаман бер бөртөкһөң,*
*Һәм... сыҙайһың бөтә ғәмәлгә.*
*Ә мин — бала,*
*Ил-Әсәгә бала,*
*Иҙел кеүек етем ҡалғанмын.*
*Бәлки, бер йылыныр,*
*Устарыма*
*Гөрөп һалған ҡырсын алғанмын.*

*— Гөр-гөр, гөр-гөр, тиеп оҙаҡ әйтһәм,*
*Был бөгөндә нишләп сәсәйем?*
*Сыҙа, заман,*
*Сыҙа, гөргөлдәктә*
*Юғалмаһын ерем-әсәйем!*
*Ожмахтан да яҡты Бөрйәнемә*
*Ахрызаман ҡайҙан үрелә?*
*Тамуҡ булһа,*
*Ул да йәлләр ине...*
*Ер-иҙелде йәннәт түренә*
*Ғәйрәтләнеп китеп сөйөр ине,*
*Эй, ҡурсалап яман күҙенән...*

* * *

*«Гөр-гөр, гөр-гөр, гөргөлдәк,*
*Ике  кеçә, бер күлдәк.*
*Нисә кеше юғалтабыҙ,*
*Әгәр һинән йәшенһәк?»*

*«Берәү!»*

*Эйе, берәү генә,*
*Бары берәү,*
*Эҙләгән дә*
*Йәки табылған.*
*Йәшәһәк тә бына гөргөлдәктә,*
*Ғүмер берәү беҙҙең табынған.*
*Әйҙә, шуға ҡәҙер белһен тормош,*
*Һәр ниғмәт тә беҙгә ышанһын.*
*Йүн тыумаһын маңлай бәреп кенә,*
*Һыҡтар ниәт шундуҡ тышалһын.*
*Етемлекте белеү булмаған бит*
*Башҡорт намыçында һис кенә,*
*Беректергән матҡыр тамыр итеп*
*Оло мөхәббәтле хис кенә.*
*Ә мин, данлап ошо камиллыҡты,*
*Көйөр мәлдә тағы тереләм:*
*Әл дә һаман Ҡояш менән бергә —*
*Гөргөлдәктә түгел Ергенәм!*



Мәрйәм
**КҮСМӘЕВА**

## *Сит яҙ күңелемә ситен булды...*

*Быйыл яҙҙы ситтә ҡаршыланым*
*Анапала — Ҡара диңгеҙҙә.*
*Үҙебеҙгә осҡан аҡҡоштарҙы*
*Оҙатып та ҡалдым был ерҙән.*

*Геленджикта тауҙар артылдым мин,*
*Дельфиндарҙы күрҙем Утришта.*
*Дольмендары шаҡ ҡатырғыс икән,*
*Тик йөрәгем ҡалған Нөгөштә.*

*Мин һағындым һандуғастар моңон,*
*Ҡымыҙынан килде эсергем,*
*Муйыл сәскәһенән айный алмай,*
*Туғайҙарҙы килде бер гиҙгем...*

*Туйҙырҙы ла инде диңгеҙ шауы,*
*Аҡсарлаҡтың сәңгел тауышы.*
*Йүгерәһем килде Ағиҙелдең*
*Тулҡындары менән ҡыуышып...*

*Быйылғы яҙ һиндә булмағанға,*
*Тыуған яғым, шундай үкенәм.*
*Сит ерҙәрҙә һинең ҡәҙереңде*
*Ныҡыраҡ аңланым мин, бергенәм.*

---

*Мәрйәм Күсмәева — Мәләүез районы Ерек ауылынан. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы.*

## Памуккале

*Памуккале* — мамыҡ ҡала,*
*Бында уткәндәр йоҡлай.*
*Һине гиҙеп йөрөгәндә,*
*Әйтерһең, ваҡыт туҡтай.*
*Памуккале — шаҡ ҡатырғыс,*
*Боронғолоҡ ҡәлғәһе.*
*Таштарыңа баҫҡан саҡта*
*Аптыраулы хәлдәһең.*
*Һыуҙарыңда ла ҡойондом.*
*Сарсағанда — тәмләнем.*
*Әммә һис тә таба алманым*
*Үҙ шишмәмдең тәмдәрен.*
*Памуккале — мамыҡ ҡала,*
*Таштарың да мамыҡтай.*
*Сит ерҙәрҙә тороп ҡалһам,*
*Көнөм булыр тамуҡтай.*

## Бала күңелдәре

*Ҡосағыма һыймай хәҙер балам,*
*Бер саҡ ҡарыныма һыйған ине.*
*Минең өсөн уҙе — оло донъя,*
*Серен асып бөтмәҫ Йыһан ине.*
*Һемәшеп тә ята миңә ҡыҙым,*
*Талпан кеҙек тушкә ҡаҙалған ул.*
*Һис кем айыра алмаҫ әсәһенән,*
*Минең ҡандан, заттан яралған ул.*
*"Әсәй" тиеп йүгереп килә ҡыҙым,*
*Ерҙә минһеҙ нисек ул йәшәһен?*
*Өйөрөлтә уҙе күсәрендә*
*Атай, олатаһын, өләсәһен.*
*Үҫеп еткәс күңеле дала булыр,*
*Атай-әсәй — бөткән шырпы ҡабы...*
*Лап-лоп атлап, айыу балаһылай,*
*Ейәндәрем килер әле тағы.*

## Алтындан киммәт ирек

*Бай булмаңа йыһаз итеп*
*Ҡуйырға — һинең иҫәп.*
*Йоҙаҡлап, бикләп алырға,*
*Тулы бәхетте күҫәп.*
*Тар ситлеккә һыя алмам,*
*Иркенлек — уҙе дарыу.*
*Таҡыр юлдан йөрөгәнсе,*
*Яҡынырак юл ярыу.*
*Тышаулы аттай, һарайҙа*
*Йәшәй алмам, көтмә лә.*

---

*Памуккале — Төркиәләге ап-аҡ эзбиз таштан боронғо ҡала урыны.

*Бәйләп тоторға тырышһаң,*
*Тик үҙеңә үпкәлә.*
*Хатта нескә күбәләкте*
*Тотоу ауыр ситлектә.*
*Йәне иҙелә бахырҙың,—*
*Йәшәү бары иректә.*
*Ә мин, ҡыйғыр ҡарлуғастай,*
*Сығып китермен осоп.*
*Ҡалырһың бүлмәңдә яңғыҙ,*
*Затлы йыһазың ҡосоп.*

## *Йәйҙәр хәҙер миңә йәнәш түгел*

*Һаҡлайым тип йәйҙең хуш еҫтәрен,*
*Ҡаҡтар ҡоям әле еләктән.*
*Иң-иң бешкәндәрен йыйып алып,*
*Үткәрәйем әле иләктән.*
*Бирерме ул йәйҙең ҡыҙыулығын,*
*Хозурлығын йәшел аҡландың?*
*Дәфтәр эстәрендә — кипкән сәскә,*
*Бүләк иткәйнең бит — һаҡланым.*
*Мөхәббәттән мин аҙ иламаным,*
*Йәштәремде хәҙер киптереп,*
*Һалҡын ямғыр менән баҫып ҡуйҙым*
*Һөйөүемдең ҡайнар ипкенен.*
*Йәйҙәр инде миңә йәнәш түгел,*
*Тоғро юлдаш — илаҡ күҙ генә.*
*Күңелемдә көләкәс ҡыҙ йәшәй.*
*Ҡырау сәсле ханым — көҙгөлә.*

## *Хискә тулған*

*Был мәлде мин көттөм ғүмер буйы,*
*Булыр әле, тиеп, бер көн туйым.*
*Ошо хаҡта ине ғәмем, уйым,*
*Тик һин генә алыҫ, йылғыр ҡойон.*
*Мөхәббәткә тулы күңел күгем,*
*Табынғаным, ялынғаным — һөйөү.*
*Сайпылтманым ҡайнар хистәремде,*
*Илтәйемсе, тиеп, тулы көйө.*
*Тоғролоғом һаҡлап оло хискә,*
*Килеп еттем инде ғүмер-кискә.*
*Көтөүҙәрем, ахыры, бушҡа булған...*
*Тик күңелем һаман хискә тулған.*

## *Булмай яраштырып*

*Рәхмәт, яраттырҙың. Күккә остом.*
*Йәлләмәйсә, зәһәр утта өттөң.*
*Мин, зарығып, бер һүҙеңде көттөм.*
*Көлгә ҡалып, тамам янып бөттөм.*
*Мөхәббәткә сарсап, йәнә тыуҙым,*

*Әкиәттәге Һомай ҡошо булып.*
*Йәш ҡыҙҙарҙай, ҡаушап, ҡойолоп төштөм,*
*Аяҡ аҫтарымда ер убылып.*
*Албырғатып, йәнә аҙаштырҙың...*
*Өйөрөлтөп, йәнә аҙаштырҙың.*
*Беҙ, моғайын, һөйөү донъяһында —*
*Ут менән һыу — булмай яраштырып.*

## Ә мин көтәм әле

*Үҙенә бер төрлө булды һөйөү —*
*Ҡисермәнек баллы айҙар ҙа.*
*Ҡыҫыр ғына осрашыуҙар биреп,*
*Аҙаштырҙы әллә ҡайҙарҙа.*
*Бер күреүгә зар-интизар булып,*
*Көтәм һаман юлдар сатында.*
*Һине эҙләп кемгә ялынайым,*
*Эргәмдә бит ситтәр, ят һындар.*
*Хистәр буранында аҙаштыңмы?*
*Ә мин көттөм буран бөткәнен.*
*Ҡаршы килгән зәңгәр троллейбустан*
*Килеп төшөр кеүек көткәнем.*
*Өшөгән ҡулдарымды йылытыр ҙа*
*Әйтер кеүек: “Шундай һағындым!..”*
*Һаман йәп-йәш, һары бөҙрә сәсле,*
*Күҙҙәре лә йәшел, яғымлы.*
*Троллейбустар кеүек уҙа йылдар,*
*Иҫәбе юҡ үткән көндәрҙең...*
*Үҙәгемә үтә һалҡынлығы,*
*Ҡотһоҙлоғо яңғыҙ төндәрҙең.*
*Ҡасан булһа ла бит бер килерһең,*
*Мин көтөргә әҙер тағы ла.*
*Өйөрөлөп, йәнә буран күсәп,*
*Сәстәремә ҡарҙар һарыла.*

## Табынмайым

*Үҙ-үҙемә яза бирҙем инде,*
*Хөкөмдө лә үҙем сығарҙым.*
*Бер кемгә лә хәҙер табынмайым,*
*Мөхәббәткә түгел йырҙарым.*
*Гүйә, булдым һинең тотҡоноңда,*
*Һиндә генә ине күҙҙәрем.*
*Томан эстәрендә аҙашҡанмын,*
*Аллаһ итеп һине күргәнмен.*
*Йөрәгемдә һиңә, бары һиңә*
*Иң ҙур урынды мин бүлгәнмен.*
*Һыйынғанмын һалҡын вулкандарға,*
*Күрмәйенсә уның һүнгәнен...*

Иҙрис
НОҒОМАНОВ

# ҺАҠМАРБАШ

## ТАРИХИ РОМАН

### VI. Алыш

*...Дошманына тоҫҡап уҡ атыусы*
*Башҡорт ире кеүек ир ҡайҙа?*

(Халыҡ йыры "Башҡорт ере")

Төн ахыры яҡынлашып, таңдың һарғылт шаңдағы беленә башлаған мәлдә, ҡыразлы мөһабәт тауҙы урталай ярып аҡҡан Бағыр йылғаһы тарлауығының әллә ҡайҙарҙан ослайып күренгән Сәүкә ҡаяһы тирәһендә, йоҡоһоҙ һупайға ҡушылып, бер аҙ һағышлы ла, шомло ла итеп бүре олоно. Унынына ҡыҫҡараҡ, әммә баҙығыраҡ тауышлыһы яуап бирҙе. Шыҡһыҙ Ырымбур далаларында күп тапҡырҙар төнгөлөккә ҡалып, язы кейегенең ҡотһоҙ ауазын ишеткәне булған Тимашев әлеге тауышҡа әллә ни иғтибар бирмәне. Мәгәр Батырхан ише тәжрибәле аусы булғанда, әҙәми зат тыуҙырған яһалма ауаздан ысын бүре тауышын шунда уҡ айырыр ине. Иван Лаврентьевич өсөн үкенескә ҡаршы, дәғүәселәренең бәхетенә күрә, тәбиғәт уға ундай һәләт бирмәгән, йәғни, үҙе әйтмешләй: "Боже не одарил способностями ловца". Шунын өсөн ул урманлы тауҙар тарафынан ишетелеп ҡалып, кемгәлер шикле тойолған төрлө тауыштарға битараф ҡалды.

Изге ерен тапап йөрөгән дошманынан айырмалы, әлеге "бүре олоуы"н Биксәнтәй Юламанов ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алды. Был ауаз унын отҡор зиһене өсөн, беҙҙә бөтәһе лә яҡшы, тәғәйен урынға имен-аман килеп еттек, боҫҡондо[174] шәйләмәнеләр, тигәнде аңлата ине. Эске көсөргәнеш менән алҡына биреп тә, борсолоп та көткән старшина иркенләп тын алды. Хәҙер ул белә: элекке йөҙ башы Алтынса ҡулы аҫтындағы үҫәргән яугирҙары Бағыр тауы ышығында уңайлап урынлашты, ә Иҙелбәк командалыҡ иткән бөрйәндәр

[174] *Боҫҡон — засада.*

*Аҙағы. Башы 1-2-се һандарҙа.*

менән тамъяндар һул ҡулда ятҡан Сәүкә ҡаяһы аҫтына йәшеренде. Ырыу башлығы — старшина Хөснөтдин Әмәлов үҙенән шаҡтай йәш Иҙелбәкте сардар итеп ҡуйғанды оҡшатмай секрәйә биреп ҡуйған ине, шулай ҙа Биксәнтәй уны тынысландыра алды. Әлбиттә, электән килгән дуҫлыҡтың да ярҙамы теймәй ҡалманы. Теш ҡыҫып булһа ла күнергә мәжбүр булған Хөснөтдиндең шулай ҙа күңелендә ниндәйҙер юшҡын тороп ҡалды...

Тауҙар араһынан күңелле селтерәп үткән һәм дә иретелгән көмөш ише саф Бағыр йылғаһы быуаттар ағышында тар ғына, әммә ифрат тәрән тарлауыҡ барлыҡҡа килтергән. Әйтерһең дә, боҫҡон ойоштороу өсөн тәбиғәт үҙе алдан әҙерләп ҡуйған ошо урынды. Текә тау итәктәре ҡайын ҡатыш ҡарағай урманы менән ҡапланған. Тарлауыҡ ситенән уҙған берҙән-бер оло юл һәр ике яҡтан да ус төбөндәге һымаҡ күренеп ята. Тимашевтың ауыр туптарын һөйрәп, башҡа кәрәк-яраҡ тейәлгән ылауҙар менән боҫҡонсолар йәшеренеп торған ҡаяларҙан уҡ атымы алыҫлыҡтағы ана шул юл буйлап рәткә теҙелеп үтмәй сараһы юҡ. Тигеҙ урында пушкалары менән мылтыҡтары ҙур өҫтөнлөк биргән казактар тарлауыҡ эсендә тере ҡул ҡаласаҡ. Шулай ҙа Тимашевтың бөтөн атужаһы менән төн ҡараңғылығында таныш булмаған тарлауыҡҡа килеп тығылыуы икеле. Быныһын ғына Биксәнтәй яҡшы аңлай. Уларҙы әүрәтеп, урындарынан ҡуҙғатмаҡҡа берәй сараһын уйламай булмай...

...Ҡый-ғыуаҡлап артмыштарҙың таңғы йоҡоһон бүлдергән башҡорттар лагерҙы һис көтмәгәндә баҫты. Кинәт күтәрелгән аңлайышһыҙ шау-шыуға аптырай төшкән Тимашев бер талай иҫен йыя алмай ятты. Төшөмә керәме шайтандар, әллә ысынбарлыҡмы, тип йоҡо аралаш үҙенсә фараз ҡылды. Гөп итеп ҡалған тоноҡ тауышҡа көслөк менән йоҡо төйөлгән күҙҙәрен асты. Асты ла, һуҡыр шәм яҡтыһында, сатырҙың беше туҡымаһын тишеп үтеп яртылаш һерәйеп торған ҡырмалы уҡты күреүҙән тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Йылдам ғына ырғып тороп ҡабалан-ҡарһалан кейенергә тотонғайны, ҡулдары ҡалтыранып, теҙ быуындары бушаны. Йә салбар балағын яңылыш кейә, йә еңен таба алмай аҙаплана. Ә тышта был мәлдә ысын мәғәнәһендә мәхшәр ҡупты. Саңҡ-соңҡ килеп ҡороҫҡа ҡорос бәрелде, кеше һөрәненә ҡушылып, үлемесле яраланған аттар кешнәште, сарт-сорт һынған һөңгө тауыштары ишетелде. Тәртипһеҙ рәүештә дөбөр-шатыр килеп атылған йөҙәрләгән мылтыҡ шартылдауы таңғы һил һауаны тетрәтте.

Ярым ҡараңғы сатырында әле булһа мыштырлаған Тимашев янына ҡото алыныуҙан күҙҙәре аҡайып, ҡобараһы осҡан Григорий Зайцев йүгереп килеп инде.

— Ваше превосходительство, боласылар баҫты! — тип нишләргә белмәй тыпырсынды ул.

— Күрәм дә, ишетәм дә, Григорий Панкратович, күҙ-ҡолаҡһыҙ түгелмен! — Тимашев, китель төймәләрен ҡаптыра-ҡаптыра, сығыу яғына ыңғайланы.— Ә һиңә, атаман, яугирҙарыңды ташлап китмәүең хәйерлерәк булыр ине.

Подполковник ошо иллене уҙған, бәһлеүән кәүҙәһенә ярашлы гөрөлдәп торған ҡалын тауыш, килешһеҙ тырпай мыйыҡ, ялбыр ҡаштар аҫтынан һынамсыл ҡараш эйәһе уҫал казакты хәл өҫтөндә ятҡан Ефим Боюнов урынына кисә кис кенә атаман итеп тәғәйенләгәйне. Бөгөн инде, ана, күңеле ҡайта биреп ҡуйҙы. Баҡтиһәң, күрер күҙгә дәһшәтле тойолған Гриша тәүге ҡурҡыныстан уҡ ҡойолоп та төштө, суҡынғырың!

— Н... ниндәй күрһәтмәләр булыр? — Зайцев этенеп-төртөндө.

— Марш яугирҙарың янына! — Зайцевтан йүнле сардар сыҡмаҫын күргән

Тимашев йән асыуына аҡырып ебәрҙе. — Нимә, өркәк ҡуян ише, ышыҡ эҙләп йөрөйһөң бында?!

— Улар күмәк... ҡырмыҫҡалар һымаҡ. — Сардар килделе-киттеле бәйләнешһеҙ һүҙ һөйләне. — Күрәләтә һәләк булабыҙ, Иван Лаврентьевич, хәҙер ҡырып һалалар! Ни ҙә булһа эшләгеҙ! Зинһар!

— Тфү, ерәнес томшоҡ! — Тимашев төҫө ҡасҡан Григорийҙың сикәһенә һуғып ебәрҙе. — Паникер, ҡуян йөрәк! Исемең ысынлап та есемеңә тап килеп тора икән. Белмәгәйнем. Хәҙер үк күҙемдән юғал!

Сығырынан-сығып, сатыр ябыуын асҡан подполковник, алан-йолан ҡаранып, булып яткан хәлдәрҙең айышына тиҙерәк төшөнөргә тырышты. Шул килеш күпмелер торғас, бар көсөнә:

— Ат килтерегеҙ миңә! — тип екерҙе.

Һушын йыйып, аттарына атланырға өлгөргән казак ғәскәре был мәлдә аҙ һанлы ябауылды ҡыҫырыҡлай ине. Тамаҡ ярып һүгенеү өҫтөнә әсе һыҙғырыша-һыҙғырыша, улар башҡорттарҙы ҡамауға алырға маташа. Ә тегеләре, юрый үсекләшкән һымаҡ, һис ҡасып китергә йыйынмай, ҡый-ғыуаҡлап һаман тегеләй-былай уҙа. Сабып барышлай үҙҙәре казактар өҫтөнә уҡ ямғыры сойорғотоп өлгөрә, ялт-йолт килтереп ҡылыстарын болғай. Таңғы шаңдаҡта улар хәтәр шомло шәүлә булып күренә.

Ошо мәл гөрҫ итеп туп атылды ла, ҡараңғылыҡты ярып, күҙ сағылдырғыс айғура үтте. Туптың ҡайһы тарафҡа һәм нимәгә төбәп атҡанын берәү ҙә белмәне. Ҡурҡышынан йөрәге табанына китеп, аҡылын юйған тупсы, күрәһең, үҙе лә аңғармаҫтан, тоҫмал менән ҡайҙа етте шунда деүелдәтте.

— Идиот! — Тешен шығырлатҡан Тимашев ямаҡай һүгенде. — Үҙебеҙҙекеләрҙе ҡырып бөтөрә бит, инәңде...

Йәш казак етәкләп килтергән атҡа атлана һалды ла әле генә ут көлтәһе бөркөлгән яҡҡа ҡарап сапты.

— Атыуҙы туҡтатырға! Бөтәгеҙ ҙә аттарға! Ҡылыстар менән!

Тимашевтың ышанысллы, баҙыҡ әмере шунда уҡ барыһын да үҙ асылына ҡайтарҙы. Нишләргә белмәй юғалып ҡалған казактар, аттарын өҙәңгеләп, бер тирәгә туплана башланы һәм бөтөн йоҙроҡ булып ойошто. Башҡорт һыбайлылары, ошоно ғына көткәндәй, кемуҙарҙан һөрән һалып, Бағыр йылғаһы яғына ҡарап һыпыртты. Еңел еңеүҙән ҡанатланған казактар, уларҙы ҡыуып етергә өмөтләнеп, йәмһеҙ аҡыра-аҡыра арттарынан төштө.

Ғәҙәттә ифрат ныҡышмал башҡорттарҙың ошолай еңел генә, көтмәгәндә һырт биреп ҡасып китеүҙәре Тимашев күңеленә ҡапыл шик йүгертте. Ниндәйҙер аҫтыртын эш түгелме икән был? Ул бар көсөнә:

— Ҡайҙа бараһығыҙ, туҡтағыҙ! — тип ҡысҡырҙы. — Гриша, туҡтат асыҡ ауыҙҙарыңды!

Әммә алыш ҡомарына бирелеп, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәҫ хәлгә еткән казак авангарды командир фарманын ишетмәне. Дөрөҫөрәге, ишетергә теләмәне лә шикелле, ҡасып барыусыларҙан ҡалышмаҫҡа була, эҙәрләүен белде. Төп көстән айырылырға өлгөргән илле-алтмышлап казак шул рәүешле уртауылдың артта тороп ҡалыуын аңғарманы.

Тоҫмаллап мылтыҡтарҙан ата-ата сапҡан ҡыуғын, күп тә үтмәҫтән, Биксәнтәй тоҙағына барып та ҡапты. Йәнәһе лә, ҡасып барыусы башҡорт һыбайлылары, йәлп-йөлп итеп, шул арала кинәт кенә ҡайҙалыр юҡ булып бөттө лә ҡуйҙы. Бер ни аңларға өлгөрмәгәнлектән артабан нишләргә белмәй ҡаңғырышып торған казактар өҫтөнә уҡ ямғыры яуа башлауға, улары араһында

ҡысҡырып һүгенеү, буталсыҡ, тәртипһеҙ атыш китте. Боҫконға килеп эләккәндәрен яңы төшөнә башлаған баҫҡынсылар кире яҡҡа ташланмаҡсы итте, әммә һуң ине инде. Оло юлдың ике яҡ ҡырынан һағалап ятҡан Биксәнтәй яугирҙары ҡатыш тамъяндар уларҙың юлын быуһа, үҫәргәндәр менән бөрйәндәр ҡыҫым ҡуласаһын тарайта барҙы. Яртылаш ҡырып һалынған ялмауыҙҙар төркөмө, эштәренең мөшкөл икәнлеген күреп, бирелергә мәжбүр булды. Йәмғеһе егерме биш казак әсир төштө. Йәндәрен аяп өлгөргәндәр араһында яралылар ҙа байтаҡ. Шулай итеп, бағиҙар ҡулына уйламағанда алты тиҫтәгә яҡын мылтыҡ, шунса ҡылыс эләкте. Башҡа улъялары[175] ла етәрлек ине.

Башҡорттар араһында ла юғалтыуҙар булды.

...Тимашев, яҡтыра башлағас та баш күтәреүселәрҙең ҡабат килеүен көтөп, ғәскәренә әҙер торорға ҡушты. Ләкин, иртәнге томанға уралып ятҡанлыҡтан айырата шомло күренгән ҡара урманға төбәлеп күпме күтһәләр ҙә, башҡорттар башҡаса күренмәне. "Ҡурҡып ҡастылар, — тип уйлай һалған подполковниктың башта күңеле үрсеһә, аҙаҡ шул уҡ күңелгә шик инеп ояланы. — Ә нишләп һуң ул сағында бая бүленеп киткәндәр һаман әйләнеп ҡайтмай? Минекеләр өҫтөнлөк алған хәлдә, әллә ҡасан урап килерҙәр ине лә баһаң. Әллә..."

Илленән ашыу яугирын күҙ асып йомған арала юғалтҡан Тимашев, үҙен ҡаты яраланған йыртҡыс ише тойоп, төшөнкөлөккә бирелде. Барыһына ҡул һелтәп, бер нәмәгә ҡарамай ҡуҙғалырға ла китергәме әллә? Артабанғы юлын Уралтау аша дауам итеүе мөмкин түгеллегенә, ниһайәт, төшөнә башлаған подполковник, йәйелгән картаһына оҙаҡ ҡына текәлгән килеш, самалап ултырҙы. Аҙмы-күпме ышаныслы булған берҙән-бер юл бар икән: Оло Ҡыҙыл үренә күтәрелергә лә, Кесе Ҡыҙыл йылғаһын буйлап, Абҙаҡ ауылына сығырға кәрәк. Артабан, әлеге Уралтауҙы артылып, Белоретка етергә була. Ә инде башкиҫәрҙәр мыжғып торған Әүжән яҡтарына баш тығыу тураһында хәҙер уйларға ла ярамай. Һыңар бөртөк башыңды ла юғалтып ҡуйыуың бар...

Бына ғына ятҡан һымаҡ күренгән Иҙел башына етә алмайса кирегә боролған хәлдә, быныӊ ниндәй эҙемтәләргә килтереүен яҡшы аңлаған Тимашев тәғәйен урында булыр өсөн барыһын да эшләргә тейеш. Тик ашығырға кәрәк, ваҡыт ҡыҫа. Ә ашығаһың икән, хата ебәреүең бар. Яҙа аҙымдар, ҡырын эштәр былай ҙа күбәйеп китте, тағы яңылыша ҡалһаң...

Эйе, былай торһаң, башҡорттарҙың тағы әллә нәмә сығарыуҙары бар. Кисекмәҫтән ҡуҙғалырға! Алға!

— Караульный! — Подполковниктың яр һалып ҡысҡырғанына һаҡсы казак килеп тә инде.

— Я здесь, ваше благородие! — тип кәүҙәһен турайтты ул.

— Миңә атаманды саҡыр.

— Слушаюсь! — Һаҡсы нисек ингән, шулай ҡапыл юҡ булды.

"...Казактарын да әйтер инем... Ҡупырыш Фреймандың иң шәп, һайланма һыбайлылары иҫәбендә йөрөүҙәре ҡороһон. — Тимашев өҙөлөп ҡалған уйҙарын ялғаны. — Ырымбурҙан Йылайыр нығытмаһына сыҡҡан мәлдә әллә кем булып кәпәренеп йөрөгән яугирҙар тәүге уңышһыҙлыҡтан уҡ ҡойолдо ла төштө. Барыһына бер юлы теге ебегән командирҙарының кәйефе күсте һымаҡ. Әйе, Гриша Зайцевты шул тиклем ҡурҡаҡтыр тип һис уйламағайны ул. Их, һантыйыраҡ булһа ла, ҡайҙа ауан Ефим Боюнов – тәүәккәл баш?! Ул булғанда

[175] *Улъя — трофей, хәрби табыш.*

баяғы боласылар өйөрөн әллә ҡасан уҡ ҡайырып алып килгән булыр ине. Хәйер, үлгән һыйыр һөтлө була, тиҙәр...” — Тимашев үҙе лә һиҙмәҫтән көрһөнөп ҡуйҙы: бер көйләрәк күренгән Боюновтан нисек ҡотолорға белмәй йөрөгәнен тиҙ онотоп бара түгелме һуң?..

— Саҡырткайнығыҙмы, ғали йәнәптәре? — Ғәләмәт ҙур кәүҙәле Зайцев тәпәш индектән эйелә-бөгөлә килеп инде лә, тирмәгә һыймаған һымаҡ, кәкрәйә биреп, Тимашевтың алдына баҫты. Ә уныһы, уратып-суратып тормаҫтан, тура бәреп һүҙ башланы:

— Ниməһенә шыр ебәрҙең әле бая, атаман? Бер өйөр бандит тоҡомо ҡотоңдо алды бит.

— Эй-йе... ғали йәнәптәре, ҡараңғыла бигерәк имәнес күренәләр ине. Осоп йөрөгән мәскәй убырҙар ише.

— Ә мин һиңә өмөт бағлай инем...

— Виноват, подполковник әфәнде, төҙәлермен!

— Тәү тапҡыр күреүеңме әллә үҙҙәрен?

— Так точно-сь! Беренсе тапҡыр.

— Әйткәндәй, ҡарап тормаҡҡа ғына шулай күренә улар, Григорий Панкратович. — Подполковник казакка бер талай текләп торҙо. — Ә асылдамы? Асылда... һуғыш сәнғәтен йүнләп белеп бөтмәгән бер наҙандар инде. Уларҙың ҡаршыһында ҡурҡырға, бигерәк тә ҡурҡҡаныңды белдерергә ярамай. Шөрләгәнеңде һиҙеп ҡалдылармы, алдарына сығырмын тимә. Ҡыҫҡаһы, һырт биргән ҡорбанын аяп тормаҫ бүре заты.

— Шулай тиһәгеҙ ҙә, беҙҙекеләрҙе алдаштырып ҡамауға эләктерергә баштары етте. — Бер ҡатлыраҡ Гриша ризалашманы.

— Ә һин уларҙың ҡайҙалыр боҫҡоно торғанлығына ысынлап ышанаһыңмы?

— Тормаған хәлдә... ҡайҙа беҙҙекеләр?

Тимашев, баш баҫып ултырғандан һуң, урынынан торҙо ла улай-былай йөрөштөрөп алды. Ахырҙа Зайцевтың ҡаршыһына килеп баҫты:

— Һинеңсә, башҡорттар нисә кеше ине? — тип юрый ҡыҙыҡһынған булды.

— Күптәр ине. Йөҙҙән дә кәм түгелдер.

— Яңылышаһың, илле-алтмыштан артмай ине.

— Ҡараңғының күҙе юҡ...

— Так вот, ҡыуа киткән казактар ҙа шул сама, эйеме?

— Эйе.

— Һан яғынан бер сама булһалар ҙа, ҡорал беҙҙә яҡшыраҡ. Төшөнәһеңме минең тел төбөн?

— Юҡ.

— Һин хаҡ фараз ҡылаһың, тип әйтмәксемен. — Подполковник сардарын ҡупайта биреп ҡуйҙы. — Төнгө ябауыл, бая әйткәнемсә, илле-алтмыш кешенән генә торған хәлдә, уларҙы әллә ҡасан тотоп килтергән булырҙар ине. Тимәк...

— Тимәк, урманда башҡорттар тағы булған. Тимәк, казактарҙы көслө әтрәт көтөп ятҡан.

— Дөрөҫ. Һәм, ваҡытында тороп ҡалмай, улар артынан сапҡан булһаҡ, беҙ ҙә, һис шикһеҙ, засадаға тарый инек..

— Шул тиклем көслөмө икән ни боласылар? — Гриша аптырауға ҡалды.

— Минеңсә, был тәңгәлдә көстөң әллә ни әһәмиәте юҡ. Соҡор-саҡыры тулып ятҡан тау-ташлы урман араһында өҫтөнлөк улар яғында. Башҡорт үҙ ерҙәрен биш бармағындай белә. Уларға бында һәр ҡыуағы, һәр ағасы, һәр шишмәһе таныш. Ә беҙ, белеп тораһың, картаһыҙ бер аҙым да яһай алмайбыҙ.

Ҡай саҡ хатта үҙебеҙҙең ҡайҙа китеп барғаныбыҙҙы йүнләп тоҫмаллай алмайбыҙ. Ә һуғышта хәрби хәрәкәттәр урынын яҡшы белеү — уңыштың яртыһы, атаман. Икенсе яртыһы — отҡорлоҡ һәм ҡыйыулыҡ. Ошоларҙың тәүгеһе лә, һуңғыһы ла ҡаршы яҡта артығы менән.

— Тимәк, беҙ еңелеүгә күнәлгәре дусар ителгән?

— Улай уҡ булмаһа ла, ифрат ҡыйынға тура киләсәк, дорогой. Мин шуныһын ғына әйтә алам.— Тимашев инде бөтөнләй йомшарып һөйләнде.— Шуға күрә ваҡиғаларҙың иң хөртөнә иҫәп тотоп, барыһына әҙер булыу кәрәк.

— Юлдың ошоноһонан башҡаһы юҡмы икән, подполковник әфәнде?

— Башың, ниһайәт, аҙ-маҙ эшләй башланы шикелле,— тине Тимашев, ҡалҡына биреп. — Бар, тик ул юлдан киткән хәлдә, беҙгә Тамъян башҡорттары ерҙәренән үтергә тура киләсәк, ә улары, белеүемсә, тағы ла көслөрәк...

Көслөрәк тип Тимашев раҫ әйтте. Тамъян ҡәүеме түңгәүерҙәргә ҡарағанда ҡеүәтлерәк тә, һан яғынан да күберәк. Уныһы, ярай, – бер хәл, картала күрһәтелгәндәргә ышанһаң, Оло Ҡыҙыл йылғаһы Ирәндек менән Ҡырҡты һырттарын икегә айырып үткән урында Ҡыҫыҡ тип аталған тарлауыҡ бар. Боҫҡон ойошторору өсөн бөтөн башҡорт илендә бынан да уңайыраҡ урынды көндөҙ шәм яҡтыртып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Ул ҡаҙанға абайламай барып тарыныңмы, имен-аман ҡотолоу ғына түгел, иҫән ҡалыуың икеле...

Ошо мәл, ныҡ алҡынып, ярһыған һаҡсы килеп инде.

— Ваше благородие, дозвольте доложить! — тине ул, ҡабаланып. – Тегеләрҙән бер яралы казак ҡайтты...

— Ә?! — Тимашев, яңылыш ишеттемме әллә тигәндәй, ҡабатлап һораны. — Нимә тинең?!

— Баҫҡынсылар артынан ҡыуа киткән казактарҙың береһе...

— Тиҙ генә бында алып кил!

Уң ҡулы терһәк өҫтөнән аҡ сепрәккә уралған, ауыртынып, һыҙланыуы йөҙөндә сағылып, ҡобараһы осҡан йәш егет ҡан һарҡып сыҡҡан яралы беләген һау ҡулы менән ҡосаҡлаған ине.

— Исем-шәрифең? — тип һораны Тимашев өндәшергә лә баҙнат итмәй, шөпөрәйеп торған яугирҙан.

— Пашка тип исемләйҙәр мине, подполковник әфәнде, Павел Распутин.

— Йә, Пашка Распутин, һөйләп ебәр әле, нисек итеп, ниндәй юлдар менән ҡотола алдың ҡырағайҙарҙан?

— Мин ҡотолманым, үҙҙәре ебәрҙе.

— Үҙҙәре?

— Эйе, үҙҙәре. Һеҙгә сәләм еткерер өсөн.

— Ниндәйерәк сәләм ул? — Тимашев менән Гриша кинәт йылмандап киттеләр.

— Беҙ... килгән юлыбыҙҙан кире һыпыртырға тейеш.

— Шулай тип ебәрҙеләрме хатта?

— Тап шулай...

— Ояттарын бөтөнләй юғалтты түгелме, ә, һөмһөҙҙәр?! — Албырғап киткән Тимашев уртын сәйнәне.

— Күпме тирәһе улар, самаламаныңмы? — Ошоғаса өндәшмәй торған Зайцев та һүҙгә ҡыҫтырылды.

— Күп, — тине Пашка өҙөп кенә. — Ул урында уңдан да, һулдан да – ҡуйы урман менән ҡапланған текә тау. Улар һәр ағас төбөндә, һәр ҡыуаҡлыҡ артында тора, һәр ағасы, һәр ҡыуағы һиңә тоҫҡап уҡ сойорғота. Уҡтары кешене үтә сыға...

— Өс йөҙ казак менән йырып үткәндәй түгелме? – Тимашев әсәрләнеп киткән казакты бүлдерә һалды.

— Башлыҡтары әйтә, ошо тарлауыҡта ҡасандыр Батый хандың иҫәпһеҙ-һанһыҙ илбаҫары баш һалған, ти. Килеп тығыла ҡалһағыҙ, һеҙҙең дә һуңғы көнөгөҙ ошонда булып, һөйәктәрегеҙҙе лә йыйып ала алмаҫтар, ти.

— Яуыздар! Башкиҫәрҙәр! — Буҙарынған Тимашев йоҙроҡтарын төйнәне. — Асыҡ урын булғанда күрмәгәнегеҙҙе күрһәтер инем дә! Боҫоп ятып ябырылырға ғына шәпһегеҙ һеҙ.

— Ә ниңә, хәрби ҡанундар буйынса фекер йөрөткәндә, башҡорттар дөрөҫ тактика ҡуллана, — тип ҡуйҙы Гриша, үҙ алдына һөйләнгәндәй. — Йөҙгә йөҙ бәрелешкә инергә уларҙың мылтығы ла, артиллерияһы ла юҡ. Наҙан тип һис әйтмәҫ инем үҙҙәрен.

— Йән көйгәндә лыҡылдап торма әле! — Күҙен аҡайтҡан Тимашев сардарына ҡырын ҡараны. — Өркәк кәйефендә яугирҙар белеп ҡала күрмәһен.

— Нишләп? Үҙегеҙ, башҡорттар һуғыша белмәй, тинегеҙ. Әлегә уларҙың был етешһеҙлеген һис күрмәйем. Улай-былай командирыңдан күпкә артыҡтар.

— Әйтеп бөтөр инде, минең эше командирҙан, тиең. — Тимашев мыҫҡыллы көләмһөрәне, ә Зайцев өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе. — Эйе, бунтовщиктарҙы баһалап еткермәнек, буғай. Ул ғына ла түгел, үҙебеҙгә артыҡ ышандыҡ. — Подполковник, үҙен көскә ҡулында тотоп, тыныс күренергә тырышты. — Шулай ҙа, ҡәҙерлем, был, бер һүҙһеҙ бирелергә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Данлыҡлы урыҫ һалдаты менән ҡоралының бәҫен төшөрмәҫкә була, уйлашайыҡ әле.

— Бәлки, ошонда уларҙың үҙҙәрен көтөргәлер?

— Һинең көтөп тороуыңдан ниндәй фәтүә? Күрмәйһеңме ни, оҙаҡламай аҫтыңда ҡыш, ә аҙыҡ-түлек бөтөү өҫтөндә. Һалҡынайта, яугирҙар йонсоған, хәүеф көндән-көн арта бара. Казактар бына-бына өмөтһөҙлөккә бирелә башламаясаҡ, тип кем әйтә ала? Унан — паника! Рух төшөнкөлөгө, тарҡаулыҡ! Аңлайһыңмы һин ошоларҙы, атаман?!

— Мин аңлайым да ул...

— Шулай булғас, нишләп һаман, көтөп ятырға, тиһең?

— Бында асыҡ урын, беҙҙең туптар бар, мылтыҡтар... Ә бына ҡышты нисектер иҫәпкә алмай торам.

— Ана шулай шул, уйлап еткермәйһең. Бындағы ҡыштарҙы белмәйһең әле һин. Ә белеү кәрәк, Григорий Панкратович. Хәрби хәрәкәттәр барған төбәкте, уның рельефын, хатта һауа торошон да командир яҡшы белергә бурыслы. Еңеү яулайым тиһәң, дошманыңды үҙеңдән дә яҡшыраҡ белеү мотлаҡ.

Ҡиәфәтенә яһалма ихласлыҡ сығарған Гриша:

— Аңлашыла, — тип ҡуйҙы.

— Тағы ниҙер әйтергә теләйһеңме әллә, яугир? — Тимашев Пашка Распутинға йөҙ борҙо.

— Йәнә лә... Боласылар һеҙгә зилте[176] еткерергә ҡушҡайны,— тине уныһы, ауыртыныуҙан нык сирылып.

— Ниндәй зилте тағы?

— Иртәгә үк ҡайтыу яғына ҡуҙғалмаһағыҙ, үҙебеҙ ҡыуалап ебәрергә мәжбүр буласаҡбыҙ, тинеләр.

— Нишләп башта уҡ тәблиғ[177] итмәнең был хаҡта?

— Тартынғайным.

---

[176]*Зилте — ультиматум.*

[177]*Тәблиғ — белгертеү, асып биреү.*

— Төндөң тәүгеһендә ҡыҙҙар ғына тартына, ә һин – хәрби кеше! — Тимашев, ғәҙәтенсә, ҡапыл ҡыҙып китте. — Ошондай етди мәсьәләне кисектереп, ваҡытты һуҙаһың!

Пашканы ауыр хәлдән Гриша ҡотҡарҙы.

— Подполковник әфәнде, ә был бит беҙгә бәләкәй генә булһа ла бер өмөт бирә, — тип йәпәтәйләнде ул.

— Өмөт? Ниндәй өмөт тағы?!

— Әйҙә һөжүм итһендәр, мәйтәм, ә беҙ тейешенсә тоҙлап-борослап ҡаршы алырбыҙ. Туп менән мылтыҡҡа ҡаршы ни эшләй алырҙар тиһең. Уларҙың бит әҙернә-тәлдермәстән[178] башҡа йүнле ҡоралы ла юҡ.

— Һүҙҙәреңдә әрәсә бар барлығын, — тине Тимашев, аҙ ғына уйсанланып торғандан һуң. — Тик шуны бел: беренсенән, һин әйткән әҙернәнән сойорғо-толған тәлдермәс кешене генә түгел, атты үтеп сығырға һәләтле һәм һинең мылтығыңа ҡарағанда күпкә алыҫҡараҡ та, мәргәнерәк тә ата. Икенсенән, тәлдермәс тигәнең бөтөнләй хата. Башҡорттарҙа ысын мәғәнәһендәге осар хәнйәр, бөркөт ҡаурыйы беркетелгән ҡырмалы хәрби уҡ өҫтөңдәге тимер күлдәк-һыйманды ла тишеп үтә.

— Шулай уҡмы икән? Ә мин әле...

— Әфәнделәр, төп мәсьәләнән ситкә тайпылмайыҡ! — Тимашев Зайцевты бүлдерҙе. — Артабан нисек итергә – шул турала уйлашайыҡ. Күреп тораһығыҙ, башкиҫәрҙәр беҙгә күп ваҡыт бирмәгән. — Был юлы подполковник мәғәнәле итеп йылмая биреп ҡуйҙы. —Ҡуйған болъялдарына[179] тәүлектән аҙыраҡ ваҡыт ҡалды. Йәгеҙ, тағы ниндәй тәҡдимдәр булыр?

Сатыр эсен ауыр тынлыҡ баҫты.

— Тимәк, башҡаса тәҡдимдәр юҡ. — Тимашевтың ҡаштары йәмрәйҙе.

— Ваше превосходительство! — Ошо мәл, рөхсәт тә һорап тормаҫтан, йәнә бер казак атылып инде.— Истәкте килтерҙеләр! Күренеп тора: затлы ғына. Һеҙҙе таптыра! — тине ул, өтәләнеп.

Тәртипһеҙ казакка екеренергә була ауыҙын асҡан Тимашев баҙап ҡалды.

— Ниндәй истәк тағы? — тине, кинәт йыуашайып.

— Һеҙҙең менән генә һөйләшәм, тине.

— Индерегеҙ.

Сатырға алтын уҡалы оҙон еләнен биленән быуып, аяғына өр-яңы сарыҡ, башына килешеп торған ыҫпай ғына ҡамсат бүрек кейгән, ҡоңғорт йөҙлө, хөштөмһөҙ ҡарашлы башҡорт ире килеп инде лә, ундағыларға алмаш-тилмәш күҙ йүгертеп, өндәшмәй торҙо.

— Йә, ни менән килдең, башкир? — тип ҡыҙыҡһынды Тимашев аҫтыртын кинәйә менән.

Тегеһе яралы Пашка менән атаман Гришаға күҙ һирпеп алды. Өнһөҙ ишараны шунда уҡ аңлап алған Тимашев теге икәүгә сығып торорға ҡушты.

— Мин ошо тирәләге ырыуҙарҙың береһенән Хөснөтдин бей булам, — тип шыпырт ҡына ҡаләм тотто[180] инеүсе. Нимәнәндер шикләнгәндәй, ян-яғына ҡаранып ҡуйҙы. — Маҡсатым — һеҙгә ярҙам итмәк.

— Ярҙам итмәк? — Тимашев аптырап китте.

— Эйе.

— Ҡалайтып?

---

[178] *Әҙернә-тәлдермәс — ябай ян.*

[179] *Болъял — ҡаты талап.*

[180] *Ҡаләм тотоу — һүҙ әйтеү, һөйләү.*

— Биксәнтәйҙең ниәттәрен беләм мин...

Биксәнтәй исемен ишеткән подполковниктың кинәт төҫө үҙгәрҙе, йөҙө сирылып ҡуйҙы. Шулай ҙа, һиҙҙермәҫкә тырышып:

— Әллә Бикчентай әғүә[181] таратырға ебәрҙеме? — тине.

— Юҡ, әғүәнән Хоҙай үҙе һаҡлаһын, мин раҫты һөйләйем.

— Һинең ҡоро һүҙҙәреңә ни өсөн ышанырға тейеш һуң мин?

— Ошо көндәрҙә минең ҡулға бер йәридә[182] осмото килеп эләкте. Унда яҙыуҙарынса, Бүгәс — дағи батша, баш ҡотортоусы — ҙур еңелеүгә дусар ителгән, имеш...

Ишеткәндәренә ышанмағандай торған подполковниктың, әлеге һүҙҙәр аңына барып еткәс тә, ҡыуанысының сиге булманы. Алдында торған әҙәм дошманы булмағанда ҡосаҡлап та алыр ине.

— Аңлашыла. Тимәк, киләсәгеңде ҡайғыртып йөрөйһөң. Аҫтығыҙға һыу инә башлағанын һиҙәһең инде, — тигән булды Хөснөтдин бай килтергән яңылыҡтан ташып килгән хис-тойғоларын көскә йүгәнләп торған Тимашев. — Ярлыҡау эҙләп йөрөгән көнөңмө?

— Әлләсе...

— Тәк, тәк. — Һүнә барған өмөттәре ҡабаттан тоҡанып, ҡыуаныслы хәбәрҙән ҡанатланған Тимашевтың күңеле үрсене. — Пугачев еңелгән, тиһең инде? Шунан, дауам ит, Хуснутдинка.

— Бөгөн таңда Биксәнтәй һөжүм итәсәк.

— Көсө күпме, әйтә алаһыңмы?

— Бик күп. Биш йөҙ кешенән ашыу.

— Биш йөҙҙән ашыу, тиһең инде? — Тимашев һатлыҡ йәнгә һаман ышанып етмәй ине шикелле. — Ҡайһылайыраҡ итеп ойоштормаҡсылар һөжүмде?

— Төнөн баҫмаҡсылар.

— Ә былар һиңә ҡайҙан билдәле?

— Бай булараҡ, Биксәнтәйгә ҡорал, башҡа ат-ужа, ризыҡ менән дә күп ярҙам иттем мин, ә старшина булараҡ, байтаҡ яугир килтерҙем. Ошолар өсөн ул миңә ышаныс күрһәтте, беренсе ярҙамсыһы итеп тәғәйенләне. Бынан тыш йөҙ яугирға күсәм[183] итеп ҡуйҙы.

— Ә һин уны һаттың, сотник...

— Минең мәғлүмәттәр кәрәкмәй икән, хәҙер үк сығып китә алам. — Хөснөтдин күҙ алдында тәмһәйә төштө.

— Сығыуын сығып китә алмаҫһың... — Тимашев әңгәмәсеһенә йәмрәйеп ҡараны. — Дауам ит, һөйлә, старшина, иғтибар менән тыңлайым.

— Әйтәһе һүҙҙәрем шул ине.

— Мәғлүмәттең бындайы әжерһеҙ булмай...

— Әжере миңә кәрәкмәй, — тине Хөснөтдин, юхаланып.— Бола баҫтырылғандан аҙаҡ үҙемә ҡағылмайса, ғаиләм менән йорт-ҡурамды, уғымды[184] имен ҡалдырһағыҙ, шул еткән.

— Слушай, мин һиңә ышана башланым әле, любезный. — Ошо һүҙҙәрҙән кинәт кенә үҙгәреп киткән Тимашевтың тәкәллефлеге ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. — Боланың мотлаҡ баҫтырыласағына, тимәк, шигең юҡ? Молодец!

---

[181] *Әғүә — ҡотҡо.*

[182] *Йәридә — гәзит.*

[183] *Күсәм — хәрби төркөм етәксеһе.*

[184] *Уҡ — бында донъяуи йәшәйеш мәғәнәһендә.*

— Баштан уҡ һыным теймәне минең ул ышаныҫһыҙ эшкә.

— Шулай ҙа булышҡанһың...

— Булышмай ҡара! Баҫым яһанылар, мәжбүри көс менән мөлкәтемде, аттарымды тартып алдылар, алағайымға донъямды зилзилә килтерҙеләр, — тип күрәләтә алдашты Хөснөтдин.

— Улай икән... — Байҙың ҡаршыһына баҫҡан Тимашев, керпек сәнсеп, уның оятһыҙ янған күҙҙәрен бырауланы. — Йәберләнеләр инде?

— Эйе, хатта кәмһеттеләр.

— Ә гонаһ тигәненән ҡурҡмайһыңмы, Хуснутдин? — Тимашев шул ерҙә көтөлмәгән һорау бирҙе. — Аллаһ бит юғарынан барыһын күреп-белеп тора.

— Иленде ҡурсалап сығыу әҙнәп[185] ғәмәл һаналмай.

— Ә яуҙаштарың менән яҡташтарыңды һатыу?..

— Улар миңә яуҙаш та, яҡташ та түгел. Минең өсөн улар бары яуыз боласылар ғына!

—Ҡыҙыҡ, еңә ҡалһағыҙ, нисегерәк һайрар инең икән? — Тимашев һатлыҡҡа һынамсыл ҡараш ташланы. — Ул сағында йырың бөтөнләй башҡаса булыр ине...

Күҙҙәрен йәшереп маташҡан Хөснөтдин өндәшмәй генә башын эйҙе. Сөнки ҡаршы әйтер һүҙе юҡ: ҡыйыш ҡарап, тоғроһон әйтеп тик тора лаһа Тимаш баяр.

— Һинең донесение буйынса иртәгә яҡташтарыңды ыу[186] һиптереп ҡырған тараҡан ише түшәп һаласаҡбыҙ, — тип ныҡышты Тимашев. — Ул сағында нимә тиерһең?

— Шул кәрәк ул аңһыҙҙарға. Ә мин үҙемде һис гонаһлы һанамам. — Хөснөтдин дә ныҡ торҙо. – Шулай, мин әйтеремде әйткәнмен, ҡалғаны һеҙҙең эш.

— Яҡшы. — Подполковник урынына барып ултырҙы. — Йә, әләйһәң, Юламановтың ниәттәрен асып һал.

Урындың ентекле һыҙмаһына ҡушып башҡорт ғәскәре торған юҫыҡты, уларҙың һөжүм итәсәк төп йүнәлешен аҡ ҡағыҙ-ҡиртасҡа[187] төшөртөп алған Тимашев, ярайһы ғына мәғлүмәтле килеп сыҡҡан харита[188] өҫтөнә эйелеп, оҙаҡ ҡына торҙо.

— Һинең бында икәнлегеңде тағы кем белә? — тине шунан.

— Бер кем дә, ваше превосходительство. — Монафиҡ[189] әҙәм күрәләтә ҡуштанланды. — Кеше йыйып әпкилергә тип, олоҫҡа сығып киткән булдым да...

Һаман ҡағыҙға текәлеп торған Тимашев, әҫәрләнеп, уны бүлдерҙе:

— Маҡсаттары ҙур икән старшина Юламановтың, ә!

— Үтә етди әҙерләнә, — тип йәпәтәйләнде Хөснөтдин. Ҡартанан айырылған Тимашев, ҡапаҡлап:

— Ну, Хуснутдинка, әгәр ҙә ки ҡотҡосо булып сыҡһаңмы, үҙеңә үпкәлә, — тине, — һимеҙ ҡабырғаңдан ҡорос ырғаҡлы дарға элдерермен, ҡара уны.

Хөснөтдин ырыя ғына баш ҡаҡты: төшөндө, йәнәһе.

— Ул ғына ла түгел, нәҫелеңде тамырынан ҡоротормон. Белдеңме?

— Белдем.

— Ә хәҙер волосҡа кит. Берәй һылтауын табып, тотҡарланырға тырыш. Бында күрә ҡалһалар, йәшәү булмаҫ үҙеңә.

---

[185]*Әҙнәп— насар ғәҙәт.*

[186]*Ыу — ағыу.*

[187]*Ҡағыҙ-ҡиртас — ҡалын ҡағыҙ.*

[188]*Харита — карта, план.*

[189]*Монафиҡ —ике йөҙлө кеше.*

— Аңлашыла, подполковник әфәнде.

— Һүҙҙәрең дөрөҫкә сыға икән, үҙеңде шәп киләсәк көтә, дорогой... Хуснутдинка.

— Ватаныма файҙам тейһә, шат булыр инем...

Монафиҡ ҡулы менән һыҙылған харита буйынса, Тимашев туптарҙы шимал йүнәлешенә ҡаратып лагерҙан ике саҡрым арауыҡтағы ифрат уңайлы урынға, башҡорт яугирҙары үтәсәк үҙәктең ике яғынан ҡуйҙы. Уң яҡтан – өс туп, һулдан — икене. Өс йөҙ кешелек ғәскәрен бүлгесләп өс урынға йәшерҙе. Туптар эштәрен бөтөргәс тә, ике әтрәт ике яҡлап һөжүмгә ташланырға тейеш. Ул-был хәл килеп сыҡһа тип, өсөнсөһө боҫҡонда тора. Шулай итеп, подполковник башҡорттарҙың үҙ тактикаһын үҙҙәренә ҡаршы ҡулланырға ҡарар итте. Күрмәгәнен күрһәтәсәк әле ул ышаһыҙ[190] старшинаға!

Мәшриҡ тарафтары яҡтыра барып, ағас шәүләләре шөйлә беленә башлағанда, ҡайҙалыр, урман төпкөлөндә, сәйер ҙә, таныш та тауыштар ишетелде. Оҙаҡ ҡына ҡолаҡ һалып торған Тимашев әлеге тауыштарҙың таштарға бәрелешеп сыҡылдаған дағалар икәнлегенә төшөнә алды. Шулай, бәләкәй генә һаҡһыҙлыҡ та ҙур бәләгә килтереүе бар. Барымтаға барған ҡаҙаҡтар юҡҡа ғына ат тояҡтарына ҡылған урамай... Ана, һыбайлылар үҙҙәре әле күренмәй, ә шыпырт ҡына килә яҡтандарын әллә ҡайҙан белергә була. "Алдашмаған Хуснутдин, молодец! — Ошоғаса һаман икеләнгән Тимашевтың эсенә йылы йүгерҙе. – Бына хәҙер ҡарап ҡарарбыҙ: кем кемде, старшина Юламанов!"

Әлегә бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр һиҙмәгән башҡорттар инде бөтөнләй яҡынлашты. Аттарҙың дөп-дөп баҫҡандарына ҡушылып, бышҡырышҡандары ла асыҡ ишетелеп ҡала. Ә һөйләшкән тауыш ҡолаҡҡа салынмай. Ана, ағаслыҡ ҡырында, бөләнгерт ҡарайсыҡ булып, тәүге шәүлә шәйләнде. Уның артынса асыҡ урынға ҡалғандары ағылды. Тимашев барыһының да ағас араһынан сығып бөтөүен түҙемһеҙләнеп көттө. Ошо мәл алдан килгән һыбайлы шып туҡтаны ла, уң ҡулын күтәрә биреп, арттағыларына ишара яһаны. Подполковниктың былай ҙа ярһып типкән йөрәге жыу итеп ҡалды: һиҙеп алдылармы әллә? Ә, юҡ икән, бер урынғараҡ тупландылар ҙа йәнә алға ҡуҙғалдылар.

Тупсылар ҡан көҫәп алҡынһа, атлы казактар, ҡорбанына уҡталған ҡоҙғон ише, ҡатып ҡалған. Барыһы ла фарман көтә. Аттар, ахыры, яҡынлашып килгән ят хайуандарҙың тир еҫен һиҙә, ауыр ҡуршылдашып ҡуялар, шуның менән килеүселәрҙең дә, көтөп тороусыларҙың да күңеленә көҙөк һалалар.

Үҙҙәренсә поход колоннаһына теҙелгән башҡорттар шыпырт ҡына алға барыуын дауам итте. Һуңғы һыбайлы асыҡҡа сығып, алдағылары уйһыу урынға еткәндә, тирә-йүн ус төбөндәгеләй күренгән түбәләстән төрөпкәгүҙ[191] аша күҙәтеп торған Тимашевтың әсе фарманы төн һиллеген ярҙы:

— По бунтовщикам и злодеям!..

Уны-быны көтмәй барған башҡорт һыбайлылары ниҙер аңлап өлгөргәнсе, үҙәк эсенән үткән йомро юлдың ике яғындағы ҡалҡыулыҡтарҙан, йәнде тетрәндереп, кәбән дәүмәллек ялҡын телдәре бөркөлдө. Туп тауышынан алда уңлы-һуллы ла, баш осонан да, уҫал ышылдап, үлем көҫәгән картечь һыҙғырып үтте һәм шунда уҡ ҡурғаш ямғыры бәрҙе. Кемдер, ыңғырашып, эйәренән йығылды, кемдер аҡырып ебәрҙе. Ауыр яраланған аттар ҡыҙғаныс итеп кешнәште, бәғзеләре ауған ерҙәренән тороп китергә маташып сәбәләнде. Беренсе залптан һуң туптар, ер һелкетеп, икенсегә үлем сәсте.

---

*[190]Ышаһыҙ — тыңлауһыҙ, үҙ һүҙле, еңмеш.*

*[191]Төрөпкәгүҙ — монокль.*

Биксәнтәй, ҡараңғылыҡтан файҙаланып, һыбайлы егеттәрен туптарға ташламаҡсы итте. Ләкин көтмәгәндә асылған уттан ҡоттары алыныу менән бер ҡатарҙан өркөп киткән аттарын көскә тыйып тотҡан яугирҙар фарманды ишетерлек тә, үтәрлек тә хәлдә түгел ине. Ошо ҡайнап торған мәхшәр майҙанында һәр кем тик үҙ башын ҡайғыртып, кире яҡҡа, ҡотҡарғыс урманға, ынтылды. Әммә юлдарын мылтыҡлы казактар быуырға өлгөргәйне. Ҡасып барыусыларҙы шарт та шорт мылтыҡ ҡаршылаНЫ һәм байтағын шунда уҡ ергә төшәп һалды. Ҡаушап ҡалған башҡорттар тырым-тырағай туҙа башланы. Тамам ҡырылып бөтөүҙән уларҙы ошо ғына ҡотҡарҙы.

...Ҡыуанысын йәшермәгән Тимашевтың күңеле үрсене. Ниһайәт, ҡасандан сикәһенә тейеп, йәнен ныҡ үртәгән старшинаға емергес удар яһаны ул. Кем белә, бәлки, әлеге мәлдә Биксәнтәй тереләр араһында юҡтыр ҙа әле. Үлектәрҙе ҡарап сығырға бая форсаты булманы, сөнки ҡарыуҙары ойоған башҡорттарҙың, туплана һалып, ҡайтанан һөжүмгә күсеүенән ҡурҡты һәм ғәскәрен лагерға алып ҡайта һалды. Шунда уҡ туптарҙы әҙерләп ҡуйырға бойорҙо. Таңғы ҡыйралыштан һуң боласыларҙың ҡабатлап ябауыл яһай алмаясағына ышанған һымаҡ булһаң да, ҡайҙан беләһең...

...Яурынына ҡурғаш йәҙрә тейеүҙән күп кенә ҡанын юғалтып хәлһеҙләнгән Биксәнтәйҙең кәйефе ифрат ҡырылды. Шул ҡәҙәре ашҡынып көтөп алған көндөң шул тиклем дә уңышһыҙ һәм фажиғәле башланыры уның уйына ла инеп сыҡмағайны бит. Ҙур юғалтыуҙарһыҙ ғына еңеренә ныҡ ышана ине. Етмәһә, фекер туплап, ниндәй ҙә булһа бер ҡарарға килергә ирек бирмәйсә, үҙәккә үткәреп яраһы һыҙлай. Ярай әле, йәҙрә, һөйәккә ҡағылмайса, аяп үткән. Һөйәге йәнселгән хәлдә эш харап булыр ине.

— Ҡара иҫәп менән алғанда ғына ла, етмештән ашыу яугирыбыҙ шәһит китте, ауыр тупраҡтары еңел булһын, — тине ул, һыҙланыуын көскә баҫып, йөҙ баштары йыйылып бөткәс. — Яралылар унан да күп.

— Минеңсә, был тиген эш түгел. — Сикәһендәге йәрәхәттән ҡан һарҡып торған Алтынса шөбһә белдерҙе. — Беҙҙе кемдер һатҡан булырға тейеш.

— Бынынһы асыҡ күренеп тора! Әммә хаинды эҙләп әлегә көн үткәрә алмайбыҙ, беҙгә ашығырға кәрәк. Ҡанһыҙ Тимәшәү яуызлығын был көйө ҡалдырырға ярамай, — тип ажарланды Биксәнтәй.

— Баш ватып тораһы ла юҡ был урында. — Иҙелбәк ярһып уҡ китте. — Хөснөтдин ағайҙан башҡа эт булһынмы?!

— Хөснөтдин? — Ҡапылғара аптырай төшкән Биксәнтәй уйсанланып торҙо, ахырҙа: — Юҡ, унан булмаҫ. Мин уға ышанам, — тип ҡырт киҫте. — Старшина башы менән бындай хәшәрәт вәхшилеккә бара алмаҫ.

— Кем улайһа? Һөйләшкәндә биш кеше булдыҡ. Шуларҙың өсәүһе әле бында. Хөснөтдин менән Батырхан ғына юҡтар.

— Батырхан тигәндәй, уны аңғарманығыҙмы? Иҫән-һау микән? — Тоғро яугирын әле килеп иҫенә төшөргән Биксәнтәй, һеңгәҙгән кеше һымаҡ, һорап ҡуйҙы.

— Минең күҙгә салынманы былай, — тине Алтынса.

— Мин дә күрмәнем, — булды Иҙелбәктең яуабы.

— Хәйерһеҙ, бер-бер хәл булып ҡуймағайы, — тип борсолоу белдерҙе Биксәнтәй.

— Ә уның ике йөҙлөләнеүе мөмкин түгелме? — Алтынса уға һынап ҡараны.

Йөҙ башының тел төбөн аңлап алған Биксәнтәй, күҙҙәренән осҡон сәсеп, тегеләргә ҡараны:

— Батырхан тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел! Уның менән беҙ утын да, һыуын да күп кистек. Йәнен фиҙа ҡылһа ҡылыр, әммә иле менән халҡына хыянат итмәç.

Иҙелбәк менән Алтынса башҡаса өндәшмәне.

— Әсфәлдең[192] кем икәнлеген асыҡлауҙы ҡалдырып торайыҡ, тип баштан уҡ әйттем, әлегә артабан нисек итеү хаҡында кәңәшләшәйек. Армайҙарҙы язаһыҙ ҡалдырырға ярамай, ашығырға кәрәк. Ваҡыт яғы самалы. — Биксәнтәй, шымып ҡалған егеттәргә алмаш-тилмәш күҙ йөрөтөп, урынлы кәңәш көттө.

— Тағы алданһаҡ... — Үçәргән башлығы икеләнеү белдерҙе.

— Башҡаса алданып тормабыҙ, тип уйлайым. Беҙ уларҙы бөгөн төндә үк баçырға тейеш. — Биксәнтәй үҙенекен ныҡыны.

— Биксәнтәй бей хаҡ. — Бөрйән башлығы старшинаны яҡлашты. — Караттар әле тынысланa төштө. Кәрәктәренә бирҙек быларҙың, тип ҡәнәғәт яталар, уяулыҡты юғалттылар. Беҙ ошонан файҙаланып ҡалырға тейеш.

— Эйе, бындай мөмкинселек һәр саҡ эләгеп тормаç. — Алтынса ла уның менән ихлас ризалашты.

Киске эңер төшкәс, һәләк ителгән ҡәрҙәштәре өсөн ҡон ҡайтарыу теләге менән янған ярты меңгә яҡын ярһыу һыбайлы карателдәр лагерын йәшен тиҙлегендә килеп баçты. Күҙ бәйләнә башлаған мәлдә йоҡоға әҙерләнеп бөткән казактар өсөн был һөжүм, ысынлап та, аяҙ көндө йәшен йәшнәгәндәй тәьçир итте. Улар хатта үлем сәсергә әҙер туптарынан бер атырға ла өлгөрә алманы. Казактарҙың ҡайһыһы ҡырмалы уҡтан, ҡайһыһы ҡылыстан әжәлен тапты. Яраланғандары, йәмһеҙ аҡырышып, ерҙә ауnаны.

Ябауылдың бер төркөмө баштан уҡ, утлы уҡ сойорғотоп, дары ҡурыптарын[193] яндырҙы. Уларı шартлап көлдәре күккә осҡас та, башҡорттар лагерҙы тотош ҡоршауға алды: тере көйө унан бер йәлләд тә сығып китергә тейеш түгел! Бөгөн эшләгән хилафлыҡтары өсөн һәр яуыз яуап торорға тейешле.

Бер аҙҙан иçтәренә килгән казактар көнәлгәре яһап ҡуйылған туптарҙың икәүһенән тоçкамай-итмәй гөрһөлдәтеп атҡандан һуң, ҡамап тороусылар алыçкараҡ сигенергә мәжбүр булды. Хәҙер улар йәнәшәләге сауҡалыҡҡа ышыҡланып уҡ сойорғотто. Бәғзе берәүҙәре аттарын ағаслыҡҡа ебәрҙе лә, оҙон үлән араһына боçоп, йәнә һөжүмгә ташланырлыҡ уңай мәлде көттө. Ни тиһәң дә, тағы өс туп ҡороулы тора, абай булыу кәрәк. Өçтәүенә, мылтыҡтарҙан да бер туҡтауһыҙ аталар. Уларı ҙур зыян килтерә алмаһа ла, һыбайлы яугирҙарҙы ирекһеҙҙән эйелә бирергә, ә йәйәүлеләрҙе ергә һеңешергә мәжбүр итә.

Ҡото табанына китеп, карательный экспедицияның артабан юлын дауам итә алмаясағын тулыһынса аңлаған Тимашев сатырында боçоп ултырған килеш сәс йолҡто. Ары китеү түгел, ғәзиз башҡайын ошонан иçән-һау алып китеп өлгөрһә әле. Туптары дарыһыҙ ҡалды, мылтыҡтар өсөн тәғәйенләнгәне лә бөтөү өçтөндә. Ҡылыс-багинет менән генә лә әллә ни ҡырып булмаясаҡ. Яугирҙарҙың рухы һынып, ҡанаттары ҡайырылды — ошоноһо иң яманы.

— Парламентер ебәрергә кәрәк! — Шаңҡып ҡалған подполковник, ниһайәт, асылына ҡайта башланы һымаҡ. Ул ҡабалан рәүештә Гриша Зайцевты саҡыртып алды.

---

[192] *Әсфәл — әшәке, боҙоҡ кеше.*

[193] *Ҡурып — мискә.*

— Илсе ебәреү – еңелеүҙе таныу була түгелме? — тине унығы.

— Улай булғанда нимә тәҡдим итәһең, атаман? Берәм-һәрәм ҡырып бөткәндәрен көтөп ятмаҡсыһыңмы әллә?!

— Шул көйө генә сигенгәндә...

— Көт, сигендереп ҡуйырҙар шул көйө! — Тимашев йәнә төшөнкөлөккә бирелә башланы. — Беҙҙең арттан хәҙер тотам ҡалмаҫ улар. Иң һуңғы казакты дөмөктөрмәй тороп, тынысланмаясаҡтар. Ә һинең менән мине аҫып ҡуясаҡтар! Һәм, беләһеңме, беҙ икәү өсөн был иң еңел үлем булыр.

— Улайһа, үҙем барам. — Гриша әллә ҡыйыуланып китте, әллә ҡурҡышынан әйтеп һалды. — Илсегә үлем юҡ...

Тимашев, өрәй сардарының көтөлмәгән ошо тәүәккәллегенә ғәжәпләнә биреп, һынамсыл ҡараш ташланы:

— Шөр ебәреүҙән эште боҙоп ҡуймаҫһыңмы?

— Боҙмаҫҡа тырышырмын.

— Яңғыҙың бараһыңмы, әллә?..

— Яңғыҙым. — Гришка ҡушсынан ҡырҡа баш тартты. — Йә, нимә тип әйтергә?

Тимашев, бер талай уйланып торғандан һуң, ашыҡмай ғына һүҙ башланы:

— Ҡыҫҡаһы, башҡорттарҙан әүәл атакаларын туҡтатып тороуҙарын һора. Аҙаҡ, Әүжән-Петровск яҡтарына барыуҙан ваз кисәбеҙ, тиең. Таң һарыһы менән инде Йылайыр крепосы яғына ҡуҙғалыуыбыҙ тураһында ла әйт. Юлда беҙҙе бимазаламаһындар. Шунан... — Подполковник, әйтергәме-юҡмы, тигән һымаҡ туҡтап ҡалды ла икеләнеп торҙо. Ҡалын ҡаштары төйтәйеп, көл төҫөнә ингән йөҙөндә борсолоу ғәләмәте сағылды. — Да-с, Александр Иннокентьевичты ҡайтарып биреүҙәрен һора. Үтенеп һора. Төшөндөңмө?

— Так точно-сь, ваше превосходительство!

— Тағы... әсирҙәр менән алыш-биреш яһарға тәҡдим ит.

— Аңлашылды.

— Хәйерле юл. Христос һинең менән. — Тимашев Гришаны суҡындырып алғандан һуң, шул уҡ ғәмәлде үҙе башҡарырға ла онотманы. — Һыната күрмә, дорогой. Хәҙер барыһы ла һинән тора.

Аҡ әләм күтәргән көйө ышаныcһыҙ ғына сығып киткән есаул Зайцев оҙаҡ көттөрмәне, тиҙ арала урап та килде. Төрөпкәгүҙ аша түҙемһеҙләнеп күҙәткән Тимашев, шул рәүешле ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә йөрөп әйләнгән сардарының эштәре уңманымы әллә, типтер, шыйыҡ эңерҙә Гришаның һонтор һыны пәйҙә булғас та, бар булмышын бошоноу тойғоһо биләп алды. Бер саҡрым араны атаман самаһыҙ оҙаҡ үткәндәй тойолдо уға.

— Йә, нисек? — Тимашев сабырлыҡ һаҡлап маташты, әммә тәкәллеф[194] ҡыланышы килеп сыҡманы, тауышы ҡалтыранды. — Кө... көйләй алдыңмы?

— Александр Иннокентьевичтан башҡаһы көйләнде, буғай. — Гриша ауыр көрһөндө.

— Н-ниңә у-улай?

— Старшиналары, беҙҙә түгел ул, тине.

— Тфү, ләғнәт! Үҙ һүҙле иштәк! Ер ярығына төшөп китмәгәндер бит тинтәк Миргородский! — Енен сәскән Тимашев илсеһенең яғаһынан маҡтып

[194]Тәкәллеф — яһалма.

һелкетте, әйтерһең дә, барыһына ул ғына ғәйепле. — Һин һөйләшә белмәгәнһең, эшкинмәгән!

— Эшкинмәгән тигәс, иҫкә төштө, әсирҙәрҙе алмаштырғанда ауыр яралы, үҙ аяғында йөрөргә эшкинмәгәндәрҙе старшина ылау менән килеп алырға рөхсәт итте. Үҙҙәре лә шулай итмәксе.

— Рөхсәт итте?! — Тимашевтың күҙҙәре хөштөмһөҙ түңәрәкләнде.— У-ух, салпы[195] һөмһөҙлөктөң тамам сигенә сыҡты бит был. Беҙҙе, власть вәкилдәрен, үҙ ихтыярына буйһондормаҡсы! Писарымды рәһен[196] итеү аҙ уға, шарт ҡуйып маташа икән. Йоломға[197] өмөт итмәй тиһеңме әле йолҡош, Магомет ялсыһы!

— Подполковник әфәнде, эт ояһында көслө, әлегә өҫтөнлөк улар яғында, ә беҙҙекеләр рухи һынылыш өҫтөндә. — Зайцев командирын тынысландырырға тырышты. — Еңеүсене хөкөм итмәйҙәр. Нисек булһа ла, әлегә улар менән ризалашырға тура килер. Шарттарына килешмәй булмай.

Йопан атамандың дөрөҫлөккә тап килгән һүҙҙәре Тимашевтың ярһыуын баҫа төштө. Һы, рухи һынылыш, имеш. Һүҙен дә табып тора бит әле...

— Беләһеңме, Григорий?! — тине ул, кинәт асылып, аҫтыртын тантана менән. — Әсирҙәр араһында ир ҡорона инеп килгән бер үҫмер бар. Бая күрһәткәйнем бит, ярайһы уҡ ауыр яраланған, буғай... Ана шуны айырып алып ҡалырға кәрәк булыр.

— Ни хәжәте бар уның?

— Старшинаның яҡын кешеһе, шикелле, гелән янында тота ине.— Тимашев ярым бышылдауға күсте. Хәҙер инде ул үҙенекеләрҙән дә шикләнә һымаҡ. — Александр Иннокентьевич урынына рәһен-аманат булыр. Яҡыныңды юғалтыуы нисегерәк икәнлеген белһен Юламанов.

— Ә старшина уны таптырһа, нишләрбеҙ?

— Үҙе һымаҡ, юҡ, тиербеҙ. Белмәйбеҙ ҙә күрмәйбеҙ.

— Артабан?

— Ул көтөйҙән[198] икенсе Тевкелев яһайым мин! Үҙ илен утҡа тота-тота, тоҡомона ҡырғын һалып йөрөйәсәк бүре тәрбиәләйәсәкмен! Аңлайһыңмы, Гриша, ул үҙ ҡәүемен ахыр сиккә етеп күрә алмаған йыртҡыс буласаҡ?! — Ҡан һауған күҙҙәре зәһәр йылтырап киткән Тимашев уҫал ыҫылданы. — Нисек элегерәк башҡа килмәгән ошо, ә?

Тимашевтың бойороғо шунда уҡ үтәлде. Иҫе килделе-киттеле булып ятҡан егетте күмәк әсирҙәр араһынан күтәреп тигәндәй алып сыҡтылар. Үҙ ҡайғылары баштан ашҡан тотҡондар уны алып киткәндәрен абайламай ҙа ҡалды. Хәйер, уларҙың күпселеге йәш кешене танымай ҙа ине.

Биксәнтәй алмашҡа килтерелгән әсирҙәр араһынан ҡараштары менән Әхмәтйәнде эҙләне. Ҡуҙғала алмаған яралыларҙы ла ентекләп байҡаны. Ахырҙа, егетте тере килеш күреүҙән өмөтөн өҙөп, шәһит киткәндәрҙең ябыуҙарын асып ҡарап сыҡты. Ләкин Әхмәтйән бер ерҙә лә күренмәне, мәйете лә табылманы. Шулай итеп, Биксәнтәйҙең өлкән көтөүсеһе хәбәрһеҙ-ниһеҙ ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Аптырап ҡалған бай ни уйларға ла белмәне.

Ҡайһы аралалыр тупланып алырға өлгөрөп, бере өсөн бере, ере-иле хаҡына йәнен аямаған башҡорт яугирҙарын ҡалдыҡ-боҫтоҡ сиреүе менән алдырып

---

*[195]Салпы — ныҡыш.*
*[196]Рәһен — аманат, әсир.*
*[197]Йолом — хаҡ, ришүәт, залог.*
*[198]Көтөй — көсөк.*

булмаҫын яҡшы аңлаған Тимашев, нисек кенә йәне әсеһә лә, башҡаса әрепләшеп торманы. Күрер күҙгә һиҙелерлек һирәп ҡалған казактар сафын ашыҡ-бошоҡ барлай һалырға ла, ат-ужаһын йыйнап, үҙ аллы барырлыҡ хәлдәре булмаған мәжрухтарҙы ылауҙарға тейәй башларға бойорҙо. Алдағы көн ҡуйылған өс туптары яһаулы килеш тороп ҡалды. Дөрөҫөрәге, уларын алырға башҡорттар ирек ҡуйманы. Ул ғына ла түгел, башҡаса этлек ҡыла күрмәһендәр тип, үҫәргән һыбайлылары менән һуңғы мәлдә генә килеп еткән ҡыпсаҡтар уларҙы оҙата китте. Артабан хәбәрләшеп торорға һүҙ ҡуйышып, бөрйәндәр менән дә йылы хушлаштылар. Йорттары яҡын булғанлыҡтан, тамъян яугирҙары мәйеттәрҙе йыйышҡандан һуң, йола тотоп, бер юлы үҙебеҙҙең шәһиттәрҙе лә ер ҡуйынына лайыҡлы тапшырышып ҡайтырбыҙ, тип тағы бер-ике көнгә ҡалырға ҡарар итте.

Йәй буйына шаулап торған Йәйектүбә тауын ни аралалыр ауыр ҙа, шомло ла тынлыҡ солғап алды. Уның һөҙәк итәгендә тапалып иҙгеләнгән ялтастар, ат теше ҡырҡҡан зәғиф үлән, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡыу һөйәк, сүп-сар ҡатыш сытыр өйөмдәре менән оҙаҡ йылдар бер нәмә лә үҫмәйәсәк ҡарала көйгән иҫке әшәк урындары ятып ҡалды. Ә күпме ҡан түгелде ошо изге урынға? Тик уныһы инде күҙгә күренмәй, ергә һеңгән. Уныһы бер Хоҙайға ғына билгеле...

Ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында янғындан ҡалһа ла, йәнселеп-онталып бөткән ағас ҡурып менән мискәләр араһында атырға ла өлгөрмәгән өр-яңы туп йәҙрәләре һибелгән. Аяҡ аҫтында күптән түгел булып үткән ҡан ҡойоштоң йәнһеҙ шаһиттары — ҡылыстар менән аралашып мылтыҡтар тулып ята. Баҫҡынсылар шул тиклем ҡабаланған, хатта ҡоралдарын йыйып алыр форсат тапмағандар.

Тимашевтың ҙур сатыры торған урында сит-бото өтөлөп бөткән әҙрәс әләм[199] киҫәксәһе айырым-асыҡ күҙгә ташлана. Карателдәр ғорурлыҡ менән күтәреп килгән сәмреғошло байраҡтың ҡалған өлөшө ҡайҙа булғандыр инде...

Әләм осмотонан алыҫ түгел талғын елгә елпелдәп ятҡан ҡағыҙ остоғо күренә. Биксәнтәй, ҡыҙыҡһынып, таушалған ҡағыҙҙы ҡулына алды: берәй мөһим бетеү[200]-фәләнме әллә? Уныһы Бүгәс батшаның оло ҡыйралышы тураһында бәйән иткән йәридә[201] бите булып сыҡты. Ашыҡмай ғына күҙ йүгертеп торғандан һуң: “Эй, бөйөк падишаһ, һин дә эшеңде лайыҡлы итеп аҙағына алып барып еткерә алманың, йәл”, — тип бошоноп ҡуйҙы. Ҡапыл ғына яманһыу булып китеүҙән уның күңеле болоҡһоно, йөрәге әрнеп, йәне әсене.

Ат тояғы иҙгеслә гән бысраҡ ерҙә мөшриҡ насрани[202] яҙмалы йәтеш кенә китап туҙғып ята. Ана бит, изге һаналған китабын да ташлап ҡасҡан хаиндар! Үҙ иле, үҙ ере булмаған ышанысһыҙ килмешәктәр генә шул рәүешле динен һата алалыр...

— Ағай-эне, әүәл ҡан-ҡәрҙәш изге шәһиттәребеҙҙе ер ҡуйынына тапшырайыҡ. — Биксәнтәй үҙен уратып торған ырыуҙаштарына ғорурлыҡ менән мөрәжәғәт итте. Шунан тирә-йүндәге сүп-сар өйөмөнә күрһәтте: — Аҙаҡ еребеҙҙе ошо әшәкенән таҙартырбыҙ. Ҡазаның аяҡлыһынан ҡотолһаҡ та, нәжесе ятып ҡалды.

---

*[199]Әҙрәс әләм — ебәк байраҡ.*
*[200]Бетеү — документ.*
*[201]Йәридә — баҫма ҡағыҙ, документ.*
*[202]Насрани — боттарға табыныусы.*

— Нисек ерләйбеҙ туғандарыбыҙҙы? — тип һораны кемдер. – Һәр береһен айырыммы, әллә?..

— Мөҡәддәс[203] үә сауаплы эш хаҡына бер булып баш һалғандар икән, бер урында ятһындар. Дөйөм ҡәбер... — тине Биксәнтәй, уйлап та тормаҫтан. — Иркен итеп ҡаҙығыҙ.

Тейешенсә хөрмәтләп ер ҡуйынына йәмғеһе етмеш ете башҡорт яугиры тапшырылды. Уларҙың зыяраты өҫтөндә оло ҡурған хасил булды. Ҡурғандың бер ситенәрәк йөҙөнә ярым ай соҡолған ҙур таш ҡуйҙылар. Уныһын тағы боронғо фарсы яҙмаһы семәрләне: *"Лә-ә иләһә иллаллаһ, Мөхәммәдәр-рәсулуллаһ"*.

Анауы көндән бирле ятҡан ойрат[204] нәҫеле ҡалмыҡтарҙы ла йыйып, бер урынға күмергә ҡарар ителде. Төрлө ҡиәфәттә ҡатып ҡалған мәйеттәр янына яҡынлашыу менән, шунда темеҫкенгән ҡарға, ҡоҙғон көтөүе шау-шыу һауаға күтәрелде. "Былары ла Тимашев артынан ҡуҙғалдымы әллә? — тип уйлап ҡуйҙы Биксәнтәй. — Ҡарға артынан ҡарға эйәрә..." Ул, төшкөлөккә яҡынлашҡан ҡояштың сағыу нурҙарынан күҙҙәрен ҡулы менән ышыҡлап, күкшел диңгеҙ ише ятҡан йылға үҙәне буйына, карателдәр киткән тарафтарға, нәфрәтле ҡараш ташланы. Былай ҙа соғол сырайы тағы ла нығыраҡ ҡырыҫланып китте.

– Биксәнтәй ағай!

Бер егеттең айыу баҫҡандағылай һөрән һалыуынан һиҫкәнеп киткән старшина өймәкләшеп торған яугирҙар янына барҙы.

— Тағы ни булды?

— М... мына, б-берәүҙәре тере һымаҡ, — тине теге, тотлоға-тотлоға. — Ҡыбырлатҡайным – ыңғырашасы...

Биксәнтәй ярым үлек кәүҙәне һаҡ ҡына салҡан әйләндереп һалды ла ҡанһырауҙан күм-күк булған түңәрәк йөҙөнә текәлде. Арҡаһына йәҙрә тейеп, өсөнсө көн һалҡын ерҙә аунаған Барсын даһа!

— Арбаға һалып тиҙ генә йәйләүгә алып китегеҙ! — тип бойорҙо старшина. — Туп-тура Аҡбикә әбейгә апарығыҙ!

Һушһыҙ мәжрүхте күмәк ҡул күтәреп алды.

— Ә һеҙ, егеттәр, — Биксәнтәй хайран тамаша ҡылғандай тороусыларға боролдо ла, — йәһәтерәк ҡуҙғалығыҙ. Күрәһегеҙ: өйлә мәле үтеп бара, өлгөрмәй ҡуйыуыбыҙ бар, — тип ҡабаландырҙы.

— Быларын нимә эшләтәбеҙ?— Әлеге егет йәшертен ерәнеү менән казак мәйеттәренә ымланы. Старшина иһә:

— Улары тороп торор. Үлемдәрен эҙләп үҙҙәре килгән икән, беҙҙең улар алдында ғәйеп тә, бурыс та юҡ. Иптәштәре ташлап киткәнде... — тип ҡырт киҫте. — Кискелеккә ерләрбеҙ...

Бер һабаҡ үлән, бер төп ағас үҫмәгән ялтас урын табып, казак үлектәрен шунда күмделәр. Таш та, тәре лә ҡуйып торманылар. Йәмле сауҡалыҡ, хуш еҫле муйыл ҡыуаҡтары менән уратып алынған шәһиттәр ҡурғанынан айырмалы рәүештә, быларыныҡы күҙгә лә ташланып бармай ине. Осраҡлы ғына өҫтөнә барып сыҡмаһаң, ошо ерҙә ҡәберлек икән, тип уйламаҫһың да. "Саҡырылмаған килмешәктәргә шуныһы ла яраған", — тип фекер йөрөттө уңдырышһыҙ балсыҡ өйөмөнә секрәйә биреп ҡарап торған старшина Юламанов.

---

[203]*Мөҡәддәс — изге.*
[204]*Ойрат — боронғо ҡалмыҡтар.*

# VII. Еректермәҫ яңы урын

*...Огро гына тиеп хурламагыҙ*
*Ирәндеккә ҡасҡан ирҙәрҙе.*

(Халыҡ йырынан)

Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, ырым-юрауҙарға ҡарағанда, быйылғы ҡыш, бигерәк тә аҡпан[204] осоро, айырата һалҡын булмаҡсы. Был Биксән-тәйҙең үҙ фаразы ғына түгел. Ер аҫтында йылан көйшәгәнен белгән ил инәһе Аҡбикә әбей ҙә шулай ти. Шуның өсөн йүнсел старшина алда торған ҡышҡы мәғшиккә быға тиклем булмағанса ныҡлап әҙерләнергә ҡарар итте.

Һарыҡтарҙың йөнөн ғәҙәттәгенән иртәрәк ҡырҡтылар. Ҡулы эш белгән тәжрибәле ҡатын-ҡыҙ таң һарыһынан ҡара кискәсә тир түгеп кейеҙ баҫты. Йәшәр торлаҡ башҡаса юҡлыҡтан, боронғо ата-бабалар ғәҙәтен иҫкә төшөрөп, быйыл тирмәләрҙә генә ҡыш сығырҙар. Шуға күрә ҡалын кейеҙ күп, бик күп кәрәк буласаҡ.

Ир-егеттәрҙең берәүҙәре кирәгәлек һайғауҙар сапһа, икенселәре уларҙы йә-тешләп бөгөү менән мәшғүл. Мәрхәмәтһеҙ оҙон ҡышҡа етәрлек итеп утын әҙерләү ҙә улар иңендә. Башҡалар менән бер ҡатарҙан, башҡортса ярайһы ғына һупалай башлаған талымһыҙ Терентий ҙа эш уртаһында ҡайнай. Хәйер, уның Терентий икәнлеген онотоп та баралар инде. Тереғол ти ҙә ҡуялар.

Һуғымға аҫралған тай-тулаҡ менән ҡуй тәкәләренең дә тиреһенә урын та-былыр быйыл. Алла бирһә, еренә еткереп эшкәртерҙәр ҙә, исраф итмәй генә, тирмә ябыуы итеп тотонорҙар. Элекке кеүек эт-ҡош кинәндереп, ташлап ҡуймаҫтар.

Бәғзе берәүҙәр, шул иҫәптән Батырхан да, Һаҡмарбашҡа кире ҡайтайыҡ, тип наһырға тейәләр ҙә ул, әммә Биксәнтәй икеләнә. Үҙе өсөн түгел , ауыл хал-ҡы тип хафалана ул. Йылайыр ҡәлғәһенә етеп, баш-күҙ алғандан һуң, сиреүен күпкә көсәйткән яһил Тимашевтың, ҡан көҫәп, ҡон ҡайтармаҡҡа һағарғы[205] яҡтарына теләгән ваҡытта кире әйләнеп килеүе бар. Ул сағында инде, билдәле, бер кемгә лә аяу булмаясаҡ. Һыңар ҡышҡа нисек тә түҙерҙәр әле. Әйткәндәй, тамағы туҡ кеше һалҡынға бирешә һалып бармай, ҡәримдәштә-рен имен-аман ҡышлатыу өсөн Биксәнтәй малын да, көсөн дә йәлләмәҫ. Әй-теүе – әйтеү: бөлһә бөлөр, улар хаҡына барыһын да эшләр. Баш һау булһа, мал табылыр, ә халҡың ҡырылһа...

Булмышын борсоулы тойғолар сорнап, күңеленә рух иҙгес хәүеф тойғоһо инеп оялауға ҡарамаҫтан, старшина яманды уйламаҫҡа тырыша, барын яҡ-шыға юрап, киләсәккә матур өмөттәр бағлай һәм Хаҡ Тәғәләнең мәрхәмәтенә ышана. Ҡайһы берҙә, яңғыҙы ҡалып, хәтирәләргә бирелгән саҡтарында, эсен бошороп, Әхмәтйән иҫенә төшә. Мәғшүҡ[206] улы урынына күреп йөрөгән егеттең күҙ менән ҡаш араһында ғына эҙһеҙ юҡ булыуы уның былай ҙа яралы бәғерен оторо телгеләй. Караттар ҡойроҡтарын һыртҡа һалыр алдынан бер көн элек күргәйне бит уны. Һуңғы ябауылдан аҙаҡ күҙгә салынманы. Анауы мәхшәргә тиң буталсыҡ, ҡаңғырыш араһында баштараҡ быға иғтибар итмәгән. Егетең бирешкәндәй түгел, йәнәһе, килеп сығыр әле...

Әммә Әхмәтйән ул көндө лә, иртәгәһен дә күренмәне. Тимәк, Тимашев уны йә әсир итеп алып китте, йә иһә... Юҡтыр, шәһит киткәндәр араһында

---

[204] *Аҡпан — ғинуар айы.*
[205] *Һағарғы — төп ауыл.*
[206] *Мәғшүҡ — яратҡан, ҡәҙерле кеше.*

табылманы. Биксәнтәй һәр мәйетте үҙе ҡарап сыҡты бит. Ә әсирҙәрҙе берәмләп, үҙ ҡулдары менән алмаштырып алды. Шулай ҙа уларҙың барыһын да бирҙеме ҡыян подполковник? Әллә йәшереп кенә үҙе менән алып киттеме? Улай тиһәң, мыйығы яңы һыҙылып килгән үҫмерҙе нимә итер икән ул? Әллә писары өсөн ҡон ҡайтарыуы шул булдымы?..

Өҫтәүенә, теге көндө Ҡолтой апа ла ҡайҙалыр ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Уныһының, ярай, элекке ғәҙәте буйынса, баш һуҡҡан яҡҡа сығып китеүе бар. Ил гиҙеп йөрөр-йөрөр ҙә, алғыһап[207] китһә, әйләнер ҙә ҡайтыр. Барып етмәгән ере, белмәгән урыны юҡ бит ҡарттың. Ярай ҙа сығып китһә, мәгәр өлгөрмәй ҡалған булһа... Уны бит аранда бикле ултырғанынан аҙаҡ күргәне юҡ. Әллә караттар ҡулында ҡалды... Булмаҫ, бөрйәндәр барыбыҙҙы ла ҡотҡарҙы. Буталсыҡта, ҡараңғы-юҡҡа күҙһеҙ кешене яңғыҙ ҡалдырып китеүҙәре генә үкенесле. Ә былай юғалып ҡала торған кеше түгел апа. Ул иҫән-һау булырға тейеш, бер ҡайтмаһа, бер ҡайтып төшөр әле...

Һуңғы осорҙа Биксәнтәйҙең башында өҙлөкһөҙ ошондайыраҡ уйҙар буталып, һис тынғылыҡ бирмәй. Бигерәк тә Әхмәтйәндең юғалыуы ғазапҡа һала. Зөлхәмирәнең оҙаҡ илауҙан шешенгән ҡабаҡтары, үпкәле ҡарашы күҙ алдынан китмәй. Гүйә: "Минең бер бөртөгөмдө, күҙ терәп торған баламды ла ҡурсалап ҡала алманың!" — ти ул ҡараш.

...Тынысланып йоҡлап китә алмаған Биксәнтәй әйләнде лә тулғанды. Таңға табан, серемгә китеп барғанында ғына, йәнә тертләп уянды. Былай үҙ-үҙенде яфалап ятыуҙың фәтүәһе булмаҫына төшөнгән бай ҡараңғынан тороп тәһәрәтләнде лә ашыҡмай ғына иртәнге намаҙын башҡарҙы. Ә инде сәй эсеп алғандаң һуң, ҡороша башлаған тәне яҙылып, күңеле күтәрелә биргәндәй булды, һәм кинәт кенә яҡын-тирәне байҡап, ҡараштырып ҡайтыу теләге уянды. Кәйефенең яҡшы яҡҡа үҙгәрә барыуына һөйөнгән Биксәнтәй атына атланып сығып китергә торғанында, лауылдап эт өрҙө, ҡапҡа тышында кемдеңдер аяҡ тауыштары ишетелде.

— Әссәләмәғәләйкүм, Биксәнтәй ағай! — тип сәләмләне килеүсе, килеп етер-етмәҫтән. Ул — Байғазы ине.

— Вәғәләйкүмәссәләм, ҡустым!

— Мине Аҡбикә инәй ебәрҙе.

— Йә, ни йомошо бар был мәлдән?

— Ҡалмыҡ иҫенә килде, тип әйтергә ҡушты.

— Ә? Шунан?

— Һиңә әйтәһе һүҙе бар, имеш.

— Ярай, барырмын, — тине һағая төшкән Биксәнтәй. – Теге кафырҙы нишләттегеҙ? Миргородскийҙы?

— Уны ни, бей, һин ҡушҡанса оло юлға төшөрҙөк тә тегеләренең артынан оҙаттыҡ.

— Барыһын да мин әйткәнсә эшләнегеҙме?

— Тап шулай: эйәрһеҙ үшән ат бирҙек, ултырыш аҫтына кейеҙ үндек түшәнек. Ҡорал-фәләне юҡ.

— Ярай, әләйһәң, мин йөрөп ҡайтҡас, яйлап ултырып һөйләшербеҙ. Бар, эшең менән бул. – Биксәнтәй, ирендәрен сипылдатып, тарлан буҙын ҡыуҙы: — Фют! Әйҙә, малҡай! – Ул нисәнсе көн инде иҫенә килә алмайса Аҡбикә әбей сатырында аунап, йән өҫтөндә ятҡан Барсын янына елдерҙе. Барып ингәс тә, ҡысҡырып хәл-әхүәл белеште:

---

[207] *Алғыһау — тыуған яҡтарҙы һағыныу.*

— Иҫәнмеһегеҙ, барығыҙ ҙа! Йә, нисек йәшәп ятыш?

— Һау ғына әле, Биксәнтәй, әйҙә, уҙ, — тине Аҡбикә, күңелсәкләнеп.

— Ә-ә, старшина...— Елпелдәп янған сыраҡ яҙа-йоҙа яҡтыртҡан кейеҙ сатыр түренән мөсһөҙ тауыш ишетелде.

— Шунан, хәлдәр нисек? Һауығып буламы? — Биксәнтәй Барсын янына сүгәләне лә, уның барлау тамырын[208] ҡапшап ҡарағандан һуң, ҡәнәғәт ҡалып: — Ҡәлбең теремекләнгән былай, үткәндәгенән күпкә хәллерәк тибә, — тип ҡуйҙы.

— Рәхмәт һеҙгә, кем... — Башлағанын әйтеп бөтөрә алмаған Барсын мәлһеҙ ебеп киткән танауын мыршылдатты.

— Йә, йә, егет башың менән шәмәреп ятма. — Биксәнтәй уға йомшаҡ итеп өндәште.

— Һеҙҙең алда оят, аға...

—Унығын көнэлгәре уйларға кәрәк ине. Йыйын ялмауыҙҙар менән мөғәһәдә төҙөмәҫ элек.

— Ахмаҡ булынған...

— Эйе, ахмаҡҡа аҡыл һуң төшә,— тип йылмайҙы Биксәнтәй, йылмайғыһы килмәһә лә. — Шулай ҙа, һуңыраҡ булһа ла, аңлағаның һәйбәт.

— Килгәс тә төшөнгәйнем дә ул, ләкин...

— Таң менән ниндәйерәк ашығыс йомошоң килеп сыҡты һуң әле? — Биксәнтәй Барсынға һүҙен осларға ирек бирмәне.

— Старшина...

— Биксәнтәй ағай, тип кенә әйт.

— Эйе, Биксәнтәй ағай, теге көндө утағаны... — Барсын әйтер һүҙен әйтә алмай тотлоғоп ҡалды. Аҡбикә әбей, йәһәтләп, уға ҡалаҡ менән ниндәйҙер шифаят йотторҙо. Ауырайған һулышы еңеләйә төшкән мәжрүх дауам итте: — Аҡһаҡалды казактар... яндырып үлтерҙе. Тере көйөнә...

Һүҙҙең ни хаҡында барғанлығын ҡапылғара төшөнөп етмәгән Биксәнтәй ҡабатлап һораны:

— Ҡайһы утағаны әйтәһең?

— Теге... гелән таяҡ таянып йөрөгән. Һеҙҙекеләрҙең барыһы ла тәғзим итә ине уны...

Биксәнтәйҙең башына килтереп тондорҙолармы ни! Ул, бер аҙға һушын юйып, ултыра төштө.

— Һуҡыр ҡартты әйтәһеңме?

— Эйе, күҙҙәре күрмәй ине, шикелле.

Старшина, башын баҫҡан көйө, сайҡала биреп ултырҙы.

— Ниндәй вәхшилек! Ҡот осҡос йыртҡыслыҡ! — тип теш ҡыҫып ыңғырашты. — Ишеттеңме, Аҡбикә апай? Ҡолтой апаны утта ғазаплап, йәнен алған армайҙар!

Урыҫса бер һүҙ аңламаған Аҡбикә, ҡалмыҡтың һүҙҙәрен башҡортсаға ауҙарғас та, уҡынырға тотондо:

— Әстәғәфирулла, әстәғәфирулла, әстәғәфирулла! Иннә *лиллаһи* үә иннә иләйһи ражиғу-ун. Аллаһүмә иң кәнәә һәҙҙәл мәйиту... — Ишеткәненән хайран ҡалған ҡарсыҡ тәғәйен доғаһын ҡылды.

— Нисек ҡулдары күтәрелгән, ә? — Биксәнтәй шаҡ ҡатты.

— Хәсистәр! Үҙҙәренә, шул рәүешле, ут ғазабы бирһен! Тамуҡ киҫәүҙәре! Тәҡүәнеҙҙәр![209] — Аҡбикә башкиҫәрҙәр өҫтөнә ҡаты ҡарғыш яуҙырҙы.

*[208] Барлау тамыры — пульс.*

*[209] Тәҡүәнеҙ — иманһыҙ кешеләр.*

— Мәңгелек сәҡер[210] утында үҙегеҙ янығыҙ, йәлсемәгерҙәр! Нәҫелегеҙҙе Аллаһы Тәғәләнең ҡәһәре һуҡһын!..

Биксәнтәйҙә биләмәләрен әйләнеп ҡайтыу ҡайғыһы китте. Ҡолоҡас мулланы алып, йәнә бер нисә кеше ике ылауға тейәлделәр ҙә ҡасандыр Һаҡмарбаш ауылы булған ергә ашыҡтылар. Старшина һыбай алдан төштө.

Ҡасан ғына әле матур ауыл гөрләп ултырған ергә еткәс тә, килеүселәр алдында ысынлап та йән тетрәткес күренеш асылды. Береһе бер һүҙ ҡушмай килгән ирҙәр иҫ-аҡылдары китеүҙән ҡатып ҡалды. Биксәнтәйҙең һиҙемләүҙәре юш сыҡты: күҙ алдында асылған ҡыйралышҡа тыныс ҡына тамаша ҡылып тороуы мөмкин түгел ине.

Күпселек өйҙәр урынында дөм-ҡара көл-күмер өйөмдәре генә ятып ҡалған. Ҡайһылары яртылаш янған да емерелеп төшкән. Һөрөмгә буялып һерәйешкән ярым-емерек балсыҡ мейестәр ошо ҡот осҡос күренешкә уғата шом өҫтәп, күңелдәрҙе өшөтә. Тын алғыһыҙ һаҫыҡ еҫ бөркөп, унда-бында кәртәҡура урынындағы күп йыллыҡ тиреҫ ҡатламдары әле булһа төтәп ята. Ҡайһы бер өй нигеҙҙәренән дә күкшел төтөн һаман ағыла. Һирәк-һаяҡ, булып үткән афәттән иҫән-һау ҡотолоп, ирекһеҙҙән берәҙәккә әйләнгән эт, бесәйҙәр күренеп ҡала. Эттәре, ялағайланып, ҡойроҡ болғай-болғай кешеләргә яҡынлашһа, бесәйҙәр, артыҡ күҙгә салынмаҫҡа тырышҡандай, тиҙерәк йәшеренеү яғын ҡайыра. “Шул арала ҡырағайланып та баралар, ҡәһәрең, — тип уйлай Биксәнтәй, — йәнлекте ҡулға эйәләштереүе ауыр булһа ла, биҙҙереү өсөн күп кәрәкмәй. Берәй яманлыҡ ҡылдыңмы, бесәй халҡы ғүмеренең ахырынаса онотмаҫ. Рәхәтләнеп йәшәп ятҡан торлағын хужаһы туҙҙырып ташламағанлығын улар ҡайҙан белһен. Шулай уҡ караттарҙың кем икәнлеген дә белмәйҙәр. Кеше тарафынан яуызлыҡ ҡылынған икән, тимәк, кеше ғәйепле. Унан һаҡ булыу кәрәк...”

Ҡасандыр старшинаның һарайы торған урындан алыҫ түгел бер ни булмағандай тибенеп йөрөгән биш-алты тауыҡты күргән ауылдаштарҙың күңеле иреп, эстәренә йылы йүгерҙе. Ҡойроғо өтөлгән, бөрлөгән кикерекле сыбар әтәс дәртле итеп бер ҡысҡырғандан аҙаҡ, бермә-бер кәйефтәр күтәрелеп китте. Ана бит, әтәстең әтәсе, үлмәйем дә ҡалмайым тип, тырышып ятҡан көнө, бар хәленсә тауыҡтарын ҡараштырып мәж килә. Һаҡмарбаш ирҙәре лә бирешмәҫ. Алла теләһә, халҡын да һаҡлап ҡалыр, мәле менән ауылын да аяҡҡа баҫтырыр. Тик Тимашев һымаҡтар ғына ҡабаттан килә күрмәһен.

“Быларын һуңғараҡ тотоп апҡайтырҙар, — тип фекер йөрөттө Биксәнтәй, ғәмһеҙ тауыҡтарға ҡарап. — Әтәс тауышы яңғырап тормаған, тауыҡ ҡыҭҡылдамаған ихатаның йәме буламы?..”

Ҡолтой ҡарт торлағының ҡалдыҡтарына яҡынлашҡан һайын, кешеләрҙе береһенән-береһе ауырыраҡ тойғолар солғай бара. Ана, элекке өйө, тик урынында тауҙай балсыҡ өйөмө ята. Уның аҫтынан яртылаш янған бүрәнә остары һерәйешеп тора. Иҙмәһе мул итеп, арамъяһыҙ һыланған өй тулыһынса янып бөтмәгән. Ут ҡалын стеналарҙың күп урынына артыҡ зыян килтерә алмаған, бары ҡара һөрөмгә генә буяп ҡуйған.

Балсыҡ ҡатыш күмер өйөмө янына килеп туҡтағас та, артабан нишләргә белмәгәндәй, аптырашып торҙолар. Ахырҙа тауыш-тынһыҙ ғына торонбаштарҙы аҡтарырға тотондолар. Тиҙҙән урындыҡ шүрлеге күренде. Ғәжәп,

---

[210]*Сәҡер — тамуҡ.*

янғын телдәре уныһына ла һис ҡағылмаған тиерлек. Күрәһең, өрләк остары янып, ауыр түшәм ишелгәс тә, уның өҫтөндәге ҡара тупраҡ ялҡынды тонсоҡтороп, утты һүндергән. Хәҙер, ана, тиреҫле тупрағы быҫҡып ята.

Түшәм баҫҡан урындыҡ аҫтында табылған Ҡолтой ҡарттың, сарыҡ баштары бер аҙ көйрәп өтөлөүен иҫәпкә алмағанда, башҡа урыны янмаған, өҫтөндәге кейеме лә шул килеш ине. Ғәмһеҙ йомолған күҙҙәре бер ҡайғыһыҙ, тыныс ҡына йоҡлап ятҡан кешене хәтерләтә. Мәйет төҫө кергән йөҙөндә һиҙелер-һиҙелмәҫ уйынсаҡ йылмайыу ҡатып ҡалған. Йөҙтүбән ятҡан килеш төтөнгә тонсоғоп йән биргән ил ағаһының инде таш булып ҡатҡан аяҡ-ҡулдарын көскә яҙып, ыҡҡа килтерҙеләр. Урын-еренә еткереп ғосол ҡойондорғандан һуң, мәйетте матур итеп кәфенләп тә ҡуйҙылар. Әмәлгә күрә, Биксәнтәй үҙе менән аҡ тауар алғайны.

Ҡолоҡас мулла, йыназа ғәмәлен оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай ғына ясин сығып, доға ҡылды:

— *Лә-ә иләһә илалла-а-аһ...* — Шул рәүешле теүәл йөҙ мәртәбә ҡабатланған күмәк тәһлил тауышы һил Һаҡмар буйын тетрәтте.

Исхаҡ фидияһының мәскүп малын үҙ ҡулы менән ҡабул иткән Биксәнтәй:

— Ҡолоҡас ағай, гүр хәйере минән булыр, — тине.

— Хуп, аҡһаҡалыбыҙ рухына ҡорбан бағышларбыҙ, йәмәғәт. – Мулла шунда уҡ ризалығын бирҙе. – Итенән бөтә ҡәүемебеҙ менән ауыҙ итербеҙ, собханалла...

Ҡәберҙе Ҡолтой бабай үҙе иҫән сағында зарлы ҡурайын һыҙҙыра-һыҙҙыра бер моңайып, бер уйсанланып ултырырға ятаҡан аулаҡ төйәгендә ҡаҙырға булдылыр. Ерҙең өҫкө кәленән башлап ләхетен алғансы бөртөк таш сыҡһасы! Эйе, һүҙ юҡ: ҡурайсы Ҡолтойҙоң һуңғы төйәге еңел яһалды.

— Күңеле ифрат йомшаҡ булды шул мәрхүмдең, шуға күрә тупрағы ла мамыҡ кеүек. — Ҡолоҡас мулла үҙенсә йәкүн[211] ҡылды. — Изге йөрәкле Хоҙай бәндәһе ине мәрхүм. Йәне йәннәттә булғыры.

"Бисмиллаһи үәдәғнәкә үә ғәлә милләти Рәсуллуллаһи сәлләмнәк", — тип, кәфенләнгән кәүҙәне гүргә төшөрөп һалғандан һуң, арҡыры таҫмаларҙы бушаттылар. Ләхетте ҡарағас ярҡалар менән ҡаплағас та, Ҡолоҡас мулла: "Минһә-ә халәҡнәкүм үә фиһә-ә нуғидүкүм үә минһә-ә нөхрижүкүм тәратән охра", — тигәс, ҡәбер төбөнә бер ус тупраҡ һипте, ҡалғандар уға эйәрҙе. "Барлыҡҡа килтереүсебеҙ ихтыяры менән тупраҡтан яралдың, инде тупраҡҡа әйләнәһең. Амин".

Әүәл ҡыҙыл балсығын төшөрҙөләр, өҫтөнән ҡара тупраҡ менән күмеп ҡуйҙылар. "Ошбу тупраҡта үҫәсәк йәшел үләнде тәсбих ҡыл, йә Хоҙа. Ҡөрьән аяттары уҡығандағы әжер сауаптарҙы мәрхүмдең рухына ирештереп, гүр ғазаптарын еңеләйтһәң ине, амин..."

— Был ниндәй бәндә булды? — Тауышын күтәрә биреп һораны хәҙрәт, ҡәберҙең дүрт мөйөшөндә ултырыусылар сират менән ҡыҫҡа сүрәләр уҡып, доға ҡылғас.

— Яҡшы кеше!

— Һәйбәт булды!

— Күңеле изге ине.

Кешеләр, барыһы бер булып, дәррәү яуап бирҙе.

— Берәйегеҙ алдында бурыс-буҫығы юҡ инеме?

[211]*Йәкүн — һығымта яһау.*

— Юҡ! Юҡ!

— Бурысын онота торған бәндә түгел ине мәрхүм.

— Утағабыҙға тәсбих әйтеп, оло тәғзим күрһәтеүегеҙ өсөн барығыҙға ла рәхмәт. Уны онотмайыҡ, йәмәғәт, яйы сыҡҡанда, сыҡмағанда ла, тәзкир[212] итеп, зыярат ҡылып, рухына аят-доға бағышлап торайыҡ. Йәмиғил әруахтарыбыҙ шунан башҡа нимә өмөт итә ала? Доға ҡылабыҙ икән – сауабы мәрхүмдәргә, рәхмәте – үҙебеҙгә...

Шәғбан аҙаҡтарының ҡыҫҡа, матур бер көнө үтте лә китте. Һаҡмарбаш ирҙәре хөрмәтле үә риғәйәле аҡһаҡалдарын ололап, илтифат менән һуңғы юлға ана шулай оҙатты. Карателдәр ҡулынан эт үлеме тапҡан Ҡолтой ҡарт мосолманса ерләнде.

— Ошо хөрмәт яу сабып, баш һалыусыларҙың барыһына ла кәрәк ине лә бит, — тип көйөндө Биксәнтәй ҡайтып барышлай.

— Юҡҡа бошонаһың, ҡустым, шәһиттәрҙең бөтәһе бер ҡәберҙә ятыуы дөрөҫ тә, яҡшыраҡ та. — Ҡолоҡас Биксәнтәйҙе үҙенсә йыуатып булашты. — Дөйөм эш хаҡына ҡан ҡойоп, баш һалған икән, уларҙың мәңгелек йорттары ла дөйөм булырға тейешле. Яуҙа ауғандар өсөн иһә ғосол ҡойондороу ҙа, кәфенләп тороу ҙа мотлаҡ түгел. Илем-ерем тип ҡорбан булғандар — иң саф, иң изге, тамсы ла гонаһһыҙ бәндәләр. Урындары уларҙың ожмах түрендә буласаҡ... – Мулланың ошо вәғәзенән һуң Биксәнтәйҙең күңелен өйкәп торған ғазаплы үкенес баҫыла төшкәндәй булды.

Матәмселәр ҡайтып кереүгә армайҙар ҡылған яуызлыҡ тураһында хәбәрҙар булырға өлгөргән ауыл халҡы бот сабып хайран ҡалды.

Аҡрап баштарында ергә сафлыҡ, тәнгә сихәт өҫтәп тәүге ҡырпаҡ ҡар яуҙы ла, урман-ҡырҙар менән ҡауланлы асыҡтар аҡтан шәл бөркәнде. Моңайышып торған кәбән-тирмәләр өҫтөнә лә мамыҡ ише йомшаҡ япма ятты. Эсендә йәне, йөрәгендә дәрте бар, булмышы тәбиғәткә тартылыусан әҙәм ошондай мәлдә түҙеп ята аламы? Әлеге юғары хис-тойғолар Биксәнтәйҙе лә урап үтмәне. Иртән сыҡҡас та ул күкрәк тултырып тын алды ла епшек ҡарҙы услап ҡараны. Бер талай төпһөҙ күктән туҡтауһыҙ һибелгән эре аҡ киҫәктәрҙең тауыш-тынһыҙ ғына ергә түшәлә барыуын күҙәтеп торҙо. Атын эйәрләгәс тә теҙгенде, үҙе лә һиҙмәҫтән, Һаҡмарбаш яғына тартты. Әле сыҫҡан да юрғалап уҙырға өлгөрмәгән өлпәрәм тәлт[213]өҫтөндә, ярылып, яңғыҙ ат эҙе ятып ҡалды.

Ҡар ҡатламы, асыҡ урында ат бәкәленән үтмәһә лә, Оло Суҡа тирәһендәге ағаслыҡҡа яҡынлашҡан һайын күҙгә күренеп ҡалыная бара. Урыны-урыны менән, айырыуса уйпат үҙәктәрҙә, ул хатта Тарлан буҙҙың тубығына етә яҙып ҡуя. Күренеп тора: быйыл ҡар шәп булмаҡсы, бер төн эсендә шундай яуғас...

Хәйер, ҡарҙың тәрән булырын йәй көнө үк самаларға мөмкин ине: урман ҡурайы буйға үҫте, ә ҡурай оҙон йылды ҡар күп яуыусан. Баҡтиһәң, шул ҡурайҙың осона етәм тип, яуа ла яуа икән...

Карателдәрҙең уйламағанда тағы килеп сығыуынан шикләнгән Биксәнтәй йылҡыһын йәй буйына был яҡтарға ебәрмәгәйне. Улары, бәрәкәте булмаған шыйыҡ үләнле Ирәндектә йөрөп, тау итәген тапанды-саңдауға әйләндереп бөтөрҙө. Ә бер ай элек килеп, ошо асыҡҡа ҡыуырға ҡушты. Дөрөҫ эшләгән. Ана, тиҙ үк йомрайып киткән йылҡыһы хәҙер Ҡаран башындағы ҙур асыҡтың үҙәктәрен, Йәйектүбә битләүен иңләп йәйрәп йөрөй. Был тирәнең ерҙәре

[212]Тәзкир — иҫкә алыу, хәтерләү.
[213]Тәлт — һай ҡар.

хайран уңдырышлы, шуның өсөн ҡауланы ла мул. Бейәләре Һаҡмар буйында йылҡылдашып ҡыш сығыр, Алла бирһә.

Һуңғы ваҡытта Ҡарайғыр менән Ҡола тиктомалға низағлаша һалып бармай. Һуңғыһы үҙенең һис һүҙһеҙ бағыныуын танйны, буғай, һәм өлкән ағаһынан йырағыраҡ йөрөргә тырыша. Ҡараның үткер тештәрен, дағалы тояҡтары менән ғәйрәтле күкрәк көсөн бер тапҡыр ғына татырға тура килмәне уға. Шулай, нужа тигәнең барыһына ла өйрәтә: ағаңды танырға ла, ихтирам итергә лә...

Ағаслыҡ ҡырына килеп сыҡҡан бай алты быуынлы ғәләмәт оҙон сыбыртҡыһын шартылдата-шартылдата, һай-һайтлап та, әсе һыҙғырынып та йөрөгән Ғәлимйәнгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Һай, ирең! Бигерәк намыҫлы шул. Икенсе берәү булһа, шәт, бынауындай мәлдә төнөн генә көтөр ҙә көндөҙ бот күтәреп өйөндә ятыр ине: айғыр ышаныслы, йылҡыға көпә-көндөҙ нимә булыр тиһең. Ә юҡ бит, Ғәлимйән ятып сыҙамай. Сыҙай алмай. Көндөҙөн бер-икене килеп ураһа, төнгөлөккә өйөр янынан бөтөнләй китешмәй.

Хәйер, көндәр буйтым һыуытыуға ҡарамаҫтан, был яғына барыбер тәүлек әйләнәһенә көтөргә тура киләсәк. Ни өсөн тигәндә, өйөр тирәһендә бер төркөм бүре темеҫкенә. Табунсылары икәүгә генә ҡалды, өсөнсөһөн ҡуйырға Биксәнтәйҙең нисектер йөрәге етмәй. Әллә намыҫы ҡушмаймы, белмәҫһең. Әйтеп булмай бит, бер көн килеп Әхмәтйән ҡайтып төшөр ҙә...

Барымталары менән башҡаса йонсотмаҫҡа һүҙ биреп ҡалыуына ҡарамаҫтан, Бараҡжан солтанға ла ышаныс ана тора. Дыуамал ҡайсаҡтарын әйҙәп килер ҙә бер төн эсендә йылҡыһыҙ ҡалдырып китмәҫ тимә. Бөгөнгө көндә, ни ҡылһаң да, күҙ терәп торғандары шул йылҡы малы ла баһаң. Ашатҡаныэсергәне лә, ышыҡ биргәне лә – әлеге әрһеҙ ат. Бағыуы мәшәҡәтле булһа ла, үҙе һәләк файҙалы, ғәжәп талымһыҙ хайуан бит ул ат тигәнең. Өҫтәүенә, башҡа тереклек һымаҡ, уға бесән әҙерләп тороу ҙа кәрәкмәй. Үҙ йүнен үҙе күрә: йәйен – болонда, ҡышын – тибендә. Йылҡы малы иркенлек менән иректе, тәбиғәт хозурлығын үҙ иткән башҡорт өсөн Тәңре тарафынан белеп тә яратылғандыр ул. Ер йөҙөндә ат булмағанда нишләр ине икән башҡортоң?..

Ҡарҙы тибеп бүтәгә менән ҡылғанды яланғасландырған аттар артынан һарыҡтарҙы ла сығарғанда була икән. Йылҡы тешенә эләкмәй ҡалған үлән һабаҡтарын сүпләй-сүпләй, кискелеккә улары ла мыҡырайышып ҡайтмаҫ тимә. Бынһыһы, нигеҙҙә, ҡатын-ҡыҙ көсө менән генә әҙерләнгән бесәнеңә үҙенә күрә бер һаҡсыллыҡ та булыр ине. Ай-һай, оҙон булмаҡсы алдағы ҡыш бауыры. Икенсе яғынан иһә, елдә йөрөп ҡышлаған ҡуйҙың яҙғы йөнө күпкә ҡалыныраҡ үә сифатлыраҡ, бәрәстәре әрһеҙерәк була. Үҙҙәре ул-был сиргә бирешә һалып бармай...

Донъяуи хәлдәр, киләсәк мәғишәт хаҡында уйланыуҙан онотолоп киткән Биксәнтәй Һаҡмарбаш асығына килеп сыҡҡанын абайламай ҙа ҡалды. Сыҡты ла, ҡалҡыуыраҡ урын һайлап, атын туҡтатты.

— Тпру-у, малҡай! Бер аҙға сабыр итеп тор.

Эйәренән төшмәҫтән ҡасандыр йәшәйеш гөрләп торған ауыл урынына моңһоу ҡараш ташланы...

Ғәҙәттә, шаҡылдап торған сатнама һыуыҡтарға ла бирешмәй, йылыуҙарынан быу бөркөп, ашыҡмай ғына ағып ятҡан Һаҡмарҙың әле килеп күпселек өлөшө боҙ менән ҡар аҫтында ҡалған. Урта кисеүҙе лә боҙ ҡатыш ҡар ҡаплап киткән. Бына һиңә әҙер күпер! Тик хәҙер уның кемгә хәжәте бар? Элек

кенә ул Урта кисеүҙең ялтырауыҡ боҙ менән нағышланыуын  көтөп алырҙар ине. Өлкәндәргә шөңкәй[214] бесән ташыу өсөн түтә сана юлы булһа, бала-саға, шау-гөр килеп, һәр төрлө уйын ойошторҙо. Балыҡҡа маһирҙар инде шамбы шаңҡытты.

Ғәжәп түгелме, тап ошо, боҙ кеше ауырлығын күтәрерлек булып ҡалынайған мәлдә, шамбының иң эреһе йылғаның бер ситенәрәк, үтә күренмәле гәлсәр аҫтындағы һай урынға, сығып ятыусан. Ошо сәйер күренештең серенә Биксәнтәй ғүмер баҡый төшөнә алманы. Ике яҡ яр буйлап күпереп үҫкән ағастар ышыҡлаған йылға ҡараңғылығынан биҙеп, шулай яҡтыға тартыламы ул шыйғалаҡ, әллә, ыуылдырыҡ сәсеп, нәҫелен дауам итер өсөн ҡулай урын эҙләп йөрөймө? Асылда иһә төн йыртҡысы шамбының, көндөҙҙәрен тәрән ҡумырыҡта ғына тораһы урынға, үҙ башына көн яҡтыһына сығып, ҡыбырларға ла иренеп ятыуы ысынлап та сәйер. Уның ошо ҡыланышына ниндәй тәбиғи көс сәбәпселер инде? Уйлап-уйлап та, Биксәнтәйҙең әлегә ошо һорауға  яуап таба алғаны юҡ.

Старшина ситтәре бөҙрә-шөҙөр[215] шәреле боҙға етер-етмәҫ эйәренән төштө лә, атын етәкләгән килеш, уны ҡаплап ятҡан һай ҡарҙы һеңдерә баҫып йылға үренә атланы. Тарлан буҙы, үткер дағалары менән йәш боҙҙо ҡыртылдата-ҡыртылдата, күндәм генә уның артынан эйәрҙе.

Биксәнтәй йәнә яманһыу уйҙарға бирелде: "...Эй, был ғүмер тигәнең! Тептеүәл бер йыл элек кенә бына ошолай боҙ буйлап үткәйне бит ул. Оҙайлы ҡара һыуыҡтарҙан ер-һыу шоҡорайып ҡатҡан булһа ла, ҡар әле яумаған ине. Урта кисеүҙең ярайһы ғына ҡалынайырға өлгөргән асыҡ зәңгәрһыу боҙо, ҡояшта ялтырап, күҙҙәрҙе ҡамаштырып ята. Бәллүр кеүек үтә күренмәле боҙ аҫтындағы барлыҡ нәмә күҙ алдында. Ана, дәү генә йылғыр бәрҙенең йылт иткән күләгәһе күренеп ҡалыуға, көслө йөҙгөстәре күтәргән болғансыҡ талғын ағым ыңғайына шыйығая барып, тиҙ арала таралып бөттө. Шаршы ауыҙында, сыбар ҡойроҡтарын етеҙ елпелдәтеп, бер нисә ваҡ селбәрә шәп ағымға ҡаршы тора. Боҙ өҫтөндәге кешең улар өсөн бар ни ҙә, юҡ ни. Улар әле ҡурҡырға өйрәнмәгән, сөнки әҙәм мәкерлеген әлегә белмәйҙәр...

Тәрәнерәк, тыныс урындарҙа буй-буй һыҙат булып яҙғы ҡар һырынтыларын хәтерләткән ялтырауыҡ – аҡһыл-сыбар ҡом ята. Келән ҡом өҫтөнән ағым ыңғайына кемуҙарҙан төрлө төҫтәге ваҡ ҡына шаян ҡырсынташтар тәгәрәшә. Улар шулай мәңгелек хәрәкәттә. Ҡайҙан башлап ҡуҙғалалар ҙыр, ҡайҙа барып туҡталалар ҙыр – уныһы бер Хоҙайға ғына мәғлүм...

Йылға бөгөлөндәге шомло ҡултыҡтарҙа, сыбар ҡом өҫтөн һорғолт ләм ҡаплап ятҡан урындарҙа, серле эҙҙәр ҡалдырып, һәр төрлө һыу ҡорттары йыбырлаша. Һирәк-һаяҡ эре ҡуңыҙҙары ла күренеп ҡала. Туңыр сиккә етеп һалҡынайғанлыҡтан, һиҙелерлек ҡуйыра төшкән һыуҙа ла йәшәйеш дауам итә! Шул түгелме ни тәбиғәттең баш етмәҫлек бер мөғжизәһе?! Тәнендә ҡан әҫәре булмаған шыр яланғас бер бөжәк шул һалҡында көн итеп, һин дә мин йәшәп ятһынсы әле?! Ә беҙ, ҡат-ҡат йылы кейем кейеп, ҡандарыбыҙ ҡайнап торған кешеләр, ҡыш көнө бейәләйһеҙ тышҡа сығырға ҡурҡабыҙ...

Биксәнтәйҙең фәлсәфәүи ғәмен бүлдереп, бөгөл арьяғында тоноҡ шаҡылдау ишетелде. "Малайҙар шамбыға тарыны", — тип  уйлап,  ул тауыш килгән яҡҡа ыңғайланы. Фаразы дөрөҫкә сыҡты: бөгөлдөң өҫ яғындағы йомро аҡ

[214]*Шөңкәй  — баҫырау.*
[215]*Бөҙрә-шөҙөр — быжырланып туңған боҙ.*

ташы сәселеп ятҡан шаршыла Әхмәтйән мәке уйып маташа ине. Боҙ өҫтөндә инде туңырға етешкән елле генә ике ҡара шамбы, бөгөлә-һығыла яҡты донъя менән бәхилләшеп, айғолаҡтарын хәлһеҙ генә ҡыймылдата. Ә үҫмер, буҙарған ҡулын әҙер мәкегә терһәгенә тиклем тығып, өсөнсөһөн ҡамарға тырыша.

— Һаумы, Әхмәтйән ҡустым! — Биксәнтәй, аҡ тештәрен күрһәтеп, ихлас йылмайҙы. – Хәлдәр ни хәл?

— Арыу әле, Биксәнтәй ағай! Һеҙҙең фатихала.

— Ял итеп йөрөшмө?

— Йөрөлә инде шунда, малайҙар ыңғайына, — тип ебәрҙе үҫмер өлкән кешеләй.

"Һай, ирең! Ә үҙең кем һуң?" — тип уйлап ҡуйған бай йәнә көлөмһөрәне. Был мәлдә Әхмәтйән иҫәнгерәүҙән килбәтһеҙ һәленеп төшкән имәнес ҙур һары-сыбар таш шамбыһын йәпле генә итеп айғолағынан эләктерҙе лә боҙ өҫтөнә йәйрәп тә сығарҙы.

— Бына бит, бай, һинең килеп сығыуың бәрәкәткә булды! — Ул балаларса бер ҡатлылыҡ менән ҡыуанып китте һәм белемсе кешеләй: — Таш шамбыһы һирәк осрай ул хәҙер, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

— Һурпаһы былай шәп инде! Бигерәк тә өшөп ҡайтҡанда ҡанды тиҙ йылыта.

— Мә, ағый! — Әхмәтйән әле генә ыҙалыҡ менән тотҡан балығын Биксәнтәйгә һондо.

— Рәхмәт, ҡустым. Бындай ҙурын мин ала алмайым. — Бай, үҙ сиратында, итәғәтле генә баш тартты. — Үҙегеҙ бешереп ашарһығыҙ.

Мосолман кешеһенә шамбы ише тәңкәһеҙ балыҡты хәләл тәғәм сифатында ҡулланырға ярамағанлығын беләме икән үҫмер? Күрәһең, белмәйҙер. Кем әйткән тиһең уға...

— Ал, ал, ағый! — Әхмәтйән һаман ныҡышты. — Үҙең ашамаһаң, еңгәйгә күстәнәс булыр.

Ҡайҙа һуҡтырырға белә, шилма! Был юлы старшина кеткелдәп көлгән булды.

— Ярай, әләйһәң, күстәнәс икән – алайым. — Ул шамбының айғолағынан үткәрелгән ерек шешенән эләктерҙе лә, ауырлығын самалаған һымаҡ, һелкетеп торҙо: — Бөгөн кискелеккә танһыҡҡа шамбы һурпаһы эсәбеҙ икән. Шәт, ризыҡҡа яҙған...

Ул кисте, көңгөр-ҡаңғыр һөйләшә-һөйләшә, күкшел төтөнгә солғана башлаған ауылға икәүләшеп ҡайттылар. Биксәнтәй, берҙән, Әхмәтйәндең сабыйҙарса ябай итәғәтенә кинәнеп бөтә алмаһа, икенсе яҡтан, әле ун алтыһы ла тулмаған үҫмерҙең ололарса фекер йөртөп, аҡыллы һүҙ һөйләүенә һөйөнөп, ҡәнәғәтлек кисерҙе. Эйе, үҙ тиҫтерҙәренән ул күпкә зиһенлерәк тә, йүнселерәк тә... "Әстәғәфирулла! Әстәғәфирулла! Әстәғәфирулла! Асығын белмәгән көйө әллә нимә уйлап киләсе! Гонаһҡа батып, йә инде. Уның бит күрәҙәсел күңеле һиҙә: Әхмәтйән иҫән-һау һәм бына-бына ҡайтып төшәсәк..."

...Биксәнтәй яр ситендәге йәш еректәр араһында һөйәүле торған ҡаҡ суҡмарҙы күреп ҡалды. Шамбы шаңҡытыр өсөн ороло ҡайындан махсус эшләнгән суҡмар ҡәҙерләп йыйып ҡуйылған. Ҡасандыр ул барыһы өсөн дә дөйөм ҡорал ине. Кем балыҡҡа сыға — файҙалана ла аҙаҡ элекке урынына ҡуйып китә. Шамбыға ул мәлдәрҙә өлкәне лә, кесеһе лә йөрөнө. Һаҡмарҙың балығы барыһына ла етә ине...

Суҡмарҙы ҡулына алған старшина уны тәү күргәндәй әйләндергеләп торҙо, һыйпаштырып та ҡуйҙы. Хәйер, нисек инде ҡәҙерле булмаһын?! Ҡарт

ҡайындың дәү ороһонан үҙ ҡулдары менән Биксура ағаһы юнып эшләгән ҡорамал бит ул! Их, яҙмыш! Ағайы, ана, шәһит китте, ә эшләп ҡалдырған әйберен һаман, нисәмә йыл, ауылдаштары файҙаланып, ҡыуанысын күрә. Бөгөнгө малайҙар белмәйҙер ҙә әле ошоно.

...Биксураның көтөлмәгән вафаты Биксәнтәйгә икеләтә ҡайғы килтерҙе. Яңғыҙ бөртөк ағаһын юғалтыу етмәгән, бөрөләнә генә башлаған мөхәббәтенән мәхрүм итеп, һөйгәненән ваз кистерҙе лә еңгәһенә өйләндерҙе. Әлбиттә, еңгәй кешегә өйләнеү – ҙур бәлә түгел: борондан килгән йолаға ҡаршы ни ҡылмаҡ кәрәк. Ә бына Зөлхәмирәһен юғалтыуҙы Биксәнтәй ифрат ауыр кисерҙе. Уның өсөн бар донъя ҡапыл түңкәрелеп, баштүбән әйләнде лә ҡуйҙы. Ваҡыт үтеү менән йөрәк яныуына ҡушылған йән ғазабы әкренләп баҫыла төшкән һымаҡ ине, ләкин тәүге мөхәббәтен барыбер онота ла алманы: Зөлхәмирә исеме хәтеренән юйылманы. Әле лә юйылмаған. Инде йәш саҡтағы һымаҡ уҡ янып бармаһа ла, ятһа-торһа тигәндәй, йөрәген һыҙған Зөлхәмирәһе иҫенә төшкөләп ҡуя. Гөлзәйнәп һиҙенмәне түгел, һиҙенде, хатта, икенсе бисәлеккә әйттер ҙә ҡуй, тип бер нисә тапҡыр димләп тә ҡараны. Әммә Биксәнтәйҙең бисә өҫтөнә бисәлеккә алып, һөйгәнен кәмһеткеһе килмәне. Шулай ғүмер тигәнең үтте лә китте.

Биксәнтәй менән Гөлзәйнәпкә Хоҙай бер бөртөк бала насип итте. Уныһы ла ҡыҙ бала. Юҡ, берҙән-бере ҡыҙ булғанына һис үкенмәй ул. Шулай ҙа, иш янына ҡуш итеп, берәй малай ҙа өҫтәһә икән... Мөлкәтенә вариҫ, үҙенә иптәш булыр ине. Ғүмере буйы нәҫелен дауам итеүсе тураһында йәшертен хыял йөрөткән ир, Гөлзәйнәбе ырыуҙан ҡалыу осорона ингәнсе, өмөтөн өҙмәне. Әммә ҡатыны башҡаса балаға уҙа алманы. Тора-бара нишләптер Әхмәтйәнде үҙ итеп, һуңға табан хатта малайҙың ҡылығында ла, йөҙ сырайында ла аңлата алмаҫлыҡ таныш һыҙаттар күрә башлаған һымаҡ ине. Уныһы килеп, ана, күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Ҡайҙарҙа, нишләп йөрөй икән ошо мәлдә?..

Буталсыҡ уйҙарҙан арына алмай барған Биксәнтәйҙең күҙ ҡырына ниндәйҙер хәрәкәт салынып ҡалғандай булды, һәм ул, һиҫкәнеп, шул яҡҡа ҡарай һалды. Ҡар аҫтынан унда-бында тырпайып күренгән бүрәнә-торонбаш остары, күмһәйешкән өйөмдәр, соҡорайып ятҡан өй урындарында һерәйешеп торған ярым емерек мейестәр араһынан, элекке ауылдың элекке урамы буйлап (эйе, бында хәҙер бөтәһе лә элекке!) иңбашына мылтыҡ аҫҡан аҡ кейемле берәү килә. Биш-алты аҙым яһай ҙа, туҡтала биреп, тирә-яғына ҡарана, уйсанланып-әҫәрләнеп шоҡомһоҙ ауыл урынын байҡап тора.

Бәй, был бит – Батырхан һунарсы! Эйе, ул. Башҡаса әллә тереләсәк, әллә юҡ ауылын – тыуған төйәген – һағыныуҙан яманһыулап килеп сыҡҡан, күрәһең. Шулай, мал тамағы туйған ерҙә булһа, ир кешене йәнтөйәге, кендеген ҡырҡҡан ер, тыуған тупраҡ тарта...

Биксәнтәй байҙың зирәклеге арҡаһында ҡышты имен-аман сыҡтылар. Ҡыш — ҡыш инде, ҡары ла етерлек яуҙы, өтөп алыр һыуығы ла шаҡылдап торҙо. Бәхеттәренә күрә, күҙ асҡыһыҙ ыжғыр бурандары, былай ҙа миктәгән кешене аяғандай, нисектер ситләтеп үтте. Шунлыҡтан ат менән дә йырып сыға алмаҫлыҡ һырынтылары булманы.

Мал-тыуары ҡап яртылаш, башҡа мөлкәте лә һиҙелерлек кәмеүгә ҡарамаҫтан, старшина бошонманы. Уның ҡарауы, ауылдаштары теүәл. Әлбиттә, караттарҙан ҡотолоп, иҫән ҡалғандары...

Яңы урынға күсенеп килгәндән аҙаҡ кейеҙ тирмәләрҙә алты сабый донъяға тыуҙы. Йән биргәнгә йүн биргән, тигәне ошо булалыр. Әҙәмдең тереһе ана нисек тә итә. Бына мәлһеҙ шәһит китеп, һәләк булғандарға ҡыйын.

Быйылғы шиһаҡа бурандары[216] зөлхизә аҙаҡтарына тура килде. Былай ҙа нужаны байтаҡ күргән кешеләрҙе артыҡ ыҙа сиктермәйем әле тигәндәй, йола өсөн генә аҙна тирәһе һепертмә буран өрөп торҙо ла, көндәр матурланды ла китте. Тышта инде яҙ еҫе аңҡый, ҡәһәт биреп көткән мәл яҡынлаша! Ҡайындар танһыҡлаған ҡояшҡа иркәләнә-иркәләнә ирәйешеп бөрө тирттерһә, тирәйүнгә иҫерткес хуш еҫ таратып тал ҡыуаҡтары "көсөкләй". Урман-ҡырҙарҙа яман гөрһөлдәүҙән йөрәктәргә ҡапыл шом һалып, ҡар ултыра. Шешҡолаҡ ҡуяндар, оҙонғойроҡ төлкөләр төндәрен "уйынға сыға". Күңелдәргә дәрт өҫтәп ҡайҙалыр ҡарабаш һайраһа, йәнә бер ҡышты иҫән-һау атҡарғанына ҡыуанып бөтә алмайса, ҡойма башында буҙтурғай сырҡылдай.

Күп ваҡыт та үтмәҫ, әлегә ҡырталашып ятҡан ҡар һыуға әйләнеп ағып китер ҙә шаян гөрләүек булып гөрләр, шишмә булып сылтырар. Эс бошорғос һиллеккә сумып ятҡан тәбиғәт, һәр төрлө ҡош-ҡорт, йәнлек тауыштарынан һиҫкәнеп, ҡышҡы йоҡоһонан уяныр. Сағыл аҡландарҙа, яҙҙы сәләмләп, беренсе умырзаялар, кәкүк ҡаталары, кәзә һаҡалдары күренер. Һуңғараҡ инде боламыҡ ҡатыш шыйыҡ өйрә менән алабута ыумаһынан бүгеп бөткән кеше йыуа-ҡымыҙлыҡҡа туйыныр. Бала-саға ҡуянтубыҡ ҡаҙырға сығыр, шул ыңғайға танһығы ҡанғансы ҡайын һыуына кинәнер...

Сыуаҡ, йылы көндәрҙең береһендә Биксәнтәй бай ауылдың арҙаҡлы ирҙәрен ҡорға йыйҙы. Бергәләшеп артабанғы көнкүреш хаҡында һөйләшәһе, шуның менән киләсәкте аҙмы-күпме күҙаллау кәрәк ине. Оҙаҡ ҡына кәңәштөңәш иткәндән һуң, шундай ҡарарға килделәр: кафырҙар тарафынан яндырылып тапалған Һаҡмарбашҡа ҡабаттан ҡайтып тормаҫҡа. Элекке урындан ситтәрәк йылҡы ҡараусылар менән һунарсылар, Биксәнтәйҙең үҙе барыпкитеп йөрөр өсөн йәтештән өс өй һалһалар – шул еткән. Һаҡмарбашҡа ҡайтанан күсенеүҙән баш тартыуҙың, әлбиттә, икенсе, етдиерәк, сәбәбе лә бар. Әлеге лә баяғы ҡон көҫәгән оңҡот Тимашевтың кире әйләнеп килеү мөмкинлеге.

— Туғандарыбыҙҙы, халҡыбыҙҙы артабан ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, дошман ҡәһәрләгән урынға ҡайтмау хәйерлерәк булыр, — тине Ҡолоҡас мулла. — Нисек кенә йәл булмаһын, унда ҡайтанан нигеҙ ҡороу – килешмәгән эш. Элек-электән килгән йоланы инҡар итеүҙең аҙағы насар бөтөүе ихтимал.

— Иҫке урындан бер аҙ ғына бирерәк ҙур асыҡ бары һәммәгеҙгә лә мәғлүм. Мәйтәм, шунда күсенгәндә? — Батырхан әллә ҡасандан башында йөрөткән фекерен әйтте.

— Улай ҙа бармаҫ... Әлегә. — Биксәнтәй йәнә үҙ дәлилдәрен килтерҙе. — Ҡолоҡас мулла хаҡ, үс алыу теләге менән яныуҙан асыуы эсенә һыймаған караттар теләгән ваҡыттарында, иң яманы – беҙ көтмәгәндә килеп сығыуҙары бар. Һин әйткән асыҡ, Батырхан, оло юлдың эсендә һәм әллә ҡайҙан күҙгә ташланып ята. Ә бында, Ирәндек ҡуйынында, аулаҡ, сит-яттар, күҙ йомоп, тығыла һалып бармай.

— Ата-бабаларыбыҙ төйәген бөтөнләйгә ташлап ҡуябыҙмы шунан? — Ныҡыш Батырхан үҙенекен һөйләне. – Нигеҙ ҡоротҡанды уларҙың рухы ғәфү итерме?

---

[216] *Шиҡаһа бураны — аҡман-тоҡман.*

— Ташламайбыҙ ҙа, ҡоротмайбыҙ ҙа. Әйтеп торам бит: әлегә ваҡыты ул түгел. Мөҙҙәте етеп, бер заман болалар баҫылыр, ил-йорт тынысланып, солох урынлашыр, шунда ҡарарбыҙ. — Биксәнтәй үҙһүҙле һунарсыға тәфсирләп аңлатырға тырышты. — Төшөндөңмө инде?

— Мин төшөндөм дә ул, бына олатайҙар рухы рәнйемәҫме тием.

— Рәнйемәҫ. Беҙ бит улар төйәк иткән урынды үҙ иркебеҙ менән ташлап китмәгән. — Ҡолоҡас мулла старшинаға ярҙамға килде. — Ваҡытлыса ғына күсенеп торабыҙ ҙа баһаң.

Батырхан, ниһайәт, аңланым тигәнде белдереп, рыя ғына баш ҡаҡты.

Ир-ат, оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай ғына, Күгиҙел буйындағы төптән йыуан биш сауыл[217] менән уратылған туғай уртаһына нигеҙлек ҡарағастар алып килеп ауҙарып та ҡуйҙы. Шул рәүешле, әкренләп яңы ауыл төҙөлә башланы. Ә уға исемде оҙаҡ эҙләп тороу ҙа кәрәкмәне. Исемде тәбиғәт үҙе бирҙе. Ирәйешеп үҫкән биш ялбыр ҡайын хөрмәтенә ауылды Бишҡайын тип атаны ла ҡуйҙылар.

Ә инде Һаҡмарбашта яңыртып төҙөргә һөйләшелгән торлаҡтарҙы торғоҙоуы ауырыраҡҡа төштө. Ара алыҫ булғанлыҡтан, көн дә йөрөп эшләүе мәшәҡәтле ине, шуға күрә тиҫтәнән ашыу ир-егеткә йәй буйына урынында ятырға тура килде. Тәүге өй, әлбиттә, Биксәнтәй байға тәғәйен күтәрелһә, ҡалған икәүһе дөйөм ятаҡ сифатында тотолорға тейеш ине.

Яңы өйҙәрҙе иҫке ауыл урынынан байтаҡҡа ситтәрәк, урман ышығына яҡын, төҙөнөләр. Ҡайтыу-килеү мәшәҡәттәренән интегеп йөрөгәнсә тип, Ғәлимйән менән Ҡотлобай ғаиләләрен алырға ла шунда уҡ күсенеп килергә ҡарар итте. Быға нығыраҡ Батырхан ҡыуанды: бабаларыбыҙ төйәгенә йәм дә, йән дә биреп, өс өй мөрйәһенән булһа ла төтөн сығып торасаҡ! Шулай итеп, Һаҡмарбашыбыҙ бөтөнләйгә үлеп ҡалмаҫ.

Көҙ етеүгә Бишҡайында күпселек кеше өйлө-ҡыйыҡлы булды. Әүәл ишле ғаиләләрҙе торлаҡлы иттеләр. Шулай ҙа байтаҡ кешегә йәнә бер ҡышты тирмәләрҙә сығырға тура килер, ахыры.

Бай өсөн тәғәйен төҙөлөп, йәш уҫаҡ еҫе аңҡып торған өйгә тәүләп аяҡ баҫҡас та Гөлбикәнең ҡыуанысының сиге булманы. Әхмәтйәне юғалыуын, башҡа күп кенә ауылдаштарының һәләкәтен йөрәгенә яҡын алып, ифрат ауыр кисергән ҡыҙҙың һуңғы осорҙа күҙгә күренеп һарғайған йөҙө менән ҡомһарылған сырайы, ниһайәт, асыла төштө лә сикәләре осона алһыулыҡ йүгерҙе. Ҡыҙының шулай, онотола башлап, элекке матурлығын ҡайтара барыуын күргән Биксәнтәй һөйөнөп бөтә алманы. Аһ, белгән булһа икән...

Күрәһе ҡаза алдан һиҙҙереп, үҙенә тартып тора, тигәндәре хаҡтыр ул. Яңы өйҙәрендә аҙна-ун көн дә торманылар, сыҙамһыҙ Гөлбикә инде атаһының быуынһыҙ еренә бысаҡ һала ла башланы. Башта ҡыҙыҡ һымаҡ тойолһа ла, яңғыҙлыҡ үҙенекен итә икән: "Ҡыҙҙарҙы һағындым. Бейә бәйләй башлағандарҙыр инде, улары ла һағындырҙы. Бишҡайынға барып әйләнәйем әле, атай", — тип бер башлағанын өҙмәне лә ҡуйманы. Биксәнтәй уға: "Аҙ ғына бушаңҡырағас үҙем апарып ташлармын, ҡыҙым. Бейә һауырға ла өлгөрөрһөң, әхирәттәреңде лә күрерһең, саҡ ҡына түҙ", — тип ҡараны. Яңғыҙ бөртөгөн йәлләп, Гөлзәйнәп: "Ярай, атаһы, ек атыңды, икәүләшеп барайыҡ та ҡайтайыҡ, әллә нимә булмаҫ әле", — тигәс кенә, ҡаршы килә алманы. Иң тыныстарҙан һаналған шаҡый туры атты егеп бирҙе лә дилбегә тоторға

[217] *Сауыл — асыҡ уртаһындағы яңғыҙ ҡайын.*

Ҡотлобайҙың өлкән малайына әйтте. “Ҡуй, баланы ыҙалатмайыҡ, үҙебеҙ нисек тә йөрөп әйләнербеҙ”, — тип ҡатыны ат ҡыуыусынан баш тартты.

Күрәһең, “Алла бирһә” тимәгәндер инде...

Гөлзәйнәп менән Гөлбикә ҡуҙғалып китеүгә, Биксәнтәй Батырханды күрә һалды ла ҡатыны менән ҡыҙына һиҙҙермәй генә күҙ-ҡолаҡ булып барырға ҡушты.

— Күңеленә ауыр алма, Батырхан, күреп тораһың: заманалар болғауыр, урман тулы шикле әҙәм. Береһе яуыз хужаһынан йәшеренеп йөрөһә, икенсеһе кеше үлтереп ҡасҡан, өсөнсөһө... Ҡыҫҡаһы, үҙең күреп тә, аңлап та тораһың, — тине ул, һунарсының яурынына ҡулын һалып. — Бишҡайынға барып килгәнсе күҙ яҙлыҡтырмаһаң ине. Тағы бер әйтәм: был фарман түгел, бары үтенес кенә.

— Эйе, юл хәүеф-хәтәр менән тулы, тирә-яҡта ығы-зығы әле һаман баҫылып бөтмәгән. Аңлайым, бер үҙҙәрен генә ебәреүе ҡурҡыныс, — тип ризалашты Батырхан. Дуҫ һүҙен йыҡмаҫ өсөн генә түгел, ә ихлас күңелдән теләк белдерҙе. — Тик ағас йығыуҙа бигерәк аҙ ҡалаһығыҙ бит, мин дә сығып китһәм...

— Бер көнгә һинһеҙ ҙә эшләп торорбоҙ!

— Әләйһәң, кискә ҡайтып етермен.

— Тик аслан күҙҙәренә салынма, һинең эйәреп барғаныңды белмәһендәр. Юғиһә, кәмһенеп, үпкәләүҙәре бар.

Биксәнтәй әйткәнсә, үңгәр[218] урынына йөрөгәнен һиҙмәһендәр өсөн, Батырхан әсә менән ҡыҙ артынан бер аҙ торараҡ сыҡты. Карателдәр ташлап ҡасҡан ғәнимәт[219]-мылтыҡты иңбашына аҫҡан килеш, яраҡкан Сыбай ҡашҡаһына атланып, күҙ күреме арауыҡтан, ҡаса-боҫа эйәреп, күҙәтә барҙы. “Үҙем дә килешкән инде, эш ҡалдырып... Кем йөрөп ятһын был яҡтарҙа ошондай мәлдә”, — тип уйланды ул эйәрендә сайҡала-сайҡала, танау буйынан оҙон көй көйләп барышлай. Бөтмәҫ ауыр эштәрҙән йонсоуы етепме, әллә аяҡ аҫтында һағалап ятҡан ҡаза ауырайттымы, үңгәр, үҙе лә һиҙмәҫтән, йоҡомһорап китте һәм ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа йылдар ағышында ҡанына һеңешеп бөткән аусы һиҙгерлеген юғалтты.

Кемуҙарҙан ярышып һайрашҡан ҡоштар тауышына ҡолаҡ һала-һала ойоп барған Батырханды көтмәгәндә ишетелеп ҡалған ҡатын-ҡыҙ сәрелдәгәне һиҫкәндерҙе. Ул, ни булғанын аңлар өсөн, юл ситендәге ҡыҙырым сауҡалыҡ араһынан асыҡ урынға сыҡты ла тауыш ишетелеп ҡалған яҡҡа ынтылып ҡараны. Ете ят ике әҙәм Гөлзәйнәп менән Гөлбикәнең ҡулдарын артҡа ҡайырып маташа ине. Тегеләре, бар хәлдәренсә ҡаршылыҡ күрһәтеп, сапсышҡан була, сарғалап ҡысҡыра.

— Эй! Ни эшләйһегеҙ һеҙ, ҡәбәхәттәр?! — Мылтығын ҡулына алырға өлгөргән һунарсы бар көсөнә һөрән һалыуға, хәлдең былдай боролош алырын уйлап та бирмәгән ике әзмәүер, ҡапылғара баҙап ҡалыуҙан күҙҙәрен секрәйтеп, Батырханға ҡарап торҙо. Уның яңғыҙы икәнлеген күргән нәҙекоҙон буйлы, көрәк һаҡаллыһы иҫенә килде, буғай, урыҫсалап:

— Дилбегәне ҡулыңа ал да – алға! — тип икенсеһенә екерҙе. Үҙе, йәнәш торған эйәрле атҡа етеҙ генә һикереп менгәс, биленә ҡыҫтырылған пистолетын ала килеп, Батырханға тоҫкап атып ебәрҙе һәм, сығырынан-сығып, ҡурҡышынан ни эшләргә белмәй торған иптәшенең арҡаһына ҡамсы менән һуғып ебәрҙе. — Вперед, жунгарская морда!

[218]Үңгәр — ҡоралды тән һаҡсыһы.
[219]Ғәнимәт — хәрби трофей.

Йәҙрә Батырхандың ҡабырғаһын көйҙөрөп үтте. Эштең тиген түгел икәнлеген шунда ғына төшөнөп алған һунарсы ышыҡлана һалды ла ағас аралап тегеләргә ҡарай сабып китте. Дилбегә тотҡан егет, атын ҡабаландырып, сарт-сорт һырт буйына һыҙырҙы.

Уны-быны көтмәй торған хайуан, ҡапыл тертләп, алға ташланды. Шул әҙере ул, оло юлдың саңын борҡотоп, йән аямай саба башланы. Көрәк һаҡал, атының ҡабырғаларын төйгөсләй-төйгөсләй, ылау артынан төштө.

Ҡото табанына киткән ат ҡыуыусы, әйләнеп, артына ҡарап-ҡарап ала, ә һыбайлы: "Тиҙерәк! Тиҙерәк!" — тип ҡабаландыра ғына. Ҡаҡ арбала, ҡаҡлығышып, ҡатындар соролдаша. Яйын тура килтергән Батырхан һыбайлыға төбәп атып ебәрҙе, әммә йәҙрәһе яҙа осто. Шунда ул уҡ-һаҙағын алмауына үкенеп бөтә алманы. Уғы уның яҙа китмәҫ ине.

Ошоғаса арба артынан барған "һаҡал", үңгәрҙең ҡоралды икәнлеген күреп алғандан һуң, ылауға ышыҡланып, алдан төштө. Хәҙер инде уға тура тоҫҡап атып булмай, яңылыш арбалағыларға тейҙереүең бар. Ышаныс хәҙер тик Сыбай ҡашҡала ғына, һәм уныһы һынатманы. Ҡыуғынсылар араһы күҙгә күренеп ҡыҫҡара барғанда, һыбайлы, ни аралалыр борола һалып, йәнә атты. Ҡурғаш киҫәге был юлы Батырхандың ҡолаҡ төбөнән һыҙғырып уҙһа, сираттағыһы бүрегендә ҙур тишек ҡалдырып үтте. Асыуынан һарыуы ҡайнаған һунарсы, атын йәлләп тормай, осто ғына. Яралы ҡабырғаһының ауыртыуын да тойманы ул, үлем көҫәгән йәҙрә килеп тейерен дә уйламаны, ярһыуы сиктән ашып, сапты ла сапты.

Халыҡ телендә Беренсе йылға тип йөрөтөлгән шишмәгә яҡынлашып, батҡаҡлы кисеүгә етер алдынан арбалағы ҡатындарҙың береһе, күрәһең, уңайлы мәлде тура килтерҙе лә арбанан тәгәрәп ҡалды. Аяҡ-ҡулы бәйле булғанлыҡтан, ул йәпһеҙ барып төшөп, сатай-ботай тәкмәс атты. Енле "һаҡал", атының башын шаҡара тарта һалып, уның янына боролоп килде һәм терәп тигәндәй атып ебәрҙе. Һикереп торорға маташҡан ҡатын – ә уның Гөлзәйнәп икәнлеген Батырхан инде асыҡ таныны – сабылған үлән ише ергә ауҙы.

Батырхан барып еткәндә йөҙтүбән килеш һуҙылып хәрәкәтһеҙ ятҡан Гөлзәйнәп мең бәлә менән салҡан әйләнде лә, мөсһөҙ ыңғырашып, көслөк менән күҙҙәрен асты. Уның күкрәгенән сорлап ҡара ҡан аға ине.

— Гөлзәйнәп, һин нисек?! — тине һунарсы ҡабалан-ҡарһалан.

— Ҡыҙымды йолоп ҡал, Батырхан! Зинһар! — Хәлһеҙ әсә мөлдөрәп үңгәргә ялбарҙы. — Мин ошонда ғына ятып торормон... ыһ...

Эйе, Батырхандың башҡаса юлы юҡ. Гөлзәйнәп менән булашып торһаң, Гөлбикәһеҙ ҡаласаҡһың... Ул ары сапты. Туҡталмайса елдергән ылау шул арала байтаҡ алыҫайып өлгөргән. Шулай ҙа ныҡыш һунарсы аҡрынлап йәнә яҡынлашты һәм йәнә ҡыуып етте. Ошо мәл ҡот оскос тиҙлек менән барған арбаның бер тәгәрмәсе, күсәренән ысҡынып, юл ситендәге оҙон үлән араһына инеп китте. Төбөнән һынып сыҡҡан ағас күсәр ҙә юлда ятып ҡалды. Әммә аҡ күбеккә батып, ярһыуҙың сигенә сыҡҡан шаҡайҙы был ғына туҡтата алманы. Ул, бер ни булмағандай, һонолоп сабыуын белде. Бына һиңә үжәт, бына һиңә ялҡау ат!

Икенсе йылғаға етәрәк, ҡырынайған арбанан Гөлбикә лә тәгәрәп төштө. Төштө лә, бер нисә тапҡыр әйләнгәндән һуң, сөрсөлөп барып ятты. Көмөш һыулы шишмә ситендә хәрәкәтһеҙ ятҡан ҡыҙҙың күкрәгенә... бысаҡ тығылған. Батырхан уның барлау тамырын ҡапшай һалды. Үкенес, Гөлбикәгә ярҙам кәрәкмәй ине. Ниндәй аяныс! Биксәнтәйҙең күҙҙәренә хәҙер нисек ҡарар Батырхан?!

Һунарсы ҡыҙҙың иләмһеҙ ҡиәфәттә ятҡан йәнһеҙ кәүҙәһен ипкә килтереп һалды, асыҡ ҡалған күҙҙәрен йомдорҙо, еләнен сисә һалып, өҫтөнә япты.

— Ух, Ҡатил тоҡомо, ҡанэскестәр! – Үкенес быуып алған Батырхандың тын юлдары ҡыҫылды.

Хәле мөшкөләйә барыуға ҡарамаҫтан, ул артабан ҡыуа төштө. Бер сәбәпһеҙгә ике ҡатын-ҡыҙҙың ғүмерен ҡый ҙа ҡасып ҡотолорға маташ! Юҡ инде, булмаҫ! Хәҙер һеҙҙе ҡурҡмайынса атып үлтерергә була.

Тәүге йәҙрә һыбайлының яурынына эләкте, буғай, Батырхан уның уң ҡулының килбәтһеҙ һәленеп төшкәнен күрҙе. Йәҙрәнең икенсеһе арбалағының арҡаһына тейҙе. Уныһы ике ҡулын ҡапыл өҫкә сөйөп ебәрҙе лә арба төбөнә салҡан барып төштө. Ә ярыш ҡомарына бирелгән шаҡый, ҡыуған кеше юҡлыҡҡа ҡарамай, сабыуын белә. Шулай ҙа, көс яғы самалыраҡ ҡалыуҙанмы, ул бер аҙға әкренәйә төштө. Батырхан уны тиҙ арала ҡыуып етте һәм теҙгендән эләктереп алды. Ауыҙлығын арҡыры тешләгән шаҡый үрәпсеп китте лә, алғы тояҡтары менән ерҙе һөрөп барып туҡтағандан һуң, алан-йолан ҡаранып, сыҙаша алмай тыпырсынырға тотондо. Ҡайһы аралалыр янтайып китеп ергә ауған аттың ауыҙ-морононан ҡан китте, аяҡтары тартыша башланы, һәм бер аҙҙан ул бөтөнләй хәрәкәтһеҙ ҡалды. “Йөрәге ярылды малҡайҙың!” Батырхан һыбайлы киткән яҡҡа бороло. Инде байтаҡ алыҫайып өлгөргән ҡасҡын, артына боролоп ҡарай-ҡарай, ҡалҡыулыҡ артына төшөп юғалды. Уны ҡыуып етеренә өмөтөн өҙгән Батырхан арбалағы әҙәм янына килде. Бер тәгәрмәсһеҙ ярым емерек арбала йәп-йәш күсәр егет ыңғырашып ята.

— Үлтермәгеҙ мине, ана теге ҡотортто! — тип ялбарҙы ул, “һаҡал” киткән яҡҡа күрһәтеп. — Зинһар, үлтермәгеҙ, үтенәм!

— Нимә, йәшәгең киләме, ҡәбәхәт?! — Ыҫылдаған һунарсы, күҙҙәренән нәфрәт сәсеп, егеткә яҡынлашты. — Йәнең ғәзиз булғас, ниңә алданыраҡ уйламаның, бәдбәхет?

— Мине ул алдап килтерҙе. Кәләш алып бирәм, тине. Кешегә ҡул күтәреү уйымда ла юҡ ине, антым-шантым бына. Беҙ әллә ҡасандан...

— Кемдәр ул – һеҙ? — Батырхан туҡтауһыҙ лыҡылдаған әҙәм аҡтығының яғаһынан бөрөп алды ла һелкетте: — Ниңә кәрәк булды һеҙгә гонаһһыҙ бер ҡатындарҙың йәнен алыу, ә?! — Ул инде үҙен ҡулда тотоп тора алмаҫ сиккә етеп, бысағын егеттең муйынына терәне.

— Мин – Сырҙан булам. Ҡаҙаҡ яғынан мин. Ә уны Иван тиҙәр. Иван Нуштаев – урыҫ алпауыты.

— Әйтеп бөтөр, артабан ниндәй ниәттәрегеҙ бар ине?

— Иван — Тимаш кешеһе. Ниндәйҙер бурысын урын еренә еткереп үтәмәгән өсөн баяр уны ошо яҡтарға кире ҡыуып ебәргән. Ә мин, ахмаҡ, уға эйәрҙем. Таҫма теленә ышандым, аҡса менән малға, буштан төшкән кәләшкә алдандым. Ярраббым!..

— Теге ҡатындар осраҡлы ғына тап булдымы? Әллә...

— Осраҡлы түгелдер, тип уйлайым. Әлеге юлдан беҙ бер нисә тапҡыр үттек. Ивандың ул тирәнән һис киткеһе килмәй ине. Әле килеп шуға төшөндөм: уңай мәлен тап килтерә алмай темеҫкенгән икән...

— Бәлкем, икенсе кешене һағалап йөрөгәндер, йәзит?..

— Бер, ныҡ иҫерек сағында, Юламанов тигән яман старшинаның яҙмышын емереп, матур киләсәкһеҙ ҡалдырыуына зарланып ултырғайны.

Ниҙер һиҙенә башлаған Батырхан фекер төйнәп торғандан һуң:

— Уның исеме ысынлап та Иванмы? Һин яңылышмайһыңмы? — тип ҡабатлап төпсөндө.

— Эйе, Иван Нуштаев.

— Башҡа ҡушаматы юҡ инеме?

— Белмәйем... Башҡаһын әйтә алмайым... ыһ...

— Уһ-һ! Аҡылын юйған яртаҡылдар!—Яралы йыртҡыс ише ажғырып ебәргән һунарсы бысаҡ осон тегенең тәненә батыра бирҙе.

— Минең ғәйебем юҡ, абзый. — Ҡаҙаҡтың күҙҙәре шар булды.

— Сәскә шикелле шул ҡыҙға нисек ҡулың күтәрелде, ә?!

— Мин түгел... Иван... Ул бысаҡ һелтәне...

— Дәһри шайтан! —Сикәһе ҡыҫып ҡуйған Батырхандың башы әйләнеп китте.

Ул ылау артынан йөрөгән арала, Сырҙан ҡанһырауҙан йән биргән ине. Инде һыуынып ҡата башлаған өс йәнһеҙ кәүҙәне өс ылауҙа алып ҡайттылар.

Йөҙҙәр бер аҙ ғына яҡтыра төшөп, күҙҙәр асыла, күңелдәр күтәрелә башлаған мәлдә Һаҡмарбашты йәнә ҡара ҡайғы баҫты. Әсә менән ҡыҙҙы, икеһен бер ҡәбергә һалып, бөтә ауыл менән ерләнеләр. Халыҡ, ҡанлы йәш түгеп, зар иланы. Биксәнтәй тешен ҡыҫып түҙергә тырышты. Ни булып ятҡанын әле тулыһынса төшөнөп етмәгән һымаҡ күренгән ил ағаһы бар нәмәгә битараф һымаҡ ине. Ҡараштары төҫһөҙләнеп китте, һөйләгән һүҙенең мәғәнәһе булманы. Ошо сәбәпле кемдер хатта шөбһә белдереп ҡуйҙы: ҡайғынан алышынып китмәгәйе. Кемде генә бөкмәй ҙә кемде һындырмай ҡайғы тигәнең.

Йыназа намаҙын башҡарып ҡайтҡандан аҙаҡ аят-доға бағышланылар. Ҡайғы уртаҡлашырға йыйылған туған-тыумаса, ауылдаштар ҡояш байыр алдынан ғына таралышты.

Балалары осоп бөткән сыйырсыҡ ояһылай етемһерәп, тып-тын ҡалған өйөнән Биксәнтәй күҙ бәйләнә башлағанда тышҡа сыҡты. Сыҡты ла, аяҡтарын кирә биреп, ихата уртаһына баҫты, ике ҡуллап башын тотҡан көйө тулған айға ҡараны. Тәҡдир алдындағы көсһөҙлөктән уның күҙҙәренә әсе йәш эркелде. Әллә нәфрәт, әллә инде үкенес йәштәре...

– Эй-й, Алла-ам! Әйт, ниндәй гонаһтарыбыҙ өсөн шул ҡәҙәре ғазаплайһың беҙ бәндәләреңде?! — Ул үҙенең ирлек ғүмерендә тәү тапҡыр иланы. Шым ғына, буҫығып оҙаҡ иланы, шул рәүешле ҡатып бөткән күңелен бушатты. Был юлы күкрәк ярып килгән һағышты ауыҙлыҡларлыҡ, түҙеп торғоһоҙ йөрәк әрнеүе менән йән һыҡрауын башҡаса тыйыр көс таба алманы. Ҡайнар йәш, тоҙло шишмә булып, субырлап аҡты ла аҡты. Ҡолоҡас ағаһы, уртәлеп ҡәһәрләнгән нигеҙҙе ҡайтанан тергеҙергә ярамай, тип әйтмәне түгел, әйтте лә баһаң. Аҙағы насар бөтөү ихтималлығы тураһында ла иҫкәртте. Ана бит, оло һүҙен тыңламаһаң...

Ошоларҙы хәтеренә төшөрөп ныҡ өҙгөләнгән Биксәнтәй Ҡолоҡас мулла һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмауына үкенеп бөтә алманы. Тик һуң ине шул...

Әммә ләкин, донъя хәлдәре нисек кенә ҡырҡа үҙгәреп, көтөлмәгән боролош яһамаһын, старшина Бишҡайында бөтөнләйгә төпләнеү тураһында ишетергә лә теләмәне. Киреһенсә, бар булмышы менән һаман ҡаршы торҙо. Әүәлге урынында уҡ булмаһа ла, ул ауылды барыбер Һаҡмар буйына төҙөтөп, Һаҡмар буйында йәшәйәсәк! Күпме генә өгөтләмәһендәр, Күгиҙел, Ирәндек буйҙарына ерегеп, бер ваҡытта ла ерһенеп китә алмаҫ. Ата-бабалары төйәк итеп, уның өсөн яғаға-яға килеп баш һалған батырҙар һөйәге барыбер үҙенә тарта, саҡырып-әйҙәп ята. Ни намыҫың менән ташлап китмәк кәрәк уларҙы?!

# VIII. Әхмәт*

*Тыуған ғына ергә ниҙәр етә,*
*Иң ғәзизе — тыуған төйәгем.*
*Таштарыңа тарих яҙыр инем,*
*Илкәйемә ҡайтһа һөйәгем.*

(Халыҡ йырынан)

Әлекке Һаҡмарбаштан Тамъян ырыуы үҙәгенә илткән оло юл буйлап эйәр һуғыуҙан ныҡ йонсоған һыбайлы килә. Ҡыҫҡа итеп төйнәлгән ҡойроғон болғай-болғай, аҙғы өҙәремдең иҙелгән мәтеһен лас-лос кисеп ҡабаланмай ғына барған ерән ҡашҡаһы ла буйтым талсығып, асҡаҡһығанға оҡшай. Иҫке ҡарҙан яңы әрселә башлап, серек япраҡ еҫе аңҡып торған ағаслыҡ эсенән асыҡ урынға килеп сыҡҡан һыбайлы атын юлдан ситкә борҙо. Һурыға башлаған сиҙәм буйлап барыуы күпкә еңел дә баһаң. Һалдат кейеме кейгән утыҙ йәштәр самаһындағы мөһабәт кәүҙәле ир, бер аҙ үткәс, боронғо Күс юлын ҡалдырҙы ла, Ҡаран йылғаһы башынан тура тартып, Йәйектүбә тауына сыҡты. Түбәнең иң бейек урынына еткәс, атынан төштө, ҙур теләк менән әле кибеп тә өлгөрмәгән еүеш ергә баҫты. Тирә-яғына ҡарана-ҡарана хистәргә бирелеп торғандан һуң, эйелеп, сысҡан төртөндөһөнән бер ус дөмҡара тупраҡ алды. Алды ла, һәләк ҡәҙерле нәмәләй күреп, танауына яҡын килтерҙе һәм күкрәк тултырып еҫкәп торҙо.

— Һаумы, тыуған тупраҡ, тыуған ер! Һаумы, ғәзиз төйәк! Һаумы, Һаҡмарым! Оһо-һо-оооой...

Һалдат тау түбәнендә ярҙарына һыймай йәйелеп ятҡан Һаҡмарҙы, зәңгәрһыу томанға солғанып, тулҡын-тулҡын күренгән Уралтауҙы, унда үҫкән һәр ҡыуаҡ, һәр ағасты, икһеҙ-сикһеҙ хозур сағылдар менән ялан-ҡырҙарҙы әллә ҡайҙарға ишетелерлек итеп ҡысҡырып сәләмләне. Уның хайран көслө тауышы һылыу ҡайындарға, яҡындағы муйыл ҡыуаҡлыҡтарына, сағыл ҡаяларға бәрелә-һуғыла Уралтау һырты буйлап үтте лә баҙыҡ шаңдау булып кире әйләнеп ҡайтты. "Оһо-һо-оооо..."

Атын эргәләге яңғыҙ сауҡаға бәйләгәс, азамат үҙе шунда ятҡан Һарыҡташ өҫтөнә менеп баҫты.

Әйтеп бөткөһөҙ тәьҫораттар уятып, аҡ болоттар аҫтында күҙгә күренеп бармаҫ һабан турғайы илаһи йырын һуҙа. Ҡайҙалыр, алыҫ түгел, гөрөлдәп уйнаған елкендергес ҡор тауышы ишетелә, былай ҙа сихри донъяға оторо йәм өҫтәп, өҙөк-өҙөк торналар ҡысҡырышып ҡуя. Ер өҫтөнән, барлыҡ тереклеккә йән өрә-өрә, тәбиғәтте ҡышҡы йоҡоһонан уятып, һүрән[220] атлай. Ошондай мәлдәрҙә яҙға ҡушылып йөрәк ярһыһа, йәнгә ҡушылып тән ирәйә! Тирәйүнде һағышлы ҡараштары менән байҡап, фани донъяның илаһи хозурлығы менән инде йөҙ йыл күрмәгән тыуған төйәк гүзәллегенә һоҡланыуҙан хисләнеп-тулҡынланып торған һалдаттың күҙҙәре тупраҡҡа яртылаш күмелеп, аяҡ аҫтында ятҡан сәйер ташҡа төштө. Ул, ҡыҙыҡһыныуын йәшерә алмайса, ташты ҡулына алды. Һәлмәк кенә икән. Үҙе эргәһендәге башҡаларына

*Әхмәт ауылы — Башҡортостан Республикаһы Әбйәлил районының көнбайыш өлөшөндә, тау-урман зонаһының төп Уралтау һырты битендә, Һаҡмар йылғаһы башынан һигеҙ саҡрым түбәндәрәк урынлашҡан. Шуның өсөн дә уның әүәлге атамаһы Һаҡмарбаш булған. Элекке ауыл ултырған урын хәҙер Иҫке Ыҙма тип атала.*

[220] *Һүрән — апрель айы.*

һис оҡшамаған: кеп-келән дә йоп-йомро... Бәй, таш тигәне тут баҫып бөткән йәҙрә лә баһа! Ирҙең әле генә нур сәсеп торған йөҙө кинәт ҡараңғыланды. Уның ҡолағына үлем сәсеүсе туп гөрһөлдәүенә ҡушылып мылтыҡ шартылдауы, ғәййәрле күмәк ғәскәрҙең, айбарланып, яр һалғаны ишетелеп ҡалғандай булды. Күҙ алдына бынан ун алты йыл элек булып уҙған, ошо тирәне дер һелкетеп үткән аянысл ла, онотолмаҫ та хәл-ваҡиғалар килеп баҫты. Эйе, ошо урында, бына тап ошо ерҙә, әле, бер ни булмағандай, элеккесә үк ғәмһеҙ йоҡомһорап ятҡан Йәйектүбә башында уның үҫмер сағы тамамланһа, тормоштоң ҡәһәрле һынауҙары ла тап ошонан башланды...

...Һалдат, атының теҙгененән тотҡан көйө, тауҙың йомро һырты буйлап йәйәү китте. Барған ыңғайға эреле-ваҡлы саҡматаштар араһынан әле йүнләп ирей ҙә башламаған туң ерҙе тишеп, морон төрткән һарыҡ йыуаһынан ауыҙ итте, әскелтем ҡарға бутҡаһын да тәмләп ҡараны. Табан аҫтынан тиерлек күтәрелеп, һауалағы ишенә ҡушылған һоро-сыбар һабан турғайына ҡарап моңһоу ғына йылмая ҡуйҙы: бына хәҙер икәү булдығыҙ, ҡошсоҡтар – яҙ йырсылары. Икәүгә һәр саҡ күңеллерәк тә, еңелерәк тә...

Күктәге ҡоштарҙың сихри моңо ирҙе лә илһамландырып ебәрҙе, буғай. Быуып барған күңел болоҡһоуын онотоп, ул ҡасандыр Ҡолтой ҡарт яратып йырлаған көйҙө һуҙҙы:

*Һандуғаскай һайрай, ай, талдарҙа,*
*Һаҡмар буйында ҡайында.*
*Һаҡмар һыуы,*
*Үҫәлер талдар Һаҡмар буйында,*
*Үҫәлер ҡыҙҙар әсәләр ҡуйынында.*

— Их, тыуған көйгә көй етәме?! Тыуған ергә ер етәме! – Ир, осар ҡоштай елкенеп, "һә" тигәнсе эйәргә ултырҙы.

— Әйҙә, малҡай, ос был яғына! Егетеңде тыуған ауылына тиҙерәк еткер! Һаай! Ана шулай!

Баянан бирле хәл алған арғымаҡ йәш ҡолондай ҡойроҡ сәнсеп алға уҡталды ла еңел генә сабып китте. Аҡ бәкәлле тояҡтар аҫтынан йәбешкәк мәте киҫәктәре осто.

Ана, инде Һаҡмарбаштың тәүге өйҙәре лә күренде. Аптырай төшкән һалдат шул ерҙә атын туҡтатты: ә ниңә улар өҫәү генә? Өйҙәрҙең ҡалғандары ҡайҙа булған? Былары ла элекке ауыл урынынан шаҡтай ситтә, урман ҡырында, тора ла баһаң. Ни өсөн? Аҙағынаса алып барып сығара алмаған ҡара эшен ослап ҡуйырға маташҡан яһил Тимашев теге ваҡыт йәнә килеп әйләндеме әллә? Шулай булмаһа, ҙур ауылдан ни сәбәпле бары өс кенә өй тороп ҡалған? Әлегә яуап табып булмаҫ уйҙарҙан йәне өҙгөләнгән яугир, атынан төшмәй генә, ҡасандыр гөрләп торған ауыл урынына ҡарап хайран ҡалып торҙо.

Ут хөкөмөнә дусар ителгән йорт-ҡаралтының яртылаш янып ҡарала көйгән бүрәнәләре, башҡа йыһаздары ла әле һаман тырым-тырағай туҙып ята. Тимәк, ун алты йыл буйына уларға бер кемдең ҡулы ҡағылмаған. Өйҙәр менән кәртә-ҡура урындарын кесерткән ҡатыш дегәнәк, башҡа ҡарағура баҫып киткән. Унда-бында ялбырап ултырған киндер өйөмдәре күҙгә ташлана. Былары инде өләсәйҙәрҙең ҡасандыр киндер орлоғо һуҡҡан урындарылыр...

Урман урынан ишелеп ултырған ҡарағура араһында ике-өс баш кәзә малы темеҫкенеп йөрөй. Ҡара һин уны, был хайуандар ҙа бар икән, элек булмай

торғайны. Туҙ ҡыйыҡлы тәпәш өйҙәр тирәһендә башҡаса тере йән эйәһе күренмәй. Хужаһына тоғролоҡ һаҡлаған яңғыҙ эттең өҙлөкһөҙ ләүкелдәгәне генә ошонда, өс өйҙән торған ауыл йоратында, кемдер йәшәп ятыуына ишара.

Тауҙан төшкәс тә йылға яры ситенән борғоланып ятҡан йомро һуҡмаҡ буйлап киткән юлсы, иҫ итмәҫтән, ҡәберлеккә килеп сыҡты. Ауылдан айырмалы рәүештә, ҡәберлек күпкә ҙурайған. Боронғо фарсы яҙмалары “семәрләгән” аҡ таштар ҡуйылып, үләне әле йүнләп ҡапларға өлгөрмәгән яңы зыяраттар ҙа күренә. “Тимаш баяр ҡорбандары...” – тип әсенде һалдат. Шул әҙере ул, кинәт боролоп, балта сыңы ишетелеп ҡалған яҡҡа ҡараны. Тупрағы еңелсә быуланып ятҡан ҡәбер тирәһендә көнйәлә башлы егет булаша ине. Ул көҙҙән үк ҡабығынан әрселеп ҡуйһа ла, әле кибеп етмәгән беше ҡарағастарҙан ҡәбер бураһы бурап маташа. Танау буйынан аңлайышһыҙ көй көйләй-көйләй хиресен эшкә биргән егет һалдаттың яҡынлашҡанын абайламай. Ул, бар донъяһын онотоп, үҙ кәсебенә мөкиббән киткән.

Атын ағасҡа бәйләп ҡалдырған юлаусы шул яҡҡа атланы. Зыярат биләмәһенә аяҡ баҫҡас та, хәтерендә әле яҡшы һаҡланған доғаны яттан уҡып, әүәл әруахтарҙы сәләмләне: “Ғәләйкүмүс-ссәләмү йә-ә әһләд-дияр...” Оло ихтирам менән битен һыпырып ҡуйғандан һуң:

— Тәңре ҡеүәт бирһен, — тип егеткә яҡын килде.

— Һиңә... шулай уҡ. — Мыйығы яңы һыҙыла башлаған үҫмер турайып баҫты ла көтөлмәгәнлектән ҡапылғара ҡаушап торҙо. Ахырҙа, ҡулындағы балтаһын тумрауға сабып, һынамсыл ҡарашлы ҡыҫыҡ күҙҙәрен килеүсегә төбәне. “Кем һин? Йөрөйһөң шунда, бимазалау өҫтөнә, әҙәм ҡурҡытып!” — ти ине ул күҙҙәр. “Беҙ малай саҡтарҙа һалдат кейемендәге кешене күреү менән ҡотобоҙ осоп ҡаса торғайныҡ. Һалдаттарҙан уттан ҡурҡҡандай ҡурҡа инек, ә был, исмаһам, ҡымшанманы ла, — тип уйлай һалған йәш ир йылмайып ҡуйҙы. — Эйе, заманалар алышына, уның менән бергә кешеһе лә үҙгәрә. Шөкөр, кеше күңеленән әкренләп ҡурҡыу каса. Собханалла, артабан да шулай булһын! Ғүмер баҡый йөрәге һығылыуҙан рухы ҡаҡшап йәшәргә тимәгән башҡортҡа...”

— Һауғынамы, егет! — Һалдат ҡулын һондо.

— Арыу әлегә. — Үҫмер ҙә ҡул биреп күреште.

— Туғаныңмы? — тип һораны һалдат, эйәге менән ҡәбергә ымлап.

— Әсәйем. — Ҡапыл ғына сырайы ҡараңғыланып киткән тегеһенең башы эйелде.

— Үҙең кем булаһың һуң? — Үҫмерҙең болоҡһой башлауын күргән ир һүҙҙе икенсегә бора һалды. — Бер ҙә сырамыта алмайымсы...

— Табылды тиҙәр мине.

— Табылды?! Табылды тинеңме?— Һалдаттың йөҙө бермә-бер яҡтырҙы. — Әллә теге... ҡаҙаҡ малайымы?

— Эйе, элек ҡаҙаҡ булғанмын, ә хәҙер — башҡорт. — Ғәжәпһенә төшкән үҫмер ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡараны.— Ә һеҙ ҡайҙан беләһегеҙ минең ҡаҙаҡ нәҫеленән икәнлекте?

— Мин Әхмәтйән тигән ағайың булам. Ошо ауылдыҡымын! — тип осондо алҡыныуын йәшерә алмаған һалдат. — Мин киткәндә һиңә ни бары бер йәш кенә ине. Ә хәҙер, ана, еткән егет булғанһың!

— Ун етем тулды...

— Нимә, Бәҙерниса еңгәй мәрхүмә булып ҡалдымы ни? Ҡасан?

— Былтыр көҙ.

— Йәне йәннәттә булһын...

— Амин.

— Ә һин мәрҙәс егет. Шулай, яҡының ҡәберен оноторға ярамай. — Әхмәтйән Табылдыны арҡаһынан ҡағып ҡупайтты. — Айырата әсәй ҡәберен. Онота ҡалһаҡ, ҙур яҙыҡ булыр...

— Әсәй кешене нисек итеп онотмаҡ кәрәк? Ул бит – Әсәй!

— Үкенескә ҡаршы, ҡустым, кешеләр араһында ундайҙары ла табыла. — Әхмәтйән һалдат кинәт етдиләнеп китте. — Бәхеткә күрә, тип әйтәйемме – ундайҙар аҙ, әммә осраштырып ҡуя. Шулай, әҙәмдең дә төрләһө була...

— Ә мин онотмам, Алла бирһә. Онотһам, ер йотһон... Мына ошо урында...

— Әйт әле, ауыл кесерәйеп ҡалған... — Әхмәтйән, егеттең күңелһеҙ хәтирәләргә биреләбашлауын күреп, һүҙҙе йәнә икенсе юҫыҡҡа борорға ашыҡты.

— Ҡалғандар Бишҡайынға күсенеп киткән. Хәҙер инде мин уларҙы хәтерләмәйем дә.

— Улай икән. Ә бында әле кемдәр йәшәй?

— Биксәнтәй менән Ҡотлобай апалар, шунан беҙ.

— Сәләмәттәрме барыһы ла?

— Эйе, шөкөр.

— Зөлхәмирә инәйең ни хәлдә? Уны беләһеңдер бит?

— Бишҡайындағымы? Белә инем...

— Йә.

— Ике йыл элек ерләнеләр.

Йөҙө ҡапыл ҡарала көйгән Әхмәтйәндең ҡулындағы картузы ергә төшөп тәгәрәне.

— Ул бит — минең әсәйем... Ҡәбере ҡайһы тирәлә? — тине ул, бер килке иҫәнгерәп торғандан һуң.

— Анауында, әйҙәгеҙ апарам. — Үҫмер Әхмәтйәнде ярым ай соҡоп төшөрөлгән келән ташлы, сит-бото емерелеп төшә башлаған тупраҡ өйөмө янына алып килде. — Мына ошо... — тип эйәге менән ымланы.

Еүеш ергә тубыҡлана төшкән һалдат, башын эйгән көйө, ҡәбер өҫтөн һыйпаштырып ҡуйҙы.

— Бына, әсәй, мин ҡайттым... Ә һин... юҡһың.— Ул ең осо менән күҙҙәрен һөртөп алды. — Фани донъя рәхәтлеген күрһәтә алманым үҙеңә, кисерә алһаң кисер мине – йүнһеҙ улыңды.

Ҡәбер янында теҙләнгән килеш, белгән доғаларын ҡабатлап, оҙаҡ ултырҙы ул. Шунан, ниһайәт, аяғүрә баҫты ла һаман булһа янында торған үҫмергә ҡалҡынып ҡараны:

— Ярай, егет, бүлдерҙем шикелле, — тип ҡуйҙы. Ошонан һуң ғәмһеҙ юшап торған аты яғына атланы. Бара биргәс, артына тағы бороллдо: — Биксәнтәй апаң ҡайһы өйҙә?

— Ана, ситтәге иң өлкәнендә...

Биксәнтәй байҙың күрер күҙгә башҡа икәүһенән айырылып торған ҙур өйөн егет күрһәтмәгән хәлдә лә шунда уҡ танырға була ине.

Әхмәтйән ауыр ҡапҡаны һаҡ ҡына асып, ихата эсенә үтте лә:

— Әссәләмәғәләйкүм был йортҡа! — тип сәләм күндерҙе. Ят тауышты ишетеп ояһынан сыҡҡан бәйле эт абалап өрөргә тотондо. Тәпәш лапаҫ аҫтынан бер ҡулына яңы юныла башлаған ағас һәнәк, икенсеһенә еңел балта тотҡан, көндөң һалҡынса булыуына ҡарамаҫтан, ҡырылған таҡыр башына түбәтәй, өҫтөнә еңһеҙ кәзәкей кейгән, асыҡ зәңгәр күҙле, аҡһыл сырайлы, талғын елгә елберҙәп торған ап-аҡ кәзә һаҡаллы, ғәжәп һынамсыл ҡарашы менән арбап алыр йыуантыҡ, әммә еңел кәүҙәле ҡарт пәйҙә булды.

— Вәғәләйкүмәссәләм! — тине, ярым хәрби кейемдәге әзмәүергә әллә шикләнеп, әллә ғәжәпләнә биреп. — Ни йомош, мосафир?
— Биксәнтәй ағай! Әллә танымайһың да?! — Төҙ, һомғол кәүҙәле һалдат хатта ҡосағын йәйеп ебәрҙе.
— Һис сырамыта алмайымсы... – Ҡарт тамам аптырауға ҡалды.
— Әхмәтйән тигән шайтан малайҙы хәтерләмәйһеңме ни?!
— Бәрәкалла! Әхмәтйән?! — Ҡарттың ҡулындағы һәнәге лә, балтаһы ла төшөп китте. — Был донъяларҙа һин дә бармы ни, улым?!.
— Как видишь! — Әхмәтйән кесерәйеп ҡалған Биксәнтәйҙе ҡосағына ҡыҫты. — Шәпме, Биксәнтәй ағай! Ай, бирешмәгәнһең әле?!
— Һаумы, Әхмәтйәнем! Ҡәҙерлем минең... – Ҡарт тулышып киткән хистәренә ирек бирҙе.
— Йә, йә, тыныслан. — Егет, наҙлап, уның арҡаһынан һөйҙө.
— Һине күрәһе көндәрем булған икән әле, собханалла! — Биксәнтәй инде тыйыла алмайса һулҡылданы. – Ә мин бит шулай булырына ышанған инем. Өмөтөмдө өҙмәнем, көттөм...
Ошо мәл өйҙән ун-ун ике йәштәр тирәһендәге малай килеп сыҡты ла ярһып өргән этҡә ҡыҫҡырҙы:
— Аҡтырнаҡ, тыныслан! Шаулама!
— Быныһы минең малай — кинйәм, — тине Биксәнтәй, күҙ йәштәре аша йылмайып. — Исеме – Дәүләтбай.
— Нисек?! Улың да бармы ни һинең? — Әхмәтйән һоҡланыуын йәшерә алмайса бот сапты. — Йә Хоҙа-а! Ҡасан өлгөрәһең, ә!
— Өлгөрөргә нужа мәжбүр итә. Нужа...
— Ә Гөлзәйнәп еңгәй, Гөлбикәләр ни хәлдә?
Биксәнтәй өндәшмәне.
— Әле өйҙәләрме үҙҙәре? — тип ныҡышты Әхмәтйән.
— Улар... юҡ... — Старшина ауыр көрһөндө.
— Юҡ? Аңламаным.
— Әхирәттә улар...
— Н...нисек... әхирәттә? — Әхмәтйәндең эскерһеҙ йылмайыуы ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығып, теле көрмәлде. Яңы ғына ишеткәне уға яман төштәге һымаҡ тойолдо. Дөрөҫөрәге, үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанып етмәгән һымаҡ ҡабатлап һораны. — Әхирәттә, т... тиһеңме?
— Ниндәйҙер ҡара йөрәк һәләк итте уларҙы. Икеһен бер көндә...
Әхмәтйәндең аяғы аҫтында, гүйә, ер уйылды, әле генә нур сәскән йомарт ҡояш уның өсөн ҡапыл һүнеп ҡалды ла, бар донъя ҡараңғылыҡҡа сумып, баштүбән әйләнде.
— Үҙең нисек һуң, Әхмәтйән?
— Ә?.. — Ағарынып китеп, иҫке түмәр өҫтөнә ултыра төшкән һалдат ошо тауыштан асылына ҡайтты. — Нимә?..
— Ҡайҙарҙа юғалып торҙоң, тием? — Биксәнтәй, йәнәшәләп, уның янына сүгәләне. — Ун алты йыл ғүмер... Әйтеүе генә анһат.
Этен тынысландырған Дәүләтбай, улар янына килеп, уң ҡулын Әхмәтйәнгә һондо:
— Таныш булайыҡ, ағай, мин — Дәүләтбай.
— Әхмәт... Әхмәтйән. — Зиһене тарҡалыу өҫтөнә, быуындары ла бушап киткән Әхмәтйән урынынан тормаҡсы итте, әммә, башы әйләнеп, кире ултырырға мәжбүр булды. Шулай ҙа һонолған ҡулды мәхрүм итмәҫлек көс тапты. — Сотник Әхмәтйән Өмөтбаев!

Аптырауҙан Биксәнтәйҙең ауыҙы асылып, сал төшкән ялбыр ҡаштары, ике аҡ күбәләк ише, кинәт юғары сөйөлдө.

— Өмөтбаев?! Өмөтбаев, тинеңме?

— Эйе, Биксәнтәй ағай, тегендә шулай тип яҙҙырҙым да ҡуйҙым. Әйләнеп ҡайтырыма мин бит өмөтөмдө юғалтманым. Ә бында хәлдәр ана нисегерәк...

— Улай икән.. Һм-м... — Тубығына шапылдата һуғып алған Биксәнтәй ниндәйҙер мәғәнә менән: — Ярай, яҙылған-бөткән... — тип ҡуйҙы.

— Шулай эштәр... — Әхмәтйән ауыр һуланы.

— Әй әттәһе, хәбәргә әүрәп тик ултырабыҙ ҙа баһаң! — Биксәнтәй ололар һүҙенә ҡыҫылмай ғына ҡарап торған Дәүләтбайға ҡайырылды: — Бар, балам, әсәңә әйт: ҡәҙерле сауын килгән, тиең, сәйен әҙерләһен. Үҙең баҙҙан ҡымыҙ сығар. Аҙаҡ ағайыңдың атын тәрбиәләрһең. Торбалан һоло бирергә онотма.

— Йә, ентекләберәк һөйлә хәлдәреңде, — тине Биксәнтәй, әҙер табын артында икәүһе генә ҡалғас та. Ҡунағына ағас туҫтаҡ менән һалҡын ҡымыҙ тотторҙо. — Бер аҙ иҫеңә килеп, һушыңды йыйҙың, буғай...

— Эйе, булды инде, булды... — Гөлбикә һәләкәтен ишетеп шаңҡыған Әхмәтйән килделе-киттеле һөйләнде. — Үткәндәрҙе иҫкә төшөрәһе лә килмәй. Ҡайһылайыраҡ аяуһыҙ был тормош, ә, Биксәнтәй ағай. Әле генә Йәйектүбә башында ҡыуаныстан йырлай-йырлай алғыһап-ашҡынып ҡайтып килә инем, ә бында әсәйем... Гөлбикә... Зәйнәп еңгәй ҙә...

— Шулай, кем, Әхмәтйән, донъя бер алдын, бер артын күрһәтә. Әсеһенән дә, сөсөһөнән дә берҙәй ауыҙ иттерә ул. Шунлыҡтан сыҙам булырға, түҙеп өйрәнергә кәрәк. Аҙға ғына ебеп төштөңмө — бөттөң.

— Бөгөнгө ишетеп-белгәндәр менән бөгөнгө кисергәндәрҙән һуң тиҙ арала иҫкә килеп булырмы икән?

— Үлгән артынан үлеп булмай. Тереләргә нисек тә көн итергә кәрәк.

— Һүҙҙәрең раҫ та ул... Миңә ифрат ауыр...

— Беләм, улым, үҙемдең дә баштан үтте. Ундайын хатта хас дошманыңа күрһәтмәһен.

— Эйе, үҙең дә байтаҡ күтәргәнһең һымаҡ нужаны. — Уйсанланып киткән Әхмәтйәнгә байҙың улым тип өндәшеүе сәйер тойолдо.

— Йә, тотоп ебәр әле ҡымыҙынан. — Биксәнтәй алдындағы ризыҡтан әлегә тәғәм ҡабып ҡарамаған ҡунағын ҡыҫтарға тотондо. — Һүҙ менән генә тамаҡ туямы...

Әхмәтйән теш ҡамашырлыҡ һалҡын ҡымыҙҙы бер уртлауға, танһыҡ эсемлектең һағындырған әскелтем-татлы таныш тәме уны шунда уҡ арбаны ла ҡуйҙы, һәм оло туҫтаҡты ул тиҙ арала түңкәрә һуҡты. Тылсымлы эсемлек йән өргән Әхмәтйәндең күңеле күтәрелеп, теле асылды.

— Минең күргәндәр менән минең кисергәндәрҙе башҡаға насип итмәһен ине. Бар теләгәнем шул, — тине ул, көрһөнөп.

— Ҡайҙа ғәйеп булдың да ҡуйҙың теге ваҡыт?

— Тимаш, аяҡ-ҡулымды бәйләп, ауыҙымды томалаған килеш кырандасының һөйәнгесе аҫтына һалып алып китте мине. Йәрәхәтем ауыр, хәлем юҡ ине, бер нисек тә ҡаршылаша алманым. Янымда бергә булғандар ҙа абайламай ҡалды. Ҡыҫҡаһы, берәү ҙә күрмәне. Күрмәһә лә аптырарлыҡ түгел: ул мәлдә һәр кемдең үҙ ҡайғыһы, үҙ хәстәре ине. Нисек тә яуыздар ҡулынан ҡотолоп, тере ҡалырға...

— Мәңге йәлсемәгер илбаҫар! — Урынында ултырып сыҙамаған Биксәнтәй ҡалҡынып ҡуйҙы. — Шунан?

— Талҡаҫ күленә яҡынлашҡанда сығарып өҫкә ултырттылар. Тонсоғоп ҡуймаһын был, тигәндәрҙер инде, — Әхмәтйән, тамағына кинәт килеп тығылған төйөрҙө йомшартырға теләп, йәнә ҡымыҙ йотто. — Йылайыр ҡәлғәһенә инеп барған ерҙә теге писарҙары — Миргородскийҙы әйтәм — беҙҙе ҡыуып етте. Ул мине кире ҡайтармаҡсы булғайны ла, Тимашев ризалыҡ бирмәне. Ниндәй ризалыҡ?! Ул турала хатта ишетергә лә теләмәне. Һуңынан, эргәһендәге юха йылан ише бөтөрөнгән һатлыҡ әҙәм тәржемәһенән, шуны белә алдым: Тимаш тикмәгә генә алып китеп бармаған икән мине. Старшиналары ҡанымды күп боҙҙо, икенсе, тәүгеһенән дә яманыраҡ, Тәфтиләү яһайым мин унан. Суҡындырып, үҙҙәренекеләргә ҡаршы ебәрәм, тип һаһылдап көлгән, имеш. Ух, йәнемдең көйгәне шунда! Аҡтыҡ көсөмдө туплап, ырандас ишеген онтап килеп сыҡтым. Туҡмап-типкесләп хәлемде алғас, ултырғыс аҫтына ҡабат индереп яптылар ҙа барып еткәнсе тәғәм ризыҡ, тамсы һыу йотторманылар. Әжәлем ошолор, тип йәшәүҙән төңөлөп тә бөткәйнем инде...

— Бәдбәхеттәр! — тине Биксәнтәй, оторо тәьҫирләнеп. — Үҙҙәрен шулай итергә ине!

— Йылайырҙа бер аҙ тотҡас, ары алып киттеләр, — тип тынысլана төшкән Әхмәтйән һүҙен дауам итте. — Ҡола яланға сыҡҡас, ҡасып китә алмаҫыма тамам ышанған Тимашев аяҡ-ҡулымдағы быҒауҙарҙы һалдырып, билемдән арба терәгенә бәйләргә ҡушты. Ошонан һуң күпкә еңелерәк булып ҡалды. Китеп барышлай үҙемде Яманҡалаға алып барғандарын белә алдым. Оҙон юл буйына Тимаш мине үҙенең әғүәсеһе[221] итергә, "верный" булырға өгөтләп, үҙ яғына ауҙарырға маташты, туҙ бит! Ә мин ҡаршылашҡан һайын ҡыйнарға бойорҙо. Шулай ҙа ризалығымды барыбер ала алманы.

— Ҡанһыҙ йәлләд! — Йөҙөн сырылтҡан Биксәнтәй нығ өҙгөләнде, әйтерһең дә, тота килеп үҙен туҡмап яталар. – Оятын юғалтҡан әҙәм аҡтығы! Тфү!

— Яманҡалаға еткәс, ҡулдарыма яңынан сынйыр һалдылар ҙа, диуарға беркетелгән көйө, таш зинданға ябып ҡуйҙылар. Хас та эт инде! — Әхмәтйән ярһый барыуын баҫмаҡ өсөн ҡымыҙ йотто. — Тулап тартҡылаша торғас, беләктәрем, балтырҙарым сейләнеп бөттө, шайтанашығым һөйәгенә ҡәҙәр тишелеп сыҡты. Барыбер ихтыярымды һындыра ла, һатып та ала алманы Тимашев. Шулай нужа һурпаһы һемереп ятҡанда, осраҡлы ғына бер паша[222] күҙенә салындым. Миңә әле ун биш тә тулмағанлығын белеп ҡалған уҫал түрә: "Нимә, подполковник, инде малай-шалай менән көрмәкләшәһе ҡалдымы, оятың ҡайҙа?!" — тип Тимашты беште генә. Ҡайтарып ебәрерме тип, башта ҡыуанғайным, әммә яңылыштым. Ҡыланышы яһалма булды, шәт, янаралдың, ҡайтарманы.

Бүгәстең башын өҙә сапҡандары, Салауатты ҡот осҡос язалауҙары тураһында һөйләнеләр, башҡа бағиҙарҙы үлемесле итеп ғазаплағандарын күрһәтеп алып йөрөнөләр. Муйынынан аҫып ҡуйылған, ырғаҡлы дарға эленеүҙән ҡабырғалары аҡтарылып сыҡҡан, осло бағаналарға ултыртылып йән бирә алмай интеккән, түҙеп торғоһоҙ ауыртыныуҙан күҙҙәре атылып сығырҙай булып аҡайып, үлем ғазабы кисергән йәп-йәш егеттәрҙе, сал сәсле ҡарттарҙы күреп һаташа инем, хатта ауырыуға һабыштым. Бер заман ҡәсүәттән[223] үлер хәлгә еттем. "Һинең менән дә ана шулай булыр, мәгәр ризалашмаһаң..." – тип янайҙар ине. Ләкин осһоҙло ярлыҡауҙан баш тартыр көс таптым, алдарында теҙ

221 Әғүәсе — ошаҡ еткереүсе, ҡотҡосо.
222 Паша — генерал.
223 Ҡәсүәт — һағыныу, зарығыу.

сүгеп арзу ҡылманым, мөртәтлектән әжәлде артығыраҡ күрҙем. Ғүмерлек баструк менән ҡурҡытып ҡаранылар — бирелмәнем.

Терәпес үҙһүҙлегемде күреп иҫе киткән паша йәнемде алырға ҡыҙғанды шикелле: “Шәп һалдат сығасаҡ үҙенән”, — тип рекрутҡа бирергә ҡушты. Ә Тимашев кесе әфисәрҙәренә: “Ғүмеренең ахырынаса көн күрһәтмәгеҙ был башҡортҡа!” — тип бойорҙо аҙаҡ.

Фани донъяла иһә аҙмы-күпме булһа ла ғәҙеллек бар икән: бәхетемә, яҡшы командирға тап булдым. Йәшәйешем һиҙелерлек еңеләйә төштө. Һуңғараҡ Тимашевтың үҙен, башһыҙлығы арҡаһында ҙур сиреүҙе юғалтып, экспедиция барышында башбаштаҡлыҡ ҡылғаны, ҡушылғанды урын-еренә еткереп үтәмәгәне өсөн отставкаға сығарғандарын ишеттем. Званиеһынан мәхрүм ителеп, хәбесханаға ябылыуҙан Миргородский ғына ҡотҡарып ҡалған, тинеләр.

Рекруттан ҡотолоу маҡсатында, бер нисә тапҡыр төрөк һуғышына ебәреүҙәрен һорап мөрәжәғәт ҡылдым. Ебәрмәнеләр, күрәһең, ышанманылар. Төрөктәр яғына ҡасып сығыр, тип шикләнгәндәрҙер инде. Өс йылдан һуң кордон хеҙмәтенә, Рәсәй сиктәрен һаҡларға ҡуйҙылар. Күреп тораһың: сотник дәрәжәһенә күтәрелергә яҙҙы. Бына шуны раҫлаған бетеү.

— Йөҙ башы, тимәк. — Ишеткәндәренән албырғап, һушын йыя алмаған Биксәнтәй инде һоҡланыуын йәшерә алманы. Әхмәтйән һонған ҡағыҙ киҫәген ҡулына алып, күҙ йүгертте. — Шәп тә баһаң, ә! Һәр кемгә лә ошолай йөҙ башлығы булырға насип итмәй ул. Башҡорттоң исемен һатмағанһың. Бигерәк тә түңгәүер башҡортоноң бәҫен төшөрмәгәнһең, мәрҙәс!

— Миҙал да бирҙеләр хатта! — Сотник түш кеҫәһенән ялтырауыҡ васита[224] килтереп сығарҙы. — Бына, тәре булғанға күрә таҡмайым, кеҫәлә генә йөрөтәм. Түшкә ҡаҙарға, нисектер, тән тартмай.

Көмөш тәрене ҡулына алған Биксәнтәй уны баш бармағы менән һыйпаштырып ҡараны ла:

— Матур ғына икән,— тип үҙ баһаһын сығарҙы.

— Матур ҙа ул... Шулай ҙа тәре — тәре инде. — Әхмәтйән миҙалды кеҫәһенә ҡабат йәшерҙе. — Ташлап китергә лә уҡталғайным, кире уйланым, ятһын әле, бер йәдкәр булыр, тинем.

— Ниңә ташларға ти? Бер теймәһә кәрәге, бер тейер, ашарға һорамай.

— Ә дүкәмитендә нишләп Әхмәт тип яҙылған? — тип ҡыҙыҡһынды Биксәнтәй.

— Рекрутҡа алған мәлдә писарҙары исемемде тулыһынса яҙырға ҡыйынһынып ултырҙы ла “Ахмет” тигән дә ҡуйған. Минең исемдең урыҫсаһы, ысынлап та, яҙыу өсөн әллә нисегерәк шул: Ахметжан тиһәң, ҡаҙаҡса һымаҡ, Ахметьян тигәндә урыҫтың теле һыныр. Унан хеҙмәттәштәрем дә, аҙаҡ кордондағы казактар ҙа Ахметка тип йөрөттөләр. Нишләйһең, күнегелде.

— Казактар әллә нәмә тиһен, һинең мулла ҡушҡан исемең бар, — тине Биксәнтәй етди итеп. — Кафыр ыңғайына кафыр булып, үҙ белдегең менән исемшәрифеңде үҙгәртеү — килешмәгән эш.

— Һуң, ауылдаштарым өсөн мин бит барыбер Әхмәтйән булып ҡалдым, Биксәнтәй ағай! Төкөр шул кафырҙарға!

— Аныһы шулай инде...

— Ни сәбәптән бөтөн ауылға барлығы өс кенә өй тороп ҡалған һуң? — Әхмәтйән баянан бирле телен ҡыҫыҡан һорауҙы бирҙе. — Башҡа кеше ҡайҙа булып бөткән?

[224] *Васита — батша хөкүмәтенең хәрби наградаһы.*

— Башҡалар теге мәл караттарҙан йәшеренеп торған яңы урында төпләнде. Ул ауыл хәҙер Бишҡайын исемен йөрөтә. Ҡолоҡас мулла, ҡәһәрләнгән ергә киренән ҡайтып нигеҙ ҡороу оҡшамаҫ, тигәс, шунда ҡалды ла ҡуйҙылар. Үҙем дә ныҡышып торманым. — Байҙың ҡашы йәмерәйеп, сырайы ҡомһарылды. — Миңә лә әйтте Ҡолоҡас ағай. Иҫкәртмәне түгел, иҫкәртте – тыңламаным. Тыңламаным һәм һерелегем арҡаһында үтә лә ҡиммәт хаҡ түләнем: ҡатыным менән ҡыҙымды юғалттым.

— Бишҡайында торһаң, әлеге хәл килеп сыҡмаҫ инеме?

— Кем белә...

Урынлашҡан ауыр тынлыҡты бер талай уйсанланып ултырған Әхмәтйән боҙҙо.

— Һин хаҡһың, Биксәнтәй ағай, — тине ул, осона биреп. — Халыҡты Һаҡмар буйындағы тыуған төйәгенә алып ҡайтыу кәрәк.

— Бар, күндереп ҡара!

— Ә миңә, ауылдың нәҡ элекке урынына ултырырға тимәгән дә баһаң. Ана, ике саҡрым самаһы түбәндәрәк һәләк ҡулай урын бар: үҙе матур, үҙе иркен.

— Йәйектүбә итәгеме?

— Эйе. Төҙөлөш өсөн ҡарағайы ла, башҡа ағасы ла бар. Ҡарағайморон ағасын әйтәм.

— Үҙемдең дә ул ергә күҙем төшөп йөрөй ҙә ул, — старшина ризалаша башлағандай әйтеп ҡуйҙы.

— Шулай булғастын, нимәһенә һуҙырға?!

Күҙ алдында күңеле күтәрелеп киткән Биксәнтәй артабан оҙаҡ ҡаршылашып торманы:

— Ҡәүемде йыйып кәңәшләшербеҙ, әләйһәң, — тип ауҙы ла төштө.

— Ҡасанға?

— Бер аҙ ял итеп, баш-күҙ ал да.

— Юҡ инде, хөрмәтле бай! Ял итеп ята торған мәлме? — Әхмәтйән урынынан һикереп торҙо. — Әйҙә, иртәгә үк!

— Хуп. Һинеке еңде...

***

— Атай! Беҙҙең ауылға бер шәп һалдат ҡайтты! — тип һөрән һалды йөрәкһеп килеп ингән Табылды. — Мине беләм, ти үҙе.

— Ниндәй һалдат тағы? Кит юҡты. — Көтөүҙән һуң әле генә инеп торған Ғәлимйән йөҙөн сирҙы: — Уф, арытты. Ҡана, булмаһа, сәй ҡайнатып ебәр, — тип урындыҡҡа ауҙы. — Ғәлийән ағаң күренмәйме әле?

— Иртәгә ҡайта бит ул. — Табылды атаһына үпкәләгәндәй ҡарап торҙо .— Әллә миңә ышанмайһың инде...

— Нимәгә? Һалдат тигәнеңәме? — Атай кеше, терһәгенә ҡалҡынып, ҡырын ятты. — Бик ышаныр инем дә, һуңғы осорҙа ауылдан әрмегә алынған кеше юҡ.

— Ысын, атай, антым-шантым, бына икмәк өҫтө! — Табылды өҙмәне лә ҡуйманы.

— Кем икән һуң ул? — Ғәлимйән инде аптырай төштө. — Башҡортмо үҙе? Әллә...

— Саф башҡорт! Исемен... Әхмәтйән тине.

— Әхмәтйән?! — Ғәлимйәндең күҙҙәре упайҙы. — Бының булыуы мөмкинме?.. Ҡайҙа ул?

— Биксәнтәй апаларға инеп китте.

Әле генә ғәмһеҙ ятҡан Ғәлимйән әлеге хәбәрҙән, күҙенә аҡ-ҡара күренмәйсә, сығып йүгерҙе. Юл ыңғайы Ҡотлобайға ла һуғылды. Барып ингәс тә, әйтер һүҙен әйтә алмай бер булып, этенеп-төртөндө:

— Ҡо... Ҡотлобай ағай, Әхмәтйән ҡайтҡан, имеш...

— Шаяртыуын шаярт, әммә самаһын бел. — Ҡарт йылҡысы, секрәйеп, йөҙ борҙо.

— Ана, минең малай әйтә! Биксәнтәй ағайҙарға инеп китте, ти! — Ғәлимйән баҙап торған Ҡотлобайҙың еңенән тартты. — Әйҙә, бара һалайыҡ!

Бай өйөнә икәүләшеп тыш та пыш килеп инделәр.

— Әссәләмәғәләйкүм! — Икеһе бер булып сәләм бирҙеләр.

— Оло ҡунаҡ килгән, тип ишеткәйнем, ағый, — тине Ғәлимйән, көтөлмәгән хәбәргә һаман ышанып етмәй. Ә Биксәнтәй, хуш күңелләнеп, инеүселәрҙе төп бүлмәгә әйҙәне:

— Әйҙүк, түрҙән уҙығыҙ! Хәбәрҙе раҫ ишеткәнһегеҙ. Алты йәшлек сәфәрҙән ҡайтһа, алтмыш йәшлек хәл белешер, ти, бик урынлы килеп индегеҙ әле, күршеләр!

Тауышҡа килеп сыҡҡан Әхмәтйән ауылдаштарын шунда уҡ сырамытып та алды.

— Әссәләмәғәләйкүм, Ҡотлобай апа! — Әүәл ул бабайҙың ҡаужыған кәүҙәһен ҡосағына йомарланы.— Шәпме, Ғәлимйән ағай! — тип тегеһенең дә арҡаһынан ҡаҡты.

— У-уһ, ҡайһылай һонторайып киткән, ә!

— Баһадир булған да ҡуйған!

— Һүҙ юҡ, егетең ғәйрәтле!

Һоҡтарын йәшерә алмаған Ҡотлобай менән Ғәлимйән ҡыуаныстарынан сабый ише ҡыланды.

Ә табын артында һүҙ айырата беректе. Иртәгә иртә менән ғаиләләрен алып, дөйөм йыйын ҡороу өсөн Бишҡайынға юлланырға килештеләр. Килеүселәр, кеше ялҡытып, оҙон-оҙаҡ ултырманы, нисек пәйҙә булғандар, шулай ҡапыл ғына сығып та киттеләр, сөнки ҡыҙыҡлы сәфәргә әҙерләнергә кәрәк.

— Йәш еңгәй кем була? — тип ҡыҙыҡһынды Әхмәтйән, ҡунаҡтарҙы оҙатҡас та. – Һәләк сымыры күренә...

— Йәш еңгәң — Бөрйән ҡыҙы, Иҙел буйҙарынан, исеме — Йәнбикә. – Биксәнтәй көрһөнөп ҡуйҙы. — Ғүмерем буйына, улым булһа ине, тип хыялландым. Шөкөр, бирҙе Хоҙай. Тик береһен бирһә, икенсеһен тартып алды... Гөлзәйнәп менән икебеҙҙең Гөлбикәнән башҡа балабыҙ булманы. Түлһеҙлегенән уңайһыҙланғандыр инде еңгәң, бахыр, икенсегә өйлән, тип өгөтләр ине. Ә мин тураһын әйттем: төрөк солтаны ҡошап, өйөмдә һәрәм[225] тотаһым килмәй, өйләнмәйем, тинем. Күп бисәлек – ул ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың кешелек дәрәжәһен кәмһетеүсе ғәмәл, тип уйлайым. Шулай ҙа яҙмыш барыбер үҙенекен итте. Маңлайыңа яҙылғанды күреп, кисермәйсә китмәйһең, ти бит, шуныһы хаҡтыр, ахыры.

— Ә минең әсәй?..

— Әсәйең мәрхүмә, һалҡын тейҙереп, үпкәһенән мандый алманы, үҙең беләһең. Бала ҡайғыһы, һине әйтәм инде, сирен аҙҙырҙы ғына. Һуңғы көнөнә ҡәҙәр өмөтләнеп көттө. Урамға сыҡһа, ике күҙе ауыл осонда булыр ине... Эй, бахырҡай...

[225] *Һәрәм — гарем.*

Әхмәтйән, өндәшмәй генә бер нөктәгә төбәлгән килеш, Биксәнтәй һөйләгәндәрҙе тыңлап ултырҙы. Ауыр ине уға, әммә һиҙҙермәне лә, хис-тойғоларын тышҡа сығара һалып та барманы.

“Әллә ҡасан уҡ ғәйеп булып, инде онотолоп та бөткән Әхмәтйән әрмеләрҙә йөрөп, сотник дәрәжәһендә көмөш миҙал тағып ҡайтҡан!” — Ошо һәләк йәһәт таралған һөйөнөс тулы хәбәр ҡырҡ биш өйлөк Бишҡайын ауылын тиҙ арала урап сыҡты. Кемдер шаҡ ҡатһа, кемдер ышанманы, өсөнсөләре иһә ҡыуанып бөтә алманы. Ошолары менән бер ҡатарҙан, көтөлмәгән яңылыҡты ишетеп, эстәре боша биргәндәр ҙә табылды...

Ҡәҙерле ҡунаҡ төшкән Ҡолоҡас мулла өйөнә шунда уҡ халыҡ тартыла башланы. Әхмәтйәнде күреп-белгән ихлас ир-ат ике ҡуллап күрешһә, ҡорҙаштары һоҡ-шатлығын йәшереп тормай ҡосаҡлашып, бер-береһенең арҡаһынан ҡаға-ҡаға мәртәбә һүҙҙәре әйтте. Тыйнаҡлыҡ һаҡлаған ҡатындар ситтән генә ҡарап һөйөндө һәм ирекһеҙҙән һығылып сыҡҡан күҙ йәштәрен һөрттө. Шуҡ малайҙар, ҡыҙ-ҡырҡын, ғәҙәттәгесә, аяҡ аҫтында буталышып, балаларға хас ҡыҙығыу менән ыҫпай кейем кейгән ут ҡарашлы сотникты күҙәтте.

Кәкре таяғына таянған йөҙйәшәр Аҡбикә әбей ҙә ашығып килеп етте шул арала.

— О-о, Аҡбикә өләсәй! — Әхмәтйән уны шарҙыуанланып ҡосағына алды. — Һауығынамы, ил инәһе!

— Үҙең имен-һау йөрөп ҡайттыңмы, балаҡай? — Әбей егеттең арҡаһынан һыйпаштырып ҡуйҙы. — Әйткән инем бит мин һеҙгә, иҫән-һау ул, бер ҡайтып төшөр әле, тип, күрҙегеҙме инде? — Яйын килтергән ҡарсыҡ борсаҡ ярып алырға ла тартынманы. Һуңынан, тешһеҙ ауыҙын ҡымтып, кеткелдәгән булды. — Шәп әле өләсәң, шөкөр. Кәлтер-көлтөр булһа ла, үлмәйем дә ҡалмайым тип, йөрөп ятҡан булам шунда.

— Шулай кәрәк, өләсәй. Әжәлгә үс итеп, әйҙә, йәшә лә йәшә, һис бирешмә!

— Йәрингә туҡһанды тултырам инде, балам. Иншалла, ғүмерҙе йәлләмәне Хоҙа.

Бөгөн мәрәкә уйын-көлкө лә, һағыныу һүҙҙәре ҡатыш шатлыҡ йәштәре лә, ошо көндө күрергә насип итмәгәндәрҙе иҫкә төшөрөп китеүҙән шәмәрешеп алыуҙар ҙа булды. Әле килеп, ир-аттың күҙ йәштәрен дә бер кем ғәйеп итмәне.

Көтөлмәгән осрашыу шауҡымынан әҫәрләнеп китеп алҡынған кешеләр бер аҙ тынысланып, шау-шыу баҫыла төшкәндән һуң һүҙ алған Биксәнтәй:

— Ағай-эне! Күреп тораһығыҙ: уйламағанда өҫтөбөҙгә оло ҡыуаныс, ғәжәп бәхет емерелеп төштө. Эйе, йәшәйеш тигәнең тотош ҡара һыҙат, ҡайғы-һағыштарҙан ғына тормай икән. Бөгөнгө көн ошоноң асыҡ миҫалы. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙмайынса, шуны әйтмәксемен: байрам булғас, булһын ул, туғандар, әйҙәгеҙ, сәхрәгә сығайыҡ та ял итеп, уйнап-көлөп, шул ыңғайы кәңәш тә ҡороп бер ултырайыҡ. Дөрөҫ, әлегә ер еүешерәк, шулай ҙа, ошо тәҡдимгә ҡаршы килмәҫһегеҙ, тип уйлайым. Көндөң бындайы гелән булып тормай, — тип ҡыҫҡа ғына, ләкин һәммәһе бер булып ҡабул иткән телмәр тотто. Эйе, халыҡ уның әйткәндәрен дәррәү күтәреп алды.

— Хаҡ әйтәһең, старшина!

— Һүҙеңә ҡеүәт! Ҡор йыйып алыу кәрәк!

— Һуңғы тапҡыр ҡасан йыйылғанды ла онотоп барабыҙ, юғиһә!

— Тырым-тырағай йәшәп тик ятабыҙ ҙа баһаң!

Ғәмдең баҫылғанын сабыр ғына көтөп алған Биксәнтәй, йәш сағындағыса, уң

ҡулын күтәрә биреп мәғәнәле ишара яһауға, тантана тулы тынлыҡ урынлашты.

— Йәмәғәт! Ана, юл ыңғайы ике ылау аш-һыу тейәп килгәнмен, күрәгәһе лә бар. Хәҙер генә, иң күрөн һайлап, берәй тайҙы боғаҙлағыҙ ҙа, ҡаҙан аҫыр урын әҙерләп, табын йәһәтләгеҙ. Шунан һуң барығыҙ ҙа тау түбәһенә йыйылырһығыҙ.

Йәштәргә ни әйтеүең көс: биш-алты егет шул әҙере бер йомро ғына тайҙы ҡороҡлай һалып, һуйып та ташланы. Ҡатындар эсәк-ҡарта тәрбиәләп, ҡаҙы-ял әҙерләне. Уңай, ышыҡ урын һайлап аҫҡаҡтар ҡағылды, оло ҡаҙандарҙы тултырып ит һалынды. Ихлас күңелдән һөйләшеп-күрешеп ултырыуға, уйын-көлкөгә һыуһап, ауырлыҡтарҙан әкәл сиккәсә әбеккән халыҡ оҙаҡ көттөрмәне, тиҙ арала тау түбәләсенә йыйылып та бөттө. Аптырарһың, уларҙың береһе лә, ауыҙын асып, буш ҡул менән килмәгән. Һәр кем үҙенә күрә күстәнәс, хәленсә ризыҡ-тәғәм төйнәп алған: кемдер – муйыл талҡаны, кемдер – емеш-еләк ҡағы менән киптерелгән үлән сәйе. Хәллерәктәре инде сейәле һары май, алаҫланған ҡорот, әжекәй килтергән. Тиктормаҫ малайҙар әллә ҡайһы арала услам-услам итеп йыуа йыя һалды. Муртай[226] менән ҡымыҙ, кәкәш[227] тултырып һәр төрлө тәм-том алғандар ҙа бар. Аҙ ғына баш-күҙ алып, иркенерәк һулай башлаған ауыл кешеһенең йомарт ҡунаҡсыллығына хайран ҡалырлыҡ. Һуңғы һынығы, аҡтыҡ усламы менән уртаҡлашырға әҙер ул. Үҙеңә ҡалмаһа-ҡалмаһын, әммә ошоноң ише йыйынға күстәнәсһеҙ барыу килешмәй, хатта яҙыҡ һанала.

Көн битенән урын һайлап, ҙур майҙанға һырмалы тула кейеҙҙәр менән ҡорама юрғандар түшәлде. Килен-киштә, ҡыҙ-ҡырҡын ҡаҙан янында булашҡанда, олораҡтар әлеге кейеҙҙәр өҫтөндә ҡулайлап урын алды ла, бер-береһен байтаҡ ваҡыт күрмәй торғандай, теремек әңгәмә ҡорҙо. Күңелдәре булған кешеләр ябай ғына мәрәкәнән дә ҡыҙыҡ табып көлөштө, һәм барыһын да күтәренке кәйеф солғап алды.

Батырхан, Ҡолоҡас мулла, Әхмәтйәндәр менән бер ситтәрәк һүҙ беректергән Биксәнтәй, күпселек кешенең килеп бөтөүен күреп, халыҡ алдына сыҡты.

— Йәгеҙ, ҡәримдәштәр, бер аҙға тынысланайыҡ, — тип йөҙөнән нур сәсте. — Табын өлгөргәнсе һөйләшә торайыҡ. Хөрмәтле үә һиммәтле ағай-эне, апай-һеңлеләр! — Ауылдаштарын күҙҙән үткәреп торған Биксәнтәй, башын юғары тотоп, йәшерен тантана менән мөрәжәғәт итте: — Мәғшүҡтәрем минең! Ошо рәүешле дан ҡор йыйып алырға күп тапҡыр ынтылдым, әммә бөгөнгәсә һис форсаты сыҡманы. Бына, ниһайәт, тип әйтәйемме, әллә уйламаған ерҙәнме, мөмкинселеге лә килеп тыуҙы, сәбәбе лә табылып тора. Эйе, йәл, нисәмә йылдар уҙғас ҡына бергә-бергә йыйыла алдыҡ. Бөгөн хәл ителәһе эштәрҙең барыһын уртаға һалып һөйләшәйек. Һүҙебеҙҙең берегеренә тәғәнем юҡ, ҡортобоҙ борон-борондан берҙәм булды, Аллаға шөкөр. Әле лә ата-бабаларыбыҙ уаҡыфына хыянат итеп, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтергәнебеҙ юҡ. Артабан да шулай була күрһен.

Ҡыҫҡа ғына ҡәләмемдең башында шуны әйткем килә, ҡәримдәштәр: тормош, йәшәйеш туҡталып тормай, ҡыйынлыҡ менән булһа ла байманлап[228] алға тәгәрәй. Ә беҙ, үҙебеҙ ҙә әғләм итмәҫтән, сауаплы ла, әҙнәби лә эштәр

---

[226]*Муртай — турһыҡтың бер төрө.*
[227]*Кәкәш — тире һауыт.*
[228]*Байманлап — аҡрынлап, йәйлап.*

башҡарабыҙ, сауаплы үә хөштөмһөҙ ҡылыҡтар ҡылабыҙ. Аңһыҙ рәүештә йә иһә сараһыҙҙан килеп сыҡкан гонаһ, йәмәғәт, ғәмәли сижжин әфтийәккә[229] яҙылмай, ти. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бындай эштәребеҙ мөмкин тиклем әҙерәк булһа ине. Күңел тарлығы менән аңлы боҙоҡлоҡтан Хаҡ Тәғәлә үҙе һаҡлаһын. Бер ҡатарҙан сауаплы әғмәлдәргә[230] этәреп, ғийллийүн[231] яҙмалары һәлмәгерәк тартһын.

– Амин.

– Әйткәнең килһен!

– Йәнә шуны еткермәксемен, — бай геү итеп ҡалған ғәмдең тыйыла биргәнен түҙем генә көтөп алды.— Һүҙҙәремдең әрәсәһенә төшөнәһегеҙҙер: бынан ун биш-ун алты йыл элек булып үткән ҡанлы сыуалыштарҙа ирекһеҙҙән, йәғни теләгебеҙҙән тыш, хөштөмһөҙ ғәмәлдәр ҡылып, кеше ғүмерен ҡыйырға тура килде. Дөрөҫөрәге, әлеге ҡәдәмгә шәп кешеләрбеҙ тип йөрөгән әсфәл зат мөртәттәр үҙҙәре мәжбүр итте. Тыуған төйәгебеҙ, еребеҙ-һыуыбыҙ, Уралыбыҙ тип күкрәгебеҙ менән торҙоҡ һәм баҫкынсыларҙы илебеҙ төпкөлдәренә үткәрмәнек. Күптәрегеҙ шаһит: ошо бәләкәй генә еңеү хаҡына күпме михнәт, юғалтыу кисерҙек, ыҙа сиктек, әммә ирек, азатлыҡ яулап күтәрелгән оло сиреүгә бар хәлебеҙсә иң терәшә алдыҡ. Иманым камил: ана шулар бәрәбәренә ирекһеҙҙән ҡылынған гонаһтарыбыҙҙы, яҙыҡ эштәребеҙҙе Аллаһы Тәғәлә, һис шикһеҙ, кисерер. Һәр хәлдә ошо өмөттә ҡалайыҡ. Был яғына ла, тағат[232] кәлимәһен ҡабатлай-ҡабатлай, Тәңребеҙгә һыйынып йәшәргә яҙһын.

— Шулай, шулай,—Ҡолоҡас Биксәнтәйҙең һүҙҙәрен йөпләп ебәрҙе, ә тегеһе, йөрәкһеүҙән ирәйә биреп, дауам итте:

— Ваҡыт тигәнең үтә, унең менән бергә беҙ ҙә ҡартайып, мөсһөҙләнә барабыҙ. Ни аралалыр зөрриәттәр үҫеп етһә, үҫмерҙәр егет ҡорона инә, ә егеттәребеҙ ғәййәр иргә әйләнә. Унан... Унан инде, әйткәнемсә, теләйһеңме, юҡмы, әлеге шул кәрһеҙ ҡартлыҡ баҫа. Шуның өсөн үҙ хәлеңде белеп, ваҡытында йәштәргә юл, һәләттәрен күрһәтергә мөмкинселек бирергә кәрәк, тиеүем. Күп йыл рәттән старшиналыҡ вазифаһын ышанып тапшырыуығыҙ, хәтәр мәлдәрҙә һынатмай, терәк-таяныс булыуығыҙ өсөн барығыҙға ла бөтмәҫ рәхмәтлемен һәм инде миңә, оло кешегә, әүҙемлек ахыры килеп еткәндер, тигән уйҙамын. Күреп тораһығыҙ: әле хәл самалыраҡ, дарман да етеңкерәмәй, ҡәлб тә инде элекке түгел. Шуға күрә бөгөн, ошо мәртәбәле ҡор алдында, мине был вазифанан азат итеүегеҙҙе һорайым. Юҡ, һорамайым, ә үтенәм...

Һүҙ мантығына ҡапылғара төшөнөп етмәгәнлектән тын ҡалған кешеләр, ғәжәпһенеп, бер-береһенә ҡарашты.

— Нимә һөйләйһең һин, Биксәнтәй ағай, ә? — Иң әүәл һушына килгән Аҡсура ултырған урынынан һикереп торҙо.

— Юҡ, юҡ, уйлама ла! — Байғазы, һәр ваҡыттағыса, ҡушағаһын яҡлашырға тотондо.

— Һинһеҙ ҡалай итербеҙ?

— Хәлең етәрлек әле, Биксәнтәй ағай! Бөлөнөп торма, килешмәй.

— Башҡаса кем бар? Юҡты һөйләйһең...

Ошоға тиклем баҫалҡы ғына тыңлап ултырған әһел, ризаһыҙлыҡ белдереп,

---

*[229] Ғәмәли сижжин әфтийәк — яманлыҡтар яҙылған китап.*
*[230]Әғмәл — ғәмәл.*
*[231] Ғийллийүн — изгелектәр яҙылған китап.*
*[232]Тағат — доғалыҡ мәғәнәһендә.*

гөж килде. Биксәнтәй Юламанов старшиналыҡ иткән осорҙа ырыуҙаштарының уға тәү тапҡыр ҡаршы сығып, һүҙен инҡар итеүҙәре ине. Әммә ыжлап та бирмәгән бай, мыйыҡ аҫтынан көләмһерәй биреп, күмәк тауыштың баҫылыуынан һуң:

— Йә, әйтеп бөттөгөҙмө инде? — тине лә хәйләкәр йылмайып ебәрҙе. — Күмәкләп һөйләгәсегеҙ ни, ишетмәнем дә, аңламаным да. Әллә инде ҡолаҡҡа ҡата барыуым ошо...

— Шилмалама, Биксәнтәй! — тип ярһыны кемдер. Башҡалары ошонан мәрәкә табып көлөштө.

— Һине азат ҡылып, лайыҡлы кеше табырбыҙмы башҡаса? — Ғәлимйән иларға етешкән малайға оҡшап ҡалған ине.

— Бар ундай кеше! — Ҡарашы етдиләнеп киткән Биксәнтәй шул урында өҙә һуҡты ла, һәлмәк баҫып, Әхмәтйән ҡаршыһына барҙы. Уның беләгенән тотоп, ғәм ҡаршыһына алып сыҡты. — Бына ул! Һеҙҙең алда. Кем әйтә алыр ошо ир-уҙаманын, лайыҡ түгел, тип?!

Гөж килгән халыҡ ҡапыл шым булды.

Эштең ошолай көтөлмәгән боролош алыуынан ҡаушап төшкән Әхмәтйән, күрәһең, башҡаса һүҙ таба алмайса:

— Минән ниндәй старшина сыҡһын инде? — тигән булды.

— Һинәнме? Һинән шәп старшина сығасаҡ, йөҙ башы! – Биксәнтәй үҙенекендә ныҡ торҙо.— Нимә, һаман мине, ҡомо ҡойолоп бөткән бер ҡаужыйҙы, екмәксеһеңме? Оятың ҡайҙа? — тине, уйынлы-ысынлы итеп.

— Юҡ та. Минән башҡа... Олораҡтар бар бит әле, тип әйтмәксемен... Тәжрибәм юҡ, эште белеп бөтмәҫмен...

— Йопан[233] булмаһаң, тәжрибә ваҡыты менән үҙе килер. Донъя көтмәй — таҫыл ҡунмай. Белмәгән ереңдә өйрәтербеҙ, кәңәш бирербеҙ. Иң әүәл – теләк, ынтылыш кәрәк. Шулай түгелме, мөхтәрәм ағай-эне? Хәнифме[234] әйткәнем? — Биксәнтәй аяҡ терәп ныҡышты.

Һаман да ни уйлап, нимә әйтергә белмәгән кәүем аптырауҙан бер Биксәнтәйгә, бер Әхмәтйәнгә ҡарап торҙо.

— Әллә инде... — Ошо мәл шымтая ҡалған әһел араһынан Аҡбикә әбейҙең икеләнеү ҡатыш ышанысһыҙ тауышы ишетелде. Ҡатын-ҡыҙҙың әүәлдән ирҙәр һүҙенә ҡыҫылырға хаҡы булмағанлыҡтан, барыһы ла уға боролоп ҡарай һалды.

— Йә, башлағаныңды әйтеп бөтөр, Аҡбикә апай. — Старшина, хуш күңелләнеп, уға һүҙ ирке бирҙе. Был иғтибар ҡарсыҡҡа өләшләтә ирҙәр хоҡуғы биреүҙе аңлата ине, һәм Аҡбикә әбей дауам итте:

— Әллә, тиеүем шуға, балаҡайҙар... Мәйтәм, бөтөнләйгә ҡайтҡанмы Әхмәтйән улыбыҙ, хеҙмәтенә тағы китеп бармаҫмы?

— Әлбиттә, бөтөнләйгә! — Биксәнтәй инде ҡанатланып китте. — Башҡаса бер яҡҡа ла китмәй ул, ауылда ҡаласаҡ.

— Шулаймы, улым? — Аҡбикә, старшина һүҙенә ышанмағандай, ҡабатлап һораны.

— Эйе, шулай, өләсәй. Сит ерҙәрҙә ҡыҙырасланып, йәбер-золом кисерә-кисерә, алғыһауҙан тыуған-яҡтарҙы бер күрер өсөн ымһынып үҙ-үҙенде бөтөрә йөрөү ныҡ екһетте. — Булды яуап.

---

[233] *Йопан — үшән, ялҡау.*

[234] *Хәниф — хаҡ, дөрөҫ.*

— Ә ниңә, улыбыҙ үәҡиф[235] кенә, ҡәбилиәте[236] лә етәрлек. Әсәһе мәрхүмә ише уаҡай[237] ҙа икән. Ҙур булмаған ырыуыбыҙға етәкселек итерлек азамат, тип уйлайым. — Ошоғаса өндәшмәй торған Батырхан да үҙ һүҙен әйтте. — Мин риза.

— Хәрби эштә булдырыр инем дә ул... — тип икеләнде Әхмәтйән.

— Йә ярай, кәйкәнләп торма. Беләбеҙ бит һине, тыныс эштә лә һынатмаҫһың, — тине Ғәлимйән. — Ризалаш, кем... тәүәккәлләгән – таш йотҡан...

— Тауышҡа ҡуяйыҡ, тауышҡа! — тип ҡысҡырҙы аранан кемдер. Шулай итеп, Биксәнтәй тәҡдимен яҡлаусылар артҡандан-арта барҙы.

— Белмәгәнеңде өйрәтә торған йолаһы бар, ҡустым.

— Миннәт[238] күрһәтербеҙ, ҡурҡма.

— Бер кем дә күсәм малик[239] булып тыумай.

— Анауындай ғазилыҡ алып ҡайтҡанында ыстаршинаһы нимә ул!

— Эйе, эйе, кем дөрөҫ әйтә, тауышҡа ҡуяйыҡ!

Кемдең нимә һөйләгәнен дә айырып булмаған шау-шыуҙы юрый тыймай торған Биксәнтәй, Әхмәтйәнгә ҡарап, ауыҙ сите менән генә йылмайғандай итте.

— Тауышҡа икән, тауышҡа...

Шулай әйтеүе булды, көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты. Хатта ки әшәк тирәһендә сыр-сыу килеп һәр төрлө уйын менән мауыҡҡан бала-сағаға хәтлем тынып ҡалды. Алҡыныуҙан кинәт быуындары бушап, кәлдәге тегеләй-былай йөрөштөрә ҡуйған Әхмәтйәндең йөрәге, күкрәк ситлеген емереп сығырҙай булып, дарҫылдарға тотондо.

—...Кем дә кем... — Биксәнтәй ошо урында юрый туҡталып торҙо, әйтерһең дә, Әхмәтйәндең түҙемлеген һынай ине. Ул утыҙ йылдан ашыу старшиналыҡ иткән дәүерендә таяныс-терәге, кәрәк сағында яҡлаусыһы ла, өйрәтеүсеһе лә булған ҡәүеменә ышаныс тулы ҡараш ташланы. Йөҙәрләгән күҙҙәр, ана, аптырай биреп тә, өмөт бағлап та уға текәлгән. “Ни өсөн баш тартаһың, әллә беҙҙән ялыҡтың дамы?”, “Дөрөҫ эшләйһең, старшина, ваҡытында китә белеү кәрәк”, “Дәрәжәңә йәбешеп ятмауың һәйбәт”, “Йәштәргә юл бирә белеү лазым”, — ти ине ул күҙҙәр.

— ...Кем дә кем Түңгәүер олоҫо старшинаһы итеп сотник Әхмәтйән Өмөтбаевты һайлайбыҙ, ти...

Йыйындағылар, барыһы бер булып, әүҙем ҡул күтәрҙе, ҡаршылар табылманы.

— Ҡотлайбыҙ үҙеңде! — Биксәнтәй яңы старшинаның ҡулдарын ҡыҫты. — Ҡәүем менән килешеп, имен-аман ғына эшләргә яҙһын.

— Рәхмәт, ағый!

— Йолаға ярашлы, старшиналыҡ ҡәмәре[240] менән миҙалын һәм дә мисәтте бөтә халыҡ алдында үҙ ҡулдарыңа тапшырам, рәхим итеп ҡабул ҡыл. — Биксәнтәй һәр төрлө таштар менән биҙәлгән яҫы ҡайыш билғауҙы Әхмәтйәндең – биленә, көмөш пайса-миҙалды күкрәгенә таҡты, айырым ҡәҙер менән

[235] *Үәҡиф — белемле.*
[236] *Ҡәбилиәт — һәләт.*
[237] *Уаҡай — төпсөр, ныҡыш.*
[238] *Миннәт — ярҙам.*
[239] *Күсәм малик — хужа, етәксе.*
[240] *Ҡәмәр — билғау.*

ебәккә төрөлөп, туҙ ҡурыпҡа һалынған мисәтте ҡулына тотторҙо. — Бына, миҙалың инде икәү булды, — тип үҙе шул арала шаяртып алырға ла өлгөрҙө.

— Рәхмәт. Рәхмәт барығыҙға ла, бындайын мин һис көтмәгәйнем, – Әхмәтйән ахыр сиккә етеп йөрәкһене.

— Йә, хәҙер, әлеге шул йола ҡушҡанса, ҡәүемгә тәүге һүҙеңде әйт.

Ауылдаштарының күмәк ихтыярына буйһоноуҙан башҡа сараһы ҡалмаған Әхмәтйән, ҡапылғара ҡаушай ҡалып, һүҙҙе ниҙән башларға белмәй аптыранды:

— Нимә әйтәйем икән һуң, яҡташтар... – тип юғалыбыраҡ торҙо.

— Нимә уйлайһың — шуны әйт, — Биксәнтәй тыныс ине. — Яһалма, ярамһаҡ һүҙҙәр кәрәкмәҫ...

— Бөгөнгө ҙур йыйындың ҡарары минең өсөн шундай көтөлмәгән булды. Ике ятып бер төшөмә керһәсе... Кисә миңә, иртәгәнән олоҫ старшинаһы булаһың, тиһәләр, һис ышанмаҫ инем...

— Ә беҙ белеп торған тип уйлайһыңмы? — Ғәлимйән фекерен мәрәкәгә борҙо.

— Күрһәткән ышаныс-хөрмәтегеҙ, шул дәрәжәгә еткереп ололауығыҙ өсөн рәхмәттән башҡа ни әйтәйем икән, ауылдаштарым, ғәзиздәрем! — Әхмәтйәндең теле асылды. — Иң күтәрмәҫ ауырлыҡтар менән ғәйәт ҙур юғалтыуҙар аша үтеп тә рух ныҡлығы һаҡлап ҡала алыуығыҙ өсөн, башҡорт ҡәүеменең исемен һатмағанығыҙ өсөн алдығыҙҙа баш эйәм. Ҡыйынлыҡтарға, юҡсыллыҡҡа бағынып бер-берегеҙҙән йөҙ бормай, тыуған төйәгебеҙҙе етемһерәтеп тырым-тырағай китеп бөтмәгәнегеҙ, ауылдың исемен дә, нигеҙен дә һаҡлап ҡалыуығыҙ өсөн дан-шөһрәт үҙегеҙгә! Шулай уҡ, күпме ғүмер үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, мине, ябай бер улығыҙҙы, онотмағанығыҙ, ә әсәйем мәрхүмәне ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, ер ҡуйынына тапшырыуығыҙ өсөн дә рәхмәтем бөткөһөҙ. Ауыҙ-морономдан ҡан китһә китер — ышанысығыҙҙы аҡларға була барыһын да эшләрмен, ҡәҙерлеләрем минең! Ҡыуаныс-шатлыҡтарҙы бүлешәбүлешә, ауырлыҡтарҙа иң терәшеп, бергә-бергә йәшәргә яҙһын!

Мөкиббән тыңлап ултырған кешеләр, бөтәһе бер юлы аяғүрә баҫып, яңы старшинаны алҡышланы.

— Шәп һөйләй, дуңғыҙың!

— Теле шыма, әйтмә лә!

— Торғаны бер ғази инде!..

Күмәк тауыш араһынан ошолар ише тәбрик һүҙҙәре айырым-асыҡ ишетелеп ҡалды. Ҡайһыһы ҡулын ҡыҫып, бәғзе бере яурынынан ҡаға-ҡаға Әхмәтйәнде ҡотлаһа, киләсәккә уға уңыштар, бәхет теләп дәртләндереүселәр ҙә табылды.

Умарта ҡортолай гөж килгән халыҡ тынысланып, тауыш баҫыла төшкән бер мәлдә Ҡолоҡас мулла һүҙ алды.

— Хөрмәтле ауылдаштар, мөхтәрәм мосолмандар! — тип башланы ул йышылған тел менән. — Мына, беребеҙ ҙә уйламағанда ғына, көс-дәрте ташып торған йәш старшиналы булдыҡ. Түрәләр ул мөҙҙәте еткәс тә, етмәҫ борон да алышына, бер кем дә мәңгелек түгел. Бары халайыҡ ҡына мәңгелек. Иң мөһиме шул: илгә именлек, йорт-ҡортҡа солох, бәндәләренә йән тыныслығы, тән сәләмәтлеге насип итһен, йә Хоҙа.

— Амин... — Сыбар тауышлы ғәм мулла һүҙҙәренә ҡеүәт бирҙе.

—...Илем-ерем тип шәһит китеп баш һалған яҡташтарыбыҙҙы, йәмиғил әруахтарыбыҙҙы онота күрмәйек. Бары аят-доғаға өмөт итеп ятҡандарҙың

рухтарына изге ғәмәлдәребеҙҙе бағышлап торайыҡ. Мәрхүмдәребеҙҙең һуңғы – мәңгелек – төйәктәрен беләйек, уларға һәр ваҡыт зыярат ҡылып, тәскир итәйек[241]. Тереләребеҙҙең: туған-тыумаса, ата-әсәбеҙҙең ҡәҙерен белеп, бер-беребеҙгә хәлебеҙҙән килгән тиклем ҡәҙер-хөрмәт күрһәтәйек. Ниәттәребеҙҙе паклыҡ, әғмәлдәребеҙҙе сафлыҡ, мәғшиәтебеҙҙе инсафлыҡ ташламаһын. Амин!

— Амин...

— Амин...

— ...Тәндәребеҙ тәмиз[242], йәндәребеҙ изге булһын...

— Амин, шулай булһын...

— Аллаһүммә-ә бәлиғ сәүәбә-ә мә-ә күри-и... — Ҡолоҡас мулла, ҡуш усына текәлгән көйө, күренеп торған кинәнес менән күҙҙәрен ҡыҫа төштө лә оҙон ғына доға уҡып ташланы: — *Әлхәмдуллиләһи ғәлә күлли хәли-иң, фә-ә иннәһү мухәүиллүл-әхүүәл. Раббәнә әтинә-ә...* — Әүәл битен, һуңынан кәзә һаҡалын һыпырып бата ҡылды. Ҡалғандар, һәммәһе бер төптән, уға эйәрҙе.

— ...Ошбу аят-доғаларыбыҙ ҡыямат көнөндә үҙебеҙҙе ҡаршы алыр нурянғыл[243] булып тамуҡ утынан һаҡлаһа ине. Амин.

— Амин...

— ...Эй, Раббым мәүләм, Аллаһы сөбхәнә үә тәғәлә именлегенән, сәләмәтлегенән, киң ризыҡтарынан, ләззәтле тәғәмдәренән, хәләл малдарынан мәхрүм итмәһә ине. Бала-сағаларыбыҙҙың көсөн, шатлыҡ-ҡыуанысы менән изгелеген күрергә насип ит. Амин.

— Амин...

— Әхмәтйән улым, тәүфиҡлы, тәҡүәле үә киң күңелле башлыҡ бул. Ҡул аҫтындағыларға ҡарата һәр саҡ ғәҙел игелек, миһырбанлыҡ ҡылып йәшә. Ауыр саҡтарҙа халҡыңа таяныс бул, үҙең дә таянырһың. Белгән-белмәгәнеңдә халыҡ менән кәңәшләшеп башҡар. Амин.

— Амин...

— Амин...

— *Раббәнәғ-фирли үә ли үәлидәййә үә лил-мүьмининә-ә йәүмә йәҡүмүл хисаб.*

Мулланың ихлас теләктәрен ҡеүәтләп йәнә бата ҡылдылар.

— Амин, әйткәнең килһен...

— Шулай була күрһен.

Ҡаҙан тирәһендә булашыуҙан сикә остары ялҡынһынып, һылыуланып киткән килендәрҙең береһе, йыйын урынына етәрәк, йөҙөн яулыҡ осо менән ышыҡланы ла шыпырт ҡына байбисә янына килде, ҡолағына эйелә биреп ниҙер шыбырланы. Уныһы килен үтенесен, үҙ сиратында, Биксәнтәйгә еткерҙе. Ә уныһы, ризалыҡ йөҙөнән беленер-беленмәҫ кенә баш ҡаҡҡандан һуң, оло ҡәнәғәтлек менән дөйөм ҡыуанысҡа сабыр ғына ҡарап ултырҙы. Һуңғы йылдарҙа тәү тапҡыр ыңғай хис-кисерештәргә бирелеүҙән күҙ алдында йәшәреп киткәндәй күренгән ауыл байының ҡараштары элеккесә оҫҡонланып, хәрәкәттәре еңеләйҙе.

— Мөхтәрәм өммәт! — Оҙағыраҡҡа һуҙылған алҡышлауҙарҙы туҡтатырға була аяғүрә баҫҡан Биксәнтәй ғәҙәти ҡул ишараһы яһаны. Ил ағаһын һүҙһеҙ ҙә төшөнөп өйрәнгән кешеләр, шул әҙере тынысланып, урындарына

[241] *Тәскир итеү — иҫкә алыу, хәтерләү.*
[242] *Тәмиз — таҙа, саф.*
[243] *Янғыл — пәрҙә, шаршау.*

ултырышты. — Бәлки, әйтер һүҙҙәрегеҙ йә иһә теләктәрегеҙ барҙыр. Бар икән – әйтеп ҡалығыҙ.

— Миндә бар бер тәҡдим! — Батырхан, ултырып ҡала күрмәйем тигән һымаҡ, сос ҡына һикереп тора һалды ла ғәм алдына сығып баҫты. — Ағай-эне, шулай итеп, беҙ бер старшинабыҙҙы лайыҡлы ялға оҙатһаҡ, икенсеһен һайлап ҡуйҙыҡ. Ярай, хәйерлегә булһын, тип теләйек: батырға ла ял кәрәк. Уларҙың һәр икеһенә лә сәләмәтлек үә ғүмер насип итһен. Оҙатыуын оҙаттыҡ та ул Биксәнтәйҙе, тик бер нәмә эсте бошора: старшина Юламанов кисә бар ине, исем-шәрифе тирә-йүнгә яңғырап торҙо. Бөгөн килеп ул, мына, үҙе ултыра, ә шул уҡ ваҡытта ҡапыл ғына юҡҡа сыҡҡан һымаҡ була ла ҡуя түгелме? Үҙ дәүерендә ул атын оноттормаҫлыҡ, хәтерҙә оҙаҡ ҡалыр эштәр башҡарманымы ни? Изгелек ерҙә ятып ҡалырға тейеше түгел, ҡәрҙәштәр. Киләсәк быуындарға белек өсөн Биксәнтәй старшина исемен мәртәбә ҡылайыҡ, тейеүем, йәмәғәт.

Быңдайын инде бөтөнләй көтмәгән Биксәнтәй һағая төштө. Артабан ни булырын көткән башҡалар ҙа тынып ҡалды.

— Нисек итеп, тиһегеҙме? — Ауылдаштарының сабырлығын һынаған һымаҡ, Батырхан юрый һуҙҙы.

— Йә, үҙең? Үҙең ни тиерһең? — Аҡбикә әбей түҙмәне.

— Ә минең тәҡдим былай, ағай-эне: әйҙәгеҙ, ошо йәшәйешебеҙ ифрат ауыр, яҙмышыбыҙҙың киҫкен мәлдәрендә ҡосағына алып, ышыҡ биргән, дошман күҙенән ышаныслы йәшереп торған тауҙы... Биксәнтәй исеме менән мәңгеләштерәйек.

Батырхан һунарсы тәҡдимен бер һүҙһеҙ хуплаған халыҡ дыу килеп аяғүрә баҫты ла ҡул сабып алҡышланы.

— Батырхан ағайҙың да башы эшләп тора, әй!

— Ҡайһы ике арала гөман иткән тиерһең, кем!

— Зирәк ҡарт шайтан! Һай, шауҡымлы!

Батырхан исеменә ошондайыраҡ маҡтау һүҙҙәре яуҙы.

Шулай итеп, әле бая ғына атамаһыҙ торған түбә Биксәнтәй тауына әйләнеп, аныҡ исем алды.

— Ағай-эне, ит бешеп сыҡты, тип килендәр бая уҡ әйткәйне. Аш-һыу әҙер, әйҙәгеҙ, табынға рәхим итәйек. — Биксәнтәй һәр кем үҙенсә хәбәрен һөйләй-һөйләй, Батырхан отҡорлоғонан хайран китеп фекер алышҡан ауылдаштарын көскә тынысландыра алды.

Ҡор дөйөм булһа ла, борондан килгән йоланы боҙмаҫтан үә шәриғәт ҡанундарына хөрмәт йөҙөнән, ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙарға табын айырым әҙерләнде. Ҡайны-ҡайнағаларынан тартынып, һүҙ әйтеү түгел, хатта ҡалҡынып ҡарарға баҙнат итмәй ултырған килендәр иркен тын алды. Танау буйын рәхәтләндереп тирә-йүнгә таралған тәмле ит еҫен һиҙеп алған бәләкәс малай-ҡыҙҙарға тиклем уйындарын ташлай һалдылар ҙа, табын тирәһенә яҡынлашып, әсәләренә һыйындылар.

Аштан аҙаҡ алда торған йәшәйеш менән тормоштоң киләсәгенә ҡағылышлы лаҡаптар өҫтөнләк алды. Һуңынан һыуһынға тейеп торған әскелтем-татлы ҡымыҙ эстеләр. Турһыҡтар бушап өлгөрөүгә, хуш еҫле үлән сәйе лә ҡайнап сыҡты.

Тамағы туйып, һыуһыны ҡанған кешеләрҙең бермә-бер кәйефе күтәрелде. Ә күтәренке кәйеф бар ерҙә уйын-көлкөһөҙ ҙә, күңел асыуһыҙ ҙа булмай. Артыҡ инәлтмәй генә кемдер ҡурайҙа һыҙҙыра башлауға, уныһына ҡушылған

икенсеһе, елкенеп, таҡмаҡ әйтте, бәғзе берәүҙәре яңы морон төртөп килгән ыуыҙ үләнде иҙә баҫып оса-төшә бейергә тотондо. Ҡеүәтле күрәгәнән ауыҙ итеп, йөҙө ҡыҙара бүрткән Ҡотлобай үҙенең яратҡан йырын һуҙҙы:

*Өҫтәл дә аҫҡайҙары, шул, дүртәр ҙә аяҡ,*
*Өҫтәл өҫкәйҙәре, шул, тулы ла сынаяҡ,*
*Һай, кем, тулы ла сынаяҡ.*
*Беҙҙең дә былай гөрләшеп ултырғанды, шул,*
*Белә микән,*
*Күрә лә микән,*
*Ишетә лә микән, тимен мин, күрше тирә-яҡ.*

— Әһелә-ә-әйй! — Күмәк тауыш йырҙы күтәреп алды. Ҡатындар яғында ла йөрәккә ятышлы ғына аһәң тулы моң ишетелде:

*Йылтыр ғына йылтыр уттар яна,*
*Юлаусынан ҡалған бер күмер.*
*Ошолай ҙа беҙҙең ултырыуҙар*
*Үҙе генә булыр бер ғүмер.*

Ә, Йәнбикә еңгәй йырлай икән. Уның иҫ китмәле баҙыҡ, яғымлы, бар булмышыңды яулап алыр кәттә тауышынан моңайышҡан ҡатындар тынып ҡалған. Ҡатындар ғынамы, ана, көлләһө лә уй-хистәргә, һәр кем бер үҙенә генә билгеле кисерештәргә бирелгән. Йырҙың беренсе өлөшөн ослауға, тағы йырлауын һоранылар. Йылы һүҙҙәрҙән күңеле булған Йәнбикә, рухланып, дауам итте:

*Һыуҙың ғына буйы, ай, ҡуш тирәк,*
*Башҡынайын суҡламаҡ кәрәк.*
*Бал эскәндә кем йырламаҫ тиһең,*
*Сәй эскәндә йырламаҡ кәрәк.*

— Эй-йе шу-ул! Вәт әйтте!

— Һай-й, хаҡ һүҙҙәр, ә! — Ҡатындар, көлөшә-мәрәкәләшә, йәнә йырауҙы йөпләнеләр. Ә уныһы инде бөтөнләй асылып китте:

*Күрәгәһе йәмле, ҡымыҙы тәмле,*
*Нисәү икән һауған бейәһе?*
*Теләһә нисәү булһын бейәһе,*
*Иҫән булһын һауған эйәһе-е-еү.*

— Әһеләй-й!

— Бына, исмаһам, йырлай!

— Тауышты йәлләмәгән Хоҙай үҙенән!

Ул яҡтан да, был яҡтан да ишетелеп ҡалған хуплау һүҙҙәре йырауға ҡанат ҡуйып, нығыраҡ дәртләндерә бара...

Ошо тәбиғи ирәүәнлектән файҙаланып ҡалырға теләгәндәй, Биксәнтәй Әхмәтйәнде бер ситкәрәк, аулаҡҡа, саҡырҙы.

— Йә нисек, оҡшаймы? — тине эскерһеҙ кинәйә менән.

— Оҡшамай буламы һуң, Биксәнтәй ағай! Һаҡмарбаштар бит улар! — Әхмәтйән оторо ялҡынланып китте. — Үлгәндә лә ятып үлмәҫ, аяғөҫтө килеш йән бирер үҙебеҙҙекеләр!

— Бына быныһын шәп әйттең, егет, — тине Биксәнтәй, әҫәрләнеп. — Эшен дә емереп эшләй, күңел асырға ла әүәҫ беҙҙең кеше. Кәрәк сағында ҡорал тотоп, йән аямай илен дә ҡурсалай белә.

— Халҡыбыҙ дөргөн, һүҙ юҡ.

— Әхмәтйән, кисә Салауат хаҡында әйтә биреп ҡуйғайның бит әле. Артабан ни булды икән батыр менән? — тип ҡыҙыҡһынды Биксәнтәй, икәүҙән-икәү ҡалып, йығылған уҫаҡ өҫтөнә барып ултырғас.

— Әҙәм күргеһеҙ итеп язалағандан аҙаҡ, уны ҡайҙалыр, бик алыҫҡа, һөргөнгә ебәргәндәр, имеш. Шуныһын ғына ишеттем, башҡаһын әйтә алмайым.

— Ә атаһы Юлайҙы?

— Ул да, ғазаптарын уртаҡлашып, Салауат менән бергә булған.

— Уны ла һөргәндәрме?

— Эйе.

— Эләккән икән, әләйһәң, Юлай ҡорҙаш, — Биксәнтәй, бер ғауам өндәшмәй уйсанланып ултырғандан һуң, көрһөнөп ҡуйҙы. — Йәл. Бик йәл. Ғәжәп кеше ине ул, ирҙең аҫылы ине.

— Белә инеңме ни? — тине Әхмәтйән, һоҡланыу ҡатыш аптырап.

— Белә инем. Хатта яҡындан. Боланың ошоноһонан алдағыһында ла ҡатнашып, бәләһенән саҡ ҡотолғайны. Һуңынан конфедераттарға ҡаршы бергә пахутҡа йөрөнөк Юлай Аҙналин менән. Үҙ һүҙендә ныҡ тора белгән ғәййәр ир азаматы, ышаныслы терәк булды. — Биксәнтәйҙең әле генә нур сәсеп торған йөҙөнән шәүлә үтте лә Ирәндек тарафтарына төбәлгән соғол ҡараштары кинәт моңһоуланды. Уның бар булмышын һағыш солғап алғаны күренеп тора ине. — Эйе, һүҙен әйтеп, юл күрһәтерҙәй ил ағалары ирҙәргә көн юҡ беҙҙә. Берәм-һәрәм сүпләп кенә торалар.

— Беләһеңме, Биксәнтәй ағай, үткән ҡан ҡойоштоң был яҡтарға ла килеп етерен Ҡолтой олатай алдан әйткәйне бит, шуны һаман онота алмайым: ҡайҙан белә алды икән?

— Күрәҙәсе булды ул, яҡын-тирәлә берәү булды. Яһилдар ана шуның һымаҡтарҙы күрә алмай ҙа.

Ә был ваҡытта байрам шөйлә генә ҡыҙа барҙы. Баштараҡ тартынып ултырғандар ҙа, асылып китеп, һәләт-маһирлыҡтарын күрһәтә башланы. Йыйындың уртаһында ҡайнаған ҡыҙмаса Ҡотлобай ат бәйгеһе ойошторол ебәрҙе. Ә бала-саға аяҡтарына тоҡ кейеп тә, йомортҡа һалынған ҡашыҡты тешләп тә ярышты. Ҙур түңәрәк яһап торған кешеләр төркөмө уртаһында көрәшселәр бил һынашты. Тән аямай көрмәкләшкән батырҙарға ҡарап күпмелер ултырғандан һуң:

— Анауы, бил бирмәй, бер-бер артлы ташлап торғаны кем ул? — тип ҡыҙыҡһынды Әхмәтйән. — Күргән һымаҡмын, шулай ҙа һис иҫкә төшөрә алмайымсы.

— Ҡаҙаҡ тотҡононан ҡасып ҡайтҡан Ғайсаны иҫләмәйһеңме һуң?

— Шулмы ни?! Ниндәй баһадирға әйләнгән, ә!

— Эйе, Көтөр[244] батырҙан һис тә кәм түгел.

— Ә Ғәббәс бабай тойолмаған һымаҡ...

— Донъя ҡуйыуына байтаҡ инде.

— Шулаймы ни? Ауыр тупрағы еңел булһын...

Күңел асҡандарҙы күҙәтеп бер талай шым ултырҙылар. Ҡапыл ғына йөҙө яҡтырып киткән Әхмәтйән шул ерҙә:

— Биксәнтәй ағай, һин нисек ҡарарһың: минең башта бер фекер тыуып тора әле, — тип осондо.

---

[244] *Көтөр — Түңгәүер ырыуы батыры, көрәшсе.*

— Әйт фекереңде.

— Күрше ырыуҙарҙы, йәнә лә элекке яуҙаштарҙы ошолай бергә-бергә йыйып, мәйтәм, оло ҡор ойоштороп ебәргәндә?..

— Һе, был турала һуңғараҡ ҡолағыңа төшөрмәксе инем, үҙең гөман иткәс инде, бигерәк мәслихәт, — тине Биксәнтәй, ҡәнәғәт ҡалып. — Беҙҙең ырыуҙар борон-борондан ҙур йыйындарҙа һөйләшеп-кәңәшләшеп ултырған. Шуныһы ҡыҙыҡ: йыйындар һәр саҡ Түңгәүер ерендә, йәғни Һаҡмар буйында, үтер булған. Ниәтең изге, хуплайым.

— Киләһе йәйгә самалағанда?

— Ай-һай, өлгөрөп булырмы икән? Күреп тораһың: мәшәҡәттәр йырып сыҡҡыһыҙ.

— Уйлашайыҡ, бәлкем, өлгөрөрбөҙ ҙә...

— Хәйер, үҙең ҡара, хәҙер старшина һин. Мин былай ҡаршы түгел, кәрәк икән, бар хәлемсә булышырмын.

— Булды, һөйләштек әләйһәң! — Әхмәтйәндең күҙҙәре осҡонланып китте.

— Әле эште ниҙән башлап ебәрергә уйлайһың?

— Беренсе сиратта ауылды Һаҡмар буйына күсереп ултыртырға ине. Тегеләй-былай бүлгесләнеп йәшәп ятыуы әллә нисек тә баһаң.

— Һүҙҙәреңдә мантиҡ бар, Әхмәтйән.

— Әҙер өйҙәрҙе күсереүе ауыр булмаç, шулай бит. Яңыһын күтәрәбеҙ тигәндәргә ағасты Ҡарағайморон итәгенән йығырбыҙ.

— Ҡарағайы шәп инде уның. Яҡын да.

Ошо мәл ыш-пыш йүгереп килгән Дәүләтбай күренде.

— Атай, Хөснөтдин старшина килде, һине һорай! — тип һөрән һалды ул етер-етмәçтән.

— Килһә, табынға саҡыра тор. Беҙ хәҙер.

Иртә яҙ ҡояшылай ялтырап торған Хөснөтдин бай Биксәнтәй менән йәпәтәйләнә биреп күрешкән булды, хатта ҡосаҡлап алды.

— Шәпме, күрше! Байрам ойоштороп ташлағанһың икән, хуп! – тип шарҙыуанланды ул. — Байрамы булғас, шәт, сәбәбе лә барҙыр?..

— Сәбәбе мына алдыңда тора. — Биксәнтәй Әхмәтйәнгә күрһәттте. — Әрмеләрҙән сотник ҡайтты.

Шунда ғына Хөснөтдин Әхмәтйәнгә лә ҡулын бирҙе:

— Өйҙә үçкән быҙау үгеҙ була алмаç, — тип кеткелдәп көлдө. — Бик һәйбәт, ҡырҙа йөрөп кеше булғанһың, ҡотлайым үҙеңде.

— Ауыҙың һалыуҙы икән, ҡустым, әйҙә түрҙән уҙ, — Биксәнтәй саҡырылмаған ҡунаҡты табынға әйҙәне.

— Ҡуй тимәбеҙ, күрше. Сарсап киленә ине... — Сауын кейеҙ түшәк өçтөнә аяҡ салып ултырһа, уның ике юлдашы йәштәр араһына һыйынды.

— Мынауы өҙәремдә кисектергеһеҙ ниндәй йомош килеп сыҡты? — тип ҡыҙыҡһынды Биксәнтәй, ҡунаҡҡа мөлдөрәмә туçтаҡ ҡымыҙ һоноп. Үҙе лә тулы баҙыянды ҡулына алды.

— Донъяның мәшәҡәте менән эше бөтәһе бармы? — Тура яуаптан тайшанған Хөснөтдин урынһыҙға йәнә кеткелдәгән булды.

— Тимаш баяр киткәне бирле килеп күренгәнең дә юҡ ине...

— Ҡуй, Биксәнтәй ағай, хәтергә төшөрмә әле шул артмышты. Былай ҙа онотолмай, ҡәһәрең. Болалар шуның менән нисек тә бөтә күрһен инде. Екһетте лә баһаң...

— Ә нишләп оноторға тейеш һуң беҙ ул афәтте? Төптө яңылыш фекер

йөрөтәһең. Бына ошолайтып бер ултырыу бәрәбәренә күпме ҡан түккәнебеҙ үҙеңә билдәле. Ундайҙы оноторға беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ. — Биксәнтәй Хөснөтдин менән ризалашманы. — Ә инде һин әйткән балаларға килгәндә: йәбер-золом бөтмәй тороп, болаһы ла бөтмәҫ. Әҙәмдең тәбиғәтен беләһең дә баһаң: берәһе икенсеһен нисек тә еңеп алырға ла, баҫмаҡлап-иҙергә тырышһа, тегеһе уға баш бирмәй ҡырталаша. Буйһоноу кемгә оҡшаһын. Хас та йыртҡыстарса инде. Йыртҡыс, ярай, шыпа аҡылһыҙ, ә әҙәм бит ошо хөштөмһөҙ эшкә аңлы килеш ынтыла – шуныһы аянкыслы. Тора-бара бәхәс ҡуба, бола сығып, баш күтәреүҙәр башлана. Бола башы – бәхәстә. Юҡ, тигеҙһеҙлек менән ғәҙелһеҙлек барында болалар һис баҫыласаҡ түгел. Әҙәми зат, берен-бере иҙеп, кәмһетеүҙән туҡталмай тороп, үҙ-ара низағтарҙан да, ҙур һуғыштарҙан да ҡотола алмаясаҡ. Тағы ла шуны әйтер инем: бөгөнгө көндә башҡорт өсөн иң оло яуызлыҡ — Әбей батша үә уның ҡулы аҫтындағы ҡеүәтле империя.

— Мәгәр Бүгәс батша еңгән булһа?.. Ул бит беҙҙе ҡуҙғытып маташты, өҫтәүенә, азатлыҡ өсөн көрәш һылтауы менән йыйын әтрәгәләмде еребеҙгә әпкилеп тултырҙы ла бөтә Башҡортостаныбыҙ буйлап тәкүәһеҙ әҙәмдәрҙе таратты.

— Бүгәс тә, әлеге шул ғәҙелһеҙлеккә риза булмай, баш күтәрҙе. Ул өҫтөнлөк алған осраҡта артабан ни булырын хәҙер берәү ҙә әйтә алмай, әлбиттә. Батшаларға ышаныуы ҡыйын, уныһы бар. Иван падишаһ та бит нимәләр генә вәғәҙә итмәгән, ә вариҫтары, ер-һыуыбыҙҙы ҡулдарына төшөргәс тә, олаталары васыятын онотҡан.

— Үткән боларышта урыҫ менән урыҫ һуғышһа, башҡортҡа ҡаршы башҡорт сыҡты һәм... һәр кем үҙен хаҡлы һананы. Берәүҙәре малым, байлығым тип таш диуар ише торһа, икенселәре, ярлыларын әйтәм, шул малды тартып алып үҙ-ара бүлешергә ниәт тотто, әммә, ҡыҙғаныска ҡаршы, тип әйтәйемме, бәлки, бәхеткә күрәлер, һуңғылары еңелеүгә дусар ителде.

— Эйе, еңелдек – уныһы хаҡ, әммә еңелеү белмәҫ Бөйөк Рәсәйҙе нигеҙенән дер һелкеттек! Ошоноһон да иҫәптән сығарма, — быны Биксәнтәй ҡаты әйтте. — Әбей батша менән уның ярандарының, башҡа әтрәгәләм-ағуталарҙың да ҡотон ныҡ алдыҡ. Юҡ, һин яңылышаһың, Хөснөтдин, беҙҙең көрәш фәтүәһеҙ булманы, ҡаныбыҙ ҙа юҡҡа түгелмәне. Батшалыҡ беҙгә хәҙер ана күпме ташлама яһай! Аңлайһыңмы, таш-ла-ма! Тик башҡорт өсөн генә! Тимәк, беҙ хаҡ булғанбыҙ. Асығын ҡысҡырып әйтергә теләмәһә лә, Әбей батша ошоно танырға мәжбүр. Әйт әле миңә: башҡорттан башҡа ҡайһы халыҡ ергә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә? Әйтә алмайһың. Сөнки бүтән бер кем дә эйә түгел! Хатта үҙҙәрен ирекселәрҙең-ирекләһе һанаған казактарҙың да торған ерҙәре батшалыҡтыҡы һанала...

— Шулай, әҙәмдең төрлөһө була. Берәүҙәре, яҙмышына буйһоноп, ғүмере буйына күндәм генә күтән һурпаһы эсеп йәшәргә риза. Ә икенселәре — Бүгәс, Салауат ишеләр, асыҡтан-асыҡ кәмһетеүҙәргә түҙеп тора алмайса, йәберзоломға ҡаршы сыға. Үҙе ише ябай халайыҡты күтәрә лә азатлыҡ, ирек хаҡына йәнен-тәнен аямай һуғышып, ҡан ҡоя.

Ололарҙың әңгәмәһен түҙем генә тыңлап ултырған Әхмәтйән дә һүҙгә ҡушылды.

— Биксәнтәй ағай дөрөҫ әйтә: үткән яуҙа халыҡ үҙ өлөшөн, үҙ бәхетен даулап күтәрелде, ә Бүгәс ошоға бер сәбәпсе генә булғандыр. Уның урынында икенсе кешенең дә тороуы мөмкин ине. Арабыҙҙа "шәп кешеләр" менән ярымтыҡ һатлыҡ йәндәр булмаған хәлдә, еңеү кем яғында булыры икеле,

Хөснөтдин ағай. Юҡ, икеле түгел, яңылышам, еңеү һис шикһеҙ беҙҙең яҡта булыр ине!

Күҙҙәре йылтырап киткән Хөснөтдин байҙың йөрәге жыу итте: Әхмәтйән әлеге һүҙҙәрен нәҡ уға төбәй кеүек тойолдо.

— Эйе, үҙем дә бына инде нисәмә йыл буйына баш ватам: кем һатты икән теге ваҡыт беҙҙе, тием? — Биксәнтәй йәш старшинаны йөпләгәндәй әйтеп ҡуйҙы. – Бер мөртәт әғүәсе арҡаһында күпме аҫыл ирҙәребеҙҙе тәләф иттек. Беҙҙең ниәттәрҙе кем тәблиғ ҡылды[245] Тимашевҡа – әлегәсә билдәһеҙ. Болғауыр заманда шуның һымаҡтар аҙ булған тиһеңме? Балыҡты болғансыҡта тотоуы еңелерәк... Әхмәтйән раҫ әйтә: намыҫын һатҡан әүермәндәр, ике йөҙлө монафиҡтар, ҡойроҡ болғап йөрөгән ҡуштандар арҡаһында ғына еңелдек беҙ. Барыбыҙ бер төптән булғандамы...

Ошо һүҙҙәр былай ҙа энә өҫтөндә ултырған Хөснөтдин байҙың йөҙөнә бәреп әйтелгән һымаҡ булды. Уның яуҙаштарын һатҡан әүермән икәнлеген Биксәнтәй белә-күрә һөйләнеп ултыра кеүек, һынамаҡҡа юрый шул рәүешле ҡылана һымаҡ. Шуның өсөн дә ул, үҙен бүрке яна башлаған ҡараҡ ише тойоп, борғаланды:

— Ярай, Биксәнтәй ағай, юлсының юлда булғаны яҡшы, беҙ әкренләп ҡуҙғалайыҡ. Бараһы ер яҡын түгел, ҡараңғыға ҡалып ҡуймағайыҡ, тейем...

Хужалар уның шулай, өтәләнеп, ҡапыл ғына тороп китеүенә аптырашып ултырҙы ла ҡалды.

— Кире ҡайтышыңда һуғылырһың! — тип ҡыҫҡырҙы Биксәнтәй, ләкин тегеһе әллә ишетмәне, әллә ишетмәмешкә һалышты: яуап бирмәне. Уларҙың ҡайҙа, ни йомош менән китеп барыуҙары ла билдәһеҙ көйө ҡалды.

— Күрәһеңме, Әхмәтйән, Хөснөтдин инде етмешкә яҡынлашҡан, ә донья көтәм тип яныып йөрөгән көнө. — Биксәнтәй йәш старшинаға йөҙ борҙо. — Быны шуға күрә әйтәм: һинән күпкә оло кеше йөкмәгән эште иңеңә алыуҙан һис тә ҡурҡма. Ауырлыҡтар шиһаҡа буранылай үтер ҙә китер ул, гелән ошолай тормаҫ.

— Ә мин ҡурҡмайым. Ҡайҙан алдың уны, Биксәнтәй ағай?

— Хәстәрең йөҙөңә сыҡҡан...

— Бер аҙ ғына тулҡынландыра, әммә эштән өркәндән түгел.

— Өркмә шул. Урын ерендә ныҡ, хатта ҡаты бул, мәле менән ыңғайына һыпыр, йомшара ла бел. Тағы ла: түрәмен тип, кеҫәгә ҡулың тыҡҡан көйө, күкрәгең киреп кенә йөрөмә. Улай итһәң, алдан әйтәм, бер нәмә лә барып сыҡмаҫ. Һине инде кеше менән мөғәмәлә итергә өйрәтәһе түгел, әммә өҫтәп шуны әйткем килә: кеше менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙән тартынма, кәрәк сағында кешенең күҙенә ҡарап тураһын һөйлә, дөрөҫлөктө ярып әйт. Кешеләр ундайҙарҙы өнәп етмәһәләр ҙә, хөрмәт итәләр...

Ҡарт старшина, ауҡандан[246] файҙаланып, йәшенә оҙаҡ ҡына өгөт-нәсихәт уҡый-уҡый үҙенсә тормош һабаҡтарын өйрәтте.

— Әйткәндәй, кеше юҡта йәнә бер һүҙем бар ине... — Тауышын баҫа төшкән Биксәнтәй, берәйһе ишетеп тормаймы тигәндәй, ян-яғына ҡаранып алды. — Тик быныһы мотлаҡ икәүебеҙҙең араһында ғына ҡалырға тейешле...

Ләкин бөгөнгә уға икәү генә белер серен асып һалырға насип булманы. Ошо

---

*[245]Тәблиғ ҡылыу — хәбәр итеү, һүҙ еткереү.*

*[246]Ауҡан — аулаҡ урын.*

мәл өймәләм тоҡтар тейәп ҡара-ҡаршы ятҡан Туйыш тауы итәгенән әкрен генә төшөп килгән дүрт ылау күренде.

— Биксәнтәй олата-ай! Тереғол менән Барсын апалар ҡайтып килә-ә! Арба тултырып ашлыҡ апҡайтҡанда-ар! — тип яр һалған шуҡ малай башланған һүҙен осларға ирек бирмәне.

— Кем? Кем, тине шул? — Әхмәтйән аптырап китте.

— Тереғол менән Барсын, тине.

— Улар ҙа бындамы ни?!

— Эйе, бындалар. Беҙҙең арала ҡалырға теләк белдергәстәр, ҡаршы килмәнек,— тине Биксәнтәй, ылауҙарға ҡарап. — Инде башҡортлашып бөттөләр, ғаиләләре, бала-сағалары бар.

— Әле ҡайҙан ҡайтып килеүҙәре?

— Ялан яғынан. Икеһе лә алыш-бирешкә һәләк маһир, шуның өсөн итмайҙы һолоға алыштырмаҡҡа гелән уларҙы йөрөтәм. Һоло ашамаған бейәнең рәтле һөтө сыҡмаһа, ҡымыҙының тәме лә, ҡеүәте лә самалыраҡ була.

Шул арала тау аҫтына төшөп еткән ылауҙар әле йүнләп кибергә лә өлгөрмәгән үҙәк ситенә етеп туҡталды. Тоҡтар өҫтөнән һикереп төшкән ике ир, аттарын шаҡарғылай һалдылар ҙа, халыҡ өймәкләшкән яҡҡа ыңғайланылар.

— Әссәләмәғәләйкүм барығыҙға ла! — тип килеп етер-етмәҫ сәләм бирҙеләр. Уларҙың, хәрби кейемдәге казакты күреп, ҡапылғара баҙап ҡалыуҙарын һиҙеп алған Биксәнтәй:

— Әйҙә, әйҙә, яҡынлағыҙ табынға! — тип ҡул болғаны.— Шикләнмәгеҙ, казак үҙебеҙҙеке. Шунан, нисек йөрөп ҡайттығыҙ? — тип ҡыҙыҡһынды ул. Урынынан ҡалҡынды ла күҙҙәрен сотниктан һаман булһа айырып ала алмай аптырашып торған юлсылар ҡаршыһына килде. — Уңдымы һуң баҙар?

— Уңмаған ҡайҙа! Итең генә булһын, Биксәнтәй ағай, һолоно хыт ун арба тейәп ҡайт. — Алғараҡ сыҡҡан зәңгәр күҙлеһе икеһе өсөн дә яуап бирҙе. Бынан ун алты йыл элек ауылдарына килеп һыйынған Терентий-Тереғолдо шунда уҡ танып алған Әхмәтйән ҡалмыҡ Барсынды ла сырамытты һәм Биксәнтәйгә эйәреп күрешкән ыңғайға:

— Һаумыһығыҙ, ағайҙар! — тип киң йылмайҙы.

— Һау ғына әле, ҡустыһы. — Шик-шөбһә тулы ҡараштар Әхмәтйәнде һаман бырауланы.

— Танымайһығыҙ әллә?! — Биксәнтәй, ғәҙәтенсә, кеткелдәп көлдө. — Йә, йә, иҫегеҙгә төшөрмө икән? Тимашев урлап ҡасҡан малайҙы хәтерләмәйһегеҙме ни?

Теге икәү бер-береһенә ҡарашып алды.

— Ә-ә, хәтерләнем! Япа-яңғыҙы айыуға ҡаршы сыҡҡан егет тә баһа! — Һоҡланыуын йәшерә алмаған Тереғол бот сапты.

— Миргородскийҙы сәлдергән яугирмы?! —Барсын да саф башҡортса өндәште.

— Тап үҙе! — Биксәнтәй күрәләтә маһайып киткән кеше булды. — Шауҡымлы егет!

— Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, ашъяулыҡҡа рәхим итегеҙ, — тип өтәләнде Батырхан. — Асыҡҡанһығыҙҙыр ҙа, талсыҡҡанһығыҙҙыр ҙа... Шунда иркенләп һөйләшербеҙ.

Табын артында көңгөр-ҡаңғыр лаҡап һатып ултырҙылар.

— Былай бармай, старшина, — тип ҡул ҡыры менән һауа ярҙы кәйефе

күтәрелеп киткән Тереғол. — Еребеҙ иркен, тупрағы ифрат уңдырышлы, һолоно беҙгә, мәйтәм, үҙебеҙҙә үҫтерергә кәрәк. Башҡаһын да игеп ҡарарға була.

— Үҫтерәйек, кем һиңә ҡаршы? — тине Биксәнтәй үҙенә ҡараш төбәп ултырған Тереғолға. — Старшина фатихаһын бирмәй ҡалмаҫ...

— Аңламаным, Биксәнтәй ағай...

— Кисә старшина инем, бөгөн инде түгелмен.

— Нисек улай? — Ҡапыс күҙҙәре түңәрәкләнеп киткән Барсын да ғәжәп ҡалды.

— Бына беҙҙең старшина! — Биксәнтәй Әхмәтйәндең яурынына ҡулын һалды. — Йәш старшинабыҙ! Был яғына инде уға мөрәжәғәт итегеҙ.

Көндәр ултырып, йәйет[247] тартылыуға, ер өҫтө буйтым ғына һурыкты ла. Ошо мәлде көтөп ала алмаған Әхмәтйән старшина ең һыҙғанып эшкә тотонто. Ҡуян үрте[248] йылҡылдап торған салҡар[249] асыҡта төҙөләсәк яңы ауылға нигеҙ урындарын үҙе һайлаһа, буласаҡ урамды билдәләп, таяҡтарын да үҙ ҡулдары менән ҡағып сыҡты.

— Ауылың булғас, матур ҙа, йәмле лә булһын ул! — тине дәртләнеп китеп ғәм араһында ҡайнаған йәш сотник. — Өйҙәре бер тәртиптә ултырһын, урамдары ла төп-төҙ булһын. Ана, урыҫтан өлгө алырға кәрәк. Урамы уларҙың ҡыл тартҡан кеүек, ҡарап тороуы кинәнес!

Әхмәтйән үҙенсә хаҡлы: элекке Һаҡмарбаштың өйҙәре, тырым-тырағай килеп, унда-бында торҙо, тәртип тә, матурлыҡ та булманы. Урам тигәнең дә шартлы ғына ине: өй аша – кәрәкмәгән кәкре-бөкрө тыҡрыҡ, ишек алдары — үтә-атма. Бер Биксәнтәй байҙың ғына әҙәм рәүешле ихатаһы булды, шикелле.

— Йорт-ҡураны нәйәт итеп, урын-еренә еткереп төҙөү кәрәк. Эшләнгәне үҙебеҙ өсөн. Һәр өйҙөң әйләнә-тирәһе кәртәле, ихатаһы иркен, ҡураһы йылы булырға тейеш. — Әхмәтйән ошо һүҙҙәрҙе ҡат-ҡат ҡабатлап тороуҙан һис ялыҡманы. — Йәнә лә онотмағыҙ: йәрингә Түңгәүер ерендә оло ҡор үтәсәк. Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян ырыуҙары беҙгә ҡунаҡҡа килә. Улар алдында оятҡа ҡалып ҡуймайыҡ, ағай-эне. Шуға күрә ауылыбыҙ һыбайлы атынан төшөп, йәйәүле ятып ҡарамалы булырға тейеш.

Йәшлегенә ҡарамаҫтан бөтмөр, эшкә сымыры тиктормаҫ старшинаның әйткәнен, һәр ҡушҡанын ауылдаштары теүәл үтәне. Иң әүәл яңы урынға Һаҡмарбаш утарының өйҙәрен күсереп ултырттылар. Хәҙер инде ҡасандыр гөрләп торған Һаҡмарбаштан Иҫке Ыҙма тигән атама ғына тороп ҡалды. Йәйектүбә исеме лә, әкренләп онотола барып, башта Тимаш баяр тауына, һуңынан Тимәшәүгә әйләнде. Шулай итеп, халыҡ, киләсәк быуындар онотмаһын өсөн, ҡәһәрле йәлләд исемен дә "мәңгеләштереп" ҡуйыуҙы кәрәкле тапты.

Бишҡайын ауылы кешеләре, бөтәһе лә тиерлек, яңы урынға күсенде.

— Ни тиһәң дә, ун алты йыл ғүмеребеҙ ошонда үтте. Ауыл нигеҙен мәхрүм итеп барыбыҙ ҙа китеп бөтһәк, яҙыҡ булыр, — тип ике улы менән Ҡолоҡас мулла ғына бында ҡалырға ҡарар итте.

— Хуп, — Әхмәтйән дә ыжый-өгөтләй, кеше ялҡытып тороуҙы урынһыҙ һананы. — Һиненсә булһын, Ҡолоҡас апа.

Ҡарағайморон тауы ағасының эшкингәндәйе төҙөлөш өсөн йығылды,

[247]Йәйет — яҙғы ташҡын.
[248]Ҡуян үрте — ер өҫтөнән күтелгән йылы быу.
[249]Салҡар — киң, иркен.

ахырҙа өлгөрөп етмәгән һайлантылары ғына тороп ҡалды. Ауыл күҙгә күренеп үҫте. Күптән түгел йәйрәп ятҡан буш туғайҙа тиҙ арала төп урам барлыҡҡа килде.

Әхмәтйән икегә, хатта өскә ярылды, һыуыҡтар башланыуға барыбер өлгөртөп, ауылдаштарының бөтәһен дә ҡыйыҡлы итте. Биксәнтәйҙең дә ярҙамы тиңһеҙ булды. Дөйөм хәстәр тип байтаҡ малын тотонған бай дәүләтенең күҙгә күренеп кәмегәненә һис бошонманы: баш һау булһа, унылы табылыр. Изге эш өсөн ул һуңғы тиненә ҡәҙәр бирергә әҙер ине. Тик ауылды нисек тә тиҙерәк тергеҙәһе лә әҙәм рәүешле йәшәйештә йәһәтләп аяҡҡа баҫтыраһы кәрәк.

Шулай ҙа, ҡыш үтеп, сираттағы йәй етеүгә, ырыуҙар ҡорон үткәрә алмаҫтары асыҡ төҫмөрләнде. Бөтөн бер ауылды күсереп, өр-яңынан аяҡҡа баҫтырыуы анһат эшме? Әхмәтйән ошоно, үҙ елкәһендә татып ҡарағас, яҡшы белә. Үс иткәндәй, таушан[250] ифрат ҡоро килде. Туҡтау белмәй иҫкән ҡыуан ел менән бар йәшеллекте өтөп бөтөргән ҡайнар ҡояшына өҫтәлеп, жәүзә башынан әсәд нәжмеһенәсә бер тамсы ямғыр яуманы, йүнле ысығы ла төшмәне. Мал-тыуар менән бергә әҙәми затҡа ла нужаһын күрһәтте таушан. Емеш-еләк бөтөнләй уңмаһа, үләне наҡыҫ булды. Булған ғынаһы ла һуңға табан тамырында көйө ҡурап, кәүенләнде лә ҡуйҙы, һис туҡлыҡлығы ла, бәрәкәте лә тойолманы. Йоғонтоһоҙ аҙыҡтан ябығып мал йонсоно, шуны ғына көткәндәй, һәр төрлө ауырыуҙары тарала башланы. Ер кибеп ярылды, йылға-шишмәләр ҡороно. Илгә ас йотлоҡ менән янаған афәт һулышы һиҙелде. Ул афәттең әҙемтәләре Тимашев яуы ише генә булмаясағы ябай күҙгә лә күренеп тора ине. Ошондай мәлдә байрам үткәреп ятырға кемдең күңеле тартһын? Ырыу ағаларының кәңәшен тотҡан Әхмәтйән йыйынды кисектереп торорға мәжбүр булды.

Шулай ҙа шәғбан урталарында башланған мыжыҡ ямғырҙар тереклекте оло һәләкәттән ҡотҡара алды. Дымға сарсауҙан ныҡ һирәп ҡалған йәшеллек ҡапыл күтәрелде, һәм йәнлеге лә, кешеһе лә, ниһайәт, иркен тын алды. Көҙ етеүгә үлән мал туйырҙай, хатта сабып алырлыҡ булып ҡалҡынды, ҡышҡылыҡҡа ҡар аҫтында йылҡы тибенерлек ҡауланы ла ҡалды.

Йоттан һуңғы йыл, ғәҙәттә, уңышлы килә. Был юлы ла шулай килеп сыҡты. Йәйҙең уңай икәнлеген күргән Әхмәтйән әйткән әйтеүен үтәмәккә, тәүәккәлләргә булды. Башҡаса һуҙырға уның иҫәбе лә, теләге лә юҡ. Аҡһаҡалдар ҡоро ла ҡаршы килмәне.

Күгүләнгә аяҡ баҫып, халыҡ йәйләүҙәргә күсенгәс тә, тирә-яҡтарға саҡырыусылар ебәрелде. Шулай итеп, әллә ҡасан ниәтләнгән эш, ниһайәт, урынынан ҡуҙғалды. Саҡырыусыларҙы көнәлгәре ебәргән Әхмәтйән барыһына ла өс тәүлеккә еткәндәй тәғәм менән әҙерләнеп килергә әйттерҙе. Йәй башына тәғәйенләнгән йыйынды үткәреүгә туғандаш ырыу старшиналарының береһе лә ҡаршы булманы. Алда торған ҡоролтайға, хужа булараҡ, түңгәүерҙәр айырата ныҡлап әҙерләнде: аш-һыуын да, башҡа сығымдарын да йәлләмәне.

Селт аҡ кейеҙҙән ҡоролғанлыҡтан бүтәндәренән ҡырҡа айырылып торған төп тирмә семәрле нағыш менән биҙәлде лә һәр төрлө һыр-сәскәләр төшөрөп баҫылған балаҫ үә ҡорама менән матурланды. Тирмә алдына ултыртылған бағанаға һыу буйында үҫкән ерек ағасына ҡунған һайыҫҡан, ярым ай төшөрөлгән әләм эленде. Әләм аҫтына беркетелгән ситтәре семәрле йоҡа таҡтаға:

---

[250] *Таушан — ҡуян йылы.*

**ТҮҢГӘҮЕР ЫРЫУЫ:**

*Ағасыбыҙ — ерек.*
*Ҡошобоҙ — һайыҫҡан.*
*Тамғабыҙ — ярым ай.*
*Йылғабыҙ — Һаҡмар.*
*Көйөбөҙ — Дәлеү Ғәйшә.*
*Оранымыҙ — Ҡуңғырат.*
*Түңгәүер иленә рәхим итегеҙ!* — тип яҙып ҡуйылды.

Көрәшселәр, ҡурайсылар, йырсылар, бейеүселәр – көллөһө бер булып, ал-ял белмәй байрамға әҙерләнде. Ауыл малайҙары өсәр-дүртәр мәртәбә таңаштырылған[251] арғымаҡтарҙы бәйге тоторға күнектерҙе. Шыма һырғауылға, ауыш бүрәнәгә үрмәләүселәр, ҡаулан тултырылған тоҡтар тотоп алышҡа сығыусылар, башҡа төрлө мәҙәктәр менән уҙыштарҙа ҡатнашырға теләүселәр ҙә үҙҙәренсә күнекмәләр үткәреп мәж килде. Шулай итеп, Түңгәүер илен генә түгел, бар олоҫто байрам кәйефе солғап алды.

Бына, ниһайәт, тулҡынланып та, түҙемһеҙләнеп тә, шул уҡ ваҡытта бер аҙ шөбһәләнә биреп көтөп алған көн етте! Ир-ат, күк себен ҡужғый башламаҫ элек, таң һарыһынан ҡуҙғалып, ике йыл рәттән тыу йөрөгәнлектән мөлкөлдәп торған дүнәженде[252], йәнә лә, самалап, бер нисә һарыҡ һуйҙы, бер нисә ҡаҙанды күтәргәндәй нығын итеп аҫҡаҡтар әҙерләне. Ҡәйнә-килендәр, әшәк тоҡандырып, ҡаҙан аҫты. Бер аҙҙан аттарына уҡалы септәләр ябып, матур кейенгән малайҙар, ҡыҙҙар тегеләй-былай сабышып уҙҙы. Улары ла ҡунаҡ ҡаршыларға әҙерләнде. Шул рәүешле, кисә генә ҡола ялан ятҡан тау итәге ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе лә, сағыу-кәттә биҙәктәргә төрөнөп, тантаналы төҫ алды.

Бына бер мәлде, муйыл ҡыуаҡлығы эсендәге сытыр ояһы тирәһендә ҡайнашҡан кешеләргә ризаһыҙлыҡ белдергән һымаҡ, Һаҡмар буйын яңғыратып һайыҫҡан шыҡырланы.

— Ана, ҡунаҡтар етеп килә, шәт, ҡошобоҙ хәбәр итә лә баһаң, — тип көлөштө ҡаҙан тирәһендә булашҡан ҡатын-ҡыҙ.

— Эйе шул, ҡайһылай дөрөҫ әйтелгән, ибет: ерек барҙа һыу бөтмәҫ, һайыҫҡан барҙа ил бөтмәҫ... Һәләк уяу ҡош бит ул һайыҫҡан.

Ошоно ғына көткән тиерһең, шәйләккә ҡуйылған малайҙарҙың береһе сабып килеп етте лә барыһы ишетерлек итеп һөрән һалды:

— Киләләр! Киләләр! Сырҙан кисеүен сыҡтылар!

Ҡарт-ҡоронан башҡа бөтәһе лә, ашҡына-йөрәкһей, ҡабаҡ өҫтөнә күтәрелде. Офоҡ ситендә, ғәләмәт оҙон биҙәкле ылау булып, һыбайлылар ҡатыш егеүле аттар күренде. Был үҫәргәндәр менән бөрйәндәрҙең юлда тәл булышып, бергә-бергә килә ятыуҙары ине.

Көтөлгән ҡунаҡтарҙы тейешенсә ҡаршылауға әҙерләнергә фарман бирелде. Ҡаршы алыусылар, алдан өйрәнелгәнсә, барыһы ла үҙ урынын алды. Түҙемһеҙ ҡыҙҙарҙың ҡайһыһы, тулҡынланыуын баҫырға була, яурын һелкетһә, ҡайһыһы торған урынында тыпырлатып бейеп ала. Һыбайлы малайҙар әлегә тыныс күренә. Улары, ҡул һырты менән ҡояшты ышыҡлап, килеүселәр яғына ҡараш ташлай-ташлай тымыҙ ғына көтөүҙәрен белә.

Ҡойроғо әле күренмәгән ылауҙың бирге башы бөтөнләй яҡынлашҡанда,

[251]*Таңаштырыу — һыуындырып бәйгегә әҙерләү, сыныҡтырыу.*
[252]*Дүнәжен — дүрт йәшлек бейә малы.*

Батырхан ҡурайына ҡушылған Ҡотлобай «Дәлеү Ғәйшә»не йырлап ебәрҙе. Күңелдәрҙе әйтеп аңлатҡыһыҙ тантаналы хис-тойғо, сикһеҙ ҡыуаныс солғап алды. Күкрәк ситлеген емереп сығырҙай булып типкән йөрәктәр ярһыны.

— Әссәләмәғәләйкүм, түңгәүер туғандар! — Иң алдан килгән ап-аҡ һаҡаллы оло ғына һыбайлы, уң ҡулын күтәреп, хужаларға сәләм ҡундырҙы.

— Вәғәләйкүмәссәләм, яҡташтар! — Был яҡтан уларҙы, Әхмәтйән ҡушыуы буйынса, Биксәнтәй сәләмләне. — Хуш киләһегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар!

— Ил-йортоғоҙға тыныслыҡ, ерегеҙгә бәрәкәт!

— Рәхмәт, әйткәнегеҙ килһен!

Һыбайлы ҡунаҡтар эйәрҙән төшөүгә, шуны ғына көтөп әҙер торған үҫмерҙәр кемуҙарҙан ат башына йәбеште һәм тирләп талсыҡҡан хайуандарҙы һыуындырыр өсөн тәғәйен урынға алып китә һалды.

— Әйҙүк! Әйҙүк! — Алсаҡланып киткән Әхмәтйән алыҫ юлдан килеүселәргә тамаҡ сылатып алырға тәҡдим яһаны. Ир-уҙамандарының бәғзе бере һары балдан ауыҙ итһә, күпселек ҡаршыламыш ҡомғанындағы ҡымыҙ менән һыуһын ҡандырҙы. Ҡунаҡ аяҡсылары ла ауыҙ асып буш ҡалманы, арбаларҙан һикереп төшә һалып, һәр төрлө күстәнәстәрен таратырға тотондо. Тәм-томға тейенгән бала-саға айырата ҡыуанып бөтә алманы.

— Хуш килдеге-еҙ! Бәхетегеҙ менән ҡуш килдеге-еҙ! — Һомғол кәүҙәле үҫмерҙең тантаналы һүҙҙәренән аҙаҡ, рухтарҙы тетрәндереп, дөңгөр ҡаҡтылар. Унынһы тына биреүгә, ҡурай менән ҡумыҙҙың йөрәк елкендергес дәртле көйөнә баҫып, бер төркөм сибәр ҡыҙ бейергә төштө, уларына егеттәр ҡушылды. Йәштәрҙең осоп-төшөп бейеүенән илһамланып киткән ҡайһы бер ололар ҙа уртаға сыҡты.

Бөрйән ырыуы аҡһаҡалы Иҙелбәк, Үҫәргән иле ағаһы Алтынса әүәл Биксәнтәй алдына килделәр ҙә, ҡосаҡлашып, сәләм бирештеләр.

— Һай, үҙебеҙҙең башҡорт йыйыны! — тип әҫәрләнде Биксәнтәй. — Әллә ҡасандан күрмәгән яуҙаштар менән осрашырға насип итте бит, ә!

— Шулай, изге йоланы был яғына ла онотмабыҙ инде, — тине Иҙелбәк, ихлас күңелдән.

Ҡор башы итеп Биксәнтәй бей тәғәйенләнде. Хужа булараҡ ул, изге теләктә ҡалып, барыһын да һуңғы йылдарҙа онотола барған йыйынды тергеҙеү шатлығы менән ҡотлағандан һуң, кем-кем килгәнлеген теҙеп, ырыу-араларҙы атап сыҡты. Аҙаҡ, ниндәй бәйгеләр булырын бәйән итеп, йыйын тәртибенә асыҡлыҡ индерҙе. Ошоларҙың ахырында һүҙҙе ҡунаҡтар алды. Улары йыйынға килгән атаҡлы ҡурайсылары һәм йырсыларын, бейеүселәре һәм көрәшселәрен халыҡҡа күрһәтте, Бөрйән менән Үҫәргән илдәренең сәләмен еткерҙе.

Йыйындың тантаналы өлөшө ҡыҙған мәлдә тамъяндар ҙа килеп етте. Йәнә дөңгөр һуҡтылар, ҡурай уйнап, һорнай ҡыҫҡырттылар. Ҡор башы һүҙен йомғаҡлағанда ил, ер хәлдәренә ҡағылышлы һүҙҙәр ҙә әйтеп уҙҙы. Сығышының һуңында ул үҙенең варисы – йәш старшина Әхмәтйән Өмөтбаевты бөтә ғәм алдына баҫтырып таныштырҙы.

Ахырҙа һәр кем тәғәйен урынға таралышып, өҫ-башын, ат-ужаһын тәртипкә килтерергә тотондо. Ҡунаҡтар үҙҙәре килтергән һуғымдарын боғаҙланы ла, тай ҡаҙан аҫып, сытыр-сотор йүнләне.

— Хөснөтдин ҡусты күренмәнесе, — тине бер аҙ баш-күҙ алған Биксәнтәй, Әхтмәтйәнгә боролоп.

— Бара алмайым, тип ҡалған. Сирләп ята икән.

— Эйе, сир һорап килмәй...

Дүрт күҙ менән көткән ҡыпсаҡтар ҙа күренде бер мәлде.

Йыйын башында, атай-олатайҙар ғөрөф-ғәҙәтен тәксир итеп, йоланы боҙмаҫтан, ырыу ағалары – аҡһаҡалдар йыйылышып әруахтар иле – ҡәберстанға зыярат ҡылдылыр. Уларға эйәрергә теләк белдергән йәштәр ҙә күп булып сыҡты. Изге йөрөштө башына сәллә ураған Ҡолоҡас мулла башланы. Китеп барышлай ул:

— Зыяратҡа барғанда ниндәй юл менән инәһең, шуның менән яңылышмай сығыу кәрәк. Ҡәбер таштарына үә бураларына ҡул менән ҡағылмағыҙ, емерек урындарын төҙәтәбеҙ тип, бағана-бүрәнәләрен ҡуҙғатып маташмағыҙ. Был эштәр барыһы ла тыйылған һанала: мәрхүмдең сөьәле[253] менән гүр ғазаптары яңыра, — тип тәфсирләп йәштәргә өгөт-нәсихәтен уҡыны. — Өлкәндәр нимә эшләй – аслан шуны ғына ҡабатлап йөрөгөҙ.

Тәүҙә ҡояш йөрөшө буйынса ауылды әйләнеп сыҡтылар. Унан һуң төп-төҙ, күркәм урамдарға, матур итеп кәртә тотолған өйҙәргә ҡарап, башҡаһын да күҙҙән үткәрә-үткәрә һоҡланышып, мәсет тапҡырына еткәс, урамдың ҡап уртаһында туҡталдылар ҙа өс тапҡыр тәкбир әйттеләр.

— Аллаһу әкбәр! Аллаһу әкбәр! Аллаһу әкбәр! *Лә-ә иләһә иллаллаһу Аллаһу* әкбәр *үә-ә лилләһил-хәмде!*

Йәнбикә еңгә, Аҡбикә әбей, Батырхан менән Ҡотлобай ҡатындары, тағы бер нисә олораҡ ҡатын-ҡыҙ тәкбир әйтеүселәрҙең яурынына аҡ таҫтамалдар һалып сыҡты.

Кәртәһеҙ зыяратҡа еткәс тә тәкбир йәнә ҡабатланып, бата ҡылынды. Ҡолоҡас мулла:

— Әйҙәгеҙ, мөхтәрәм йәмәғәт, кәңәш тотоп үҙебеҙ ниәт иткән изге эшкә әруахтарҙың да фатихаһын алып сығайыҡ, — тип алдан атланы.

Ҡәберлеккә инеү менән гүр эйәләренә сәләм бирелде:

— Ғәләйкүмүс-сәләмү йә-ә әһләд-дияр...

Зыярат эсендә күп йөрөмәй генә, тура Ҡолтой ҡарт мәрхүм ҡәберенә барып, уның тирәләй йәшел сирәмгә ултырҙылар. Ҡәберҙең дүрт мөйөшөнән һәр ырыуҙың дүрт муллаһы урын алды.

Ҡиблаға ҡарап ултырған Ҡолоҡас “Фатиха” сүрәһен уҡып, доға ҡылды. Ҡалған өс мулла ла, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына сүрә башҡарып, Ҡолтой мәрхүм, шулай уҡ тереләрҙән доға өмөт итеп ятҡан башҡа барлыҡ ҡәберстан әһелдәре — ғәзиз өммәттәр рухына бағышланы. Ошонан һуң, Түңгәүер ырыуының яңы старшинаһы Әхмәтйәндең дәрәжәһен раҫлап ҡуйыу маҡсатында, Ҡолоҡас мулла уны изге ҡәбер тирәләй әйҙәп өс тапҡыр әйләнеп сыҡты, ҡәбер өҫтөнән бер семтем тупраҡ алып Әхмәтйәндең уң яурынына һалды һәм теләк әйтте:

— Бына, Әхмәтйән улым, хәҙер тереләр менән бер рәттән әруахтар ҙа үҙ фатихаһын бирҙе һиңә. Намыҫың таҙа, ҡылған ғәмәлдәрең пак, ниәттәрең һәр саҡ изге булһын. Ҡул аҫтындағыларға ҡарата илтифатлы, ғәҙел эш ҡыл. Амин.

Шулай итеп, ир-азаматтары, әруахтарҙы ололап, алда торған йыйынды имен-аман үткәреүгә уларҙың да ризалығын алып ҡайтты.

Алыҫ юлдан йонсоған ҡунаҡтарға ял биреү маҡсатында, төп бәйгеләрҙе иртәнге көнгә ҡалдырып, бөгөнгә тик уйын-көлкө, мәрәкәле ярыштар ғына үткәрергә һөйләшелде.

---

[253]*Сөьәл — әхирәттә яуап тотоу.*

Башта, бер-береһенә өйрәнеп алһындар өсөн, ырыу-ырыу түңәрәк яһап, йырлаша-йырлаша әйләнделәр, сәнскеле лә, фәһемле лә таҡмаҡтар әйтештеләр. Дүрт ырыу кешеһенән хасил булған ғәйәт оло түңәрәктең уртаһынан урын алған ҡурайсылар, ҡумыҙсылар береһенән-береһе шаяныраҡ таҡмаҡтарға ҡушылды. Ҡулға-ҡул тотоноп әйләнгән ыңғайға сәмләнеп бейеп алырға ла онотманылар.

*Беҙҙең ауыл — ҙур ауыл,*
*Урамдары төҙ ауыл.*
*Беҙҙең яҡтағы йыйындар*
*Ана шулай үтә ул.*
*У-у-уһ!*
*Тыпыр-тыпыр бейе әле,*
*Көйөн табырбыҙ әле.*
*Бер төшкәндә бейеп ҡал,*
*Һағыныр һөйләрһең әле.*
*Һу-у-уу!*

Көслө тыпырлауға ер һелкенеп, күмәк тауышҡа һауа тетрәнде, уларына ҡушылып йөрәктәр елкенде, күңелдәр ирәйҙе.

Ә өлкән инәйҙәр менән еңгәйҙәр был мәлдә кис үткәреләсәк аш бәйгеһенә әҙерләнде. “Баҡсалыҡ” тип аталған түңәрәк ҡайынлыҡта мәргәндәр йыйылды. Тәүҙә уҡ-һаҙаҡтан атып алама кәпәскә тейҙереү буйынса ярыштар үтте. Бөтә уғы ла сәпкә эләккән мәргәндәр икенсе баҫҡысҡа күсә барҙы. Уныһында инде бәләкәй генә түбәтәйгә тейҙерергә кәрәк. Был һынауҙы ла уңышлы үткәндәр өсөнсө баҫҡысҡа күтәрелде. Иң мәргән дүртәүҙең араһында Түңгәүер старшинаһы Әхмәтйәндең дә булыуы һаҡмарбаштарға оло ҡыуаныс килтерҙе.

Бына бәйгенең хәл иткес мәле етте. Ҡыялатып ҡағылған ҡолға осона, епкә бәйләп, балдаҡ эленде. Ел ыңғайына бәүелеп торған балдаҡҡа мәргән утыҙ аҙым арауыҡтан тейҙерергә тейеш.

Тәүге икәү яҙа ебәрҙе. Бөрйән мәргәне сойорғотҡан уҡтың балдаҡҡа ҡаурыйы ғына ҡағылып үтеүгә, бөрйәндәр ҡыуаныстан геү итеп ҡалды. Ошонан аҙаҡ Әхмәтйәндең еңә алырына ерәү ҙә ышанманы, буғай. Һыңар күҙен ҡыҫа биргән сотник, оҙаҡ ҡына тоҫҡап торғандан һуң, керештән ысҡындырып ебәргән уҡ балдаҡтың ҡап уртаһынан үтте лә уны эләктереп алып китте. Шулай итеп, дөйөм шау-шыу, ҡеүәтле алҡыштар аҫтында төп бүләк Әхмәтйәнгә тапшырылды.

Һуңғараҡ мәрәкә уйындар, һәр төрлө кәмит күрһәтеүҙәр башланды. Кемдәрҙер йомортҡа һалынған ағас ҡалаҡ тешләп йүгерешһә, икенселәре, аяҡтарына тоҡ кейеп, эләгә-йығыла кеше көлдөрҙө. Ике бағана өҫтөнә һалынған шыйғалаҡ бүрәнәгә ашатланып ултырған малайҙар, ҡаулан тултырылған тоҡтар менән бәрешеп, бер-береһен дөмбәҫләне. Йәш килендәр мөлдөрәмә тулы күнәктәрҙе сайпылтмай ғына урын-еренә еткереүҙә ослоҡтарын һынашты. Еңеүселәр ҙә, еңелеүселәр ҙә – береһе лә бүләкһеҙ ҡалманы. Ә күҙ бәйләнгән көйө бүләк ҡырҡып алыуҙа, нигеҙҙә, ҡыҙҙар ғына ҡатнашты. Бүләктең әҙерен шулай, бер ҡыйынлыҡһыҙ ҡулға төшөрөүҙе “ирҙәр эшенә” һанамаған малайҙар был мәҙәктә ҡатнашып торманы. Бәләкәстәр асыҡ уртаһындағы ялбыр ҡайынға эленгән сәңгелдәк-әүһәләктәрҙә сыр-сыу атылып кинәнес тапты.

Тәүге көн, алдан уйланылғанса, аш бәйгеһе менән барып осланды.

Аш-һыу эше улай-былай ғына түгел. Шуның өсөн ашнаҡсылар, бар оҫталыҡтарын һалып, зауыҡ менән әҙерләнде. Был етди бәйгелә телеңде йоторлоҡ тәғәмдәр, һәр төрлө тәм-том, быға саҡлы күрелмәгән эсемлектәр менән ашъяулыҡтары тулы бөрйән оҫталары алдынғылыҡты бирмәне. Бүләге лә шуға торошло булды.

Тәүге көндөң үтеп киткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Өйлә мәлендә ныҡ ҡыҙҙырып алған ҡояш кискелеккә һүрәнәйә барҙы ла, әлеге мөғжизә-тамашаны ташлап китеп, йор һүҙле, күңелсәк, шаян кешеләрҙән айырылғыһы килмәгән һымаҡ, ашыҡмай ғына Уралтау артына инеп ышыҡланды. Иртәнгегә лә ғәжәп матур һауа торошо вәғәҙә итеп, ҡояш байышын алһыу төҫкә мансыған эңер төштө. Күп тә тормай, йыһанды буш ҡалдырмайым әле тигән кеүек, көн тыуыр юҫыҡтан көләс йөҙлө тулған ай ҡалҡты. Ҡалҡты ла, шунда уҡ йыйын яланын ҡәҙимгесә яҡтыртып, үҙ ҡарамағына ала һалды.

Өлкәндәр һалҡын төндө нисек үткәреүҙе хәстәрләргә тотонһа, йәш-елкенсәк уйын-көлкө яғын ҡайғыртты. Уларҙы аяҡ аҫтындағы мул ысыҡ та, төн һалҡынлығы тыуҙырған сирҡаныс томан менән еүешлек тә туҡтата алманы.

Йола буйынса хужа – ырыу старшинаһы алдан әҙерләп ҡуйылған ғәләмәт ҙур сытыр өйөмөнә ут һалыуға, “Сығыр уты” тип аталып, борондан килгән ғөрөф-ғәҙәтте күреп ҡалыр өсөн барыһы ла шул яҡҡа ағылды. Ялҡыны күккә олғаша барып, шаңдағы тиҙ арала әллә ҡайҙарға таралған әшәк тирәһенә йәше-ҡарты менән бергә бала-сағаһы ла йыйылды.

— Был утты йыйын ахырынаса һүндермәгеҙ, — тине Биксәнтәй, йәш-елкенсәккә мөрәжәғәт итеп. — Ул ошо яландан һуңғы ҡунаҡ, юҡ, һуңғы кеше ҡайтып киткәнсе янырға, тимәк, тере булырға тейеш.

“Сығыр уты”ның ялҡыны әкрен-әкрен генә һүрелеп, ҡуҙ-торонбаштары емелдәшә башлағанда төн уртаһы ауышҡан ине. Бер-береһен тирмәләргә әйҙәгән ололар таралышып бөтөүгә, донья иркен ҡалған йәштәр төнгө уйынға ҡалды.

Баш әйләнгәнсе “Өс таған” типтерҙеләр, “Ебегән”, “Ҡайыш уйыны” уйнанылар. Парлашып түңәрәк уртаһына баҫҡан көйө ҡара-ҡаршы төртмә таҡмаҡтар әйтешеп бейеүе айырата ҡыҙыҡлы булды. Аяҡ терәп ҡаршылашыуына ҡарамаҫтан, өҙмәй ҙә ҡуймай, бер мәл Әхмәтйәнде лә түңәрәк уртаһына килтереп сығарҙылар. Ҡомарлы уйын ваҡытында старшиналыҡ дәрәжәңдең әһәмиәте юҡ иҫәбендә: бында барыһы ла тиң.

Яҙмыш шаярыуы булдымы: Әхмәтйән яңы тыуған ҡәмәр ише ҡыйғас ҡашлы, тулышып бешкән шоморт кеүек сөм-ҡара күҙле, толомдары бөгәренә төшөп, һомғол кәүҙәһенә һәләк килешеп торған тәңкәле елән, ынйылы башлыҡ кейгән, әкиәттәрҙә генә осрар һылыуға күҙгә-күҙ тура килде. Шаян ҡыҙҙың серле итеп бер керпек сәнсеүе сибәркәйҙәр иғтибарына һыуһап йөрөгән Әхмәтйәнде арбаны ла ҡуйҙы. Утты-һыуҙы кисеп, анауындай ырыу менән идара итергә тотонған сотник – олоҫ старшинаһы – бер шаталаҡ ҡына ҡыҙыҡай алдында кинәт ҡойолоп төшкәненә үҙе лә аптырап ҡалды. Тәтелдәп торған һылыуға ҡаршы әйтерлек бер йүнле таҡмаҡ иҫенә килмәне уның. Еңеүҙе һис һүҙһеҙ ҡыҙға бирҙеләр.

— Һи-ии, бешмәгән! Егет булып йөрөүең!.. — Ошонан ҡыҙыҡ тапҡан тамаша ҡылып тороусы ҡыҙҙар, мәрәкәләшеп, көлөштө.

— Күҙе төштө лә ҡуйҙы уның, шуға телһеҙ ҡалды! — тип хихылданы береһе.

— Туйға әҙерләнегеҙ, түңгәүерҙә-әр! — Икенсеһе Һаҡмар буйын яңғыратып һөрән һалды.

Әхмәтйәндең былай ҙа өлп иткән йөрәге хәҙер инде дарҫлап типте, бар булмышын ҡапыл ғына ялҡын ялмап алды. Бынан ары ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡарашы менән теге ҡыҙҙы эҙләне, уның тирәһендәрәк булырға, уға яҡыныраҡ йөрөргә тырышты. Ғәжәп: шул арала, шул ҡәҙәре лә итеп арбай алыр икән берәүҙе берәү. Ҡара күҙкәй ҙә, егеттең хәлен һиҙгән кеүек, уның тирәһенә ынтылды һәм уға ҡарап йышыраҡ йылмайҙы, ошоноң менән Әхмәтйәндең былай ҙа күкрәгенә һыймаған йөрәген оторо ярһытты. Еңгәләре: "Етәр инде һәүеректәнеп йөрөүең, ошо йыйында, сосайып, кәләш һайлап ҡал, яңғыҙярты ҡартаяһың бит, юғиһә", — тип уйынлы-ысынлы әйтәләр ине лә баһаң. Әлеге һүҙҙәрҙе кисә генә ҡолағына шыпа элмәгән Әхмәтйән, бөгөн килеп... Ҡасандыр Гөлбикәгә ҡарата булған ҡайнар хистәренең әле өр-яңынан уяна барыуын, илаһи хистәрҙең тотоп-тыйып торғоһоҙ булып урғылыуын тойған егет күңел тыныслығын юғалтты ла ҡуйҙы.

— Һин... һеҙ ҡайһы ырыуҙан? — тип һорай алды ул, ниһайәт, уңай мәлен тура килтереп. Ә кинәт күтәрелеп ҡараған ҡыҙ нишләптер өндәшмәне, зыңғырлата көлдө лә иптәштәре араһына инеп китмәксе итте. Әммә тегеләре уны уртаға үткәрмәне.

— Аһ-аһ, һинән һорайҙар түгелме һуң, яуап бир?! — тине ҡыҙҙарҙың һары сәсле, зәңгәр күҙлеһе.

— Түңгәүерҙең беренсе мәргәне үҙе һүҙ ҡуша ла баһаң! — тип төрттөрә һалды эргәһендәгеһе. Уларын башҡалары күтәреп алды:

— Өҫтәүенә, ыстаршина ла!

— Кемгә эләгә әле ундайы?!

Ҡара күҙкәйҙең әхирәттәре, уңайы килгәндә тип, ошо рәүешле тәләкәләп ҡалырға тырышты, ә береһе, барыһынан да уҙҙырып:

— Бының һымаҡ еҙнәйҙе бөтөн Бөрйән буйлап көндөҙ майшәм менән эҙләһәң дә таба алмаҫһың, Гөлгөнә апай! — тип ебәрҙе.

— Эйе шу-ул!

— Ҡармаҡлап ҡал, Гөлгөнә-әү! — Ҡыҙҙар күмәкләшеп көлөштө, тик Әхмәтйән инде уларҙы бөтөнләй ишетмәй ине...

"Гөлгөнә! Үҙе кеүек, исеме лә ниндәй матур! — тип һөйөндө ул. Үҙенән байтаҡҡа йәшерәктәрҙең тиңдәштәрендәй күреп шаяртыуҙарына һис үпкә белдермәне. – Гөлгөнә... Гөлбикә..." Йөрәген һыҡратып ҡапыл ғына Гөлбикәһе иҫенә килеп төштө. Йәшерен-боҫортон ғына осрашыуҙары, яратҡан аҡландарында береһенең ҡосағына береһе сумып иркәләнеүҙәре, бер-береһенең күҙенә ҡарап туя алмай аҙапланыуҙары, һөйөлөп бөтмәгән һөйөүҙәре, һөйләшеп бөтмәгән һүҙҙәре. Аһ, иҫләй китһәң!..

— Кисер мине, Гөлбикә! — тип ҡуйҙы ул, үҙе лә һиҙмәҫтән.

Күпме өмөтләнһә лә, был кисте Әхмәтйәнгә Гөлгөнә менән икәүҙән-икәү генә, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшергә насип итмәне.

Йыйындың икенсе көнө, һауалағы турғайға ҡушылып, йыр бәйгеһе менән башланды. Алдан юрағанса, бәйгелә йырға маһир үҫәргәндәр алдынғылыҡты бирмәне.

Ошонан һуң бейеүселәр көс һынашты. Уларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәткән Әхмәтйәндең йөрәген оторо яндырып, бер саҡ бөрйәндәр яғынан Гөлгөнә

сыҡты. Ҡыҙҙың һәләк килешле кәүҙәһе, көйгә тура килтереп баҫыуы, ҡояш нурҙарында йәйғорҙоң барлыҡ төҫтәрен сәсеп йылҡылдаған уҡалы, көмөш тәңкәле еләне тамаша ҡылыусыларҙың һәммәһен әсир итһә, Әхмәтйәнде һушһыҙ ҡалдырҙы. Гөлгөнәнең оҫталығы һүҙһеҙ ине. Беренсе урын һис икеләнеүһеҙ уға бирелде. Шулай итеп, бейеүселәре менән элек-электән дан тотҡан бөрйәндәр был юлы ла бер кемде алдарына сығарманы.

Ҡурай бәйгеһе айырата ҡыҙыҡлы үтте. Ҡурайсыларҙың барыһы ла тиерлек бер-береһенә торошло ине. Тамъян ҡурайсыһы Абдразаҡ менән Түңгәүер ырыуы оҫтаһы Батырхан араһындағы алыш бигерәк тә ныҡышмалы үә сәмле барҙы. Беренселекте кемгә бирергә белмәй йөҙәп бөткән ярсылар[254] йәнә берәр оҙон көйҙө әүәл әңгә, унан кукрәккә һалып, ахырҙа өҙләп уйнарға, шунан тарихын һөйләп бирергә ҡушты. Ошо ерҙә ҡартайыуҙы белмәгән Батырхан һунарсы барыһын шаҡ ҡатырҙы. Ул әлегәсә уйнаған туғыҙ тотам ҡурайҙы ситкә ҡуйҙы ла түңгәүер ҡурайын килтереп сығарҙы. Был ҡурайҙың ҡәҙимгеһенән айырмаһы шунда: уның тишемдәре йыуан яғында тишелә, ә ауыҙға нәҙек башы терәп уйнала. Был мөғжизә – тамашасыларҙың күбеһе тәү тапҡыр күрә. Ҡабатланмаҫ оҫталыҡ менән башҡарылған аһәңле көйҙән таң ҡалған кешеләр бер талай һуштарын йыя алмай торҙо.

— Бына был түңгәүер ҡурайы булыр, ағай-эне! — тине Батырхан, уйнап бөткәс тә, йәшерелмәгән ғорурлыҡ менән. Уны алҡыштарға күмделәр ҙә ҡатҡат һорап уйнаттылар. Ә Абдразаҡ башҡаса көй көрәштереп торманы, ихтирам йөҙөнәнме, әллә булдыра алмаҫын һиҙҙеме – үҙенең еңелеүен танып, дәғүәсеһенең ҡулын ҡыҫты.

Төш ауышҡанда ныҡ билле, бүрәнәләй йыуан беләкле, ай буйына тәкә ите ашап, йома һайын йылы һөт, сей йомортҡа эсеп ифрат ентекле әҙерләнгән сәмле бәһлеүәндәр майҙан тотто.

Былдай йыйындарҙа көрәшсе даны айырата һиммәтле. Батыр даны — ырыу даны. Бил һынашырға көсһөҙҙәр менән ебегәндәр сыҡмай, ә ирмен тигән арыҫлан йөрәкле ирҙәр, сәме лә, ғәйрәте лә ташып торғандар ғына баҙнат итә. Майҙан тотоу һиңә – еңел-елпе уйын уйнау түгел.

Йыйындағыларҙың береһе лә көрәшкә битараф ҡалманы. Дөрөҫөрәге, ҡала алманы. Барыһы бергә, түңәрәк яһап, көрәш майҙанын алдан уҡ уратып алды. Ырыу башлыҡтары, аҡһаҡалдар баш ярсы менән уның ярҙымсыларын да үҙҙәре тәғәйенләне. Быныһы ла элек-электән шулай килә: көрәште ярсының иң намыҫлыһы, иң ғәҙеле хөкөм итергә тейеш.

Бәйгене, боронғоса, малайҙар башлап ебәрҙе. Унан үҫмер егеттәр бил һынашып, иң аҙаҡҡа һыналған көрәшселәр ҡалды.

Тәүҙә шыбаға тотоштолар. Буй йә ауырлыҡтың бында әһәмиәте юҡ: кемдең бәхетенә кем эләгә. Даланыңа ҡарап... Бер сама күңелсәкләнеп киткән Биксәнтәй ярыш алдынан:

— Һынатма, улым, һиңә ырыу күҙ терәп тора, — тип Ғайсаны ҡанатландырҙы.

— Хужаларҙың еңеүе оҡшап етерме икән? — тип йылмайҙы уныһы уйынлы-ысынлы.

— Башҡа бәйгеләрҙә, бәлки, оҡшамайҙыр, әммә көрәшкә был ҡағылмай. Шуны аңла: ырыу даны бөгөн һинең ҡулда. Беҙгә Көтөр батырыбыҙ бәҫен төшөрөү ярамаҫ, — тине Әхмәтйән дә.

---

[254] *Ярсы — хөкөм итеүсе, судья.*

— Аңлашыла. — Соғолланып киткән Ғайсаның яуабы ҡыҫҡа булды.

Үҫәргән бәһлеүәне бигерәк яман күренә. Баштан уҡ Ғайсаның һеркелдәгәне шул ине, балыҡсы балыҡсыны әллә ҡайҙан күрә, тигәндәй килеп сыҡты... Дәғүәселәрен берәм-һәрәм һелтәп бөткән Ғайса менән инде даны сыҡҡан үҫәргән батыры Биккенә аҙаҡҡа ҡалдылар.

Көрәштең иң ҡыҙығы ла, иң көсөргәнешлеһе лә ошо алыш булды. Ҡулдарына ҡушаҡ[255] урап тотҡан баһадир кәүҙәле ике ир-азамат, ҡапыл да билдәренән алырға ашыҡмай, бер-береһен самалағандай, бына-бына маңлайға-маңлай бәрелешергә әҙер уҫал тәкәләр һымаҡ ҡараш текәшеп, бер талай майҙан уртаһында әйләнделәр. Ғайса, ғәҙәттә, дәғүәсеһен кинәт кенә билдән эләктерә лә, уныһы иҫенә килеп өлгөргәнсе, кейек етеҙлеге менән баш аша һелтәп тә ебәрә. Был юлы ла шул алымды ҡулланмаҡсы иткәйне, әммә ергә береккән имән төбөләй ауыр кәүҙәле Биккенә ярыш барышында дәғүәсеһенең был алымын һиҙеп алған ине инде, шуның өсөн уға әҙер булып сыҡты. Хәйләкәр Биккенәне тәүге ынтылышта ерҙән айыра алмаған Ғайса бары көсөн генә сарыф итте. Киреһенсә, һис көтмәгән мәлдә Биккенә Ғайсаның билен шытырлатып ҡыҫып, бөйөрөн иҙҙе лә саҡ алып һелтәмәне. Ҡушағы тайып китмәгәндә, Ғайсаның эше харап ине. Ошонан һуң һағая төшкән түңгәүер көрәшсеһе абайыраҡ ҡыланырға тырышты. Үҙе бил бирмәгән Ғайса Биккенәне биленән матҡып ҡарай, әммә уныһының да биле таш ише ҡата ла ҡуя, ҡушаҡ тайпаҡлап тик тора. Батырҙар, бер-береһен ауҙара алмай, оҙаҡ айҡашты. Ҡарап тороусылар шаулашып гөж килә, һәр кем үҙ көрәшсеһен дәртләндерергә тырышып ҡысҡыра, ҡеүәт бирә. Ярыш ҡомарына бирелеүҙән, хатта, хужалар ҡунаҡтарға ҡарата ихтирамды, ә улары тыйнаҡлыҡ тигән нәмәне бер аҙға онотоп китте һымаҡ.

Ахырҙа ярсылар тамам әлһерәгән көрәшселәрҙе туҡтатып, аҙ ғына тын алырға ирек бирҙе. Еңеүсене асыҡлар өсөн һуңғы сара – ҡушаҡтарҙы батырҙарҙың билдәренә бәйләп көрәштереү. Тотоуы ла ҡулайлы, шыла һалып та бармай.

Ҡыҫҡа ғына ял аҙағынан батырҙар йәнә яҫҡыша башланы. Көс менән алдыра алмаҫын аңлаған Ғайса бәләкәй генә хәйләгә барырға ҡарар итте: ул, ныҡ ярһыған үгеҙ шикелле, яурыны менән Биккенәне артҡа этәрә башланы. Дәғүәсеһенең ниәтен ҡапыл ғына төшөнөп етмәгән Биккенә, көс бирмәҫкә була, кәүҙәһенең бөтөн ауырлығын һалып ҡаршылашҡан ыңғайға, алға эйелә төштө. Шуны ғына көтөп йөрөгән Ғайса, ҡушаҡты өҙөлөр хәлгә еткәнсе матҡып, Биккенәне кинәт үҙенә тартты һәм күкрәгенә һалған көйө, тубығына ултырта биреп, ерҙән айырҙы ла, артҡа ҡолап барышлай, башы аша алып быраҡтырҙы. Ете-һигеҙ ботлоҡ кәүҙә сиҙәмгә гөрҫ итеп барып төштө. Үҫәргәндәр "аһ" итте. Һырт буйы менән бөйөр тирәләре ҡанһырап торған Ғайса маңлайынан субырлап аҡҡан тирҙе һөртөп алырға ла өлгөрмәне, түңгәүерҙәр уны күтәреп һауаға сөйҙө.

— Һай, мәрҙәс!

— Вәт көс-ҡеүәт үҙендә!

— Егетең шауҡымлы! Һүҙ юҡ.

— Көтөр данын ҡайтарҙы бит, ә!

— Булдырҙы! Әйтмә лә!

---

[255] *Ҡушаҡ — билғау.*

Хәлһеҙләнеп, быуынһыҙ ҡалғанлыҡтан ырыуҙаштары ихтыярына бирелгән Ғайса бер өҫкә, бер аҫҡа осто. Һуңынан ул көрәштең төп бүләге — ҡусҡар мөгөҙлө, гөжләп торған йәшәмеш ҡуй тәкәһен күтәреп иңбашына һалды. Башҡа көрәшселәргә лә шәп бүләктәр эләкте.

Бәйге тапшырыуҙың ҡыҙған мәлендә:

— Аттар килә! Аттар!!! — тип малайҙар яр һалырға тотондо. Йәйәүле кеше ярты көндә үтер арауыҡҡа иртән үк сығып киткән аттарҙы дүрт күҙ менән көткән кешеләр шул яҡҡа йөҙ бора һалды. Башҡортмон тигән башҡорт ат бәйгеһенә битараф ҡаламы инде?! Арғымағыңдың нимәгә торошо ла, уның өҫтөндәге малайҙың сослоғо ла ошонда һынала.

Төп алыш тамъяндарҙың һоро дүнәне менән Тарлан буҙ араһында булды. Майҙанға бер башҡа ғына алданыраҡ килеп ингән Тарлан буҙҙы тыйыңҡырап килгән Дәүләтбай, ҡунаҡтарҙың күңелен уйлап, атаһының шыпырт ҡына ҡушыуы буйынса, ҡыя ҡолға осона бәйләнгән беренсе бүләк – һебәгә һонола бирҙе лә, яҙа тотҡан кеше булып, үтеп китте. Һебә — өр-яңы сарыҡ – тамъян үҫмеренә эләкте, яҡташтары уға шау-гөр килеп ҡул саптылар. Шулай итеп, йыйындың икенсе көнө лә әкренләп тамамланыуға яҡынлашты.

Кискелеккә йәнә саҡырышып һыйлашыуҙар, кәйеф-сафа ҡороп ултырыуҙар башланды. Хәҙер инде ырыу башлыҡтары ҡолпалы батырҙарын яландың ҡап уртаһына ҡуйылған төп тирмәгә, үҙ яндарына, алды.

Кемдер ҡурайҙа һыҙҙырып "Ете ырыу" көйөн уйнап ебәреүгә, барыһы берҙәй булып, уға ҡушылып йырланы:

*Күгәреп тә ятҡан Урал тауы –*
*Ете лә ырыу илдең төйәге.*
*Ирек яулап үлгән иркәйҙәрҙең*
*Шунда ята изге һөйәге...*

Ҡыя ҡолға буйлап менеү, шыймалаҡ һырғауылға үрмәләү, көршәк ватыу, ойотҡанлы табаҡ эсенә башты тығып тәңкә эҙләү ярышында ҡатнашыусылар ҙа бер мәлгә туҡтап, күмәк йырға ҡушылды. Күңелдәрҙе илаһи кисерештәр сорнап алды. Әлеге кисерештәрҙә, ғорурлыҡ ҡатыш шатлыҡ-ҡыуанысы менән бер рәттән, йәшерен һағыш та һиҙелә ине.

Йырҙан дәрт алып, саманан тыш хисләнеп киткән Әхмәтйән урынында ултырып сыҙаманы. Биксәнтәй байҙың ҡолағына эйелеп: "Ағый, һин бында күҙ-ҡолаҡ булып тор эле, мин майҙанды урап киләйем, берәйһенең йомошфәләне булыуы бар", — тип хәйләләп тирмәнән сыҡты. Ирәйә биреп торғандан һуң ул тәүәккәл аҙымдар менән Бөрйән тирмәләре торған тарафҡа ыңғайланы. "Ни булһа — шул булыр. Ятып ҡалғансы атып ҡалыу кәрәк. Аҙаҡ үкенесе булмаһын..."

Ситтәге тирмәгә етеп килгәндә, ҡаршыһына ете-һигеҙ йәштәр тирәһендәге малай осраны. Көнгә янған ҡоңғорт йөҙлө, ялан аяҡ малай үтмәҫ бысаҡ менән йәш еректән һыбыҙғы йүнләп маташа ине.

— Ҡустым, Гөлгөнә апайыңды саҡыр әле мында, — тине Әхмәтйән, йомшаҡ итеп. — Бер ағай көтә, тиген.

Егеткә һынамсыл ҡарап торған малай йораты мыршылдатып танауын тартты ла көтмәгәндә:

— Бәке бирһәң, — тип һалдырҙы.

Аптырап ҡалған Әхмәтйән кеҫәһен ҡапшаған булды: кәрәкмәгәндә йөрөй ине бәкеһе, кәрәк сағында янда юҡ.

— Бирермен... Аҙаҡ... — Егет инәлгәндәй итте. — Тегендә ҡалған.
— Әпкил дә...
— Ә быныһы бармаймы?
— Нимә ул?
— Көмөш тәңкә.
Ут күҙле шуҡ малай әүәл ышанып етмәгәндәй торҙо, ахырҙа йүгереп китте. Бара биргәс, артына боролоп: “Алдаһаң, ҡара уны!” — тип киҫәтергә лә онотманы. Әхмәтйән, йылмайып, башын сайҡаны: “Вәт шилма, ә! Вәт йылғыр!”
Ул селтерәп ятҡан шишмә һыуына текәлгән көйө уйға ҡалды: һүҙҙе ниҙән башлар икән? Эйе, байтаҡ ғүмерен айт-два баҫып әрмеләрҙә үткәргән сотниктың был эштә бөтөнләй тәжрибәһе юҡ иҫәбендә. Мөхәббәт эше – хәрби эш түгел, күпкә ҡатмарлыраҡ та, сетерекле лә. Мөхәббәтең ғүмерлеккә булырға тейеш...
— Ҡайҙа, кем саҡырта, Айбулат? — Әхмәтйән иркәләп һөйләшкән ҡыҙ тауышына һиҫкәнеп китте.
— Ана ултыра, ерек төбөндә! — Быныһы теге малай ине. — Апайымды әпкилдем, ағай, бир тәңкәңде.
Уңайһыҙланыуынан ҡыҙарынып китте Әхмәтйән, шулай ҙа әйткән һүҙендә торҙо: малайҙың йәйелгән усына көмөш һумлыҡ йомдора һалды. Ошоно күреп алған Гөлгөнә:
— Әһ-һә, малай аламаһы! Мине тәңкәгә һатып йөрөйһөңмө әле! — тине лә алһыу сикәләренең ҡап уртаһында килешле генә соҡорсоҡтар барлыҡҡа килтереп көлгән булды. — Ҡайт әле, мин һине...
— Көймә уға, Гөлгөнә... Һине мин саҡыртҡан инем.
— Аҡсаға әүрәтеп, баланы боҙаһың да баһаң, старшина! — Гөлгөнә йәнә көмөш ҡыңғырауҙай зыңғырлатып көлдө.
— Шулай килешкәйнек. Янда бәке булмағас...
— Йә, ни йомош, ырыу башы? — Башын бер яҡҡа һала биргән ҡыҙ серле генә йылмайып ҡуйҙы.
— Йомош тиһәң... йомош һымаҡ та түгел инде... һүҙем бар...
— Әйт һуң.
— Әйтеп кенә уны аңлатып булырмы икән?
— Шул тиклем ҡатмарлымы ни?
— Унан да ҡатмарлырағы донъяла юҡтыр...
“Гөлгөнә-әү! Ҡайҙа китеп баттың да ҡуйҙың?!” — Шишмә ярындағы ҡаҙан янынан сәрелдәк ҡатындар тауышы ишетелде.
— Ә һин ҡыҫҡа ғына итеп әйт, — тине тулҡынлана башлаған ҡыҙ, — нимәһенә уратып-суратып торорға...
— Нисек тием икән... — Әхмәтйән ыҡ-мыҡ килде.
— Әрмеләрҙә йөҙ башы булып көмөш миҙал алғанһың, ә ҡыҙҙар менән һөйләшергә ҡурҡаһың. Шундай һалдаттары менән ҡайҙан алға барһын инде Рәсәй! — Гөлгөнә шаяртмаҡсы итте, әммә шаярыуы килеп сыҡманы.
— Ҡыҫҡаһы былай... — Барлыҡ ихтыяр көсөн туплаған Әхмәтйән Гөлгөнәгә яҡыныраҡ килде лә төпһөҙ күл ише күҙҙәргә текләп торҙо. Аҙ ғына ғәжәпһенеү ҙә, йәшертен өмөт тә сағыла ул күҙҙәрҙә. Һылыуҙың бар булмышы: “Йә, әйтә һал да!” — ти ине. Һәм Әхмәтйәндең урынһыҙға тартынып тороуы, ҡул менән һыпырып алғандай, ҡапыл юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Дөрөҫөрәге, ҡаршыһындағы

ҡыҙҙы ла, үҙен дә ғазаплап, башҡаса тыйылып торор көс таба алманы.

— Гөлгөнә, һин миңә оҡшайһың, — тине ул ҡабалан-ҡарһалан.

— Оҡшарға мин һиңә тәтәйме әллә? Һи-һи-һи...

— Мин ихлас әйтәм, Гөлгөнә, ысын йөрәктән...

Кинәт кенә етдиләнеп киткән ҡыҙ, ҡыр кәзәһеләй һикерәнләп, тирмәләр яғына йүгерҙе. Күпмелер үткәс, туҡталып кинәт бороолдо һәм һис көтмәгәндә: “Оҡшата икән, егет кеше яусы ебәрә!”— тип ҡысҡырҙы ла ары осто. Уйһыу урындың оҙон күрәне араһында уның ике толом осо, ике биҙәкле күбәләктәй, йәлп-йәлп итеп ҡалды. Хәҙер инде Әхмәтйәндең йәне лә, тәне лә ярһыны, ошо минуттан уның өсөн тыныслыҡ бөттө. Бөрйән ҡыҙы Гөлгөнә йөрәк түрендәге ҡылдарға ҡағылды ла, йоҡомһорап, юҡ, йоҡлап ятҡан хистәрҙе уятты ла ебәрҙе. Ул егеттең бар тыныслығын ғына түгел, ә йөрәгенең үҙен һурып алып китте. “Яусы ебәр! Тураһын әйтте лә баһаң! Тимәк, ул да битараф түгел. Була бит ҡыҙҙарҙың да араһында иҫ китмәле саялары, ә!..”

Әхмәтйән төп тирмәгә әйләнеп ҡайтҡанда, киске эңер төшкән ине инде. Аҡһаҡалдар, ырыу башлыҡтары, батырҙар, елбер кәндил[256] яҡтыһында донъяуи хәлдәр, бөгөнгө көн, үткән бәйгеләр хаҡында гәп һатҡан ыңғайға, алдарындағы һый-хөрмәт тураһында ла онотоп ебәрмәнеләр. Уның араһында ҡурай моңо, йыр тыңлап та илһамланып ултырҙылар. Тик Әхмәтйән генә быларҙың берәһен дә ишетмәне лә, күрмәне лә. Сөнки ишетерлек тә, күрерлек тә хәлдә түгел ине...

Иртәгәһе көндөң байтаҡ өлөшө юлға йыйыныу менән үтте. Инде яҡынайып, ҡай берҙәре хатта туғанлашып та бөткән кешеләргә айырылышыу мәле яҡынлашты.

— Йә, нәүбәттәге йыйынды үткәреүҙе кемгә тапшырабыҙ? — Биксәнтәй, йола-ғәҙәткә ярашлы, ырыу башлыҡтарын күҙҙән үткәрҙе.

— Хәҙер асыҡлайбыҙ уны! — Яндырайланып киткән Ҡолоҡас мулла алдан әҙерләп ҡуйған осло таяҡты ергә ҡаҙаны. — Әхмәтйәндән башҡағыҙ шыбаға тотоноғоҙ. Иң йәше алдан башлай.

Шул рәүешле дүрт ырыу башлығы шыбаға тотошто. Иң өҫкә Алтынса сыҡты.

— Мына, киләһе йыйындың да хужаһын белдек, — Биксәнтәй, ихлас йылмайып, һары бал тултырылған баҙыянды Алтынсаға тотторҙо: — Төклө ҡулың менән көрәгәне ҡабул итеп ал. Ян-яҡтарға ат саптырып: “Фәлән ваҡытта Үҫәргәндең фәлән урынында дәү йыйын була! Ҙур һый, уйын-көлкө, төрлө бәйгеләр ойошторола. Батырҙар, ҡурайсылар, мәргәндәр, йырсылар һуңламай килеп етһен! Кемдең һөнәре менән таҫылына ҡушылып, теләге бар – һәммәһе лә килһен! Берәһе лә ҡалмаһын!” — тип оран һалыуыңды көтөп ятырбыҙ, Алла бирһә.

— Амин, шулай булһын! — Күмәк тауыш уның һүҙҙәрен күтәреп алды. Хушлашҡанда ҡурайсылар, ҡумыҙсылар, думбырасылар бөтәһе бер булып, уларына йырауҙар ҙа ҡушылып, “Урал”ды башҡарҙы:

*Урал да гына, Урал, ай, тиһегеҙ,*
*Урал гына буйы ҡыҙырым сауҡа икән,*
*Уралҡайҙы маҡтап бер йырлаһаң,*
*Күңелдәргә үҙе лә зауҡы икән...*

---

[256] *Кәндил — сыраҡ шәм.*

## IX. Ҡуңалтаҡ тормоштан ҡасып...

*...Эсер ҙә инем, әсе бал булһа,*
*Йәш йөрәккәйҙәргә ял булһа*
*Ир-егеткәй илдән китмәҫ ине,*
*Ҡулдарында уның мал булһа.*

(Халыҡ йырынан)

Әхмәтйән Өмөтбаевтың ғүмер юлында шаулы шаршыһы ла, шомло ятыуы ла етәрлек булды. Күптәр шикелле, йәшәйеш уны ла байтаҡ ҡаҡҡылап-һуҡҡыланы. Әле бына ул — Түңгәүер олоҫо старшинаһы, һаҡалы дала ҡылғанылай ағарып, мыйығы менән ҡаштары ҡырау һуҡҡан йәшләүек ише ҡыуарған, ялт иттереп ҡырылған таҡыр башына уҡалы түбәтәй кейгән етмеш биш йәшлек ил ағаһы, — һирәк эләккән форсаттан файҙаланып, күҙ асып йомғансы үтеп киткән үҙе тынысһыҙ, үҙе онотолмаҫ шанлы ла ғүмер юлын – еңелдән булмаған үткәндәрен барлап күтәрмәлә ултыра. Ҡулында уның таушалып бөткән боронғо китап. Китап эсендә бына инде ҡырҡ йылдан ашыу ҡәҙерләп һаҡлаһа ла, ваҡыт үтеүҙән һарғайып бөткән иҫке ҡағыҙ ос-тоғо. Йылдар үтеп, Хаҡ Тәғәлә тарафынан бирелгән һанаулы ғына көндәрең кәмей, әкренләп бер мөйөшкә ҡыҫырыҡлана барған һайын, Әхмәтйән ошо, үҙе йәнһеҙ булһа ла, ниндәйҙер наҙ, йылылыҡ бөркөп торған ҡағыҙ битен йышыраҡ иҫенә төшөрөп, ҡулына алыр булып китте. Әле лә мөйөш-һәйеше ҡырылып, ситтәре киртмәс-киртмәс йыртыла башлаған ҡағыҙҙы ҡалтыранған ҡулдарына алып, ул уйға ҡалды...

...Теге ваҡыт, болғауыр дәүерҙәрҙә онотола башлап, ҡабат тергеҙелгән йолайыйынды Түңгәүер ерендә үткәргәндән аҙаҡ, ҡунаҡтарҙы оҙатҡандан һуңдың икенсе көнөнә, Биксәнтәйҙе йәнһеҙ килеш таптылар бит. Ҡарт кешенең былай ҙа яралы йөрәге мәртәбәле байрам тантанаһы кисерештәрен, оло ҡыуанысты күтәрә алмаған, күрәһең, йоҡларға ятҡан килеш тибеүҙән туҡтаған. Әхмәтйән уға Бөрйән яғының Тимер ауылына яусы ебәрергә ниәтләп йөрөүен дә әйтеп өлгөрмәне. Бер ямандың бер яҡшыһы, бер ҡыуаныстың бер ҡайғыһы, тигән һымаҡ килеп сыҡты. Кисә генә Һаҡмар буйында байрам ине, бөгөн килеп хәсрәт ябырылды. Хәйер, бер Һаҡмар буйына ғынамы, ҡара ҡайғының шәүләһе бар ырыу иңенә емерелеп төштө. Биксәнтәй Юламановты ерләгәндә бөтә Түңгәүер иле ҡан иланы. Сапҡын ебәреп күрше ырыуҙарҙы ла йәүкәләй һалдылар. Хәбәр барып етмәгәндәре лә, әллә ҡайҙан ишетеп, ер аяғы ер башы ерҙәренән үҙҙәре килеп етте. Шулай итеп, ҙур йыйын уйламағанда-көтмәгәндә ҙур матәм менән барып тамамланды. Кем уйлаған инде, йә...

Бер яҡтан ҡайғы бөрөп алған, икенсе яғынан Гөлгөнәһен һағыныуҙан һағышланып, уны тиҙерәк янына алырға ашҡынған Әхмәтйән башта нишләргә лә, ҡайҙа барып һуғылырға ла белмәй аҙапланды. Ахырҙа, түҙмәй, Ҡолоҡас муллanan кәңәш һораны.

— Хәҙрәт, яусы ебәрергә ине ниәт, — тине бер аулаҡта осрашҡандарында. – Бынау хәсрәтле осорҙа оҡшап етерме икән, тип шикләнәм тағы.

— Ваҡыты еткәс, һәммәбеҙ ҙә шунда булырбыҙ, улым. Тыуымдан ҡалмағанды, әжәлдән ҡотолоу юҡ. Үлем менән йәшәүҙең юлдары айырым булһа ла, беренсеһе икенсеһе менән, мөҙҙәте еткәс, барыбер киҫешә. Иртәме-һуңмы әжәл тигәнең барыбер өҫтөнлөк алыр. Уның ҡайҙа һағалап торорон да, ҡасан килеп етерен дә белмәҫһең. Шуға күрә берәү, мәрхүм булып, фанилыҡтан китә икән, ҡалғандарға, төшөнкөлөккә бирелеп, донъялыҡ рәхәтенән ваз кисә

йөрөү яраған эш түгел,— тип унығы фатиха биргәндәй итте: — Тереләр йәшәйеште дауам итергә тейеш. Йән биргәнгә йүн биргән: нисек тә йүнен табып йәшәргә, нәçелде дауам итеп, милләт менән тоҡомдо ишәйтеү лазым. Былай ҙа бөтмәç күтәрелештәр, кәрәккән дә, кәрәкмәгән дә айҡаш-һуғыштар арҡаһында арына алмай, түшәлә-ҡырыла һис кенә лә мандып китә алмайбыҙ ҙа баһаң. Артыу түгел, киреһенсә, һаман бөлә барабыҙ, бөтә барабыҙ һымаҡ. – Мулла ошо рәүешле оҙон ғына вәғәз дә уҡып ташлаған ине.

Әхмәтйән, хәҙрәттең ризалығын алғас та, эште оҙаҡҡа һуҙып тормаçтан, мәрхүмдең ҡырҡ көнөнән һуң, кәләшен әйттереп тә ҡайтты.

...Дегете бөткән ауыр ҡапҡаның ҡыҙғаныс шығырлап асылып-ябылғанынан аҙаҡ Аҡтырнаҡтың йыбау ғына өрөп ҡуйыуы Әхмәтйәндең осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарын бүлдерҙе.

— Һаумы, олатай, Гөлгөнә өләсәй өйҙә микән? — Түбәтәй кейгән еүеш танау малай Әхмәтйән алдына килеп баçты ла итәғәтле генә итеп сәләм бирҙе.

— Өйҙә, өйҙә, бар ин, — тине олатай кеше.

— Әсәйем сәйгә әйтергә ебәргәйне...

— Инеп әйт, улым, үҙенә әйт.

Малай, мырш иттереп танау тартҡандан һуң, ҡырып йыуылған ап-аҡ иҙәнгә ялан аяҡтары менән сәпелдәтә баçып өйгә инеп китте.

...Кем балаһы булды һуң әле? Элек, ауыл йәтеш сағында, көлләһө лә беренбере — олоһо кесеһен, малайы ҡартын танып белер ине. Ауыл хәҙер самаһыҙ ҙурайҙы. Әхмәт ауылы — олоç үҙәге, бөгөн әллә ҡайҙарға йәйелеп ята. Хатта тәүге мәлдәрҙә ярайһы уҡ иркен һымаҡ күренгән Һаҡмар туғайына ла һыймай башланы. Яңы өйҙәр һалырлыҡ урын да юҡҡа тиң. Көтөүлектәр менән сабынлыҡтар ҙа инде тарайып, күмәк мал тапауҙан саңдауға әйләнеү өçтөндә, байтаҡ ҡына көтөүлек ерҙәре һөрөнтөгә әйләнде. Бойҙай-һоло сәсеп, бер ни тиклем уңыш йыйып алған булалар. Һолоһо, ярай инде, көҙгө ҡырауҙарға бирешә һалып бармағас, уңышты ла мул ғына бирә. Хәҙер элекке кеүек иткәме, башҡаһынамы алыштырмаҡҡа ялан яҡтарына сығып китеп, аҙналар буйы аҙаплана йөрөүҙәр бөттө, шөкөр. Тик шуныһы: һолоно артыҡ һуңға ҡалдырырға ярамай. Өлгөрөп еткәнен һағалап ҡына тороп, ҡыçҡа ваҡыт эсендә һуғып алыу кәрәк. Тулышып бешкән һоло аҙ-маҙ ғына елгә эләгеп һелкендеме — ярты уңышың ерҙә ҡалды тигән һүҙ. Ерҙән алған – ерҙә ҡалған, тиһәләр ҙә, йәл бит әле ул. Игендең иң бешкәне, иң тосо, иң туғы ҡойолоп йәнде әсетә, әрәм була. Ә бойҙайға ҡарап-ҡарап йөрөй ҙә Әхмәтйән, шундай һығымтаға килеп ҡуя: был яҡтарҙа, бигерәк тә Һаҡмар буйында, уны үçтереүҙең фәтүәһе юҡ. Сәсеүен сәсәһең. Матур булып, дөргөн генә шытып сыға ла, баш ҡоçоп, ем тирттерә. Әммә, урағай-ауғыс аҙаҡтары етеүгә, һөткә тулышып ултырғанда, тәүге ҡырауҙарға эләгә лә ҡуя. Ә ул мәлдә Һаҡмар үҙәнендә ҡырау төшмәй ҡалған йыл һирәк. Шуның өсөн дә бойҙайҙан мул уңыш алған йылдар бармаҡ менән һанарлыҡ. Ә бынан алыç та түгел, Ирәндек аръяғында ғына, тәүге ҡороҡҡос ҡырауҙар күпкә һуң төшә – Әхмәтйән ҡарт ошоно яҡшы белә. Бойҙайҙы ана шунда барып сәскәндә... Тереғол нәçеле менән кәңәшләшеп ҡарарға кәрәк булыр...

— Бабай, ин! Сәй эсереп китәйем. Мине Хәтифә килен саҡыртып ебәргән икән, тиҙ генә булһын, тигән. — Өйҙән Гөлгөнә әбейҙең баҙыҡ тауышы ишетелеүгә, ҡулына күстәнәс тотҡан малай ҙа килеп сыҡты.

— Һау булып тор, олатай! — тине ул ҡапҡанан сығып барышлай.

— Һау бул, балам, бәхетле бул! — Уны ҡарашы менән оҙатып ҡалған Әхмәтйән: — Шәп малай, – тип һоҡланып ҡуйҙы.

— Кемдеке булды һуң баяғы бала? — тип ҡыҙыҡһынды ул өйгә инеп, урындыҡ ситенә ултырғас.

— Тимерхан ҡәйнештеке, сырамытмайһыңмы ни?

— Батырхан ағай нәҫеле, әләйһәң. Олатаһына оҡшап бик итәғәтле булмаҡсы.

— Ни тиһәң дә, ҡан тарта. — Алтмышты уҙыуға ҡарамаҫтан, әле йәшлек холоҡ-һыҙаттарын төшөрөргә ҡабаланмаған Гөлгөнә, биҙәкле кәсәгә сәй яһай-яһай, бабайы һүҙҙәрен тәҫкид итте[257].

— Гөлгөнә, ҡабаланһаң, һин бара һал, көтәләрҙер, әҙер сәйҙе ни үҙем дә эсермен, — тип ҡатынының өтәләнгәнен күргән хужа кеше фатихаһын бирҙе. Йырлай-йырлай ирәйеп ултырған ялтырауыҡ еҙ самауыр янында яңғыҙы ҡалған Әхмәтйән бая өҙөлә ҡалған хәтер ептәрен ялғаны...

...Эйе, Тереғол ағай башланғысын бөгөн уландары, хатта ейәндәре дауам итә. Уларға ҡарап башҡорт иген игергә өйрәнде. Хәҙер ҡай бер йылды төпкөлөрәк яҡтарға әхмәттәр үҙҙәре һоло һата. Бына бойҙайы ғына эсте бошора...

Ҡасандыр саф башҡорт ауылы Һаҡмарбаштың вариҫы Әхмәттә (нигеҙ һалыусы Әхмәтйән хөрмәтенә аталған) бөгөн кемдәр генә юҡ. Мосолман динен ҡабул итеп, ошо ауылда ҡалырға йөрьәт ҡылған Тереғолдоң ғына ла нәҫел-нәсәбәһе әллә күпме! Тереғол тигәндәй, урыҫ менән башҡорт араһында аралашсы булып йөрөгәнгә күрә, Батырхан уға ҡасандыр Күкъял[258] ҡушаматы сәпәгән ине. Ана шул күкъял тора-бара әкренләп ара исеменә әүерелде лә ҡуйҙы. Кем уйлаған инде, йә. Аҙағыраҡ ҡалмыҡ Барсындан ҡалаҡтар[259] араһы таралды. Килмешәктәрҙән шулай ҙа иң ишлеһе ҡаҙаҡ малайы Табылдынан үрсеп киткән ҡаҙаҡтар араһылыр. Һан яғынан элек-электән йәшәп-килгән ҡолтой, биксәнтәй, һуна, бураш, мышы һәм башҡа аралар ҙы ла уҙып китте улар. Шулай талымһыҙ ҙа, әрһеҙ ҙә булып сыҡты ҡаҙаҡ тоҡомо. Башҡорт ҡыҙына өйләнеп ҡан аралаштырыу ыңғай тәьҫир иттеме, әллә икенсе сәбәбе булдымы, кем белһен? Ә бит тәү башта, дала кешеһе Урал төпкөлөндә ерегеп йәшәй алмаҫ, башына иҫ инеүгә аҡыл ултырып, танауы арлы-бирле еҫ һиҙә башлау менән үҙ яҡтарына ҡайтып китер, тип уйлағандар ине. Эйе, заманаһы ифрат болғауыр булды, уныһына ҡушылып кешеһе лә, хатта бөтөн халайыҡтары болғанып бөттө. Бүгәс артынан эйәрә килеп, башҡорт иленә һыйынған күпме ят бауыр ғына ла ошо ерҙә тороп ҡалды. Ҡайһы бер урындарҙа хатта саф урыҫ ауылдары менән хуторҙар барлыҡҡа килде.

...Ә теге мәл, көҙгө эштәр тамамланып, бер аҙ тын алғас, Гөлгөнәһен әйттерергә барғандан һуң, ун ете йәшлек ҡыҙҙың үҙенән бәләкәй тағы өс һеңлеһе булыр, тип башына ла инеп сыҡмағайны. Тәғәйен бүләктәре етмәне лә ҡуйҙы ла баһаң.

— Һаҙаған[260] еҙнәй — һаран еҙнәй! Һаҙаған еҙнәй — һаран еҙнәй! — тип көлдө балдыҙҙары.

— Уның ҡарауы, ҡарт алаша эште ҡайта яҡшы белә, — тине Әхмәтйән, барыбер еңде. Бурыслы ҡалманы, балдыҙҙарына бүләкте аҙаҡ мул ғына итеп таратты, “һаҙаған”ды күтәрһә лә, “һаран” исемен алғыһы килмәне.

---

[257]*Тәҫкид итеү — йөпләү, хуплау.*
[258]*Күкъял — күкъялдар араһы Әхмәт ауылында әле лә бар.*
[259]*Ҡалаҡтар — ҡалаҡтар араһы хәҙер юҡҡа сыҡҡан.*
[260]*Һаҙаған — ҡарт.*

Бер-береһенең һүҙенән сыҡмай, иңгә-иң терәшеп Гөлгөнәһе менән тигеҙ ғүмер иттеләр. Уларҙың татыулығына ҡарап барыһы көнләшкәндер. Шул сәбәпле, күптәр һымаҡ, бисә ишәйтеп торманы.

Йәнә лә Әхмәтйән ғүмер баҡый ҡарһүҙҙән[261] сыҡманы. Берәй ҙурыраҡ эш башлар алдынан һәр ваҡыт өлкәндәр менән кәңәшләшер ине, улар әйткәнгә ихласлыҡ менән ҡолаҡ һалды. Аҡһаҡалдарҙы ихтирам итә белгәнгә күрә, уның үҙен дә халыҡ яратты.

Әхмәтйәндең тормошондағы иң шаҡ ҡатырғыс ваҡиға Биксәнтәй вафатына йыл үткәс булғандыр. Ул көндө байҙың тол ҡалған ефете Йәнбикә еңгә әруах рухына бағышланған Ҡөрьән мәжлесе үткәреп, йәҙәк[262] ашы ашатты. Сәй аҙағынан ҡайтырға тип ҡуҙғалған Әхмәтйәндең ҡулына таушалып бөткән төргәк килтереп тотторҙо ла:

— Бына, ағаңдың ҡағыҙҙары, араһында берәй кәрәклеһе юҡ микән? — тип уфтана ҡуйҙы. – Ҡараштырып сыҡ та кәрәге тейгәндәйҙәрен үҙеңә алырһың, кәрәкмәгәнен кире килтер.

Урта тошо сигеүле, остары сҡлап нағышланған ҙур таҫтамалға ҡәҙер менән төрөлгән элекке, бәғзеләре хатта боронғо китаптар ине улар. Бына быныһы иҫке фарсы телендә яҙылған Ҡөрьән-Кәрим. Күнекмәгән күҙгә ул уҡыу өсөн ифрат ауыр. Ә бына ҡағыҙҙан ҡырҡып, ебәк еп менән һырылған дәфтәр. Тышлығына “Ғәмәли Һәфтийәк” тип яҙылған дәфтәргә көндөң, айҙың, йылдың нисек килеүен, ул-был көндәрҙә ниндәй мөһим дә, мөһим булмаған да эштәр башҡарылғанлығын, ниндәйерәк ваҡиғалар булып үткәнлеген – барыһын-барыһын тәфсирләп теркәп барған элекке старшина. Утыҙ йылдан ашыу яҙылған яҙмаларҙа ауылдың үткәне менән шанлы тарихы ярылып ята. Ҡай бер урындарында хатта киләсәге лә төҫмөрләнә.

Бына сәй ҡурғашы менән матур итеп тышланған мәүлит (Мәүлид ән-нәби) китабы. Әхмәтйән китапты унан-бынан аҫҡылап уҡыштыра башланы. Ошо мәл биттәр араһынан дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ осмото килеп төштө. Уның бер мөйөшөнә “Өмөтбаев Әхмәтйәнгә” тип яҙылған. Әхмәтйән, ғәжәпләнә биреп, шул уҡ ваҡытта бер аҙ тулҡынланып та, ҡағыҙҙы яҙа һалды. Эйе, ҡулы таныш. Һис шикһеҙ, Биксәнтәй ағай яҙған. Тигеҙ, матур ғәрәп хәрефтәре менән теҙелеп киткән яҙма буйлап күҙ йүгертте:

“Әхмәтйән уғлым!

Ғүмер баҡый ҡустым тип өндәшеп тә, әле уғлымдан һалдырғанға аслан аптырап ҡалма. Ошо яҙылғандарҙы сабыр ғына уҡып сыҡҡандан һуң барыһын да аңларһың.

Әлеге ҡулъяҙмаларымда мин ҡәбергә алып китер серемде асмаҡсымын. Тик һинең өсөн генә! Ә артабан инде үҙең ҡара: сер итеп һаҡларғамы-юҡмы уларҙы.

Йәш сағымда, йәне бар һәр кеше кеүек, һөйөү-һөйөлөү тигән нәмә мине лә урап үтмәне. Һүҙемде оҙон-оҙаҡҡа һуҙып тормайым: йәрәшмәккә вәғәҙәләр бирешеп бөткән кешем... һинең әсәйең ине. Әммә яҙлыҡҡан яҙмыштың киҫкен боролошо, беҙгә ҡауышырға ҡамасау яһап, ғүмер буйына Саҡ менән Суҡ ише йәшәргә мәжбүр итте. Сәбәбе — йола, ата-бабалар ғөрөф-ғәҙәте. Ҡыҫҡаһы, миңә яуҙа баш һалған ағайымдың ҡатыны Гөлзәйнәп еңгәмә үҙ иркемдән тыш өйләнергә тура килде. Шулай итеп, барлыҡ хыялдарыбыҙ күҙ

---

*[261] Ҡарһүҙ — ололар кәңәше, оло кешенең һүҙе.*
*[262] Йәҙәк — аят уҡытып, ярлы-ярлыны туйындырыу.*

асып йомған арала селпәрәмә килде лә ҡуйҙы. Башыма бер юлы ике ҡайғы ябырылды: туған ағайымды юғалтыу өҫтөнә Зөлхәмирәһеҙ ҙә тороп ҡалдым. Ҡасайыҡ та китәйек, тигән инем, риза булманы. Атай-әсәйҙәребеҙҙе, яҡындарыбыҙҙы хурлыҡҡа ҡалдырып, олатайҙар йолаһын боҙмайыҡ, тине. Гөлзәйнәп менән йәрәшеү көнө яҡынлашҡанда, Зөлхәмирәгә лә яусы килеп төштө. Уның күрше ауыл сауҙагәренә икенсе бисәлеккә барырға риза булғанын ишетеп, үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәнем, ни ҡылғанымды ла аңламайынса өйөнә барып индем. Әлеге осрашыуға Хаҡ Тәғәлә үҙе фатиха биргәндер, тип уйлайым хәҙер. Зөлхәмирә өйҙәрендә яңғыҙы ғына ине. Үҙенүҙе онотоуҙан күҙ йәштәренә быуылып, ул ҡосағыма ташланды. Мин дә шаҡшы: шәһүәтемде[263] тыйып тора алманым һәм ғүмерем буйына үкенеп йәшәнем. Етмәһә, ауыр гонаһ та йөкмәп йөрөгәнмен...

Һин хәбәрһеҙ ғәйеп булғандан һуң әсәйең ныҡ бөтөрөндө. Әҡәл сиккә етеп түшәккә йығылғас, әжәленең яҡынлашыуын һиҙептер инде, мине саҡыртып алды. Ишеткәндәремә тәүҙә аптыраһам, аҙаҡ һөйөнөп бөтә алманым. Юҡ, Зөлхәмирәнең бәхилләшеү һүҙен әйтер өсөн саҡырыуына ҡыуанманым, әлбиттә. Ҡыуанысым икенсе ине: теге мәлдәге осрашыуыбыҙҙың емеше һин булғанһың, Әхмәтйән улым! Әсәң үҙе тере саҡта шуны әйтеп ҡалырға була алдыртҡан мине. Был турала хәҙер һинең менән минән башҡа берәү ҙә белмәй. Зөлхәмирә ярты йыл ғына тормошта булып, иренең һәләкәтенән һуң, кәмһетеү-йәберҙәргә түҙә алмай, ауырыу өләсәйеңде ҡарау һылтауы менән, кире ҡайтты. Ҡайтты ла һине тапты. Атайың тип барыһы ла теге сауҙагәрҙе һананы. Зөлхәмирә һиңә ҡарап йыуанды, бары һиңә генә өмөт бағлап йәшәне. Һин юғалыу сәбәпле ул төҙәлмәҫ хәстәгә[264] һабышҡас, йәшәйешен аҙға ғына булһа ла еңеләйтмәк маҡсатында, Гөлзәйнәп кәңәше, үҙемдең йөрәк ҡушыуы буйынса, икенсе бисәлеккә һоратып, бер нисә тапҡыр яусы ебәреп ҡараным. Ыңғай яуап ала алмағас, үҙем барҙым, аңлатып маташтым, инәлдем-ялбарҙым, әммә әсәйең икенсе төрлө фекер йөрөттө: "Ғиддәт[265] ҡылып, Гөлзәйнәп еңгә өҫтөнән кәнизәк[266] сифатында йәшәйһем килмәй. Булғас бер үҙеңә генә булһын ул йән киҫәгең!" — тип тураһын әйтте. Ошо һүҙе менән мине һушһыҙ итте. Һай, рухлы ҡатын булды! Әйткәнендә һәр саҡ торор ине.

Эйе, бигерәк үҙһүҙле булды әсәйең мәрхүмә. Ҡатын кеше булһа ла, ыҙа сикһә сикте, ғүмере ахырына ҡәҙәр саяҡ ҡалып, нисек итһә итте – һине яңғыҙы аяғыңа баҫтырҙы. Ә ғүмер тигәнең күҙ асып йомған арала уҙа ла китә икән ул! Йәшәргә өлгөрмәй ҙә ҡалған һымаҡһың. Бына килеп инде үҙем дә һиҙәм: минең дә көндәр һанаулы ҡалғандыр... Эсәһе һыуым, ейәһе ризығым бөтөү өҫтөндәлер. Һуңғы осорҙа йыш ҡына йөрәгем сәнсә, күкрәгем ҡыҫып ыҙалата. Шуның өсөн, ниндәй хәлдәр булмай, өҫтә әйтелгәндәрҙе һиңә ҡағыҙ аша булһа ла белдереп ҡуйырға ҡарар ҡылдым. Нисек ҡабул итһәң дә итерһең, әммә ләкин был серҙе үҙем менән ҡәбергә алып китер көс тапманым.

Шулай итеп, Әхмәтйән улым, һинең тамырҙарыңда минең ҡан аға: мин һинең атайың булам. Үҙ ҡаным икәнлегеңде һуңға ҡәҙәр белмәһәм дә, һиҙенә инем. Һине һәр саҡ үҙ балам һымаҡ күрҙем. Һәр төрлө ярҙамымдан ҡалдырманым, йәбергә бирмәнем, ситләтмәнем. Һинең алда намыҫым таҙа. Миңә ҡарата асыу һаҡлап, ҡарыу тотма. Выжданым былай ҙа ғазаплы, һин тип йәнем өҙгөләнә.

---

[263] *Шәһүәт — енси теләк.*
[264] *Хәстә — ауырыу, сир.*
[265] *Ғиддәт — икенсегә иргә сығыу.*
[266] *Кәнизәк — һөйәркә.*

Нишләп элек әйтмәнең, тиерһең? Яуабым шул: үҙе барҙа әсәйеңдең, Зөлхәмирәнең, исемен һатҡым килмәне. Бар сәбәбе ошо ғына.

Теге көндө, һин әрмеләрҙән ҡайтып, шәрифеңде Өмөтбаевҡа үҙгәртеүеңде белгәс, һин бит Юламанов, тип ҡысҡырып ебәреүҙән саҡ-ҡа тыйылып ҡалдым. Һуңынан, ярай, олатаһы Өмөтбай хөрмәтенә шулай булһын әйҙә, тип күңелемдән генә ризалыҡ биргән булдым.

Тағы: мине улың булған өсөн старшина иткәнһеңдер, тип уйлауың бар. Быныһына ла яуап бирәм: уның өсөн генә түгел! Май сүлмәге тышынан билдәле, һинең ваҡайлығың менән отҡорлоғоңдо, оһолло үә әғләмле икәнлегеңде барыһы ла белеп-күрҙе, һине мин түгел, халыҡ һайланы, халыҡ күтәрҙе. Мин бары тәҡдим иттем генә. Шөкөр, яңылышманыҡ, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ырыу ғына түгел, бөтә олоҫ ҡолпаһын яулап өлгөрҙөң. Эшен дә емереп эшләнең, һүҙен дә әйтә белдең. Кәрәкле лә, мәртәбәле лә һүҙен! Иманым камил: артабан да һынатмаҫһың. Һынатмаҫһың һәм нәҫел-нәсәбә исеменә тап төшөрмәҫһең, тигән өмөттә ҡаламын. Бер генә нәмә үкендереп, йөрәгемде өйкәй: атайлы көйө атайһыҙ үҫтең. Кисерә алһаң, кисер, улым!.."

"Һинең бер ғәйебең дә юҡ бында, Бикс... ағ... атай!" — Әхмәтйән, мәрхүмдең рухын тынысландырырға тырышҡандай, һөйләнә ҡуйҙы. Әле генә кисергәндәренән иҫ-аҡылы киткән старшина, үҙ күҙҙәренә ышанмаған һымаҡ, яҙылғандарҙы ҡат-ҡат уҡып сыҡты.

Эйе, хата юҡ, был хат Биксәнтәй Юламанов ҡулы менән уның вафатынан бер аҙна элек яҙылған ине. Күрәһең, әжәле яҡынлашыуын һиҙгән зирәк йән, әле үҙе тере сағында уҡ атай икәнлеген белдермәксе булған, әммә саҡ ҡына өлгөрмәй ҡалған. Аһ, күпме була шундай "саҡ ҡына"лар үҙ ғүмеребеҙҙә?!

Әлбиттә, йөрәктән йөрәккә күскән был серҙе Әхмәтйәндән башҡа берәү ҙә белмәне һәм әле лә белмәй. Йәнбикә еңгәй шыр наҙан, хәреф танып, әлифте таяҡтан айырманы, ә яҙмалар унан башҡа кеше ҡулында булырға өлгөрмәне...

Атай! Буй етмәҫтәй тойолған ошо танһыҡ һүҙҙе малай сағында нисек әйткеһе килә торған ине Әхмәтйәндең! Атайлы малайҙарға ҡарап көнләшер ине, бар теләге атайлы булыу ине. Баҡтиһәң, уның да атайы булған! Хатта йәнәшәһендә йөрөгән, эргәһендә генә!.. Тик икеһе лә быны белмәгән. Их, аҙашҡан яҙмыш! Ҡәһәрле тәҡдир!

Әхмәтйән, хистәргә бирелеп китеүҙән бер аҙға онотолоп ултырғандан һуң, уҡыуын дауам итте.

"...Артабанғы яҙмамды, улым, васыятнамә итеп ҡабул ҡылырһың:

Юламан олатайың (Өмөтбай бабайҙың атаһы) миңә әйтеп ҡалдырған ине, мин, үҙ сиратымда, һиңә еткереүҙе бурысым тип һанайым.

Ауылдағы өйҙәр һаны саманан арта башлаһа, уны бүлеп яңы урынға күсереп ултыртыу, яңы ерҙәрҙе үҙләштереү яғын ҡара, тиер ине мәрхүм. Үҙеңә мәғлүм булыуынса, был эште атҡарып сығыу минең дәүерҙә мөмкин булманы. Бүленеү түгел, ошоноһон көскә аяҡҡа баҫтырып, кеше күҙенә күренерлек итеп ҙурайтып, төҙөкләндерә алынды. Ә бына һиңә олатайың әйткәндәрҙең кәрәге тейер һымаҡ. Һәр хәлдә, шуға өмөт итәйек һәм ышанайыҡ. Хоҙай әмере менән ошолай насип итә икән, кәңәшем шул: Әхмәт ауылынан мәғрип ҡарап китһәң, Ирәндек һыртын артылып аша төшкәс тә, йәйәүле кешегә бер көнлөк юл арауығында, Оло Ҡыҙыл йылғаһы ярында ултырған Ишҡол ауылынан бер аҙ түбәндәрәк, түңкәрелгән тәпәнгә оҡшаш түбә янында ифрат ҡулай ҙа, уңайлы ла сағыл булыр. Ул урындан Бейекбил тигән мөһабәт тау күренеп торор. Ана шул ергә нигеҙләнергә тырыш. Сабынлығы менән көтөүлеге етәрлек булһа, һөрөп сәсәм тиһәң, ҡул теймәгән сиҙәме тулып ята. Иртә яҙҙан ҡуйҙарыңды ҡыуыр өсөн ялан-тауҙары яҡын, һыулауы ла эргәлә. Ғөмүмән,

бөтә яҡтан уңай һәм мул урын. Әүәл үҙең барып ҡара, мин әйткәндәргә инанып ҡайт. Үҙ күҙҙәрең менән күргәнгә етмәй ул...”

Эйе, эсендә йәне бар әҙәм иртәгәһен уйламай булдыра алмай. Иртәгәһен уйлап, киләсәген йүнләп бошонмаған кеше, – атлап йөрөһә лә, үле кеше. Үндай әҙәм – тере мәйет!.. Үндайҙар үҙ киләсәгенә генә түгел, бар кешелеккә ҡурҡыныс менән янай. Ни өсөн тигәндә, улар, битарафлыҡ өҫтөнә вайымһыҙлыҡ күрһәтеп, балаларын, хатта бүләсә-ейәндәрен дә шуға өйрәтә һәм шуға ғәҙәтләндерә.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, әлеге илаһи көстө, үҙ мәнфәғәтенән сығып, башҡалар яҙмышын, бөтәндәр ғүмерен бер тин шайы күрмәй исраф итеүселәр ҙә юҡ түгел. Шундайҙарҙың береһе – инде онотола барған – Куприян-Килдеғол. Байлыҡ, дан-шөһрәт менән етеш киләсәк көсәгән әҙәм аҡтығы үҙен һыйындырған бер ҡатлы ябай кешеләрҙе һатып һәләк итеүҙән дә, кәрәкһеҙгә кеше ғүмерен ҡыйыуҙан да тартынып торманы. Араларына алдаҡ юл менән килеп инде лә, ике йөҙлө шымсы булып, аҫтыртын ҡара эшен башҡарҙы, этлек өҫтөнә хөсөт ҡылды. Яман эше барып сыҡмағас, бер ғәйепһеҙ Гөлзәйнәп еңгәй менән Гөлбикәне һәләк итте. Иң ҡәҙерле кешеләребеҙҙе тартып алып, йәнәһе, ҡон ҡайтарҙы булды.

Гөлбикә... Йә Хоҙа! Тимәк, улар бер туған булған. Ә бер туған ҡәрҙәштәр араһында мөхәббәт, һөйөшөү тигән нәмәнең булыуы мөмкинме? Юҡ! Әлбиттә, юҡ! Тик улар үҙҙәренең бер ата балалары икәнлеген ҡайҙан белһен? Хәйер, яңылыш ҡына өйләнешеп, эш зина ҡылыуға барып еткән саҡта, Әхмәтйәндең әсәһе барыбер юл ҡуймаҫ ине. Үҙ исемен һатһа һатыр – бала хаҡына дөрөҫөн әйтеп бирер ине. Шуға күрә әсәй бит ул. Бала өсөн әсәй ҡалҡан: үҙе сәсрәп китһә китә, әммә уны һаҡлап ҡала...

Ни сәсһәң, шуны урырһың: аҙағыраҡ, Куприяндың үҙенең ғүмере лә шул рәүешле ҡыйылған, тип ишетелде. Бер ус алтын өсөн уны кемдер һуйып киткән, имеш, тип һөйләнеләр. Шулай инде, мәғәнәһеҙ бәндәгә — мәғәнәһеҙ үлем...

— Бабай! Әхмәтйән!

Уйҙары менән ҡырҡ йылдан ашыу арауыҡҡа ҡапыл ғына кире әйләнеп ҡайтыуҙан, шул мәлдәге хәл-ваҡиғаларҙы бөгөн генә булып уҙған һымаҡ күҙ алдынан үткәреп хәтер яңыртыуҙан хис-тойғоларға бирелеп, донъяһын онота барған Әхмәтйән ҡарсығының тауышына һиҫкәнеп китте.

— Әү, ни булған? — тине ул, ҡабаланып.

— Ғайсабыҙ килгән, атай ниңә саҡыртты икән, ти.

— Әйттергәйнем шул... Килгәс, инһен.

— Мин һине өйҙә юҡтыр тип торһам әле. — Ишектән үк киң йылмайып килеп ингән Ғайса**, икеһенә лә ҡул биреп, һаулыҡ һорашты. — Йә, нисек йәшәп ятыш, атай, әсәй?

— Арыу әле, балам, Аллаға шөкөр.

— Әйҙә, ултыр, тап төшкө сәйгә генә... — Гөлгөнә самауыр яңыртырға йәлп-йөлп сығып китте. Ә Ғайса, йомшаҡ һырма йәйелгән тәңгәгә[267] ултырғас та, аулаҡтан файҙаланып ҡалырға ашыҡҡан һымаҡ:

— Шул тиклем ашығыс ни йомош килеп сыҡты һуң, атай? — тип ҡыҙыҡһына һалды.

Ҡарт старшина, уратып-суратып тормайса, тураһын әйтте:

---

** *Ғайса — Әхмәтйән Өмөтбаевтың өлкән улы. Көрәшсе Ғайса хөрмәтенә ҡуштырған исем.*

---

[267] *Тәңгә — бүкән, һөйәнгесеһеҙ ултырғыс.*

— Ошо арала ауыл йыйынын үткәреп алғанда, тигәйнем...

— Һуң... Тотҡарлыҡ нимәлә? Һөйләшеү ни турала булмаҡсы?

— Мына, уйланып йөрөнөм-йөрөнөм дә, олатаң мәрхүм әйтеп ҡалдырған уаҡыфҡа[268] яраҡлы, ауылдың бер ни тиклем өлөшөн бүлеп, яңы урынға күсереп ултыртырға ниәт иттем әле. Йыйында һүҙ шул турала барасаҡ.

— Һинең һүҙең, атай, беҙҙең өсөн фарман, ни тиһәң — шул булыр.

— Һин шулай тиһең дә ул, әһел нимә әйтер?..

— Кәрәк икән, әһел дә ҡаршы килмәç. Шөкөр, беҙҙең кеше утаға һүҙенән сығып өйрәнмәгән.

Ғайса, иртән малды ҡыуғас та мәсет янына йыйылырға әйтеп, кистән үк ауылды урап сыҡты.

Олоç старшинаһы Әхмәтйән Өмөтбаев дәрәжәһен төшөрмәй генә, һәлмәк баçып тәғәйен урынға килгәндә, барыһы ла йыйылып бөткәйне инде. Ошондай йыйындарҙың иң мәртәбәлеһенә генә тағыр старшина миҙалын күнгә йылҡылдатып, ҡабаланмай ғына урамдың ҡап уртаһынан килгән Әхмәтйән яҡынлашыуға, геү килгән ҡәүем тына ҡалды. Барыһы ла түҙем генә ил ағаһының ни әйтерен көттө.

— Мөхтәрәм өммәт! — тип һүҙен башланы мәсет күтәрмәһенә менеп басҡан старшина. Һорау тулы ҡараштарын үҙенә текләп торған ауылдаштарын берәмләп күҙҙән үткәрҙе. — Ваҡытығыҙҙы күп алмам, шулай ҙа хәл итәһе мәсьәлә үтә мөһим вә үтә сетерекле. Башта шул турала тәксир итеп китәйем. Хәҙер инде даими үткәрелә барған йыйын беҙҙең ерҙә өс-дүрт йылға бер уҙырға тейешле. Быйыл — бөрйәндәрҙең сираты. Хаҡ, оло йыйындар беҙҙең хәтерҙәрҙә онотолмаç эҙ ҡалдыра. Әммә тормош шау байрамдарҙан ғына тормай. Быныһын һеҙгә, ауыл кешеһенә, аңлатып тороу кәрәкмәй. Бөгөнгө ҡуналтаҡ йәшәйештә кем нисек булдыра ала, шулай көн итә. Ярлы-ябаға көскә осто осҡа ялғап йәшәй. Ә бөтөнләй доньяһы, хатта торор урыны булмаған байғош күпме?! Уныһы бер Хоҙайға билгеле. Дөрөç, мәртәбәле йыйындарҙа күңелдәр күтәрелеп, ярһыған йөрәктәр баçыла төшһә, йәшәйеш мәшәҡәттәре онотолоп, хәсрәттәр артҡа күсеп тора һымаҡ. Шулай ҙа иртәгәһен ир-атты, ҡыҙ-ҡатынды ла йәнә шыҡһыҙ тормош, ҡырыç киләсәк менән ҡыçынҡылыҡ көтә. Ҡайҙан килә һуң ул етешһеҙ мәғшиәт? Күптәр байҙарға төртөп күрһәтеп, хәллеләргә һылтана, шул рәүешле булған бәхетһеҙ ярлылыҡты уларға япһарырға маташа. Дөрөç әйтәмме?

— Дөрөç, дөрөç!

— Хаҡ әйтәһең, Әхмәтйән ағай! — Тыңлап тороусылар ҡуҙғышып алды.

— Ә кем һуң уларға ҡамасау яһай шулай үк хәлле лә, бай ҙа булырға? Бер кем дә! Бының өсөн моңһоҙ йыптыр, бөткән ялҡау булмаçҡа, башыңды аҙ ғына эшләтә белеү кәрәк.

Бөгөн, иншалла, ауылыбыҙ ҙурайып, ҡәүемебеҙ ишәйҙе, ә ер артмай ҙа, киңәймәй ҙә. Ер нисек яратылған, шул көйө ҡала килә. Кеше артҡан һайын мал-тыуар ҙа ишәйә. Бара-тора сабынлыҡ менән көтөүлектәр етешмәй башлай. Хуп, иген игергә өйрәнеүен өйрәндек, шулай ҙа барыбер тамағыбыҙ икмәккә туймай. Сөнки сәскән бойҙайыбыҙҙы ҡырау һуғып тик тора, ә, әрһеҙ булһалар ҙа, арпа менән һолонан ниндәй икмәк сыҡҡанын бөтәгеҙ ҙә белә. Шул уҡ ваҡытта Ирәндек аръяғында, беҙҙән ни бары илле-алтмыш саҡрым арауыҡта, ялан кешеләре аҡ ҡалас ҡына ашап ятмаһалар ҙа, икмәк наҡыçлығына һис зарланмай. Ундағы әҡлим, аптырарһың, күпкә йомшаҡ. Унда беҙҙәгенән һиҙелерлек йылы, көҙгө ҡырауҙар ҙа һуң төшә, шуның өсөн дә бойҙай

[268] *Уаҡыф — васыят, аманат итеп әйтелгән һүҙ.*

бешеп өлгөрә. Ҡалимәмдең ҡыҫҡаса мантиғы шунда, ағай-эне: тарих төпкөлөнән килгән йолаға ярашлы, ҡорт-ҡәрим ишәйеп, ер тарығыуҙан ҡыҫынҡы була башлай икән, ата-бабаларыбыҙ бергә-бергә уртаға һалып һөйләшер ҙә, самалап бүленеп, яңы урын һайлар үә шунда күсенеп ултырыр булған. Беҙгә лә шул көн килеп етте, тип уйлайым. Әйткәндәрем аңлашылалыр?

Әхмәтйәндең тел төбөн, әлбиттә, аңланылар, әммә әлегә бер кем бер нәмә тип тә өндәшмәне. Күренеп тора: тыуған ере менән тамыр йәйгән төйәген ташлап береһенең дә киткеһе килмәй.

— Бүленеү ҙә, күсенеүе лә уның — бөгөнгө көн талабы. — Ныҡыш Әхмәтйән өгөт-нәсихәт уҡыуын дауам итте: — Күрмәй йөрөмәйһегеҙ: көтөүлектәр етешмәй, булғаны тапандыға әйләнә, шунлыҡтан сабынлыҡтар ҙа тарая. Малыңды ҡырғараҡ ҡыуыр инең, эт-ҡошона осрап, ҡазалана һалып бара йә иһә уғры-оңҡорттары тәләфләп китә. Ошондай ҙур ауыл өсөн бер Сатра йәйләүе генә хәҙер аҙ. Хәйер, бишҡайындыҡылар, Күгиҙел ауылы менән баймырҙалар, яҡын-тирәләге башҡалары ла, әкренләп, беҙҙең көндә ҡала бара — ерҙәренә шыпа һыймайҙар. Шуға күрә барыбыҙ өсөн дә сахради ялан яҡтарына күсенеп ултырыуҙан башҡа сараһы ҡалмай. Йә, ошоға кем нисек ҡарай?

— Ҡаҙаҡтар баҫмаҡлап ыҙалатмаҫмы унда? — тип ҡыҙыҡһынды кемдер. – Ауыҙҙарына барып инәбеҙ ҙә баһаң.

— Улары менән мөғаһәдә төҙөлгән. Барымта менән ҡарымта тигән нәмәләр онотолор, шәт, был яғына. — Старшина барыһын ҡыҙыҡһындырған һорауға ышаныслы яуап бирҙе.

— Ҡыйыҡһыҙ-ниһеҙ көйө ҡалайтырбыҙ икән? — Булды икенсе һорау. — Ҡола яланда, ҡолас йәйеп, берәү ҙә көтөп тормайҙыр бит беҙҙе?

— Хаҡ әйтәһең, беҙҙе унда берәү ҙә һағынып көтмәй. Йәшермәйем, башта ауырға тура килер, шунлыҡтан лашман[269] ҡалып, хәтһеҙ тир түгергә кәрәк булыр. Шунһыҙ, мәғлүм, матур тормошто ҡороп та булмай. Был яҡтан, төп ауылды әйтәм, бар хәлебеҙсә миннәт[270] күрһәтергә тырышырбыҙ. — Һүҙҙәренең халыҡҡа барып етә башлауын күреп күңеленә йылы йүгергән Әхмәтйәндең сырайы яҡтырып китте. — Әлбиттә, әүәл оһолло[271], ҡулы эш белгәндәр барырға теләк белдергәндә яҡшыраҡ булыр ине.

— Унда барғандар, оҡшамаһа, кире ҡайта аламы? — тип ҡыҙыҡһынды йәштәрҙең береһе.

— Юҡ, күсәбә тормош ул кеше өсөн шунда тамамланырға тейеш. — Әхмәтйән быныһын ҡәтғи итеп әйтте. — Тағы булырмы һораусылар?

Башҡаса өндәшеүсе табылманы.

— Йәнә бер һорау: кем күсенергә теләй? – Старшина ауылдаштарына сая ҡараш ташланы. – Шул кеше ҡулын күтәрә...

Кешеләр өндәшмәне. Ҡул күтәреүсе лә күренмәне. Аптырай төшкән ғәм икеләнеп торҙо.

— Яҡшы, әләйһәң. — Әхмәтйән ҡоро ғына тамаҡ ҡырып ҡуйҙы ла түш кеҫәһенән ҡағыҙ бите килтереп сығарҙы. — Ошолай булырын күҙаллап, алдан исемлек төҙөгән инем. Яңы урынға башлап күсенергә тейешле кешеләрҙең исемлеге. Шуныһын алдан иҫкәртеп ҡуйыуҙы кәрәкле һанайым: был исемлеккә ингәндәрҙең ҡаршы сығып, дәғүә белдерергә хаҡы юҡ.

— Тыңлап ҡарайыҡ әле!

Тын ғына торған халыҡ шаулашып алды. Ҡабаланмай ғына уҡый башлаған Әхмәтйән, барыһын аптыратып, тәүҙә үҙ уландарының исемен атаны:

---

[269] *Лашман — ҡара тир түгеп, ныҡ тырышып эшләү.*
[270] *Миннәт — ярҙам, булышыу.*
[271] *Оһол — таҫыл, оҫта.*

— Өмөтбаев Ғайса, Өмөтбаев Ғәле... — Уларына ҡушып ул тағы ун туғыҙ кешенең исем-шәрифен әйтте. Исемлекте тулыһынса уҡып сыҡҡас, һорауҙар ҙа булмаҫмы, тип тағы ҡыҙыҡһынды. Үтенестәр ҙә, һорауҙар башҡаса булманы. Өндәшеүсе табылмағас, ризаһыҙлыҡ белдереп шау-шыу ҡуптармағайылар, тип шөбһәләнгән Әхмәтйән ҡәнәғәт ҡалды. — Ошо атап үтелгән ғаиләләр, көллөһө лә, өсөнсө көн тигәндә ҡуҙғалырға ла бесән эштәре башланғансы бараһы урынға барып етеп, яңы ерҙәрҙе үҙләштерә торорға тейеш. Тәү башта йәшәп тора торор өсөн тирмәләрҙең ҙурҙарын алығыҙ. Башлығығыҙ хәҙергә Ғайса булыр, аҙаҡ үҙегеҙ ҡарарһығыҙ.

— Ә ҡыш етеүгә торлаҡ яғын ҡалай итербеҙ? — тип ҡыҙыҡһынды күсенергә тейешлеләр араһынан берәү, ахыры, әле иҫенә килеп. — Яланда, белеүемсә, өй һалғандай түгел, башҡаһын төҙөгәндәй ҙә ағас юҡ.

Бөтмөр старшинаның быныһына ла яуабы әҙер булып сыҡты:

— Саман тигән нәмәне ишеткәнегеҙ бармы? — тип һорауға ҡаршы һорау ҡуйҙы ул.

— Юҡсы...

— Ниткән саман ул тағы?

— Ә миңә саман өйҙәрҙә йәшәргә тура килде. Рекрутта саҡта, Ырымбур далаларында, күп тапҡырҙар төнгөлөккә ҡуна ҡалғаным булды. Яҡын-тирәләге урыҫ менән Яйыҡ казактары ауылдарына барып фатир төшә инек. Ана шунда диуарҙарҙың ҡалынлығы үә келәнлегенә аптырашып, һораша торғайныҡ. Баҡһаң, ағасҡа ҡытлыҡ арҡаһында улар өйҙәрҙе самандан төҙөй икән. Беҙгә лә бер кем ҡамасау итмәй.

— Ул, саман тигәне, ниндәйерәк нәмә була һуң?

— Саманмы? Уны әҙерләүҙең бер ҡатмарлығы ла юҡ. Хатта бүрәнә күтәреп йөрөгәнгә ҡарағанда еңелерәк тә. Бары балсыҡ менән һаламың йә иһә ҡыу үләнең генә етәрлек булһын. Балсыҡҡа ана шул һаламды тураҡлап баҫаһың да, бер үлсәм ҡалыпҡа һалып, кирбес һуғаһың. Нәйәт итеп ҡояшта киптергәндән һуң, әлеге кирбестәрҙе йәпләп өҫтө-өҫтөнә теҙәһең дә тигеҙләп-һылап өй яһайһың. Йылы ла була, оҙаҡ та тора.

— Эше мәшәҡәтле генә икән.

— Белмәгән-күрмәгән кешегә генә шулай тойола ул. Ҡулың бер күнегеп алдыниһә — ап-анһат.

Башҡаса һорау-фәлән дә, үтенестәр ҙә булмағанлыҡтан, шуның менән йыйынды япҡан Әхмәтйә, китәһе кешеләргә йылдамыраҡ әҙерләнеп, артыҡ кәрәге булмаған әйберҙәрҙе әлегә алып тормаҫҡа ҡушты ла, килгәндәге кеүек һәлмәк, әммә йәштәрсә һелкетә баҫып, өйө яғына ыңғайланы.

Ә ишек алдында уны иламһыраған Гөлгөнәһе ҡаршыланы:

— Ни тигән эш ул, ә, атаһы? — тине ҡарсығы, күҙҙәренә йәш алып.

— Нимә булған? — Әхмәтйән күрәләтә белмәмешкә һалышты.

— ...Бер түгел, икәүһен күмәртәләп оҙатаһың балаларҙың...

— Ай Алла, телдәре ауыҙына һыймағандар! Ҡайҙан ишетә һалып ҡалдың уны? — тип хайран булды хужа. – Ҡайһыһы еткерергә өлгөрҙө?

— Йәл түгелме? — Гөлгөнә, уны ишетмәгәндәй, үҙенекен тылҡыны.

— Йә, тыныслан, Гөлкәйем. — Әхмәтйән, ҡатынын яурынынан матҡып, еүешләнгән күҙҙәренә ҡараны: — Нисек инде йәл булмаһын, бала бит ул. Йәл, әлбиттә, әммә үҙемдекеләрҙе ҡалдырып, икенселәрҙе көслөк менән ебәрә алмайым мин. Шуны аңла: аҙаҡ ҡалайтып кеше күҙенә күренермен?

— Әлегә берәйһен генә ебәреп торһаң да булыр ине инде...

— Юҡ, әбей, икәү — икәү булыр әле. Икәүһенә ҡайта еңелерәккә тура килер. Кәрәк сағында бер-берейһенә иң терәшһәләр ҙә, кәңәш-төңәш итешһәләр ҙә...

— Эй, Хоҙайым! Имен-һау ғына йөрөһөндәр инде... — Йылы һүҙҙән күңеле йомшарып киткән Гөлгөнә сеңләп иланы ла ебәрҙе.

— Аһ, аһ, ни булған бөгөн һиңә? — тип бот сапты Әхмәтйән. — Ғүмерҙә ҡыланмағаныңды...

— Бала — бауыр ите... Балаҡайҙарым! Уф, йөрәгем...

— Бөтөрөнмә, ҡәҙерлем, бирешмәҫтәр. Мына тигән ир уртаһы ирҙәр бит улар, самай емереп донъя көтә торған саҡтары. — Старшина ҡапыл ғына бәлйеп төшкән ҡатынын тынысландырып маташты. — Уландарыбыҙҙың айыу тотоп менер саҡтары.

— Өйрәнеп алғансы ҡыйын булып торор инде ул.

— Кинйәбеҙ – йыуанысыбыҙ бында ҡала ла баһаң!

— Өлкәндәре нығынып алғансы барып-китеп йөрөрбөҙ, эйе бит. — Гөлгөнә һаман тыйыла алманы.

— Әлбиттә, һүҙһеҙ. — Әхмәтйән кинәт етдиләнде. — Тик һин күҙ йәштәреңде улай көнгә күрһәтеп ултырма. Яманға юрап. Зар яңыртып ҡуйыуың бар, — тине итәғәтле, әммә ҡәтғи итеп.

Терт итеп ҡалған Гөлгөнә еүеш күҙҙәрен йәһәтләп ҡорота һалды, һулҡылдауы ла шундуҡ баҫылды. Үҙе:

— Күңелем тулышып киттесе әллә нишләп, — тигән булды.

— Шуны аңла, Гөлгөнә, — Әхмәтйән ҡатынының арҡаһынан һөйҙө. — Беҙҙең кешегә лә мәңге йәлсей алмай, ғүмер баҡый ҡуңалтаҡ йәшәргә тимәгән. Йомшаҡ тәбиғәтле иркен ерҙә иген игеп, мал ишәйтеп, әҙме-күпме булһа ла күтәрелеп китә алырбыҙ, бәлкем. Ә беҙҙең уландар башлап йөрөүсе булыр. Насармы ни?! Оһолдары ла, теләктәре лә уларҙың етәрлек, иншалла.

Шулай ҙа, Оло Ҡыҙыл буйҙарын ҡыҙырып, күсенәһе ерҙәрҙе алдан уҡ күҙҙән үткәреп ҡайтҡанлыҡтан, урын күрһәтер өсөн юл башлап Әхмәтйән Өмөтбаев — Түңгәүер старшинаһы — тәүге ылау менән үҙе барырға ҡарар итте. Йомшаҡ күсәр кырандаска тыны оҙон, аҙымы ырамлы, алыҫ юлға сыҙам ерән айғырын егергә ҡушты. Гөлгөнәһенең: “Мин дә барайыммы әллә?” — тиеүенә ул: “Өлгөрөрһөң, ялҡып бөтөрһөң әле”, — тип кенә ҡуйҙы.

Тәүге осорҙа хәжәте тейгәндәй ат-ужа[272] ғына ла утыҙ ылауға көскә һыйһа, кейеҙ тирмәләр өсөн тағы биш ҙур арба кәрәк булды. Әйбер-ҡаралты тейәлгән һәр ылауға берәр ат ҡыуыусы ултырҙы. Ә кешеләр өсөн тәғәйенләп ете киң арба әҙерләнде.

Билдәләнгән көндө юлға иртәнге ҡояштан алда сыҡтылар. Күкшелләнә биреп, үҙенә тартып ятҡан Ирәндек тарафтарына ҡарай бәһлеүән йылан ише борғоланып ятҡан туҙанлы юлдан әкрен генә ҡуҙғалып киткән, ошоғаса күрелгәне булмаған оҙон ылауҙы бөтә ауыл оҙата барҙы. Ир-ат сабыр ғына һаубуллашһа, ҡатындар йәшерен генә күҙ йәштәрен һөрттө. Ҡыҙҙар, ҡалҡыу урынға баҫып, яулыҡ елберҙәтте, ә малайҙар ҡойма баштарынан ҡул болғап ҡалды.

— Хушығыҙ! Иҫән-һау ғына йөрөгөҙ!

— Хәйерле сәғәттә!

— Аҡ юл һеҙгә!

Ирәндектең эре-эре таштары тулып ятҡан соҡор-саҡырлы һуҡмаҡтарын, бына-бына ағыҙып алып китер һымаҡ аҡ күбеккә батып ашҡынған дыуамал йылғаларын ауырлыҡ менән үткән ылау, ығышлап, үтә аҡрын барҙы. Өҫтәүенә бер арбаның күсәре һынып, унан һуң яңы өйрәтелгән йәш ат сығынсылап ыҙалатҡанлыҡтан, бер нисә тапҡыр туҡталып торорға тура килде. Кискелеккә Ҡыҙыл йылғаһы буйында булырға иҫәп тотҡан күскенселәр аҡшам етеүгә саҡ Ирәндек һыртындағы Ғабдрахманоҫкан ҡаяһы аҫтына килеп

[272] *Ат-ужа — кәрәк-яраҡ.*

ауҙылар ҙа алдарында ҡапыл ҡалҡып сыҡҡан таштың мөһабәтлегенә иҫтәре китеп ҡарап торҙолар. Ахмалға төшкән аттар менән алйып, йонсоуҙары йөҙҙәренә сыҡҡан кешеләрҙе күргән старшина, төндө ошонда үткәрергә тура килер, ахыры, тигән күңелһеҙ ҡарарға килде.

Шул әҙере, йәһәтләп, өс-дүрт ҡыуыш ҡороп ебәргәндән һуң, әшәк урындары әҙерләнеләр. Әхмәтйән, үҙе менән бер нисә малайҙы алып, эргәләге йылғаға бағры ҡармаҡларға төшөп китте.

Әхмәтйәндең самалауы дөрөҫкә сыҡты. Шом тулы түңәрәк зөмбәйҙәрен талғын ғына өйөрөлтә-өйөрөлтә, ярайһы уҡ тәрән булыуға ҡарамаҫтан, төбөнә тиклем үтә күренеп ятҡан аҡ ташлы ятыуға ҡармағын һалып та өлгөрмәне, уҫлаптай бағры балығы килеп тә ҡапты.

— Йәне сыҡҡанын көтөгөҙ ҙә таҙалай башлағыҙ, — тине Әхмәтйән малайҙарҙың кесеһенә, — ҡалғандар ҡармаҡлайбыҙ.

Шештәргә теҙә барған балыҡ ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бер күнәк булды ла ҡуйҙы. Йылғаһы бәләкәй генә булыуға ҡарамаҫтан, бағрының эрелегенә күпте күргән ағайҙар ҙа хайран ҡалды. Тәүҙә тослоғона аптыраһа, аҙаҡ тел йоторлоҡ тәменә иҫтәре китте. Һай, шәп икән Игетимер бағрыһы!

Һурпа менән һыйланып күңелдәре күтәрелгән малайҙар, ҡыуыша-ҡыуыша, сәскәле болонда аунап уйнарға тотондо. Уларына, сыр-сыу килеп, остандаҡ ҡыҙҙар ҡушылды. Ир-егет ат тәрбиәләне, ҡаҫҡалаҡтарын төнгөләккә асыҡҡа сығарып арҡанланы. Ә был мәлдә ҡатын-ҡыҙ һауыт-һаба шалтыратты, ҡыуыш эстәрен рәткә килтереп, төнгөләккә баш терәр урын ҡайғыртты.

Ҡаршылағы текә диуар бейеклеге менән барыһының һушын алған мөһабәт Ғабдрахманоҫкан ҡаяһы эңер төшөп күҙ бәйләнеүгә әкрен-әкрен генә шыйыҡ-зәңгәр томанға сорналды ла, хөштөмһөҙ ҡарая барып, шомло шәүлә булып күренде. Ҡапылғара күҙ ташлаһаң, ул бына-бына өҫтөңә емерелеп төшөр кеүек. Ҡаяның көнөҙөн ҡыйғыр ыласындар саңҡылдашҡан әҙәм үрмәләй алмаҫ бейеклектәге үткер ҡырлы суҡайсыҡтарында ниндәйҙер ят ҡоштар сырылдашыуына ҡушылып төн бесәйе – өкө уһылданы. Ерек, ҡарама, тирәк ағастары менән бер ҡатарҙан муйыл, тал, ҡурай еләге шырлыҡтары менән ҡапланған Игетимер үҙәнендә, сәмләнешеп, һандуғастар һайрарға тотондо, ә йыр-моңға маһир башҡа былбылдар уларынан ҡалышмаҫҡа тырышып ятты. Ҡараңғы мөхит ҡарамағына бирелгән Ирәндек итәгендәге урман тарафтарынан һәр төрлө тауыш-ауаздар ишетелде: ана, балаларына, кешеләрҙән һаҡ булырға ҡушып, инә бүре тауыш бирҙе, сабыйын күҙҙән яҙлыҡтырған болан мыңғырлап ҡуйҙы. Оятһыҙ рәүештә биләмәләренә баҫып инеүҙәре етмәгән, һуҡмағы өҫтөнә үк ҡыуыш ҡороп, ял итә ятҡан кешеләргә ризаһыҙлыҡ белдергән урман хужаһы – айыу ауыр уһылданы ла шатыр-шотор килтереп ҡыу ботаҡтарҙы һындырғылап йөрөнө, дөмпөлдәтеп серек киҫкәне ауҙарҙы.

— Беләһегеҙме, уландар, ни өсөн ошо таш Ғабдрахманоҫкан ҡаяһы тип аталған? — Күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫа биргән Әхмәтйән һаман тынысланa алмай соролдашҡан бала-сағаға мөрәжәғәт итте. Ата-әсәһенә ыша бирмәй самаһыҙ шашынып киткән малайҙар, ҡапылғара шымып ҡалып, олаталарына текәлде.

— Юҡ, белмәйбеҙ, — тине береһе, араларынан иң шаяны.

— Һөйлә әле, олатай! — тип ялбарҙы икенсеһе.

Ә Әхмәтйән бабай:

— Тик мин һөйләгән мәлдә бер тауыш та сығырға тейеш түгел, — тигән шарт ҡуйҙы. Малайҙар, этешә-төртөшә урын һайлап, күҙ асып йомған арала усаҡ тирәһен уратып ултырышты. Уларға бәғзе бер өлкәндәр ҙә ҡушылды.

Ҡарт һүрелә башлаған торонбаштарҙы болғаштырып, әшәкте терелтте. Һауаға ут көлтәһе булып һибелгән саҫҡылар тирә-йүнде бер аҙға ғына

балҡытып ебәрҙе лә йәнә һүнде. Ә һүрән яҡтылыҡ әңгәмәгә айырым сер өҫтәп ебәрҙе.

— Ҡасандыр нәҡ бына ошо, беҙ ултырған урында, ялан башҡорттарының йәйләүе торған. Беҙҙең Сатрабыҙ кеүегерәк инде. Йәйләүҙә, һәр башҡорт кеүек, бейә бәйләп ҡымыҙ бешкәндәр, һыйырын һауып май таҫҡағандар, ҡоротон да алаҫлап алғандар. Йәнә лә һунар итеп, балыҡ ҡаҡлап йәмле йәйҙе ошо ожмах мөйөшөндә үткәрер булған. Бесән осоронда мал-тыуарҙарына аҙыҡ әҙерләп алһалар, көҙ етәрәк инде ҡышҡылыҡҡа емеш-еләк киптереп алғандар, ҡаҡ яһағандар. Шул мәлдәрҙә ошо ҡаяның иң түбәһендә бер бөртөк кенә һәләк матур ҡарағас үҫеп ултырған. Кистәрен йәштәр, ҡаяға күтәрелеп, әлеге ялбыр ҡарағас тирәһендә һәр төрлө уйын-көлкө ойоштороп булған. Төнөн һуңға тиклем йөрөйҙәр ҙә иртән тора алмай аҙапланалар икән. Ғабдрахман исемле серегән ауыл байына был, әлбиттә, оҡшап етмәй. Уның бар булған маҡсаты: аҙыраҡ йоҡлап, күберәк эшләргә лә оҙон ҡышҡа яҡшыраҡ әҙерләнергә. Бай, шул рәүешле, бөтә ғәйепте әлеге ҡарағас иҫәбенә сығарып ҡуя. Бер яман ҡараңғы төндә, бар кеше йоҡола булғанда, бер кем күрмәгәндә генә, ғәйепһеҙ ағасты тумыра башлай был. Ағас булмаһа, йәштәр ҙә башҡаса бында килмәҫ һәм төш еткәнсе йоҡлап та ятмаҫ, тип өмөтләнә, күрәһең.

Яһил бәндәнең ҡарағасҡа һуңғы тапҡыр сабыуы була, бына бер кәрәмәт: көтмәгәндә ел-өйөрмә күтәрелеп китә һәм ҡарағас та ҡая аҫтына ҡарай ауа. Үҙе менән ул, еләненең салғыйынан эләктереп, Ғабдрахманды ла упҡынға осора. Иртәгәһен йәштәр ҡайғырышып илаша икән. Әммә ләкин үҙен-үҙе һәләкәткә илткән бай ҡайғыһынан түгел, ә тиктомалға әрәм ителгән күркәмлек хәсрәнән. Шулай ҙа ҡырҡылған ҡарағас урынына яңыһын ултырталар. Ана, тирә-яҡҡа йәм биреп, әле лә үҫеп ултыра ул. Ә ҡаяға шул мәлдән Ғабдрахманосҡан атамаһы йәбешеп ҡала.

Әхмәтйән, бер аҙға шым ҡалып, фекер туплағандай ултырҙы. Ә тыңлаусылар, әйтерһең дә, арбалған ҡуян балалары, ауыҙҙарын асҡан килеш, тын алырға онотоп, уның сираттағы әкәмәтен көтә. Һәм хәйләкәр старшина оҙаҡ көтөргә бирмәй, ғәҙәти булмаған тынлыҡты боҙоп: — Ә анауында, бая кискән кисеүҙән бер аҙ ғына аҫтараҡ, иҫке күпер бар. Ҡарағас нигеҙе менән йыуан-йыуан урҙаларын шәйләгәнһегеҙҙер, бәлки... — тип йәнә һүҙ башлай.

— Эйе, мин күрҙем...

— Ниндәйҙер бүрәнәләр ята шул...

— Емерелгән ине...

— Алтынса күпере тип атала ул...

Һәүетемсә шаулаша башлаған малайҙар, бәс булып, йәнә тын ҡала, уларҙы тағы бер ҡыҙыҡлы тарих көтә...

— Тимашев тигән илбаҫар бәндә менән алышта беҙгә кәрәкле ваҡытында ярҙамға килеп етеп, иң терәшкән, килмешәктәрҙе пыран-заран баҫтырышҡан Үҫәргән ырыуы старшинаһы – Алтынса батыр һалдырған уны. Элегерәк Игетимер йылғаһы бигерәк яман үә сикһеҙ ғәйрәтле булды. Хәҙерге һымаҡ, кисеүе аша сығырға һис ирек бирмәҫ ине. Ялан яҡтарына алыш-бирешкә барған кеше тик ошо күпер аша ғына сығып йөрөнө, башҡаса юл булманы. Бына шулай, балалар, батырҙарыбыҙҙың халҡына ярҙамы һуғыш яланында ғына түгел, тыныс тормошта ла тейә тора...

Мауығып киткән Әхмәтйән тағы әллә күпме тарих һөйләп ташланы. Тағанташ ҡаяһының өс таяуға оҡшап торғанлыҡтан шулай тип аталғанлығын, Ҡоҙғонташтың ҡорбанына ташланырға уҡталған ҡоҙғонға тартым икәнлеген, Ҡараташ менән Һандыҡ таштарҙың да исем-атамалары ҡайҙан килеп сыҡҡанлығын бөгөн тәүләп белә алды балалар.

— Тегендәге, беҙ бараһы тарафтарҙағы, Бейәғаҙа, Бейекбил, Ҡарағас түбә,

Мантай тауҙары һәм башҡалары – һәр ҡайһыһы үҙе айырым бер тарих. Улары хаҡында аҙаҡ, форсат сыҡҡанда, һөйләрмен, ә хәҙер ял итәйек... — тип һүҙен ослай Әхмәтйән.

Тыңлап ултырыуы нисек кенә ҡыҙыҡлы булмаһын, арығанлыҡ үҙенекен итә: күҙҙәргә йоҡо төйөлөп, серемгә тарта башлай. Ишеткәндәренән әҫәрләнеп киткән бала-саға, ҡәнәғәт ҡалып, таралыша, ә иркен ҡыуыштар, уларҙың барыһын да үҙ эстәренә алып, атай-әсәйҙәр ҡуйынына һыйындыра. Һуңғы көсөн йыйған әшәк тә бер ялпылдап ҡуя ла һүнеп ҡала. Хәҙер уның һүрелә барған ҡуҙҙары ғына емелдәшеп ҡуя.

Бер аҙҙан тирә-йүн бөтөнләй тынып ҡала ла, бар йыһанда илаһи һиллек урынлаша. Малайҙарҙың йоҡо аралаш мыңғыр-мыңғыр һөйләнеп ҡуйыуы, атайҙарҙың еңелсә хырылдағаны ғына был тирәлә кешеләр йоҡлап ятыуы хаҡында белдерә. Малайҙар төшөнә өс таған осона ҡунған ғәләмәт ҙур ҡоҙғон, ҡылысын ҡулына алып ҡарағас күпер өҫтөндә торған Алтынса батыр, баҫмаҡсыларға ҡаршы яу сапҡан башҡорттар керә. Керә генәме?! Үҙҙәре лә шулар араһында сабышып, дошманды ҡыуа барған ыңғайға тертләшеп ҡуя. Иртәнге көндөң донъя тотҡаһы — малайҙар әлегә бер ҡатлылар һәм ғәмһеҙҙәр ҙә...

Бөгөн йәнә таң һарыһы менән ҡуҙғалдылар.

Торған һайын һирәгәйә барған урман бер саҡ бөтөнләй юҡҡа сығып, шарлы Ирәндек эләгеттәре[273] артта ятып ҡалды ла, көтмәгәндә икһеҙ-сикһеҙ киңлек асылды. Сал башлы ҡылған, сәнскеле тубылғы, өйкөм селек менән ҡапланған дала башланыуға, иртәнге ҡояштың алтынһыу нурҙарына мансылыуҙан ғәжәп ғүзәллек менән балҡып торған ғәләмәт ҙур Бейекбил тауы күренде. Тирә-яҡлап эреле-ваҡлы башҡа түбәләр, йомро арҡа убалар менән уратып алынған мөһабәт тау йыйын малай-шалай араһында күкрәк киреп торған ғәййәр баһадирҙы хәтерләтә ине. Бейекбилдән бирерәк аҡ таштар менән ҡаймаланып семәрләнгән ифрат матур, күркәм-сыбар ҡалҡыулыҡ текә моронон Ҡыҙыл йылғаһына терәгән дә йоҡомһорап ята. Ҡапыл ҡарауға... Бәй, түңкәреп ҡуйылған биҙәкле тәпәндең үҙе лә баһаң ул!

– Ана, ауылға исем-атама эҙләп аҙапланаһы ла юҡ, — Әхмәтйән дилбегә тотоуҙы үҙенсә оло мәртәбә һанап, танау аҫтынан ғына оҙон көй көйләй барған Ғайсаға боролоп ҡараны, — бына-бына ҡалҡып сығыр ауылдың исеме Тәпән[274] булыр. Ишетәһеңме, улым: Тә-пән! Матур ҙа, мәғәнәһе лә бар...

Арттағы ылауҙарҙың береһендә йыр башланылар:

*Тимер генә арба, ай, төҙөк юл,*
*Айлыҡ та ғына түгел, көнлөк ер.*
*Мәшәҡәт тә күреп малдар таба*
*Тәүәккәлгә һалып йөрөгән ир.*

Йырауҙы күмәк тауыш дәррәү күтәреп алды:

*Арҡа ғына ерҙә, ай, ат уйнай,*
*Түбә генә ерҙә төлкө уйнай.*
*Беҙҙең генә кеүек йәш уландар*
*Көн итеүкәйҙәрен көн дә уйлай...*

Ылау башы ҡырсынташлы Ҡыҙыл йылғаһы кисеүенә килеп төртөлдө...

---

[273] Эләгет — йығылып ятҡан күмәк ағас.
[274] Тәпән — Әбйәлил районындағы ауыл.



Исмәғил
**АҠЪЮЛОВ**

# МИҢҺЕҘБИКӘ

## хикәйә

Драмтеатрҙың тамаша залы халыҡ менән шығрым. Әмәлен табып, билетһыҙ ингән тамашасылар рәт араларында, стена буйҙарында баҫып булһа ла ҡарарға риза: “Ғәлиәбаныу” бара! Урта тирәләге рәттә ултырған бер ҡыҙ янында ғына буш урын әллә ҡайҙан ымһындырып, арбап тора кеүек.

Ике күҙен дүрт итеп, буш урынды эләктереп алырға теләүселәрҙең өмөтө һүрелде барыбер: шаршау асылыр алдынан ғына күршеһеҙ ултырған ҡыҙ янына ашығып килеүҙән бышлығып бөткән егет ҡунаҡланы. Тирләгән маңлайын ҡулъяулыҡ менән һөртөп, тын алышы тигеҙләнгәнсе шып-шым ултырҙы был. Бер аҙ хәл алғас ҡына янында хушбуй еҫе аңҡытып ултырған ҡыҙға иғтибар итте. Ҡыҙ ҙа күренештәр алышынған ыңғайы егеткә баянан бирле күҙ һирпеп алғылай: оҙонсараҡ ҡуңғырт йөҙ, ҡуйы ҡара ҡаштар, тура танау, бармаҡ баҫымындай ғына мыйыҡ...

«Янында егете лә юҡ», – тип уйланы егет һәм күршеһенең ҡолағына эйелде:

– Исемең нисек, сибәркәй? Байтаҡтан бирле бергә ултырабыҙ, ә исемеңде белмәйем...

– Ана, Ғәлиәбаныуға ҡара. Ҡамасаулама!

– Уның янында бер түгел, ике егет өйрөлә. Исемеңде генә әйт тә...

Ҡыҙ башҡаса һүҙ өндәшмәне. Егеттең һағыҙаҡланыуынан өндәшмәй арынырға булды, ахыры. Тамаша аҙағынараҡ ят егет тағы ла әрһеҙләшә башланы.

– Һин үҙең дә Ғәлиәбаныуҙыр әле. Уның кеүек үк һылыу күренәһең.

Татлы һүҙҙәр ҡыҙҙың йөрәген бер аҙ имшетеп ебәрҙе.

– Ул тиклем һылыулығым да юҡ. Ғәлиәбаныу ҙа түгелмен. Баныу ғынамын.

– Баныу ғына булһаң да, сибәрһең бит? Үҙең генә белмәйһеңдер инде.

– Ҡамасаулама!

...Егет менән ҡыҙ театр алдындағы майҙансыҡҡа килеп сыҡҡанда, тамашасылар әллә ҡасан таралышып бөткәйне инде. Урамда кешеләр ҙә, машиналар

*Исмәғил Аҡъюлов Ейәнсура районының Үрген ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләй. Республика матбуғатына әүҙем яҙыша. «Ағиҙел» журналында тәүләп сығыш яһай.*

ҙа һирәкләгән. Көслө электр лампалары яҡтыһында егет менән ҡыҙ, бер-береһенең буй-һынын күҙҙән үткәреп, байтаҡ һүҙһеҙ торҙо.

– Ярар, һуңлап киттек, ҡайтышайыҡ.

– Оҙатып ҡуяйым...

– Миңә университет ятағына ғына ҡайтырға кәрәк. Үҙем дә барып етермен. Үҙеңә ҡайһы яҡҡа? Төн уртаһында транспортһыҙ ҡалып ҡуйма!

– Оҙатып ҡуяйым инде.

Улар, баҫҡыстан төшөп, университет ятағына табан ыңғайланы. Ҡыҫҡа ғына юлды мөмкин тиклем оҙағыраҡ үтергә тырышты егет. Юл ыңғайында ҡыҙҙың уҡыған факультеты, курсы, тыуған яғы билдәле булды. Егет иһә ауыл хужалығы институтында, зоотехника факультетының бишенсе курсында уҡый икән. Ятаҡ тупһаһына еткәс, бер нисә минутҡа тынып ҡалдылар. Рәхәт тә, ғазаплы ла ине был минутта.

– Әйткәндәй, исемең нисек ул һинең? Кемдең оҙатҡанын да белмәй ҡалам бит юғиһә! – Баныу, ишек тотҡаһына таянып, көлгән булды.

– Миңлейыһангир.

– Абау, көтөүсе сыбыртҡыһы кеүек оҙон икән дә! Һинән көлгән булам, үҙемдеке лә шулай инде...

– Баныу, тинең бит? – Егет аптырап китте.

– Миңлебаныу мин!

Егет ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне.

– Торған бүлмәңде генә әйтһәң...

– Бөтә нәмәне бер юлы белһәң, тиҙ ҡартайырһың. Хуш! – Ҡыҙ бер сыңғырҙатып көлдө лә, ҡул суғын елберләтеп, инеп китте.

«Үҙемә яҙғанды осраттым, шикелле», – тигән һығымтаға килеп асып инде егет үҙҙәренең ятаҡ ишеген.

Миңлейыһангир әрһеҙ булып сыҡты. Иртәгәһенә таң һарыһынан уҡ ҡыҙҙы оҙатып ҡуйған ишек төбөнә килеп баҫты. Кискә тиклем тупһа тапауҙың файҙаһы булманы – Баныу күренмәне. Исмаһам, пальтоһының төҫөн дә абайлап ҡалмағанмын, тип үкенде егет, икенсе көндө лә осрата алмағас. Ниһайәт, Миңлейыһангирға уңыш йылмайҙы: баҫҡыстан Баныу төшөп килә ине. Биле ҡыҫып быуылған асыҡ йәшел пальто, яурындарын ҡаплап торған сәс шәлкемдәре...

– Баныу!

Ҡыҙ тауыш килгән яҡҡа әйләнде.

– Әллә... Миңлейыһангир инде? Ни эшләп йөрөйһөң иртә менән?

– Мин өсөнсө көн инде ошонда...

– Дәрестәргә йөрөмәйһеңме ни? Тәүге лекцияларың юҡмы?

– Бар ҙа ул...

– Ярай, әлегә хуш, һуңлап барам. Сәғәт өстәрҙә ошонда осрашырбыҙ. – Ҡыҙ ашығып китеп барҙы.

Миңлейыһангир һөйләшелгән ваҡытҡа бер минутҡа ла һуңламай килеп етте. Студенттар аҙаҡҡы парҙан күмәкләшеп ҡайтып килә ине. Урталарында – таныш пальтолы, таныш йөҙлө Баныу.

– Быҙауҡайға оҡшамаған, – тип төрттөрөп үтеп китте бер-ике ҡыҙ.

– Килеп еттең дәме ни? Оҙаҡ тораһыңмы?

– Юҡ, һин әйткән ваҡытҡа килдем.

– Вәт яҡшы. Ошонда көтөп тор. Мин хәҙер!

Кейемен алыштырырға тип ингән Баныу оҙаҡ көттөрмәне:

– Беҙҙә әлегә газ эшләмәй. Ашханала туҡланабыҙ. Әйҙә, киттек. Һин дә ашамағанһыңдыр.

– Юҡ.

...Ашханала тамаҡ ялғап алғас, егет менән ҡыҙ урамға сыҡты. Баныу, егет менән иҫәпләшмәк булып, аҡса янсығын сығарҙы.

– Кәрәкмәй, – тине егет.

– Аҡсаң шул тиклем күпме ни?

– Күп булмаһа ла, тамаҡланып йөрөр өсөн бар. Эшләп уҡый ул егет халҡы. Һинең ризығың утыҙ тин генә булды бит.

– Студентҡа ул да аҡса. Атай-әсәйең хәлле генәлер.

– Атайым, әсәйем дә юҡ минең. Өләсәйемдә үҫтем. Уның бар байлығы – ун ике һум пенсия, биш тауыҡ, бер-ике баш һарыҡ-кәзә, – тине Миңлейыһангир.

Ҡыҙ егеткә байтаҡ ҡына текләп ултырҙы.

– Исемеңде дөрөҫ ҡушмағандар. Исемең «миңле» булһа ла, йөҙөңдә энә күҙендәй ҙә миң юҡ.

– Ни эшләп булмаһын? Йөҙөмдә булмаһа, бына ҡайҙа. – Егет усын яҙып күрһәтте.

Усының, сиғандар әйтмешләй, яҙмыштарҙы билдәләр һыҙыҡтар киҫешкән урынында бер тин аҡса ҙурлығындағы көңгөрт миң тора ине.

– Абау, ҡайһылай ҙур. Ысынлап та Миңлейыһангир икәнһең.

– Һинең дә йөҙөңдә миң юҡ бит. – Егет тә, үҙ сиратында, ҡыҙға текләп ҡараны.

– Бар. – Ҡыҙ серле генә йылмайып ҡуйҙы.

***

...Миңлебаныу бәләкәй генә төпкөл ауылда тыуҙы. Телефон да, фельдшер пункты ла, ҙур мәктәп тә, ултыра һалып сығып китергә йүнле-башлы техника ла, оло юл да юҡ. Ҡатын-ҡыҙ балаға ауырып китһә, "ҡул арты еңел" тиҙәр ҙә кендек инәһе Бәҙриямал әбейгә әйтәләр. Ауылдағы йәшерәк кешеләрҙең барыһының да кендек инәһе ине ул. Ҡатындар бер өҙлөгөүһеҙ ҡотола ине ауырҙарынан. Сабыйҙар тыуа торҙо, шалҡандай һау-сәләмәт үҫә торҙо. Бәҙриямалдың бер бөртөк балаһы булмаһа ла, «шөкөр, ауыл тулы минең балаларым» тип әйтер булды йыш ҡына. Миңлебаныуҙың да кендек инәһе ул.

– Ҡыҙыҡайға ниндәй исем әҙерләнегеҙ? – Кендек әбейе сабыйҙы әсәһенең түшенә һалды.

– Кем булырын алдан уйлашмағайныҡ та... – Әсәһе һораулы ҡарашын атаһына төбәне.

– Әллә инде. Малай ҙа көтә инем. Алдан исемен дә әҙерләп ҡуйған булғайным. Исемен үҙең ҡуш та ҡуй, Бәҙриямал апай, – тине атаһы. – Ҡыҫҡа ғына, уңай ғына булһын. Ауыл тулы Зилә-Миләләр кәрәкмәй. Баныу. Шундайыраҡ.

– Матур, хәҙерге заман өсөн һирәк исем. – Кендек инәһе үҙенсә йөпләне. – Тик тулыраҡ итеп әйтергә Миңлебаныу тип ҡушайыҡ.

– «Миңле»һе нимәгә инде ул, Бәҙриямал апай? Миңе юҡ та баһа. Ҡолға буйы исем нимәгә?

– Аһ-аһ, нишләп миңе булмаһын. Барсы! Миңле балаға миңле исем ҡушалар – шулайтһаң, бала ғүмере буйы бәхетле, ырыҫлы була.

– Миңе булмағанға ғына әйткәйнем дә инде... – тип ыуаланды атаһы.

– Бар, тинем бит. Берәү түгел, алтау!

– Китсе? Ҡайһы ерендә?

– Ышанмаһаң – ҡара! – Кендек әбейе йүргәкте тағатып ебәрҙе. Сабыйҙың

кендеге тирәләй балан орлоғондай ғына алты миң телефон аппаратындағы һандар һымаҡ түңәрәк яһап, теҙелешеп торалар ине.

– Алты балаға ишара был. Алты ҡыҙы булыр. Иншалла! – Кендек әбейе баланы яңынан йүргәгенә төрҙө.

***

Миңлебаныу менән Миңлейыһангир дәрестән һуң төшкөлөктө ашханала бергә ашар булып китте. Йөрөргә алыҫыраҡ булһа ла, егет бер минутҡа ла һуңламаҫҡа тырышты. Миңлебаныу магнитының тартыу көсө самаһыҙ ине шул. Егет менән ҡыҙҙың драмтеатрҙың ярымҡараңғы тамаша залында осраҡлы рәүештә генә танышыуы айырылмаҫ дуҫлыҡҡа, унан ҡайнар мөхәббәткә әйләнеп китте. Июнь баштарында, диплом эштәрен яҡлар алдынан, үҙҙәре туҡланып йөрөгән ашхананы ике-өс сәғәтлек ҡуртымға алып, студент туйы үткәреп ҡуйҙылар.

Эш башлап ебәрер алдынан Миңлебаныуҙың ауылына барып бер аҙ ял иттеләр ҙә Атбағарға, Миңлейыһангирҙың өс йыл элек вафат булған өләсәһенең өйөнә, туралап ҡайттылар. Икеһенә лә август урталарынан эшкә сығырға. Барлы-юҡлы аҡсаны тәғәмдән арттырып, өй һипләнеләр. Ҡағып-һуғып, йыуыпйышып, буяп алғас, бер нисә йыл бағыуһыҙ торған йортҡа ҡот инде.

Йәш ғаиләнең тормошо өйҙө һипләп ингәндең тәүге көндәренән үк көйлө китте. Бер-береһен бер һүҙҙән, күҙ ҡараштан уҡ аңлашып йәшәй башланылар, бер-беренең эштән ҡайтҡанын һағынышып көтөп алдылар. Мөхәббәт емеше лә үҙен көндән-көн нығыраҡ һиҙҙереп, тыштан белдерә барҙы. Миңлебаныу мәктәпкә киңерәк күлдәк кейеп, иңдәренә ябынған болоттай ҙур дебет шәленең ике осо менән кәүҙәһенең ал яғын ҡапланҡырап йөрөй башланы.

Атай-әсәйҙең һәр ҡайһыһы мөхәббәт емешенең үҙенә оҡшап, үҙ енесенә тартып тыуыуын теләне. Ул йылдарҙа яралғының кем булып тыуыуын алдан төҫмөрләргә ярҙам иткән УЗИ кеүек аппарат юҡ ине әле. Үҙҙәренең исемдәренә оҡшаш матур-матур исемдәр барланды. Миңлебаныу, үҙе миңле булғас, тыуасаҡ ҡыҙы ла миңле булырға тейеш, тигән уйҙан сығып, ҡағыҙға «миңле» исемдәрҙе бер-бер артлы теҙҙе. Биш-алты исем яҙҙы ла шулар араһынан үҙенең исеменең икенсе өлөшөнә оҡшаш булырын һайланы – Миңлебанат. Ҡалған миңле исемдәрҙе һаҡлыҡҡа фотоальбом эсенә һалып ҡуйҙы. Кендек инәһе Бәҙриямал әбей алты ҡыҙ бала табыуын да юраған бит. Кем белә алдағы көндө. Нәҫел-нәсәбе лә түлле: өләсәһе егерме бер, ҡәртәсәһе ун алты бала тапҡан...

Миңлейыһангир малай көттө. Ферманың ҡыҙыл мөйөшөндә аулаҡлап ял итеп ултырғанында ул да «миңле» малайҙар исемлеген төҙөп алғайны. Мауығып китеп, ете-һигеҙ исем яҙып ташлаған. Шуларҙың араһынан Миңлетаһирға туҡталды. Исемдең беренсе яртыһы ғына түгел, икенсе яртыһы ла атайҙың исеменә оҡшаш: Миңлейыһангир – Миңлетаһир. «Һис шикһеҙ миңле тыуырға тейеш был малай. Усының ҡап уртаһында булмаған хәлдә лә, берәй ерендә булыр әле», – тип уйланы буласаҡ атай.

***

Бала табыу бүлексәһе дауахананың өсөнсө ҡатында ине. Миңлебаныу, шәленә уранып, балконға сыҡты.

– Хәлдәрең нисек? Малаймы? – тип һораны йәш атай.

– Яҡшы. Ҡыҙыҡай, – тине ҡатыны.

Атай күңелен әҙ генә күңелһеҙлек шәүләһе елпеп үтте.

– Миңә оҡшағанмы һуң аҙыраҡ булһа ла?
– Һуйып ҡаплаған кеүек. Хас үҙең.
Шәфҡәт туташтары сабыйҙы яңылышлыҡ менән алыштырып ҡуймаһындар, тип шикләнә ине атай кеше. Шик юҡҡа сыҡты. Күңел тынысланды.
– Миңе лә бармы?
– Хас үҙең инде, тим бит. Уң ҡулының ус төбөндә.
– Шулай уҡмы ни? – тип киң йылмайып ебәрҙе Миңлейыһангир. – Сығарып күрһәтмәйеңме?
– Рөхсәт итмәҫтәр шул.
– Оҙаҡ торорға ярамай. Өҙлөгөрһөң. – Шәфҡәт туташы йәш әсәне алып инеп китте.
– Малаймы? – тип ҡаршылаңы машина янында көтөп тороп ҡалған күршеһе, атай кешенең йылмайып килеп сығыуын күреп.
– Юҡ та. Ҡыҙыҡай. Үҙемә һуйып ҡаплаған кеүек оҡшаған, ти. Хатта миңе лә минеке кеүек икән, – тип уң ҡулының усын йәйеп күрһәтте.
– Ысынлап та Миңлейыһангир икәнһең дә. Ҡыҙыҡайҙың да исеме миңле булыр инде, – тине күршеһе.
– Кем тип ҡушһа ла – әсәһенең эше. Ә миңә икенсеһен малай итеп көтөргә ҡала инде, – тине Миңлейыһангир, машинаға инеп ултырғас.
Миңлебаныу больницанан ҡайтҡас, сабыйҙың исем туйын үткәрҙеләр.
– Исеме нисек булыр? – тип һораны йәш кенә мулла, алдына биләүҙәге сабыйҙы килтереп һалғас.
– Миңлебанат, – тине әсәһе.
Мулла ҡөрьән көйөнә ятышлы көслө, моңло тауышы менән сабыйҙың ике яҡ ҡолағына ла өсәр тапҡыр «Миңлебанат» тип ҡысҡырҙы.
– Ярай, йәмәғәт. Сабый ата-әсәһенә иш булып, өйҙөң йәме, ҡыуанысы булып үҫһен. Аяҡ арты уң булһын. Ошо ҙур өй эсе шат, ишле балалар тауышына сорналып торһон. Амин, – тип ике ҡуллап битен һыпырҙы.
Бала тыуғандан һуң бирелгән ял ваҡыты бик тиҙ үтеп китте. Миңлебаныуға эшкә сығырға кәрәк. Сабыйҙы ҡарашырға өләсәй ҙә, ҡартәсәй ҙә юҡ. Нишләргә? Уйлаша торғас, әмәлен таптылар барыбер. Ауылдың иң осонда Миңлейыһангирға сыбыҡ осо ғына туған тейеш кеше көнлө бер әбей йәшәй ине. Бала ҡарашырға шул Гөлзифа әбейгә әйтеп ҡаранылар. Йыл әйләнәһенә утынға йонсоған әбей йәштәрҙең тәҡдименә ҡушҡуллап риза булды. Иркен өйҙөң бер мөйөшөн таҡта менән бүлеп, үҙенә айырым бүлмә әтмәләп бирҙеләр.
Өй ҡото булған сабыйлы йәш ғаиләнең көнитмеше яйға һалынды. Икеһенең дә эше бара, бала ла бағыулы.
Миңлебанатҡа йәш ярым тигәндә, Миңлебаныу йәнә ауырға уҙҙы. Икеһе лә түҙемһеҙләнеп малай көттө.
Ҡатынын больницаға ҡалдырып киткәндең икенсе көнөнә эштән һуң дауаханаға юлланды ир. Универмаг фойеһының бер мөйөшөндә тере сәскәләр һаталар ине. Ҡиммәт булһа ла, хаҡына ҡарамай, ҙур бер тотам гладиолустар гөлләмәһен һатып алды ла дауахананың подъезд майҙансығына килеп баҫты. Миңлебаныуҙы саҡырҙылар. Йөҙө шатлыҡлы ла, бойоғораҡ та күренә ине.
– Малаймы? – Һаулыҡ һорашҡандан һуң иң беренсе һүҙе шул булды атай кешенең.
– Түгел шул, – тине ҡатыны баҫалҡы ғына тауыш менән, иренең өмөтө аҡланмауында үҙен бер аҙ ғәйепле һанағандай.

– Миңә оҡшағанмы һуң? Миңе бармы?
– Бынығы ла, апаһы кеүек, тас һин инде.
– Шулай булырға тейеш тә, – тине атай, китек күңелендәге төйөрҙө бер аҙ йомшартырға тырышҡандай.
Икенсе сабыйҙың да исем туйына табын йыйылды. Мулла оҙонға киткән вәғәзенән һуң сабыйҙың ике ҡолағына ла «Миңлеһылыу» тип исемен ҡысҡырҙы.
– Миңлеһылыу бигерәк оҙон, телгә лә ауырыраҡ. Миңһылыу ғына булып китер инде, – тине кемдер.
Мул әҙерләнгән һыйҙан бик ҡәнәғәт ҡалған мулла, бәләкәй таҫтамалдар менән бит-ҡулын, ауыҙ-моронон һөртөп алғас:
– Йәгеҙ, йәмәғәт, ризыҡҡа хуш итәйек. Өсөнсө сабый ир затынан булып, уның да исем туйында ошолай һыйланып ултырырға яҙһын һәммәбеҙгә лә. Амин, – тип битен һыпырҙы. Ҡунаҡтар уның артынса ҡабатланы.

***

Ҡатын өсөнсөгә ауырлы. Ир был юлы ла зарығып малай көтә. Миңлебаныуҙың ауырға уҙыуы билдәле булғас та, алдан уҡ тыуыр малайының тояғын йыуып, төшөргөләп ҡайта башланы.
Өсөнсө сабый ҙа уң ҡулының ус төбөндә ҡыҙарып бешкән һутлы балан орлоғондай ғына миңле ҡыҙ ине. Фотоальбомдағы әҙер исемлектән Миңленур исемен һайлап алып ҡуштылар. Сабый ҡыҙ баланың бынығы ла һуйып ҡаплаған кеүек атаһы ине.
– Үҙенән төшһә лә, ул тиклем дә оҡшамаҫ, хәйерһеҙ, – тип ҡуйҙы балаларҙы бағыусы Гөлзифа әбей.
Миңлебаныуҙың дүртенсегә тапҡан балаһы ла ҡыҙ булды ла ҡуйҙы. Исем туйын ҙур табынһыҙ, муллаһыҙ ғына үткәрҙеләр. Исемен Миңлениса тип ҡуштылар. Атайҙың күңеле бик үк күтәренке булмаһа, бер-береһенән ике илегә генә ҡалҡыуыраҡ ҡыҙыҡайҙар өсөн оло шатлыҡ килде өйгә. Иң кесе туғандары ирмәк кенә тере ҡурсаҡ кеүек. Көнооҙоно тигәндәй сәңгелдәк янынан китмәнеләр. Уянып мышылдай башлаһа, үҙҙәре лә орсоҡ буйы ҡыҙҙар шунда уҡ сәңгелдәкте һырып ала ла кемуҙарҙан бәүетә башлай.
Малайһыҙ тормош өй эсен һалҡын күләгә булып биләй барһа, фермала ла эш көйлөнән түгел ине. Күпме генә тырышмаһын, эш һөҙөмтәһе маҡтанырлыҡ булмағас, Миңлейыһангирҙың карьераһы ла үҫмәне, эш хаҡы ла түбән көйө ҡалды. Дүртенсе тиҫтәне тултырып килгәндә һаман да урта звено етәкселәре кимәлендә эшләп йөрөүе уға күңелһеҙ була башлағайны. Көнләп түгел, сәғәтләп үҫкән ҡыҙыҡайҙарҙың да сығымдары торған һайын үҙҙәре менән ярышып үҫә барҙы. Ике йыл һайын декретта ултырған ҡатындың да эшенән килеме түбән. Күмәк балалы уҡытыусының сәғәттәре йылдың-йылы бер ставканан үтмәне. Миңлейыһангирҙың механизатор, малсы булып эшләгән тиҫтерҙәре күптән инде машиналы булып бөтөп бара. Районға ла, баҙарға ла, йәйҙәрен еләкемешкә лә, яланға ял итергә лә үҙ «Москвич»тарында йә «Жигули»ҙарында елдерәләр. Ә Миңлейһангир менән Миңлебаныу, ереле-ваҡлы балаларын ҡаҙ бәпкәләре кеүек эйәртеп, гелән йәйәү йөрөй. Ғаилә башлығы оҙон аҡса артынан ситкә китеү уйы менән мауыға башланы.
Яҙға табан Гөлзифа әбей гүр эйәһе булды. Уны ҡәҙерләп, бөтә йолаларҙы еренә еткереп ерләнеләр. Балаларҙы бағыуҙа төп ярҙамсы булып баш бала Миңлебанат ҡалды.
...Донъя хәлдәре тураһында иркенләп һөйләшеп алырға икәүләшеп һап-һары

итеп буялған тупһа күтәрмәһенә ултырып алдылар. Ҡыҙҙарҙың өсәүһе, күпереп үҫкән ҡаҙ үләнен кисеп, сыр-сыу һәпәләк уйыны ҡороп ебәргән. Дүртенсеһе, яңы ғына аяҡлана башлағаны, апалары кеүек йөрөргә тырыша. Миңлебаныу кескәй ҡыҙын, апаларына ҡамасауламаһын өсөн, күтәреп алды:

– Үҙеңә оҡшап тыуған балаларыңды һин дә ҡарарға тейешһең...

Миңлейыһангирҙың, ысынлап та, бөгөнгө көндәге шикелле ҡыҙыҡайҙары янында ултырғаны юҡ ине. Исмаһам, береһенең малай булып тыумағанына «үпкә»һен онотоп, Миңленисаһын сәстәренән һыйпап иркәләне, түшенә ҡыҫып ятты.

– Ҡыҙ балалар ҙа бик татлы була икән дә, – тип кескәйенең маңлайынан үбеп алды. – Ошо балдан да татлы балаларҙың, исмаһам, береһе малай булһасы!

Атай кеше ҡыҙын ҙур устарына ултыртып һикертә башланы. Ҡыҙыҡай яр һалып көлөп, сәпәкәйләп кинәнде. Иренең ҡыҙ балаларҙы яратыуын тәүгә абайлап, Миңлебаныу ҙа сикһеҙ ҡыуанды.

– Шөйлә ҡарт та түгелбеҙ. Бәлки, малай тыуыр әле,  – тине Миңлейыһангир. Ир бала тураһында һүҙ тағы ла ҡуйырҙы.

– Әллә инде. Ҡыҙҙар табып, мәктәптә йүнләп эшләгән дә юҡ, – тине Миңлебаныу. – Булмаһа, ситкә барып йөрөп ҡара. Улың тыуһа, ситтән булһа ла ҡарарһың, етем итмәҫһең. Боронғо йола буйынса йәш ҡатын алып ҡарарға ла була. Ишек алды иркен. Бәләкәйерәк өй күтәреп ултыртырһың. Хәҙер бит күп ҡатынлылыҡ тураһында ла һүҙ сығара башланылар.

– Унымы булмай. Үҙ-ара сөкөрҙәшеп, уртаҡ балаларҙы бергә-бергә тәрбиәләүгә ни етә? Ике ҡатын менән йәшәр өсөн икегә ярылырға кәрәк инде.

– Детдомдан мәктәпкәсә йәштәге берәй малай алайыҡ, улайһа...

– Улай ҙа булмай. Үҙ ҡаныңдан ғына яралған баланы бала итеп һөйөп, үҫтереп була, Миңлебаныу.

– Аптырағандан әйтәм, – тине ҡатыны, бәләкәсен үҙенең алдына күсереп.

– Үҙебеҙгә ынтылып ҡарарға кәрәк. Ҡырҡҡа етмәгәнбеҙ бит әле.

– Әллә инде. Кендек инәйем алты бөртөк миңде алты ҡыҙ балаға юраған. Хоҙайҙың «Амин» тигән һүҙенә тура килгән булһа юрауы...

– Сихырсы әбейҙәр заманы үткән бит инде. Беҙгә тигән малай үҙебеҙҙең ҡандалыр әле. – Ир миңле ҡулы менән ҡатынының яурынынан ҡосаҡланы.

Һүҙ малай тирәһенән көнитмеш темаһына күсте.

– Тормош әкренләп ҡиммәтләнә бара. Балаларҙы мәктәпкә әҙерләү генә лә, ана, күпмегә төшә башланы. Һинең йәйге ялыңа тейгән аҡсаң үҙеңде яңы уҡыу йылына әҙерләргә лә етмәй. Миңә ярай инде. Фермаға әллә ни яһанып-кейенеп бармаһам да була. Берәй аҡсалыраҡ эш яғын ҡарарға ла уйлана башланым.

– Ә үҙеңдең эшең? Башлағанды ташлап китергә биш йыл уҡыныңмы ни? Һине дипломлы белгес итеп сығарыу өсөн хөкүмәтебеҙ күпме аҡса түкте.

– Диплом хаҡын әлегә тиклем түгелгән көс менән ҡапланым инде мин. Һинең айлыҡ эш хаҡың да һикһән һумдан артмай. Тиҫтерҙәр машиналы булып бөттө. Ә беҙ – һаман йәйәүле Мәхмүт.

– Ҡайҙан тапмаҡ булаһың һуң ул аҡсалы эште?

– Көнбайыш Себерҙең төньяғын үҙләштерә башлағандар. Нефть тә, газ да бик күп икән ул яҡтарҙа. Вахта ысулы  менән ай ярым эшләргә лә ай ярым өйҙә ятырға.

– Тундрала беҙҙәге шикелле фермалар юҡтыр бит. Нефтсе лә түгелһең.

– Баштараҡ төрлө эштәрҙә йөрөп торорға ла ризамын. Ғаиләне әҙәм рәтле

ҡарарлыҡ аҡсаһы ғына булһын. Ул яҡта эшләгәндәр кесә сығымдары тип аталған бер услам өсәрлектәрҙе түш кесәләренә һалып ҡына йөрөйҙәр икән, тип һөйләйҙәр. Бында ундай аҡсаны ай буйына ла эшләп булмай.

– Ни тип әйтергә лә белмәйем шул. Балалар ишле бит. Эштә лә, өйҙә лә бер яңғыҙыма ауырға тура килмәҫме?

– Тағы ла берәй ярҙамсыһыҙ әбейҙе өйгә индерергә кәрәк булыр.

Был иркенләп ултырып әңгәмәләшеп алыу ғаилә тормошонда башланасаҡ үҙгәрештәрҙең башы ғына ине.

Ғаилә башлығы балаларға күҙ-ҡолаҡ булышырға күрше ауылдан үҙе лә ҡарауға мохтаж Зарифа исемле әбейҙе алып килеп ҡалдырҙы ла эштән бушағандың өсөнсө көнөндә Уренгой тарафтарына юлланды. Зоотехник һөнәренән башҡа бер ниндәй шөғөлгә ҡағыҙҙары булмаған Миңлейыһангир яңы үҙләштерелә башлаған промыслала склад ҡарауылсыһы булып эшкә урынлашты. Үҙен ике-өс аҙна буйы тәртипле эшсе итеп күрһәтеп тә өлгөргәс, ваҡытлыса быраулаусы ярҙамсыһы итеп күсерҙеләр. Төньяҡтың һыуығына ла тиҙ күнекте, яңы эшенә лә бик тиҙ төшөндө. Бер ай тигәндә, һынау тотоп, өсөнсө разрядлы быраулаусы ярҙамсыһы таныҡлығы алды. Хәҙер арҡаны ныҡҡа терәп, баштан-аяҡ эшкә сумды Миңлейыһангир. Ай ярымдан һуң, совхоздағы эш хаҡы менән сағыштырғанда байтаҡ ҡына аҡса эшләп, оҙайлы ялға ҡайтып төштө.

Кәртә-ҡураһын, өй тирәһен ҡышҡа әҙерләп, йүнәтеп алды ир. Фермаға барып, үҙенән һуң ҡалған эш торошо, эшкә яңы килгән зоотехник менән танышты. Ҡышҡылыҡҡа бесән, утын әҙерләп, уны турап-ярып йөрөй торғас, ай ярымлыҡ вахта ялы үтеп тә китте: аҙыҡ-түлек тултырылған рюкзагын артмаҡланы ла Өфөгә юлланды. Унан инде Уренгойға осасаҡ. Вахтаға китер алдынан ҡатынының ауырға ҡалыуы билдәле булды. «Етер инде өйҙө ҡыҙ менән тултырырға, өйҙә малай тауышы ла булырға тейеш», – тигән күңелле уйҙар ҡайнашты уның башында.

Миңлейыһангир вахтаға дүртенсе тапҡыр киткәнендә, Миңлебаныу декретҡа сығып ҡалғайны инде. Вахта аҙағына табан промысланан эштән ҡайтыуына почтальон ҡыҙыҡай:

– Йыһангир ағай, һөйөнсө давай, – тип теплушка ишеге янында телеграмма елберҙәтеп тора ине.

– Малаймы? – тип ашығып үрелде телеграммаға атай кеше.

– Һөйөнсөгә нимә?

– Бер кило «Ҡараҡом» кәнфите. Йә, малаймы? – тине шатлығы йөҙөнә сыҡҡан нефтсе.

– Какой там малай. Минзифа что ли там, – тине башҡортса арлы-бирле һупалаған почтальон ҡыҙ.

Миңлейыһангир телеграммаға күҙ йүгертте лә, йөҙөнә бер ниндәй ҙә тойғо сығармай, уны кеҫәһенә тыҡты.

– Не радуешься что ли, твой же, наверное, ребенок. А «Каракум»? Миңлейыһангир почтальонға түш кеҫәһенән дүрт өслөк сығарып һуҙҙы.

Иртәгәһенә үк ҡайтырға юлға сыҡты ул. Тупһаны ашатлап үтеүе менән:

– Иҫән-һау ҡотолоуың менән, – тине ҡатынына. – Миңә оҡшағанмы? Миңе бармы?

– Эйе, апалары кеүек, һиңә оҡшаған, – тип ҡаршыланы ирен Миңлебаныу.

Атай кеше сәңгелдәктәге сабыйының йөҙөнә ҡараны. Ике тамсы һыу кеүек оҡшашлыҡ. Биләү эсендә булғас, усындағы миңен генә асып ҡарай алманы.

Малай табып ҡаршылап ҡыуандырмаһа ла, ҡатынының ауырынан иҫән-һау ҡотолоуынан, донъяны матур итеп күтәп тороуынан риза ине Миңлейыһангир.

Атай менән әсәй малай затынан ваз кисмәгәндәр ине әле. Алтынсы бәпестәре тыуыуға вахтанан район үҙәгенә килеп төшкән Миңлейыһангир туп-тура больницаға юлланды. Уның баҙлап торған сәскәләр тотоп килгәнен тәҙрәнән күреп ҡалып, Миңлебаныу өсөнсө ҡаттың подъезд майҙансығына сығып торған.

– Иҫән-һау ҡотолоуың менән ҡотлайым, – тине ире, ҡатынының болоҡһоуыраҡ тороуынан үҙе күңелһеҙләнеп. – Малаймы?

Миңлебаныу һүлпән генә итеп баш сайҡаны.

– Миңә оҡшағанмы?

Ҡатыны бармағын өнһөҙ генә үҙенә төбәне.

– Миңе бармы һуң?

– Юҡ. – Миңлебаныу шым ғына илап ебәрҙе. Эре күҙ йәштәре үрҙән георгин сәскәләренең эре таж япраҡтарына тып-тып тамды.

Миңлейыһангир башҡаса бер ни ҙә өндәшмәне. Килтергән сәскәләрен тәҙрә төбөнә таратып ебәрҙе лә ҡырт боролоп ҡайтып китте.

Өйөнә ҡыҙмаса булып ҡайтҡан Миңлейыһангир, Зарифа әбей тирәләй аптырашып ҡарап торған биш ҡыҙының береһенә лә бер һүҙ ҙә өндәшмәй, үҙ бүлмәһенә үтте һәм сыҡмаҫ булды. Ҡайтҡанының өсөнсө көнөндә Миңлейыһангир, иртә менән тороп, мал-тыуарын ҡараны, Зарифа әбейгә балаларҙы тәрбиәләшеп, мәктәпкә ебәрергә ярҙам итте.

– Улым, ни булды һиңә? Килендең хәле нисек? Барғаның булдымы янына? Ниңә бөгөн барманың? – тип сурытты Зарифа инәй.

– Эй, инәй, һин һорама, мин әйтмәйем... – Миңлейыһангир башын эйҙе.

– Әллә килен менән берәй хәл булдымы? – тип төпсөнөүен дауам итте Зарифа әбей.

– Бер ни ҙә булмаған. Иҫән-һауҙар.

Алтынсы ҡыҙы тыуып, бер аҙна үтеүгә, Миңлебаныу «Тиҙ ярҙам» менән үҙе ҡайтып төштө. Ире ҡурала мал ҡарау менән мәшғүл ине. Ҡаршыламаны ла, һаулыҡ та һорашманы, хәлен дә белешмәне. Сабыйҙы һорашыу түгел, уның яғына әйләнеп тә ҡараманы.

Ул кисте Миңлейыһангир, мал-тыуарын ҡарап бөткәс, тура өйөнә инмәне, йоҡларға ла ҡайтманы. Иртәгәһен тыштағы донъяһын ҡарарға ғына ҡайтты. Эшен бөтөргәс, өйгә инде. Ҡатыны менән сабыйы ятҡан йоҡо бүлмәһенә яҡын да барманы. Зарифа әбейгә лә бер өнө лә булманы. Түрбашҡа уҙып, бер стакан һалҡын сәй һемерҙе лә тағы ҡайҙалыр олаҡты.

Миңлейыһангирҙың ялы бер төрлөрәк ҡалыпҡа әйләнеп китте: көн һайын иртән Зарифа инәй менән ҡатыны кейендергән өс ҡыҙын балалар баҡсаһына алып бара, унан ҡайтҡас, мал-тыуарын тәрбиәләп, ихата тирәһен тәртипкә килтерә; уҡырға йөрөгән ике ҡыҙына дәрес әҙерләшеп, мәктәпкә оҙата. Кисен кескәйҙәрен балалар баҡсаһынан алып ҡайта, мал ҡарай. Ғаиләһе кискелекте ашағас, аш бүлмәһендәге раскладушкаһына һуҙылып ятып ала ла китап йә гәзит-журнал уҡыштыра. Ашарға көнөнә өс тапҡыр совхоз бүлексәһе ашханаһына йөрөй.

Элек Миңлейыһангир тыуған бер ҡыҙына, роддомдан ҡайтҡас та ауыл Советына барып, «Тыуған йылы тураһында таныҡлыҡ»ҡа ҡатыны әйтеп ебәргән «миң»ле исемде яҙҙырып алып ҡайта торғайны. Төпсөк ҡыҙына метрика алып

ҡайтырға аяғы ла тартманы, күңеле лә төшмәне. Һаулығы бер аҙ урынына ултырғас, Миңлебануу үҙе барып алып ҡайтты.

– Бәпестең исеме Миңлебикә булған, – тине балалар баҡсаһына йөрөгән ҡыҙҙарҙың олорағы.

– Миңһеҙбикә булһа, ысынға тура килер ине, – тине атай кеше һәм башҡаса һүҙ ҡатманы.

– Ә мин Аҡбикә тип яҙҙырыр инем. Әсәй шикелле ап-аҡ ҡына бит ул, – тине ҡыҙыҡай, үҙҙәре яратып өлгөргән һылыуҙары тураһында оҙағыраҡ һөйләшеп барырға теләп.

– Уныһы ла дөрөҫ булыр ине, ҡыҙым, – тиеү менән сикләнде атаһы.

Өйгә бәпес ҡайтҡанға ун көнләп ваҡыт үтеп тә бара. Атай менән әсәй араһында бер һүҙ ҙә әйтелмәгән. Өй эсендә ҡапма-ҡаршы осрашһалар, ир ҡатыны янынан күҙҙәренән зәһәр ут сәсеп, терһәк терһәккә тейеп ҡалыуҙан сирҡанып, ситләтеңкерәп үтеп китә. Вахта ялының һәр көнө ике яҡ өсөн дә самаһыҙ ҙур ғазаптар эсендә үтә торҙо. Сабыйы йоҡлаған арала әсәй кешенең керпектәре йомолманы – төндәр буйы тоҙло күҙ йәштәре мендәрен сылатып сыҡты.

Өйҙәге ауыр тынлыҡтан Зарифа әбей ҙә екһенә башлағайны. Хужа өйҙә саҡта күрше-күләнгә ултырмаға йөрөштөрөр булып китте. Шундай аулаҡ ҡалған көндәрҙең береһендә Миңлебануу үҙен ситләтеп үтеп барған иренең еңенән матҡып тотоп туҡтатты:

– Әйҙә, һөйләшеп алайыҡ әле. Ауыҙға йөҙөк йәшереп, өндәшмәйенсә күпме йәшәргә мөмкин? Тырнаҡ ҡараһындай ғына ғәйебем булһа ла, шартлатып тураһын әйт тә, сәстәремдән урап тотоп, иҙән буйлатып һөйрәп, типкеләп туҡма. Үсең ҡанып ҡалыр. – Миңлебануу иренең күҙҙәренә ялбарып ҡараны. – Түҙермен. Бер өн дә сығармам. «Ыһ» та итмәм, исмаһам.

– Тел һөйәкһеҙ ул, Миңлебануу. Матур һайрайһың, әй. – Ир мыҫҡыллы көлөп ҡуйҙы. – Әммә ҡылған гонаһыңды тел менән генә йыуып төшөрөп булырмы икән? Үҙе юҡтың күҙе юҡ, тиҙәрме әле...

– Нисек телең бара, Йыһангир! Мине әҙәм ҡарағыһыҙ бысраҡҡа ҡойондорор өсөн артымдан күләгә шикелле йөрөнөңмө ни? – Диванға лыпын ултырған Миңлебануу түгелеп иларға кереште.

– Ике рәхәт бергә бергә килмәй шул, бер рәхәттең бер михнәте лә була. Гонаһтарың өсөн тамуҡ ғазабын донъялыҡта кисер әйҙә... – тип үсәне уны ире.

– Йыһангир! Нисек телең бара бер гонаһһыҙ Хоҙай бәндәһен ләғнәтләргә? Бәндәләрҙән оялмаһаң, Алланы һанла, исмаһам. Мине гонаһлыға иҫәпләһәң, гонаһһыҙ сабыйыбыҙҙың яҙмышын уйла...

– Бер тинлек тә гонаһың булмағас, нишләп һуң бала бер тамсы ла миңә тартмаған? – тип ҡыҙып китте Миңлейыһангир. – Тимәк, минең ҡатнашлығым булмаған!

– Алты баланың береһе әсәйгә оҡшаһа, ғәйепме ни?

– Ә миңе һуң, миңе? Ус төбөндәге миңе ҡайҙа булған? Ете быуын буйына ырыуыбыҙҙың ҡотон билдәләп килгән тамға бит ул. Нишләп ул, Минһеҙбикәгә килеп тәрәлгәс, ҡапыл өҙөлгән?

– Малай булған булһа, миңле булып та тыуған булыр ине. Ошо көнгә төшөп ултырырға яҙғандыр инде. – Әсә илауҙан йәнә һығылып төштө.

– Өйҙә тыныс тормош кисерергең килһә, метрикаһынан минең исемде һыҙып ташлап, ысын атаһының исемен яҙҙырып яңынан ал. Уға көсөң етмәһә, атаһы урынына һыҙыҡ ҡуйҙыр.

– Йыһангир, ни һөйләйһең? Аҡылдан тайпылдыңмы әллә?

Имер ваҡыты етеп, сабый тынысһыҙлана башланы. Әсәй сәңгелдәктән сабыйын күтәреп алды.

– Беҙҙең арала һүҙ шуның менән ғүмерлеккә өҙөлдө, – тип ишекте шарт ябып сығып китте үҙ һүҙенең дөрөҫлөгө өсөн ҡанталашып ярһыған Миңлейыһангир.

Ултырманан ҡайтып ингән Зарифа әбей, балаһын имеҙеп ултырған әсәнең йөҙөндә күҙ йәштәре юлаҡтарын күреп, хужа менән хужабикә араһында бик даулы аңлашыу булып алғанын һиҙенеп алды.

– Булмаһа, мин үҙ ауылыма ҡайтайым, ҡыҙым. Үҙ өйөм, үҙ көйөм, тигәндәй... Ҡыштың ауырлығын һеҙҙә үткәреп киләм. Артыҡ бүрәнә башы булып ятыу ярамаҫ артабан бында.

– Ҡуй, Зарифа инәй, бер ҙә генә артыҡлығың юҡ. Ул оҙаҡламай эшенә китеп барһа, бынау тиклем балалар менән яңғыҙ үҙем нишләрмен? Рәхмәт инде һиңә! – Миңлебаныу әбейҙе ҡайтыу ниәтенән, ай-вайына ҡуймай, кире дүндерҙе.

***

Миңлейыһангир ҡатыны менән даулы аңлашҡандан һуң аҙна-ун көн үткәс, вахта ялы тулмаған булһа ла, үҙенә оҡшап тыуған миңле ҡыҙҙарын ҡысып-ҡысып һөйөп яратты ла Зарифа инәйгә:

– Минең балаларға күҙ-ҡолаҡ бул инде, – тип хушлашып, ҡатыны менән Миңһеҙбикә яғына әйләнеп тә ҡарамай, эшенә юлланды.

Миңлейыһангир, вахта эше бөткәс, ҡайтырға ашыҡманы. Сирләп киткән иптәше урынына икенсе сиратҡа эшләргә ҡалды. Уны үткәргәс, үҙенең сираты етте.

Өйҙәге мәхшәр хәлдәрҙе ни тиклем генә ете йоҙаҡ аҫтында тоторға тырышмаһындар, яман хәбәр үҙенекен итте – тиҙ арала бөтә ауылға ғына түгел, ҙур совхоз күләмендә, унан инде районға таралды. Башҡорт ауылында елдән тыуған бала хурлығын күтәреү ни дәрәжәлә булыуын яҡшы белгән Миңлебаныу декрет ялын да, уның дауамы итеп бирелгән сираттағы йәйге ялын да өйҙән сыҡмай тиерлек үткәреп бөтөп бара. Кеше күҙенә күренеү түгел, хатта урамда осраған мал-тыуар ҡарашын да күтәрә алмағандай хис итте үҙен. Ул тиклем ҡабарған хәбәрҙәрҙән һуң Атбағар мәктәбендә артабан ҡала алмай ине ул. Йәйге ялының һуңғы көнөндә мәктәпкә барҙы. Ремонт мәшәҡәттәренән арынып ялға китә алмаған директорҙы ҡатын кабинетында тап итте.

– Һаумыһығыҙ, Миңлебаныу Миңлемырҙағоловна! Эште лә танһыҡлағанһығыҙҙыр инде. Бик ваҡытлы сығаһығыҙ. – Ул ялда булыусы уҡытыусыларҙың исемлегенә күҙ һирпеп алды. – Эш муйындан. Бик ваҡытлы килеп сыҡтығыҙ.

– Эшкә түгел, Вәлиулла Сөнәғәтуллович, мәктәптән бөтөнләй китергә тура килә инде миңә. Хәлем ауыл хәбәрҙәре буйынса үҙегеҙгә лә мәғлүмдер инде.

– Шулай уҡмы ни? Ҡиблаң ҡайһы яҡта, әгәр сер булмаһа? – Директор күҙлеген сисеп, урынынан тороп уҡ китте. – Иртәрәк хәбәр итергә кәрәк ине. Уҡыу башланыр алдынан юғары белемле уҡытыусыны ҡайҙан тапмаҡ кәрәк?

Миңлебаныу илтифатһыҙ ғына ҡул һелтәне.

– Рәте килеп сығыр әле. Тотмағыҙ ҙа мине. Төйнәнеп тә бөткәнбеҙ...

Директор ғаилә хәлдәре менән ҡыҙыҡһынмаҡсы итте лә, кире уйланы, ахыры.

– Ҡайһы яҡтарға юлланырға иҫәп, әйтмәнегеҙ бит әле, – тине шулай ҙа кабинет хужаһы.

– Баш һуҡҡан яҡҡа, – тип өҙөп кенә әйтте Миңлебаныу.

Йәш кенә көйө итәк тулы бала табып, декреттан башы сыҡмаған уҡытыусыны артыҡ тотҡоһо килмәй ине директорҙың. Өҫтәүенә, Миңлебаныу үҙ теләге менән китергә булғас, артыҡ өгөтләп тә торманы.

– Ярай, Миңлебаныу Миңлемырҙағоловна. Үҙегеҙ ғариза тотоп килгәс, ҡаршы тора алмайым, мәйелегеҙ. Тик беҙгә үпкәләп китмәгеҙ, – тине директор, хеҙмәт кенәгәһен ҡулына тоттороп. – Яңы урында уңышлы эшләп китеүегеҙҙе теләйем. Хәбәрләшеп тороғоҙ.

– Үтенесемде шулай мәшәҡәтһеҙ генә ҡәнәғәтләндергәнегеҙ өсөн бик ҙур рәхмәт һеҙгә. Артабан да иҫән-һау эшләгеҙ. Хушығыҙ.

Миңлейыһангир өс вахта сменаһын алһыҙ-ялһыҙ эшләгәндән һуң Атбағарға ҡайтып ингәндә, ғаиләһе көс етерлек мөлкәттәрен төйөнсөктәргә төйнәп, юлға сығып китергә генә тора ине.

– Сиған булдығыҙмы әллә? Ҡайҙа йыйындығыҙ былай? – Йорт хужаһы аптырап китте.

– Беҙ бик алыҫҡа китәбеҙ, атай. Әсәй шулай ти, – тине баш бала Миңлебанат.

– Эйе, әсәй менән китәбеҙ, – тиеште ҡалған эреле-ваҡлы ҡыҙҙар ҙа.

Бер Миңһеҙбикә генә тауыш бирмәне. Ул биләүле көйө сәңгелдәктә мыш-мыш йоҡлай ине.

– Ҡайҙа китәһегеҙ? Ҡырым сиреүеләй ҡыҙҙар менән ҡайҙа барып һыйынырға уйлайһың?

– Баш һуҡҡан яҡҡа. Донъя иркен. Мәрхәмәтле кешеләр ҙә табылыр, һыйындырырҙар әле, – тине Миңлебаныу, иренә әйләнеп ҡарамай ғына.

Миңлейыһангир ишеккә арҡыры торҙо.

– Өйҙәштәр кеүек булһа ла, йәшәрбеҙ әле бер ҡыйыҡ аҫтында, ә, Миңлебаныу? Уртаҡ балаларыбыҙ бишәү бит.

– Урамға сығыр әмәл ҡалманы. Тырнаҡ ҡараһындай ғына ла ғәйебем булмаһа ла, урамда осраған бөтә күҙҙәр ҙә, бөтә тәҙрәләр ҙә миңә шикләнеп, көлөп ҡарай төҫлө. Минең хәлдәге уҡытыусы коллегалары янында ла, балалар алдында ла күҙгә төшкән дегәнәк булып ҡала алмай. Икәүләп йыйған донъя бер үҙеңә ҡала. Йәшә әйҙә. Мораҙыңа ирештең...

– Балаларҙы уйланыңмы һуң аҙыраҡ? Яңы урында улар кемгә һыйыныр? Ауылығыҙҙа башланғыс мәктәп тә юҡ бит...

– Рәте табылыр. Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң. Ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫ.

– Балаларҙы бер яңғыҙың нисек ҡарарһың?

– Ҡарармын. Ҡурҡма. Алиментың да, донъяң да кәрәкмәй. Бөтәһе лә үҙеңә генә булһын. Илдә сәпсек үлмәҫ, тиҙәр. Хәләлдән тапҡан балаларымды бер үҙем дә кәм-хур итмәм.

Миңлейыһангирҙың башына ҡапыл ғына бер уй килде.

– Улай булмай. Улай булғас, давай, уртаҡ балаларҙы бүлешәбеҙ! Һиңә төпсөгөң менән өсәү, миңә лә шул саҡлы. Йәгеҙ...

– Теймә балаларға! – Минлебаныу иренә йәшле йөҙө менән әйләнде. – Бүлешергә улар һиңә мал түгел! Балалар әсәй ҡанаты аҫтында үҫергә тейеш. Закон минең яҡлы. Берәһен дә үгәй ҡулына ҡалдырғым килмәй.

Ҡатын бер ҡулына сәңгелдәктәге сабыйын, икенсе ҡулы менән төргәктәрҙең иң ҙурыһын күтәрҙе лә өйҙән сыҡты. Төйөнсөктәрҙең ҡалғандары бәләкәй ҡыҙҙарҙың көсөнә самалап ҡына төрөлгәйне. Һәр бала үҙенең йыйнаҡ ҡына итеп төрөлгән кейемдәрен тотто. Иң кескәйҙәре Миңлезифа ҡурсаҡтары һалынған моҡсайҙы ҡулына алды.

– Һис юғында оло юлға тиклем оҙатып ҡуяйым һуң?

Шаңҡып ҡалған Миңлейыһангир балалар ҡулындағы төйөнсөктәргә үрелде.

– Теймә! – тип асырғанып ҡысҡырҙы әсәләре. – Ҡапҡаға тиклем дә оҙатып ҡуйыуың кәрәкмәй.

Ҡатыны шулай тиһә лә, Миңлейыһангир ғаиләһе йортон ташлап сығып киткәндә хуш күңел менән ултырып ҡала алманы. Балаларының артынса ҡапҡаға йүнәлде. Уларға эйәреп урамға сыҡты. Иң алдан, Миңһеҙбикәһен түшенә ҡыҫып, ауыр төйөнсөк күтәргән Миңлебаныу бара. Уға, ҡаҙ бәпкәләре кеүек теҙелешеп, балалары эйәргән. Күп тә барманылар, эҫе көндә әллә бышлығыуҙан, әллә имгеһе килеп, Миңһеҙбикә ҡысҡырып илай башланы. Ауыр ине бөтәһенә лә. Аталары ла ғаиләһе менән өнһөҙ генә хушлашҡанда айырылыу ғазабын ҡатыны менән ҡыҙҙарынан кәм кисермәне.

***

Ғаиләһе ташлап сығып киткәс, өйө шул тиклем шыҡһыҙ, ҡотһоҙ тойолдо Миңлейыһангирға. Үҙ өйөндә толҡа тапманы ир. Нимәгә генә тотонһа ла, ҡулына бер эш барманы, хатта сәй ҡайнатып эсергә лә күңеле төшмәне. Ҡатыны менән бергәләп йыйған донъя бер үҙенә тороп ҡалды. Байтаҡ уйланғандан һуң мал-тыуарын һатып, аҡсаһын балаларына ебәрергә уйланы Миңлейыһангир. Тик ҡайҙа ебәрергә? Ҡайҙа урынлашҡандары ҡасан да булһа билдәле булыр әле, тип йыуатты ул үҙен. Төшкән ерҙәрендә юғалырға энә түгелдәр ҙә инде.

Мал-тыуарын ғаиләһе киткәндең икенсе көнөндә үк совхозға тапшырҙы. Кәртә-ҡураһын һүтеп һатты. Ҡош-ҡортон һуйып, һыуытҡысҡа тултырҙы – уны ир алдағы ялында баҙарға алып барып һатырға ниәтләгәйне. Себештәрен бер йәшниккә тултырып, Зарифа инәйгә бушлай ҡалдырып ҡайтты. Ҡалған ваҡ-төйәген утынға тураны. Ҡайнап торған киң ихатала алты мөйөшлө өй генә һерәйеп тороп ҡалды.

Ялы бөтөүгә табан барғанда, йүкә телефон аша ғаиләһенең ҡайҙалығы яҡынса билдәле булды. Ҡаҙағстандың Турғай далаһында көн итеүсе бик алыҫ сыбыҡ осо туғаны янына һыйынған икән Миңлебаныу балалары менән. Юллай торғас, аныҡ ҡына адресын да тапты, һатылған донъяның аҡсаһына үҙенең эш хаҡын да ҡушып, байтаҡ аҡса ебәрҙе. «Яңы урында морон төртөп йәшәп китергә етергә тейеш», – тип уйланы ул. Аҡса артынса хат та ебәрҙе. Ҡыҙҙарының бөтәһенә лә исемләп сәләм яҙҙы. Тыуған яҡтарҙан килгән сәләмдәрҙән Миңһеҙбикә генә мәхрүм ине. Эшләгән аҡсаһының үҙенә сығымдарынан артҡанын биш ҡыҙына тигеҙ итеп бүлеп һалып торасағын да хәбәр итте. Миңһеҙбикәгә өлөш юҡ ине.

Мәңге туң Ямал ярымутрауы яғында аҡсаны арыу ғына эшләне Миңлейыһангир. Эшләгән аҡсаһын машинаға ла йыйманы, кассаға ла күсермәне, ә устарының уртаһында ырыу тамғалары булған биш ҡыҙына инселәп ебәреп торҙо. Биш ҡыҙы ла уҡып сығып, тормоштарын ҡороп ебәргәнгә тиклем шунда эшләне.

Бишенсе балаһы Миңзифа башлы-күҙле булғас, Миңлейыһангир, тундраһын ташлап, киң ихатала әле һаман яңғыҙ һерәйеп торған йортона бөтөнләйгә ҡайтып төпләнде.

Ғүмеренең алтынсы тиҫтәһен тултырғанда, Миңлебаныуының вафаты тураһында хәбәр килде. Ике уйлап тормай, Миңлейыһангир Турғай далаһына юлланды. Кирбестән йә таштан эшләнгән бейек манзаралар менән тулы ҡаҙаҡ ҡәберҙәре араһында ҡыҙғылт тупрағы әле үлән менән дә ҡапланып өлгөрмәгәне Миңлебаныуҙыҡы ине.

***

Ҡатынының вафатына ике йыл тирәһе үтеүгә, ауылға Миңлебикә исемле йәш уҡытыусы ҡыҙ эшкә килгән, тигән хәбәр таралды. Имеш-мимештәргә ҡарағанда, ул ҡыҙ тыумышы яғынан ошо ауылдыҡы икән. Фамилияһын белеште Миңлейыһангир. Атбағарова, имеш. Аҙаш фамилияны ишеткәс, ҡартлас һағая төштө. «Мәктәптә эшләгәс, атаһының исеме менән өндәшәләрҙер», – тип күршелә йәшәгән уҡыусы малайҙан барып һорашып килде. «Миңлебикә Миңлейыһангировна уның исеме. Уңайлыраҡ булһын өсөн, атаһының исемен Йыһангировна тип әйттерә», – тип тәтелдәне малай. «Бер-береһе өсөн йән атҡан ҙур татыу ғаиләне селпәрәмә килтергән Миңһеҙбикәләр ул йәш уҡытыусы», – тигән шөбһәле уй көнө-төнө тынғылыҡ бирмәне инде ҡартлыҡ мөһөрө үҙен көндән-көн ныҡыраҡ һиҙҙерә башлаған пенсионерға.

Миңлебикә Миңлейыһангировна тураһындағы хәбәрҙәр далалағы ҡоро ҡамғаҡ йомғағы ише ҡабара барҙы. Хәбәрҙең күбеһе ҡасандыр был мәктәптә эшләп киткән күп балалы уҡытыусы Миңлебаныу менән зоотехник Миңлейыһангирҙың ғаиләһендә ҙур ғауғаға сәбәпсе булған Миңһеҙбикәгә барып терәлә ине.

Миңлейыһангир кистәрҙең береһендә йотлоғоп китап уҡып ултыра ине, ишек шаҡынылар. Ишекте асыуға тулҡын-тулҡын сәстәрен яурынына һалған түңәрәк йөҙлө ҡыҙ баҫып тора ине. Етенсе тиҫтәне тирә башлаған ҡарттың: “Әйҙәгеҙ, үтегеҙ!” – тип әйтергә асҡан ауыҙы йомолмай ҡатып ҡалды. Алдында бынан ҡырҡ йылдар элек баҫҡан эҙҙәрен үберҙәй булып, күләгәһе шикелле бер аҙым да ҡалмай артынан йөрөгән Миңлебаныуы баҫып тора ине! Билен ҡыҫып ҡына торған пальтоһы ғына икенсерәк төҫтә.

– Үтергә мөмкинме? – тип өндәшеүгә иҫенә килде ҡарт.

– Әйҙәгеҙ, әйҙә, рәхим итегеҙ, түргә уҙығыҙ.

Залға үттеләр. Ҡыҙ стеналағы рам эсендәге ҙурайтылған ике фото алдында туҡтап торҙо ла уң яҡтағы ҡыҙ фотоһын наҙлы ғына һыйпаны:

– Был бит минең әсәйем…

– Бәлки, шулайҙыр ҙа, ике һыу тамсыһы кеүек оҡшағанһығыҙ бит, – тиеү менән генә сикләнде шымтайып ҡалған ҡарт.

– Ә быныһы – атайым. – Ҡыҙ егеттең фотоһын да һыйпап алды ла ҡарт яғына ялп итеп боролоп ҡараны.

Миңлейыһангир ҡарт өндәшмәне.

– Минең исемем Миңлебикә. Биология уҡытыусыһымын. Документтарым буйынса Миңлебикә Миңлейыһангировна тип йөрөтәләр. Тимәк, атай бар. Ә халыҡтағы имеш-мимеш хәбәрҙәр буйынса, мин атайһыҙ тыуған бала булғанмын. Ул оятты күтәрә алмаған әсәйем балаларын үҙе менән алып, ауылдан сығып китергә мәжбүр булған. Ул хурлыҡлы ваҡиғала һеҙҙең дә ҡатнашлығығыҙ булғандыр, әлбиттә. Ә минең һәр ваҡыт атайлы булып йәшәгем килде. Күҙгә төшкән дегәнәк ише күпме йәшәргә мөмкин? Әсәйем һеҙҙең атайым икәнлегегеҙҙе иҫбатлай алмаған, үҙем килдем бына. Ризаһығыҙмы?

Миңлейыһангир ҡапыл ғына ни тип өндәшергә лә белмәй ыуаланды.

– Әсәйеңдең... Миңлебаныуҙың «Ҡанды тикшертәйек» тип йәш аралаш ялбарып өндәшкәнен хәтерләйем. Шул булмаһа... Мин ишетергә лә теләмәгәйнем. Нәфрәт күҙҙе лә, аңды ла томалағайны шул.

– Эйе, һеҙ ишетергә лә теләмәгәнһегеҙ. Турғай далаһында беҙ барыбыҙ ҙа

аталары ташлап киткән балалар булып үҫтек. Әсәйемә килгәндә, күҙ йәштәренә һығылып ятҡан төндәре аҙ булманы.

– Нисек көн иттегеҙ һуң сит-ят ерҙәрҙә? – Ҡартлас ҡыҙ алдында сетерекле хәленән нисек ҡотолорға белмәй аптыраны.

Ҡыҙ диванға барып йәтешләп ултырып алды.

– Тормошобоҙ матди яҡтан ауыр булманы, һеҙ үҙегеҙҙеке тип иҫәпләгән миңле балаларығыҙға аҡсаны мул ебәреп торҙоғоҙ. Мине, атаһы тарафынан өлөшһөҙ ҡалдырылған баланы, әсәйем үҙ аҡсаһына тәрбиәләне. Һеҙҙән килгән аҡсаның бер тинен дә үҙе өсөн дә, минең өсөн дә тотонманы.

– Апайҙарыңдың яҙмышы нисек?

– Миңлебанат апайым Камчаткала, Миңленур Төркмәнстандың Ҡушҡа ҡалаһында... Һәр ҡайһыһының үҙ ғаиләһе бар, тормоштары матур. Етеш тормошта үҫһәләр ҙә, әсәйебеҙҙе ҡара ҡайғыларға батырғанығыҙ өсөн һеҙгә үпкәләре ҙур ине. Әсәйемә ике һыу тамсыһылай оҡшаған булғас, йәшлегендә ул баҫып йөрөгән баҫҡыстарҙан йөрөгөм, ул уҡыған университетта белем алғым килде. Яҙмыштыр инде, ошо ауылдың мәктәбенә юллама алдым.

...Анализға ҡан тапшырған көндән ай самаһы уҙғас, Миңлейыһангирҙың ишеген йәнә ҡаҡтылар. Күтәрмәлә Миңлебикә баҫып тора ине. Йөҙө көләс.

– Һаумы, атай! – тип ҡосаҡлап алды ҡыҙ Миңлейыһангирҙы.

– Атай тип әйтерлек һәйбәтме әллә анализдары? – Күҙҙәре йәшкәҙәгән ҡарт Миңһеҙбикә-Миңлебикәһенең арҡаһынан һөйҙө.

– Эйе, атай, бына. – Ҡыҙ ыҡсым ғына сумкаһынан мисәтле ҡағыҙҙарҙы аҡтарып сығарҙы ла атаһына күрһәтергә тотондо. – Өҫтәүенә, бына тағы бер шаһит. Миңлебикә усын асып күрһәтте. Унда бер тин аҡса ҙурлығындағы тоноҡ ҡына миң төҫмөрләнә ине.

Миңлейыһангир аһ итте.

– Ҡасан килеп сыҡты ул ғәләмәт? Ниңә тәүге килгәнеңдә үк әйтмәнең? – Ҡарт тотлоҡто. – Ҡанды анализға ебәреп тә тормаған булыр инек...

– Теге ваҡытта әйтергә онотҡанмын шул. Фатирға ҡайтып ингәс кенә иҫкә төшкәйне лә, тағы ла килеп йөрөп, борсоғом килмәне. Ә районға барғанда анализдың ниндәй һөҙөмтә биреүе ҡыҙыҡһындыра ине. – Миңлебикә атаһының ҡосағына һыйынды.

– Бына хәҙер мине үҙеңдең ҡыҙың түгел тип әйтеп ҡара инде! Атай, хәҙер мин кем инде? – тип усын юғары күтәреп бер әйләнеп алды ҡыҙ.

– Миңлебикәһең, ҡыҙым. Үҙ ҡаным булғанһың да баһа! – Ҡыҙын яурындарынан оҙаҡ ҡына ҡосаҡлап торған Миңлейыһангир күҙҙәренә эркелгән йәшен күрһәтмәҫкә тырышты.

Атайлы-ҡыҙлы, яйлап ултырып, сәй эсеп алдылар.

– Беҙгә барыбыҙға ла бергә йыйылышып ултырып алырға кәрәк ине, ҡыҙым, – тине атай, һуңғы уртлам сәйен йотоп, сынаяғын түңкәреп ҡуйғас.

– Ул көн дә етер, атай, сабыр итәйек, – тине Миңлебикә.

– Әсәйең генә беҙҙең янибыҙҙа булмаҫ инде, – тине Миңлейыһангир.

Аталы-ҡыҙлы моңайышып ҡалдылар.

***

Миңлебикә менән бер ваҡытта мәктәпкә Дамир исемле йәш математика уҡытыусыһы ла эшкә килгәйне. Ике йәш йөрәк араһында тәүҙә дуҫлыҡептәре тартылды. Был хис оло мөхәббәткә әйләнеп киткәс, ҡышҡы каникул алдынан,

мәктәп ашханаһында гөрләтеп йәштәр туйы үткәреп ебәрҙеләр. Миңлейыһангир менән Абдразаҡ ҡоҙа туйҙың иң түрендә булды. Мәктәп йәштәргә әлегә йәшәп торорға мөйөш табып бирҙе. Китапхана менән йәнәш кенә булған иҫкемоҫҡо ҡағыҙҙар һаҡлай торған бүлмә ине ул. Миңлебикә менән Дамир уны бушатып, йыуып-йышып, һипләп, әлегә йәшәп торорлоҡ хәлгә килтерҙе.

Миңлейыһангир бер көндө йәштәрҙең хәлен белергә килеп ултырҙы. Сәй эскән арала бүлмә эсен күҙ йүгертеп ҡарап сыҡты ла:

– Үҙемдең өйгә алып ҡайтырға килдем мин һеҙҙе. Бындай ғына сыйырсыҡ ояһында йәшәп ятыу тормошмо инде ул? Үҙемдең мөйөшөм бар. Телевизор менән торшер булһа, миңә башҡаһы кәрәкмәй. Ҡалған бөтә бүлмәләр ҙә һеҙҙең ҡарамаҡта.

Аҙна-ун көндән йәштәр атай йортона күсенеп килде. Мәктәпкә йөрөү алыҫыраҡ булһа ла, йәшәү шарттары ҡаланыҡына тартымыраҡ: ут, газ бар, һыу өйҙә, колонка ла ҡуйылған. Йыуынты һыуҙы ла сығарып түгеп йөрөргә түгел.

– Ҡыш үтеп, ҡараға сыҡҡас, кәртә-ҡураны тергеҙеп алырбыҙ. Мал-тыуар, ҡош-ҡортто ишле итеп үрсетербеҙ. Ҡортсолоҡто ла рәткә һалып алырбыҙ. Баҡса ҙур, иркен. Емеш-еләк, йәшелсә лә үҙебеҙҙеке булыр. – Алдағы көндәргә ҡорған пландарын теҙҙе йәшәүгә ҡомары күтәрелеп киткән ҡарт.

Сентябрь аҙағындараҡ, әбейҙәр сыуағы көндәренең береһендә, роддомдан өйгә бәпес алып ҡайттылар. Ишектән килеп ингәс тә:

– Малаймы? – тип ҡаршылаНЫ ҡартатай.

– Малай, ҡайным, малай, – тине ауыҙы ҡолағына еткән кейәү.

– Исеме кем булыр икән? Уйлашҡанһығыҙҙыр бит? – тип түҙемһеҙләнде ҡартатай.

– Исеме ни, үҙемдекенә иш була инде – Илмир. Дамир – Илмир. Ҡайһылай йәтеш, – тип йылмайҙы йәш атай, ҡыуанысын йәшерә алмайынса.

– Усында миңе бармы һуң? – тине ҡартатай.

– Бар, бар! – Миңлебикә баланың бармаҡтарын яҙып ебәреп, усының ҡап уртаһында балан орлоғо ҙурлығындағы ғына миңде күрһәтте.

– Ир баланың исеме ауыҙ тултырып әйтерлек олпатлы ла, күркәм дә булһын ул. Баш баланыҡы бигерәк тә. – Ҡартлас бынан өс тиҫтә йылдар элек үҙенең баш балаһына әҙерләп ҡуйған исемде әйтте:

– Миңлетаһир. Шулай яҙҙырабыҙ. Үҙем дә барырмын.

Йәштәр, бер-береһе менән ҡарашып, шыҡ йылмайышып алды:

– Ярай, шулай булыр!

Күҙ ҡараштары менән генә «һөйләшеп» алыуҙарынан «Һинеңсә Миңлетаһир, беҙҙеңсә Илмир» тигәнде төҫмөрләп була ине.

Миңлебикә баланан бушанғандан һуң бер аҙ арыуланып алғас, мулла саҡырып, исем ҡуштылар. Мулла биләүҙә ятҡан сабыйҙы ҡулына алып, ике ҡолағына ла өсәр тапҡыр “Миңлетаһир” тип ҡысҡырҙы.

...Байрам көндәренә самалап, бөтә туғандарҙы йыйып, бәпес туйы үткәреп алдылар. Ҡунаҡтар араһында Миңлейыһангирҙың устарында миңдәре булған алты ҡыҙы ла бар ине.



Харис
СӘҒИТОВ

## Ҡайтып киләм

*Ҡайтып киләм, юлдарымда*
*Йәшлек үҙе саҡыла.*
*Татлы һағыш ҡойондары*
*Йөрәгемә һарыла.*

*Тыны менән тартып тора*
*Йорто атай-әсәйҙең.*
*Ошо нигеҙҙә башланды*
*Мәғәнәһе йәшәүҙең.*

*Әсәйемдең нурлы йөҙө*
*Балҡый күңел күгендә.*
*Уның йылы аҡ мейесе*
*Көтә мине бөгөн дә.*

*Ҡайтығыҙ, тиҙәр, тауҙарым,*
*Яулыҡ болғай ҡайындар.*
*Унда минең ҡояшым бар,*
*Унда минең айым бар...*

*Рәхәтләнеп сабыр өсөн*
*Һары талға атланып,*
*Ығы-зығынан арынып,*
*Ҡайтам мин ҡанатланып.*

---

*Харис Сәғитов (1946) Хәйбулла районының Аҡназар ауылында тыуған. Юғары хәрби уҡыу йортон тамамлап, оҙаҡ йылдар хәрби хеҙмәттә, шул иҫәптән атаҡлы Байконурҙа була.*

*Отставкалағы подполковник. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы.*

## Тәүге ямғыр

*Күк ҡабағы тишелгәндәй булды,*
*Йәшендәре күкте күкрәтте.*
*Шыбыр-шыбыр яуған яҙғы ямғыр*
*Тәбиғәтте тағы йәшәртте.*

*Тымды ямғыр. Ҡояш йылмайыуын,*
*Әйтерһең дә, көтөп торғандар:*
*Сыр-сыулашып ҡыйыҡ аҫтарынан*
*Күтәрелде шаян турғайҙар.*

*Ҡабындымы йәшлек ялҡындары:*
*Балҡыны,*
*күр, —*
*йәйғор нағышы.*
*Әлүктән үк өтә бәғеремде*
*Үткән - киткән яҙҙар һағышы.*

## Яҙ ҙа килде

*Һағындырып көткән яҙ ҙа килде,*
*Епшек ҡарҙар тауҙан ишелә...*
*Шуны ғына көтөп торған кеүек,*
*Шишмәләрҙең теле сиселә.*

*Ҡар һыуҙарын эсә урман, дала,*
*Күңелемдә балҡый пак хистәр,*
*Ҡыштан мираҫ,*
*иҫке хәтер булып*
*Уйһыулыҡта ята аҡ төҫтәр.*

## Тәҡдир

*Боҙҙар китә. Һаҡмар тулап аға,*
*Ағылалар күктә болоттар.*
*Ошо яҙҙың ҡуйынында кеүек*
*Бергә булған татлы минуттар.*

*Хәтерләтте ошо ташҡын йылға*
*Албырғатҡыс йәшлек иртәһен.*
*Тик белмәнек тәҡдир һуҡмағының*
*Ике яҡҡа алып китәһен.*

*Уҙмыш юҡтыр яҙмыш тигәндәрҙән,*
*Кеше яҙмыштары күп ҡатлы.*
*Саҡ менән Суҡ кеүек ике йәнбеҙ —*
*Мөхәббәттең, ахры, үҙ хаҡы.*

## Елкенәмме...

*Елкенәмме яҙ еткәнгә,*
*Йөрәгем тибә шашып.*
*Хистәрем дә — яҙғы ташҡын,*
*Ярҙарҙан сыға ашып.*

*Шашма, тимен хистәремә,*
*Ташма, тим, ташма әле!*
*Хәҙер инде тулҡындарҙың*
*Бер аҙ баҫылыр мәле.*

*Тик ниңәлер тыңламай ул,*
*Йөрәгем эре сиртә —*
*Унда әле күңелдәрҙе*
*Иретер хистәр тиртә.*

## Ышандыра кеүек

*Баҡсалағы еләк-емештәрҙән*
*Мул булыр, тип, көҙгө өҫтәлем,*
*Ҡарҙар яуһа, «Был — бәхеткә» тимен,*
*Ямғыр яуһа, уңыш көтәмен.*

*Тәбиғәттә һәр бер үҙгәреште*
*Яҡшылыҡҡа ғына юрайым.*
*Өмөтләнеп көтәм яҙҙарымды,*
*Йәйҙәремә барып урайым.*

*Ҡояш менән ер балаһы бит беҙ,*
*Онотолмай шуға үткәндәр.*
*Күкрәгемдә ҡояш балҡып тибә,*
*Өмөтлө лә кеүек көткәндәр...*

## Үкенерлек түгел

Лилиәгә

*Хыялымда йәшлек эҙҙәренән*
*Яҙҙарыма ҡайтам көҙҙәремдән,*
*Ләйсән булып хәтирәләр яуа, —*
*Бөгөн шулар йөрәгемә дауа.*

*Мәрйен итеп теҙәм үткәндәрҙе,*
*Иҫкә алам һағынып көткәндәрҙе...*
*Була минең шундай сәғәттәрем,*
*Беләһеңме, йәнем, сәбәптәрен?*

*Үкенерлек түгел үткән йылдар,*
*Ҡыҙарырлыҡ түгел үҙған юлдар,*
*Улар илтә ғүмер үрҙәренә,*
*Мәңгелектең бөйөк серҙәренә...*

## Шатлык түгелме?

*Бөтәһе лә ерҙә ҡабатланыр:*
*Ҡышҡы буран, яҙғы ташҡындар;*
*Гөлдәр сәскә атыр хуш еҫ бөркөп,*
*Йылы яҡтан ҡоштар ҡайтырҙар...*

*Беҙҙең ғүмер генә ҡабатланмаҫ...*
*Үтеп булмаҫ ҡабат ғүмерҙе.*
*Тик шулай ҙа балаң йөҙҙәрендә*
*Балҡыу – үҙе шатлыҡ түгелме?*

## Йылдар, юлдар

*Һиҙелмәй ҙә ҡалған үткән йылдар,*
*Ғүмер буйы эш тип бил бөктөк.*
*Йырлап йәшәүҙәре рәхәт тә бит...*
*Йәшәү өсөн әсе тир түктек.*

*Ҡырау булып сәстәремә ҡунған*
*Әрмеләрҙә үткән йылдарым.*
*Тыуған нигеҙ, ҡайтыр юлдарым, тип*
*Күңелемдең зыңлай ҡылдары...*

## Онотмайыҡ

*Ташлап фани донъяларҙы,*
*Китә кеше. Хәтер ҡала.*
*Киткәндәрҙең ҡылған эше*
*Ҡалғандарҙы уйға һала.*

*Үкенерлек түгел микән*
*Был донъяла ҡылған эше?*
*Фәрештәләр һорау алһа,*
*Нимә тиер киткән кеше?*

*Әгәр золом ҡылған булһа*
*Ул ҡасандыр берәй йәнгә,*
*Хаҡ Тәғәлә фарман бирер:*
*“Оҙатығыҙ йәһәннәмгә!..”*

*Фанилыҡта йәшәгәндә*
*Эшләп китһәң изгелектәр,*
*Һинән һуң да хәтерләтер*
*Булмышыңды изге эштәр.*



**Флүрә**
**НИЗАМОВА**

## *Рәми рухы менән һөйләшеү*

Эй, кешеләр, үҙе иҫән саҡта
Белһәгеҙсе шағир ҡәҙерен..!

**Рәми Ғарипов.**

*Хеҙмәтеңде һинең күрмәнеләр,*
*Үҙеңә көн бирмәнеләр.*
*“Милләтсе” мөһөрө таҡтылар ҙа*
*Һуҡтылар ҙа ҡаҡтылар.*

*Дуҫтарың да булды бик һирәк.*
*(Хәҙер иһә улар бик күмәк.)*
*Һинең ижадыңдан һут алған,*
*Барыр юлдарына ҡот алған*
*Йәштәр булды эргәңдә күберәк.*
*Яуҙар үткәс, батырҙар күбәйә,*
*Дуҫтарыңдың исемлеге киңәйә.*
*Һине тарһынғандар,*
*Лаф орғандар*
*Зал тултырып ултыра тыңғарәп,*
*Хәҙер инде табын тыңғарәк.*

*Балаң өшөп асыҡҡанда,*
*Үҙең сикһеҙ талсыҡҡанда,*
*Ҡайҙа булған икән шулар, тим.*

*Флүрә Низамова (1951) Баймаҡ районының Билал ауылында тыуған. Теләс урта мәктәбен, БДУ-ның филология факультетын тамамлай. 1977 йылдан Хәлил урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта.*

*Исемеңә хәҙер табыналар,*
*“Туған тел” тип ҡабыналар,*
*Үткәнеңде һағыналар,*
*Ҡайҙан сыҡты икән былар, тим.*

## Бөгөнгө Ирәндек

*Ирәндегем, иләгем,*
*Үтә күренә елегең.*
*Ҡайҙа ҡасып бөткән икән*
*Ҡуян, бүре, кейегең?*

*Бейеш батыр ҡабат тыуһа,*
*Йәшенер урын тапмаҫ.*
*Ауырыу түгел, ас бәндәң дә*
*Ҡипкән емешең ҡапмаҫ.*

*Аҡ ҡайындар аяҡланған*
*Бай нәфсеһен ҡапларға.*
*Салауаттар тыумаҫ микән*
*Үҙ ерҙәрен һаҡларға?*

*Ерһатарҙар, илһатарҙар*
*Борондан да билдәле.*
*Ҡөнөн-төнөн ташыһа ла,*
*Биртенмәгән билдәре.*

*Ерҙән алған, ерҙә ҡала —*
*Нәфселәргә тыйыу табылыр.*
*Маңҡорттарҙы тотоп һелкеү өсөн*
*Салауаттай ҡыйыу ҡабыныр,*
*Нәфселәргә тыйыу табылыр...*

## Асылмаҫ сер

*Тоғролоҡтоң төҫөн мин белмәйем,*
*Ни рәүештәлер ул, ниндәйҙер.*
*Хыянаттың төҫө, моғайын да,*
*Һинең кеүектер ул, һиндәйҙер.*

*Фанилыҡтың асылмаған сере —*
*Ул да булһа тоташмаған ике ярҙыр.*
*Утрау урап килеп һыу ҡушыла.*
*Ярҙар өсөн был ҡағиҙә — бары зарҙыр.*

## Бәхет тәме

*Һин урлаған бәхет тәмен*
*Мин төшөмдә татыным.*
*Етенсе ҡатында булдым*
*Һөйөү-тәхет затының.*

*Бәхет тәмен беләм хәҙер:*
*Ул һиндә һәм тик миндә.*
*Ошо ике аралыҡтан*
*Үтмәһен икән ел дә.*

*Ожмах ҡошо — бер фәрештә*
*Арабыҙҙа өйрөлә.*
*Яралмаған сабый булып*
*Күҙ йәшкәйем төйөлә.*

*Өндәремдә, төштә яҙҙым —*
*Хаттарым табаҡ-табаҡ.*
*Һинең менән миңә түгел —*
*Йәштәргә булһын һабаҡ.*

*Йән яратҡан, тәнең тартҡан*
*Йәр бер генә була ул.*
*Хоҙай биргән йәрҙән яҙһаң,*
*Йәшәү түгел — йола ул.*

**Рәйлә**
**НӘҘЕРҒОЛОВА**

## *Телем*

*Телем! Телем! Иң ҙур байлығыбыҙ,*
*Күсә килгән ата-бабанан!*
*Бала башын бутамайым тиеп,*
*Хәл итмәсе, ҡандаш, ҡабалан,*

*Түкмәй-сәсмәй еткерәйек уға*
*Бөйөклөгөн туған телемдең!..*
*Ҡош йырылай моңон, яғымлығын,*
*Ғорурлығын ғәзиз еремдең!*

*Туған телен белмәй икән балаң, —*
*Бушҡа йәшәлә бит ғүмерең...*
*Киләсәккә мираҫ итеп үҙең*
*Һалмағандай рухи күперен!*

---

*Рәйлә Нәҙерғолова (1958) Ғафури районы Бәйембәт ауылынан. Әҫәрҙәре ваҡытлы матбуғатта даими баҫыла. “Аҡҡош һағышы” исемле шиғырҙар йыйынтығы донъя күрҙе.*

## Ҡитап

Ҡулдарыма китап алам, әгәр
Күңелдәрем тулһа һағышҡа,
Төҙәлмәҫтәй булһа яраларым,
Ышанысым бөтһә яҙмышҡа.

Китап илтә тылсым донъяһына,
Баҫа күңелемдең һағышын,
Төҙәтә ул йөрәк яраларын
Һәм тигеҙләй уның ҡағышын.

Онотола бөтә ҡайғыларым,
Айҙы, йыһандарҙы байҡайым.
Китап геройҙары менән бергә
Янып, көйөп йәшәй башлайым.

## Нимә көтөргә?

Күргәнегеҙ бармы башҡортомдоң
Берәй майлы ҡалъя ҡапҡанын?
Иң яҡшыһы — ҡунаҡтарға уның,
Ә үҙенә ярай ҡалғаны...

Сал Уралдың бөтә байлыҡтары
Йылға булып ситкә ағыла.
Ир-аттарың вагон-вагон булып
Себерҙәргә китә тағы ла.

Емеш-еләген дә йыя алмай,
Балыҡ тота алмай күлдәрҙән
Зар-интизар булып йөрөрбөҙмө,
Ҡурсау эҙләп иҫкән елдәрҙән?

Йәнем һыҡрай. Әрнеп тибә йөрәк,
Нисек итеп тыныс ҡалаһы?
Үҙ илендә ятҡа ҡол булырмы
Аҫабалы башҡорт балаһы?..



Мөҙәрис
МӨСИФУЛЛИН

# ЯҘЫУСЫ

### Драма-уйланыу

***Беҙ уны ҡайҙан беләйек,***
***Меҫкен үлеп аңлатмаһас...***
Ғабдулла Туҡай.

Ҡатнашалар:

*Һәҙиә*
*Йәш Һәҙиә*
*Гөлгәүһәр*
*Ғөбәй*
*Мотиҡ*
*Ғәлиулла*
*Барый*
*Динислам*
*Рәжәп*
*Хәрби*
*Иншар-Рәһип*
*Битараф*

## Беренсе бүлек

**Ҡурай моңо ишетелә. Шаршау асыла. Йыраҡта тауҙар күренә. Уң яҡта һике. Ғөмүмән, сәхнә тирмә эсен хәтерләтә. Кәрәк саҡта уны лазарет итеп була. Артта – ҡалҡыулыҡ. Һул яҡта – өҫтәл, ултырғыстар. Ҡыҫҡаһы, тамашала барған ваҡиғалар, күренештәр өҙлөкһөҙ ошо сәхнәлә бара. Ут Гөлгәүһәрҙе яҡтырта. Ул ҡулындағы хатты әйләндереп-әйләндереп ҡарай ҙа күкрәгенә ҡыҫа.**

**Гөлгәүһәр.** Хат-хәбәрең өсөн рәхмәт, Ишмәт ҡустым! Оҙаҡ яуап килмәгәс, әллә ниҙәр уйлап бөтөрҙөк. Тик... (*борсолоп хатҡа ҡарай*) элекке хаттарында һүҙҙәр күп ине. Бынығында бик аҙ яҙылған... Хоҙайым?! (*Кемделер эҙләп.*) Ҡайҙа һуң Һәҙиә?.. (*Йырлай.*)

*Байсураһа менеп, ай, ҡараһам,*
*Өрпәк менән Мулдаҡ күренә.*
*Ерһенмәйем, ялан, ай, ереңде,*
*Зарураттан йәмле күренә...*

---

*Мөҙәрис Ғәйнелғилем улы Мөсифуллин (1957) Дүртөйлө районы Түбәнге Әлкәш ауылында тыуған. Өфө дәүләт сәнғәт институты театр факультетының режиссерҙар әҙерләү бүлеген тамамлай. Дүртөйлө мәҙәниәт һарайында режиссер, Дүртөйлө ҡалаһы һәм районының хакимиәтендә мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләй. Әлеге ваҡытта — Дүртөйлө район мәҙәниәт һарайы директоры. Биш китап авторы.*

**Йәш Һәҙиә йүгереп инә.**

**Гөлгәүһәр** (*ҡаршы бара*). Ғәлиулла ағайың өйҙә юҡмы әллә?

**Йәш Һәҙиә.** Ғариф бабайҙарға хат уҡырға китте, ҡайтышлай инермен, көтөгөҙ, тине.

**Гөлгәүһәр.** Афарин, ҡыҙым! (*Хатты күкрәгенә ҡыҫа.*) Ә мин хатты күңелемдән уҡыным да инде.

**Йәш Һәҙиә** (*аптырап*). Нисек, күңел менән уҡып буламы ни?

**Гөлгәүһәр**. Күңел һиҙә ул… (*Баҫа, хатты уҡығандай.*) Башта иҫәнлек-һаулыҡ белдергән. Тиҙерәк һуғыш бөтһә, батша әмере сығыу менән тыуған яҡтарыма ҡоштай осоп ҡайтыр инем, үлеп һағындым, тигән. Киткәндә… Ишмәт ҡустым нисек йырлағайны әле?.. (*Йырлай.*)

*Билгә ҡайыш таҡтылар ҙа*
*Һалдат итеп алдылар.*
*Бәхетһеҙҙәрҙе алдылар,*
*Бәхетлеләр ҡалдылар…*

**Йәш Һәҙиә** (*уйланып*). Бәхетлеләр ҡалдылар? Ә нимә ул… бәхет?

**Гөлгәүһәр.** Бәхетме? (*Йәнләнеп.*) Ҡайҙа, Ғәлиулла ағайың ингәнсе, Һомай – бәхет ҡошо хаҡында һөйләйем әле.

**Йәш Һәҙиә.** Ҡыҙыҡ. (*Әсәһенә һыйынып ултыра.*)

**Гөлгәүһәр** (*көрһөнөп*). Үҙем күпме эҙләһәм дә, бәхет ҡошон күрә алманым, бәлки (*ҡыҙының сәсенән һыйпап*), Һомайҙы… һин күрерһең, ҡыҙым!.. (*Ҡурай моңо ишетелә.*) Һауала, күктең иң бейегендә, нисәмә мең йылдарҙан бирле Һомай тигән ҡош йәшәй икән. Ул йомортҡаһын ергә табан ҡырҡ көн, ҡырҡ төн томалап төшә-төшә лә, сайҡалып китеп, кире күккә күтәрелә, ә себеше моронлап йомортҡа ҡабын тишеп сыға ла тағы ергә ҡырҡ көн, ҡырҡ төн төшә, ти…

**Йәш Һәҙиә.** Әй-й-й, бигерәк оҙаҡ төшә икән!

**Гөлгәүһәр.** Эйе, ҡыҙым, бәхет килһә, шулай оҙа-а-а-аҡ көттөрөп килә, ти.

**Йәш Һәҙиә** (*түҙемһеҙләнеп*). Әсәкәйем, һөйлә инде.

**Ҡалҡыулыҡҡа ҡаса-боҫа Хәрби менән Битараф менеп баҫа. Улар икеһе лә тотҡондар кейемендә. Хәрби бер ҡулына винтовка, икенсеһенә ҡыҙыл әләм тотҡан. Кейем өҫтөнән туҙып бөткән шинель кейгән, уның погондары ла, төймәләре лә юҡ. Гөлгәүһәр менән Йәш Һәҙиә уларҙы күрмәй.**

**Гөлгәүһәр.** Шулай итеп… ул себеш төшөп килә-килә лә, инде ергә етергә ҡырҡ ҡолас ҡалды тигәндә, ҡанат еткереп, тағы әсәһе янына, болоттар араһына, күтәрелеп осоп китә икән. Ул ҡоштоң үҙен түгел, хатта ерҙәге күләгәһен генә күреп ҡалған кеше лә сикһеҙ бәхетле була, ти. Беҙ шул ҡошто күрмәгәнгә бәхетһеҙ икән. Ә уны күргән кеше йә батша, йә бай була… Йә бала-сағаһы күп булып, рәхәт көн итәләр, ҡайғы күрмәйҙәр, ти…

**Йәш Һәҙиә** (*ян-яҡҡа йүгерә. Уның тауышы ҡайтауаз булып яңғырай*). Ә мин күрәсәкмен! Һомай – бәхет ҡошо, һин ҡайҙа-а-а-а?.. Һине күргем, бик күргем килә, Һомай – бәхет ҡошо-о-о-о…

**Башта Хәрби көлә. Битараф теләр-теләмәҫ кенә уға ҡушыла. Йәш Һәҙиә ҡурҡып әсәһенә һыйына. Был күренеште йәшеренеп кенә Иншар күҙәтә.**

**Хәрби** (*көлөп туҡтағас*). Аңламаным, кеше ниндәйҙер ҡошто йә күләгәһен күрһә лә,.. бәхетле була, тинеме?

**Битараф.** Ниңә аптырайһың?.. Һәр бер халыҡ борон-борондан бәхет хаҡында әкиәттәр, легендалар, риүәйәттәр уйлап сығарған.

**Хәрби.** Наҙанлыҡ, һуҡырлыҡ, дыуамаллыҡ, юҡ-барға ышаныу! Халыҡ иҫәр, халыҡ томана! (*Винтовкаһын Битарафҡа һуҙа.*) Мә, эште Һомай ҡошонан башла: эҙлә, тап һәм… ат!

**Битараф** (*винтовканы ала*). Ярар… Ярар… (*Дорфа ғына.*) Атырға икән – атырға!

**Йәш Һәҙиә ниҙер әйтергә теләй, Гөлгәүһәр унын ауыҙын ҡаплай. Шул саҡ Битараф Иншарҙы абайлап ҡала һәм винтовкаһын уға төҙәй.**

**Иншар** (*сығып, Хәрбиҙең аяғына йығыла*). Атмағыҙ, зинһар, янығыҙға алығыҙ – эттәй тоғро булырмын!

**Хәрби** (*уйланып*). Эт?.. Эттең туйған ере бар, тыуған ере юҡ, тигәндәр! Яҡшы, ифрат та яҡшы! Баҫ! (*Иншарҙы әйләнеп сыға.*) Һин кем?

**Иншар.** М-м-мин… Р-р-р… (*Алдаша.*) Мин – Рәһип! (*Баш эйә, үҙе аҫтыртын ғына уларҙы күҙәтә.*)

**Хәрби.** Рәһип тиһеңме? Рәһип – ғәрәпсә "ҡурҡыныс" тигән һүҙ. Шәп! (*Иншарҙың арҡаһынан ҡаға.*) Күңеләмә үтеп индең, уң ҡулым булырһың.

**Иншар-Рәһип** (*түбәнселек менән баш эйә*). Рәхмәт… (*Һаҡ ҡына.*) Хужам!

**Хәрби кеше.** Хужа, хужа, тинеңме? (*Сәпәкәйләп.*) Афарин! (*Ҡалҡыулыҡҡа баҫып һөйләй.*) Беҙ оҙаҡламай барлыҡ халыҡтарҙы, милләттәрҙе бер ҡанат аҫтына (*йоҙроғон өҫкә күтәреп*), бер йоҙроҡҡа йыйып, яңы – әлегә тиклем Ер шарында тиңе булмаған йәмғиәт төҙөйәсәкбеҙ! Унда бар халыҡ та бәхетле, тигеҙ хоҡуҡлы, ирекле һәм азат буласаҡ!

**Иншар-Рәһип Хәрбиҙең һәр һүҙен иғтибар менән тыңлай, мәғәнәһен аңлап еткермәһә лә, ризалыҡ белдереп баш ҡаға.**

**Иншар-Рәһип.** Эйе, эйе… Нәҡ шулай буласаҡ!

**Хәрби** (*әләмде һутеп, Иншар-Рәһипҡа һуҙа*). Мә, күтәр!

**Иншар-Рәһип** (*ҡурҡып*). Ҡ-ҡ-ҡыҙыл әләм?.. Миңә лутсы винтовканы…

**Хәрби** (*киҫәткәндәй*). Мин ике тапҡыр ҡабатламайым.

**Иншар-Рәһип** (*әләмде ала ла юғары күтәрә*). Ур-р-ра!

**Хәрби.** Ошо мәлдән барлыҡ халыҡ, милләттәр ниндәйҙер… ҡошҡа, әкиәт-легендаларға түгел, ә ҡыҙыл әләмгә… (*Әләмгә күрһәтә лә, ниҙер уйлап, үҙенең күкрәгенә төртөп туҡтап ҡала.*)

**Иншар-Рәһип.** Ур-р-ра!

**Битараф** (*ситкә*). Ишәйгә ҡушай табылды, бик тәүәккәл күренәләр – быларҙың арбаһына ултырмай булмаҫ. (*Винтовкаһын юғары күтәреп.*) Ур-р-ра!

**Иншар-Рәһип** (*әләмде күтәреп, юрый ҡысҡыра*). Ур-р-ра!..

**Хәрби, ҡәнәғәт йылмайып, Гөлгәүһәр янына килә.**

**Хәрби** (*Йәш Һәҙиәгә ымлап*). Был ҡыҙҙың исеме нисек?

**Йәш Һәҙиә** (*алға сығып*). Мин – Һәҙиә!

**Хәрби** (*сәпәкәйләп*). Әл-лә-лә – ҡыйыу, батыр ҡыҙ!

**Гөлгәүһәр.** Дөрөҫ, Һәҙиәм батыр ҡыҙ – "Ир-ҡыҙ" булыр, Аллаһы бойорһа!

**Хәрби.** "Ир-ҡыҙ?.." (*Аптырап.*) Быныһы ниндәй әкиәт батыры? (*Тамаҡ ҡыра.*) Ҡабатлап әйтәм: беҙ төҙөйәсәк йәмғиәттә әкиәт-легендалар, ҡоштар… "Ир-ҡыҙҙар" булмаясаҡ!

**Гөлгәүһәр** (*юрамал, һынап*). Әй (*ҡулын һелтәй*), хәҙерҙән үк сик ҡуйғас, тыйғас, ул йәмғиәттә… ирекле, азат йәшәп булырмы һуң?

**Хәрби.** Дөрөҫ, ҡуйған маҡсатыбыҙға ирешер өсөн "тимер тәртип" булырға тейеш! Сөнки беҙ һайлаған юл сетерекле, ауыр… икһеҙ-сикһеҙ ҡорбандар талап итә!

**Гөлгәүһәр** (*ҡурҡып*). Кемгә кәрәк был афәт? (*Ҡыҙын ҡосаҡлап.*) Аллам, ярраби Хоҙайым, бәләнән һаҡла!

**Хәрби** (*Гөлгәүһәргә*). Тукта әле, туктa – өҙлөкһөҙ дини һүҙҙәр һөйләйһең, һин әллә… беҙҙе, ярлыларҙы, рәхимһеҙ иҙгән яуыз батша, байҙар яҡлымы?

**Иншар-Рәһип, ниҙер әйтергә уйлай ҙа, туктап ҡала.**

**Гөлгәүһәр** (*Хәрбиҙе һынап*). Иманым

камил: ярлы халыҡ… батшанан… байҙарҙан башҡа йәшәй ала! Әммә Аллаһы Тәғәләнән башҡа йәшәй…

**Хәрби** (*эләктереп ала*). Йәшәй ала – нәҡ өҫтөнә баҫтың, афарин! Нимәгә беҙгә әрәмтамаҡтар, ҡан эскестәр! Тарихҡа күҙ һалығыҙ! Иҙелгән, яфаланған халыҡ быуаттар буйы азатлыҡ яулап фетнә ойошторған, баш күтәргән, ҡан ҡойған! Тик хаиндар уларҙы һәр саҡ рәхимһеҙ баҫтырған, аҫҡан, киҫкән! Һөҙөмтәһеҙ, фажиғәле көрәш! Беләһегеҙме ни өсөн?.. (*Аҫтыртын йылмайып.*) Сөнки… маҡсатты дөрөҫ ҡуймағандар! (*Кинәт ярһып.*) Азатлыҡ яулар өсөн… беренсе сиратта тәхетте, хакимлыҡты ҡулға алырға кәрәк! (*Һүрелеп, бер ни булмағандай.*) Аҙаҡтан иркенләп батшаның, байҙарҙың нәҫелдәрен ҡоротторбоҙ, мәсеттәрҙе емерербеҙ… Муллаларҙы, мәзиндәрҙе, абыстайҙарҙы, дин тотоусыларҙы… (*Гөлгәүһәргә мылтыҡтан атҡандай*) пух, пух итербеҙ!

**Гөлгәүһәр** (*һаҡ ҡына*). Аңламайым: ата-бабаларыбыҙ ғүмер буйы тотҡан динде, Аллаһы Тәғәләне ниңә шулай күрә алмайһығыҙ?

**Хәрби.** Ике тәкә башы… бер ҡаҙанға һыймай!

**Иншар-Раһип.** Бик аҡыллы һүҙҙәр!

**Гөлгәүһәр.** Тәүбә, тәүбә, бер әйттем – ун ҡайттым.

**Хәрби.** Ерҙе – крәҫтиәндәргә, завод-фабрикаларҙы – эшселәргә, хакимлыҡты халыҡтың үҙенә… тотторабыҙ! (*Хәрби, йоҙроғон алға һуҙып, шашынып көлә. Барыһы ла аптырып торалар.*) Тот-тот-тотторорбоҙ!

**Гөлгәүһәр** (*ҡурҡып*). Тәүбә, ҡабат фетнә хаҡында һөйләйһегеҙ түгелме?

**Иншар-Раһип** (*уйланып*). Эйе, ҡан ҡойоуһыҙ булмаясаҡ!

**Хәрби** (*сәпәкәйләп*). Афарин, афарин, Раһип!

**Гөлгәүһәр** (*Иншар-Раһипҡа текәлеп*).Туҡта, ҡайҙа күрҙем әле һине, улыҡайым? Һин… Диңгеҙбай ауылында йәшәгән Шәйәхмәт байҙың төпсөк улы түгелме?

**Иншар-Раһип** (*ҡурҡып ҡала*). Ниндәй Ш-ш-шәйәхмәт бай ул? Мин… Мин – батрак, хәйерсе малайы!

**Гөлгәүһәр.** Ай-һай?!

**Иншар-Раһип** (*Хәрбигә*). Был ҡатын һаташа! (*Битарафтың винтовкаһын алып, Гөлгәүһәргә төҙәй. Йәш Һәҙиә эсәһе алдына килеп баҫа.*) Рөхсәт итегеҙ?..

**Хәрби** (*бүлдереп*). Иртәрәк әле… (*Иншар-Раһипты баштан-аяҡ ентекләп ҡарай.*) Торған һайын күңелемә хуш киләһең, Раһип! Хәйләкәр, ике йөҙлө, ялағайһың,.. яраҡлаша беләһең. Алланы ла, мулланы ла, туғандарыңды ла танымайһың… (*Арҡаһынан ҡаға.*) Киттек… (*Сығырға борола.*)

**Йәш Һәҙиә.** Ә Һомайға теймәгеҙ!

**Хәрби** (*яратмайынса*). Тамам теңкәмә тейҙе шул ҡошо менән! (*Раһипҡа.*) Әлегә был ҡыҙҙың… исем-фамилияһын яҙып ал!

**Иншар-Раһип** (*Гөлгәүһәргә бара, бармаҡ янай*). Мине таныһаң да, танымаған булып ҡыланырға кәрәк ине, бисара ҡатын. Был ахмаҡлығың өсөн (*Йәш Һәҙиәгә ымлап*) икегеҙҙең дә башығыҙға етәсәкмен!

**Йәш Һәҙиә** (*ҡош һымаҡ елпенеп әйләнә*). Етә алмайһығыҙ, тота алмайһығыҙ, мин – Һомай, мин – ҡош!

**Иншар-Раһип** (*ниҙер уйлап*). Ә ҡош… һис шикһеҙ ситлектә булырға тейеш!

**Йәш Һәҙиә** (*Иншар-Раһипҡа*). Һеҙ… насар кеше!

**Иншар-Раһип.** Етте! (*Бармаҡ янап.*) Был һүҙҙәрең өсөн дә… Әйт, исем-фамилияң нисек?

**Йәш Һәҙиә.** Мин – Һәҙиә Ильясова!

**Иншар-Раһип.** Ильясова Һәҙиә! (*Яҙа.*) Ырғыҙ буйындағы Хәсән ауылынан… Һомай ҡошон күрергә… “Ирҡыҙ” булырға хыяллана! (*Хәрбигә.*) Булды, Хужам!

**Хәрби** (*шинелен ҡаға, яғаһын күтәрә*). Бик күп ҡорал, хәрби кейем кәрәк буласаҡ. Киттек!

**Иншар-Раһип** (*яһалма йылмайып*). Дөрөҫ, Хужам!

**Көлөшә-көлөшә сығалар.**

**Битараф** (*кейемен ҡаҡҡылай*). Миңә барыбер… (*ауыр һулап*) барыбер үҙ көйҙәренә бейетәсәк былар!

**Йүгереп сығып китә.**

**Йәш Һәҙиә** (*арттарынан ҡарап*). Әсәйем, кемдәр былар, ниндәй насар кешеләр?

**Шомло көй яңғырай.**

**Гөлгәүһәр**. Тәүбә, тәүбә! (*Етдиләнеп юғарыға ҡарай.*) Әллә Һомай беҙҙе… киләсәк менән осраштырҙы, киҫәттеме, балам?! (*Ҡурҡып.*) Аллам һаҡлаһын, һаташыу ғына булһын, тәүбә, тәүбә!

**Йәш Һәҙиә** (*юғарыға ҡарап*). Һомай?.. Киләсәк менән осраштырҙы, тиһеңме?.. Ҡайҙа һуң ул, күренмәй?! (*Ҡулын һелтәп.*) Әй… (*Гөлгәүһәргә килеп һыйына.*) Әсәй, ә кем ул “Ир-ҡыҙ”?

**Гөлгәүһәр.** “Ир-ҡыҙмы”?.. (*Борсолоп хатты ала.*) Ғәлиулла ла оҙаҡланы. Хат күңелемә тынғылыҡ бирмәй… (*Хатты кире ҡуя.*) Ярар, тыңла… Имештер, беҙҙең ауылда Яҡуп исемле кешенең бер генә ҡыҙы булған, ти. Атаһы уны бик яратҡан, батыр йөрәкле булып үҫеүен теләгән. Ҡыҙын баштан-аяҡ ҡоралландырған, һунарға алып йөрөгән, төрлө бәйгеләргә ебәргән. Ул замандарҙа ҡәбиләләр араһында урман, мал йөрөтөү урыны, һыу өсөн ыҙғыш-талаш, ҡан ҡойош, бәрелештәр йыш булып торған.

**Йәш Һәҙиә.** Абау, кешеләр гел һуғышып ҡына йәшәгәндәрме?

**Гөлгәүһәр.** Эйе, балам… Бына шундай бәрелештәрҙең береһендә ҡыҙҙың арҡаһына дошман уғы ҡаҙала. Батыр ҡыҙ эйәренә йығыла, ә тоғро аты уны тыуған еренә алып ҡайта. Малҡай, хужаһының хәлен аңлап, ерҙе соҡой, тырнай. Шул саҡ тояҡ эҙенән һыу килеп сыға һәм һалҡын шишмә булып ағып китә.

**Йәш Һәҙиә.** Шунан?

**Гөлгәүһәр.** Ҡыҙҙы хөрмәтләп шунда ерләйҙәр. Уны: “Ир-ҡыҙ ине был!” – тип ҙурлағандар. Тора-бара шишмәне лә “Ир-ҡыҙ” һыуы тип йөрөтә башлағандар. Йылдар үткән һайын йылғаның исеме үҙгәреп, Ырғыҙға әүерелгән.

**Йәш Һәҙиә** (*альға сыға*). Бына “Ырғыҙ” һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан икән? (*Баҫа.*) Әсәй, ә мин… батыр ҡыҙ – “Ир-ҡыҙ” була алырмынмы?

**Гөлгәүһәр.** Булырһың, ҡыҙым, булырһың! (*Янына килеп ҡосаҡлай, һөйә.*) Ул ваҡытты күрһәм, мин ерҙәге иң бәхетле әсә булыр инем, Аллаһы бойорһа!

**Йәш Һәҙиә** (*иркәләнеп*). Ә мин тырышырмын, тырышырмын, әсәкәйем, валлаһи!

**Ғәлиулла инә.**
**Күрешәләр, доға уҡыйҙар.**

**Гөлгәүһәр** (*хатты бирә*). Бына хат килде, шуны уҡып ишеттермәҫһеңме, Ғәлиулла улым. (*Аҡса бирә.*) Ваҡытың булһа, яуабын да яҙыр инең.

**Ғәлиулла.** Бисмиллаһир-рахманир-рахим!.. (*Аҡсаны кеҫәһенә һала.*) Ә яуапты, билдәле, хәҙер үк яҙырбыҙ, Гөлгәүһәр апай. (*Күҙлеген кейә.*) Кил әле, Һәҙиә, бергә уҡыйбыҙ… (*Һәҙиәне янына ултырта, хатты аса.*) Бына был хәреф… Туҡта, урыҫ телендә яҙылған. (*Эстән уҡый.*)

**Гөлгәүһәр** (*һиҙенеп*). Ғәлиулла улым, дөрөҫөн әйт, һуҙма!

**Ғәлиулла** (*баҫа, күҙлеген һала*). Гөлгәүһәр апай… ҡайғылы хәбәр килгән.

**Гөлгәүһәр** (*күҙҙәренә текәлеп*). Яңылыш уҡыманың мы, улым?

**Ғәлиулла.** Һуғыш бит, Гөлгәүһәр апай!

**Гөлгәүһәр** (*һығылып төшә, өҙгөләнеп*). Ишмәт энем, ҡайтам, көтөгөҙ, тип йырлаған инең бит? (*Илай.*)

**Ғәлиулла.** Барыһы ла… Аллаһы Тәғәлә ҡулында! (*Аҡсаны кире ҡуя.*) Асыуланмағыҙ… (*Сығыу яғына бара.*)

**Йәш Һәҙиә** (*уның артынан эйәрә*). Ағай, мине онотмағыҙ, яраймы?!

**Ғәлиулла.** Уҡый-яҙа белеүҙе… бәхет тип уйлайһыңмы әллә? Бөгөн генә ике ғаиләгә ҡайғылы хәбәр уҡып ишеттерҙем (*сыға*).

**Йәш Һәҙиә.** Барыбер… уҡығым, яҙғым килә (*хатты ала.*) Хикмәтле таяҡтар, һыҙыҡтар, түгәрәктәр… Шуларҙан хәреф яһап, кешеләрҙе йә шатландырырға, йә илатырға була икән? (*Әсәһенә һыйына.*)

**Гөлгәүһәр** (*хатты алып күкрәгенә ҡыҫа*). Һиҙҙем бит – хат… ҡәбер ташындай һалҡын ине… (*Йырлай.*)

*Һауаларҙа осҡан, ай, һар микән,*
*Аяҡҡайҙарын күргән бар микән?*
*Эскәйҙәремдә янған хәсрәт утын*
*Тыштарымдан белгән бар микән?..*

(*Ҡуйынынан ҡаурый сығара.*) Бәхет ҡошон эҙләгәндә Ырғыҙ буйында таптым… Бәлки, ул Һомайҙың ҡауырһынылыр? (*Һәҙиәгә һуҙа.*) Мә, ҡыҙым, төҫөм итеп һаҡла! (*Хатты алып ҡарай ҙа илап сығып китә.*)

**Йәш Һәҙиә ҡауырһынды ентекләп ҡарай. Ҡурай моңо яңғырай.**

**Йәш Һәҙиә** (*юғарыға ҡарап*). Һомайҡайым, рәхмәт!.. Был ҡауырһынды миңә тип төшөрөп ҡалдырҙыңмы?.. Яҙырға өйрәнһен тинеңме? Валлаһи, барыбер… (*ҡаурый менән бушлыҡҡа төрлө һыҙыҡтар һыҙа*) өйрәнәсәкмен!..

**Ут һүнә. Революция осорондағы көйҙәр яңғырай. Арттан ҡыҙыл әләм күтәргән, ҡоралланған һалдаттар, матростар ҡыҫҡырышып үтә. Ут Һәҙиәне яҡтырта. Ул ҡыҙыл косынка бәйләгән.**

**Һәҙиә** (*дәртләнеп, илһамланып һөйләй*). Көн менән төн буталды – донъяның аҫты өҫкә килде. Байҙарҙы ҡырып бөтөрәләр икән, илгә ярлылар хужа булып, яңы, бәхетле йәмғиәт төҙөйәсәктәр икән, тигән имеш-мимеш һүҙәр йөрөй. Белмәҫһең – бар халыҡ үҙен бәхетле һанай: һөйөнә, шатлана… (*Туҡтап ҡала.*) Әллә… барыһы ла бәхет ҡошон күрҙеләрме икән? (*Ҡуйынынан ҡаурыйҙы ала.*) Ә нindәйерәк икән ул Һомай – бәхет ҡошо?.. (*Ҡурай яңғырай.*) Ә минең күҙ алдыма күпереп торған ап-аҡ мамыҡлы, матур ҡош килә. Йәшел үләндәргә һуҙылып ятып, иге-сиге булмаған зәңгәр күктә йөҙгән матур, көмөш кеүек аҡ болоттарҙың ваҡ киҫәктәренә ҡарап, Һомай ҡоштоң ҡанат ҡаҡҡан себештәреме икән әллә, тип хыялланам. Ләкин улар мин ҡош итеп күрергә теләгән һындарын үҙгәртәләр ҙә туҡтауһыҙ көнсығышҡа ағылалар…

**Ут һүнә. Революциянан һуңғы көйҙәр яңғырай. Ут һул яҡтағы өҫтәлде яҡтырта. Кис. Лампа яҡтыһында йәштәр – Һәҙиә, Барый, Динислам һөйләшеп, бәхәсләшеп ултыра.**

**Динислам**. Бына бит, егеттәр, донъя нисек яҡшы яҡҡа үҙгәрә, ә?! Шәйәхмәт бай ошо ике ҡатлы йортон һалғанда, ҡасан да булһа бында мәҙәни-ағартыу эштәре алып барылыр, тип уйланымы икән?

**Барый**. Етте, йәшәне инде заманында. Бер үҙенә ике йорт ине. Ә мин (*ҡыланып баш эйә*) уның хеҙмәтсеһе инем (*көлә*).

**Барый**. Ә беләһеңме, Һәҙиә, ауыл ҡарттары һиңә ниндәй ҡушаматтар таҡҡан?

**Һәҙиә**. Ҡыҙыҡ?

**Динислам**. “Кеше талаусы”, “кафыр” һәм башҡалар, һәм башҡалар.

**Һәҙиә**. Ә мин ҡурҡмайым: ябай халыҡ та уҡый-яҙа белергә тейештер бит, ағайҙар!

**Барый**. Хаҡ һүҙ, Һәҙиә!.. Ә беҙҙе ҡасан уҡыта башлайһың? Өйрәнеп алһам, Һамарға докторлыҡҡа уҡырға китер инем.

**Һәҙиә**. Шулаймы?

**Барый**. Хыялым – доктор булыу!

**Динислам**. Ә минең әртис булғым килә. (*Ҡыланып.*) Һәҙиә, тамашаны уйнайбыҙмы, юҡмы?

**Көләләр. Иншар инә. Уға гармунсы Рәжәп эйәргән.**

**Иншар** (*ҡыланып Рәжәпкә өндәшә*). Әйт әле, дуҫҡай, был хәйерселәр беҙҙең йортта нимә ҡыланалар, ә?

**Рәжәп**. Улар хәҙер хәйерселәр түгел, ә Диңгеҙбай ауылының “бөйөк” кәмитселәре!

**Иншар**. Оһо, шулаймы ни? Улай булғас, пардон – ғәфү итегеҙ. (*Баш эйә.*)

**Барый**. Хыялыңдан айны, Иншар. Был йорт хәҙер халыҡтыҡы, йәғни – беҙҙеке!

**Иншар**. Кем бирҙе уны... һеҙгә? Талап алдығыҙ бит! (*Әсенеп күкрәгенә һуға.*) Бында ниндәй дауылдар ҡоторғанын белмәйһегеҙ әлегә...Эсем тулы нәфрәт, үс!.. Мөмкинлек кенә булһын! Ух!.. (*Асыу менән стенаға һуға.*) Ант итәм, ант, ант, ант, ант!

**Һәҙиә**. Зинһар, тынысланығыҙ! (*Иншарға текәлеп ҡарап.*) Мин һеҙҙе ҡайҙалыр күрҙем...

**Иншар** (*бүлдереп*). Һа!.. (*Һәҙиәгә төбәлеп.*) Тау менән тау ғына осрашмай, “Ир-ҡыҙ”?! (*Әйләнеп сыға.*) Тәүбә, һылыу ҡыҙ булғанһың!

**Һәҙиә**. Һеҙҙең исемегеҙ... Раһип бит әле?

**Иншар**. Юҡ, әлегә Иншар. Кәрәк икән, Иншар ҙа, Раһип та булырмын! (*Һәҙиәгә яҡынайып, кисәткәндәй.*) Һин күпте белмә, йәме?! (*Ниҙер уйлап.*) Кем белә киләсәкте?.. Күрәһең дәһә, донъяның аҫты өҫкә килде... (*Башта Динислам менән Барыйға, аҙаҡтан Һәҙиәгә мылтыҡтан атҡан кеүек.*) Пух, пух, пух!.. Бәлки, киләсәктә... Раһип булырмын!

**Динислам** (*Иншарға бара*). Әллә аҡылдан шаштыңмы?

**Һәҙиә** (*Динисламдың ҡулынан тотоп туҡтата*). Һеҙ, Иншар ағай, беҙгә ҡамасаулайһығыҙ: бауҙың оҙоно, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы, тигән халыҡ.

**Иншар** (*Һәҙиәгә*). Бына кем икән беҙҙең йортто талап алған “батыр”, тфү (*төрттөрөп*), “Ир-ҡыҙ”? Етмәһә, Шәйәхмәт бай үҙ ризалығы менән бирҙе, тиеп халыҡҡа ялған хәбәр таратҡанһың... килмешәк. (*Һәҙиәгә яҡынайып.*) Ниңә бында, Диңгеҙбайға, килеп, йәштәрҙе аҙҙырып йөрөйһөң, ә?

**Һәҙиә**. Халыҡҡа тамаша күрһәтеү, балаларҙы яҙырға, уҡырға өйрәтеү – аҙҙырыу буламы һеҙҙеңсә? (*Төрттөрөп.*) Үҙегеҙ хатта Һамарҙа белем алғанһығыҙ, тиҙәр!

**Иншар** (*теште рен ҡыҫып*). Ауылға беҙҙекеләр кире ҡайтһамы?! (*Йоҙроҡтарын төйнәп.*) Көлөгөҙҙө күккә осорор инем!

**Һәҙиә**. Бүре ҡанға туймаҫ!

**Барый**. Кемдәр ул “беҙҙекеләр”? Аҡ бандиттарҙы әйтәһеңме?

**Иншар** (*Барыйға нәфрәтләнеп*). “Ҡыҙылдар”, имеш! (*Һәҙиәгә.*) Ә һин ҡыҙыҡай...

**Динислам** (*Иншарҙың ҡаршыһына килеп баҫа*). Туҡран тәүбәнде әйттерәйемме?

**Барый** (*Иншарҙың артына баҫа*). Шунһыҙ аңламаҫ был әҙәм аҡтығы!

**Иншар** (*хәлен аңлап*). Ярай, ярай, һеҙ еңдегеҙ – көс әлегә һеҙҙең яҡта! (*Һәҙиәгә килеп.*) Пардон, һылыуҡай! (*Рәжәпте ултырғысҡа ултырта.*) Тарт! (*Һәҙиәгә.*) Телең шыма күренә, әйҙә! – Иншарҙы уҙҙыра алырһыңмы?.. (*Йырлай.*)

*Уйна әйҙә, уйна әйҙә,*
*Мин әйтәм таҡмаҡтарҙы.*
*Бер ваҡытта күргәнем юҡ*
*Һеҙҙең кеүек ахмаҡтарҙы.*

***Һәҙиә***.

*Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң*
*Исемдәре Әкрәм.*
*Бутылкалай танауыңды*
*Ҡутәрмәһәң дә күрәм.*

***Иншар***.

*Туғайҙарға барған саҡта*
*Сыпсыҡ эйәрләнеңме?*
*Сыбар тауыҡ йырлағанда*
*Илап ебәрмәнеңме?*

***Һәҙиә***.

*Ҡарға һайрай, мин йырлайым –*
*Һис түҙерлек хәлем юҡ.*
*Ниңә ялғанды һөйләйһең,*
*Ҡарға һайрағаны юҡ...*

**Ҡысҡырып көләләр. Иншар һүҙ таба алмай туктап ҡала.**

*Иншар.*

Кем ҡарға, минме... ҡарға?

*Һәҙиә.*

*Эреләнеү, эреләнеү,*
*Эреләнеү ярамай.*
*Беҙҙең ҡыҙҙар эреләргә*
*Әйләнеп тә ҡарамай.*

**Иншар** (*Рәжәпкә асыуланып*). Етте, туҡта.

**Һәҙиә**. Матур йырлайһығыҙ, Иншар ағай! Әйҙәгеҙ, беҙҙең тамашала ҡатнашығыҙ.

**Иншар**. Аллам һаҡлаһын! (*Көлә.*) Элекке хеҙмәтсе-батрактарҙың алдында "кәмит" уйна, имеш... (*Рәжәпкә.*) Киттек!.. (*Бер нисә аҙым атлағас, ҡапыл боролоп.*) "Кәмит" кенә түгел, "трагедия" уйнарбыҙ әле, Аллаһы бойорһа!

**Ҡотороноп сығып китә. Рәжәп уйнай-уйнай уға эйәрә.**

**Динислам** (*еңен төрөп*). Ҡабырғаларын һанамай булмай был бәдбәхеттең.

**Барый**. Үҙен Алланың ҡашҡа тәкәһе тип хис итә шикелле?! Әйҙә әле, арт һабағын уҡытайыҡ...

**Һәҙиә** (*ҡаршы төшөп*). Туҡтағыҙ, егеттәр, кәрәкмәй!

**Барый**. Һәҙиә, гел ҡаршы төшәһең! (*Ҡулын һелтәй.*) Әй...

**Динислам** (*арлы-бирле йөрөй*). Нишләп һуңлай был Әхмәҙин? Әллә өйөнә барып киләйемме?

**Һәҙиә**. Барый менән барығыҙ, тик Иншар менән һуғыша күрмәгеҙ, яраймы?

**Барый**. Ҡурҡма, Һәҙиә, беҙ хәҙер... (*Барый менән Динислам сығалар.*)

**Һәҙиә** (*арлы-бирле йөрөй*). Тамашаны барыбер халыҡҡа күрһәтәсәкбеҙ!

**Өҫтәл артына ултырып уҡый башлай. Иншар менән Рәжәп инә.**

**Иншар**. Һе, "һандуғас"ты аулаҡта ҡалдырғандар... Ә мин – "ҡарға", ҡар-ҡар-ҡар! (*Таҡмаҡлай.*) "Ҡарға һайрай, мин йырлайым", имеш! Халыҡта: "Айырылған ҡаҙ тупланған ҡарғаларға аҙыҡ булыр" тигән әйтем бар! (*Кирелеп ултырғыс ултыра.*) Иҫеңә төшөрәйемме?

**Һәҙиә**. Эйе, халҡымда "Алдан ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта" тигән әйтем дә бар.

**Иншар** (*һикереп тора*). Мәҡәлдәрҙе күп беләһең, "активистка". (*Арлы-бирле йөрөй.*) Йортобоҙҙо, мөлкәтебеҙҙе үҙләштерҙегеҙ... Етмәһә, бында халыҡ йыйып, кәмит күрһәтергә йыйынаһығыҙмы? Барып сыҡмаҫ... (*Ҡулына лампа ала.*) Ут төртәм, яндырам.

**Һәҙиә** (*ҡаршыһына килеп баҫа*). Аҡылығыҙға килегеҙ!

**Иншар**. Нимә, ҡарышырға йыйынаһыңмы, йәһәннәм киҫәүе?.. Әллә үҙеңде лә ошо йорт менән бергә тамуҡҡа оҙатайыммы?

**Һәҙиә** (*лампаға үрелә*). Бирегеҙ!

**Иншар** (*ситкә ала*). Тю-тю-тю, тот-торҙолар, ти. (*Рәжәп янына килеп.*) Ҡара әле, дуҫҡай, ҡаршыбыҙҙа... баласаға түгел, ә һылыу, етешкән ҡыҙ – "бешкән алма" баҫып тора... (*Һәҙиәне әйләнеп сыға.*) Әллә, мин әйтәм...

**Рәжәп** (*һағайып*). Иншар, уйындан уймаҡ сыҡмаһын.

**Иншар**. Т-с-с-с... (*Һәҙиәнең түшенә үрелә.*)

**Һәҙиә** (*артҡа сигенә*). Бер ваҡытта ла йоҡлаған йыландың ҡойроғона баҫмағыҙ! (*Иншарҙың яңағына һуғырға ынтыла.*)

**Иншар** (*ҡулынан тотоп*). Һин миңә, Шәйәхмәт бай улы Иншарға, ҡул күтәрҙеңме?!

**Ашығып Ғөбәй менән Мотиҡ инә.**

**Ғөбәй** (*бойорған тауыш менән*). Туҡтағыҙ!

**Иншар** (*Һәҙиәнең ҡулын ебәрә*). Һе...

**Мотиҡ**. Һеҙ бында нимә эшләйһегеҙ?

**Рәжәп** (*ҡыланып, Ғөбәй алдына килеп баҫа*). Күрмәйһегеҙме ни? Беҙ тамаша – “кәмит” әҙерләйбеҙ. Әле – ре...ретеп (*Гармунда уйнай.*)

**Ғөбәй** (*аңлап ала*). Ә-ә-ә, репетициямы? Бик яҡшы... (*Лампаны алып, Һәҙиәнең битен яҡтырта.*) Ҡыҙ бала, бында?..

**Барый инә.**

**Барый** (*аптырап*). Аңламайым, был ниндәй тамаша?

**Ғөбәй** (*Мотиҡҡа күрһәтеп*). Беҙ – артистар, Һамарға ҡайтып барабыҙ.

**Һәҙиә** (*ғәжәпләнеп*). Һеҙ... артистармы?

**Ғөбәй**. Эйе, ирекле девизионға йәштәрҙе йәлеп итеү маҡсатында ойошторолған агитбригада ағзалары. Мин етәксе булам.

**Барый**. Һеҙ... ике генә кешеме ни?

**Ғөбәй**. Әлегә икебеҙ генә... Бригадабыҙ күрше ауылда ҡалды.

**Мотиҡ**. Урамдан үтеп бара инек. Сәйер тауыштар ишетеп тәҙрәнән ҡараһаҡ... (*Иншарға яҡыная, тегеһе сигенә.*) Ошо егет, оялмайынса, ҡыҙ кешегә ҡул күтәрә.

**Барый** (*ҡыҙып китә*). Бүре балаһы – бүре инде, йыртҡыс! (*Иншарға киҙәнә.*) Юғал күҙ алдымдан!

**Һәҙиә**. Барый, ҡунаҡтар алдында ипле булығыҙ.

**Иншар**. Ярай, осрашырбыҙ әле. (*Рәжәпкә.*) Киттек!

**Рәжәп**. Ғәфү ит, дуҫҡай, бында күңеллерәк, мин ҡалам.

**Һәҙиә** (*шатланып ҡул сәпәкәйләй*). Дөрөҫ, Рәжәп ағай, һәйбәт әйттегеҙ!

**Иншар**. Ярай, беҙҙең урамда ла байрам булыр әле. (*Һәҙиәгә.*) Ҡабат миңә осраһаң, урап үт, йәме. (*Сығып китә.*)

**Ғөбәй** (*артынан ҡарап*). Ай-һай, усаллығы йөҙөнә сыҡҡан!

**Барый** (*Иншар киткән яҡҡа ымлап*). Элек тыныс, баҫалҡы ине ул. Байлыҡтарын тартып алғас, тилерә башланы. Әй (*ҡулын һелтәй, Ғөбәйгә*), танышайыҡ булмаһа... Мин – Барый! (*Күрешәләр*).

**Һәҙиә** (*Ғөбәйгә ҡулын биреп*). Диңгеҙбай ауыл ячейкаһы секретары Һәҙиә Ильясова булам!

**Барый**. Ҡыҙҙарҙы уҡыта, ә беҙҙе, егеттәрҙе, “театр” уйнарға өйрәтә.

**Ғөбәй**. Һәҙиә?! (*Күрешәләр.*) Мин... Минең исемем Ғөбәй, Ғөбәй Дәүләтшин! Ә был егет, Мотиҡ – беҙҙең агитбригаданың музыканты! (*Күрешәләр.*) Бына таныштыҡ та... (*Рәжәпкә.*) Йә, егет, бейеү көйө уйна әле.

**Рәжәп**. Ә ниндәй көйгә бейейһегеҙ?

**Ғөбәй**. Барыһына ла.

**Рәжәп бейеү көйө уйнай. Ғөбәй һыҙҙырып бейеп китә, Һәҙиәгә баҫа. Улар оҙаҡ ҡына парлашып бейейҙәр. Аҙаҡ Мотиҡ ҡурайҙа уйнай. Уйын, көлкө дауам итә. Ғөбәй менән Һәҙиә алға сығалар.**

**Ғөбәй**. Әлегә ауылдарҙа ҡурҡыныс, тирә-яҡ аҡ бандалар менән тулған, тегендә-бында ҡанлы эҙҙәрен ҡалдыралар. Күптән түгел Украинка ауылында 37 коммунисты атҡандар. Ә һин, ҡурҡмайынса, ауылда ҡыҙҙар уҡытып, егеттәр менән театр ойоштороп йөрөйһөң! Йөрәгең ҡуш икән!

**Һәҙиә** (*оялып*). Әй, мин ҡурҡмайым да ул... Тик бына уҡытырға белемем етмәй.

**Ғөбәй**. Үҙ ваҡытың менән Һамарға килерһең, адресымды ҡалдырырмын, Һәҙиә. Уҡырға инергә булышырмын, һылыуҡай!

**Һәҙиә**. Рәхмәт! Әйҙәгеҙ, бейейбеҙ!

**Яңынан бейей башлайҙар. Динислам инә.**

**Һәҙиә** (*ҡаршы барып*). Динислам, Әхмәҙин ҡайҙа?

**Динислам**. Һәҙиә, һин... теге...

**Һәҙиә** (*һағайып*). Ни булды?

**Динислам**. Һиңә ауылыңа ҡайтырға кәрәк, йыйын.

**Һәҙиә** (*ҡурҡып*). Нимә булды, әйт, яфалама.

**Динислам**. Атайың... вафат.
**Һәҙиә**. Нисек? Кем әйтте?
**Динислам**. Тышта ауылдашың көтә. Ат егеп, һине алырға килгән (*сыға*).
**Һәҙиә** (*һығылып төшә*). Атаҡайым, бәғерем, сиреҙ еңдеме ни?
**Рәжәп**. Һәҙиә, һинең менән барам (*сыға*).
**Ғөбәй** (*Һәҙиәне ултырғысҡа ултырта*). Түҙемле бул – яҙмыштан уҙмыш юҡ!
**Һәҙиә** (*алға сыға*). Ә мин, яҡшы белем алып, атай-әсәйемде һөйөндөрөрмөн, бәхетле итермен, тигән уй-хыялдар менән йәшәй инем. (*Өҫкә ҡарап.*) Һомай ҡошо ла күренмәй...
**Ғөбәй** (*аптырап*). Һомай ҡошо?

**Йәш Һәҙиәнең тауышы ишетелә**.

**Йәш Һәҙиә** (*инә*). Кешеләр!.. Һомай – бәхет ҡошон күрмәнегеҙме?.. (*Һәҙиәне күреп туҡтай.*)
**Һәҙиә**. Кил яныма.
**Йәш Һәҙиә** (*килеп һыйына*). Бәхет... гел ситләтеп йөрөймө?
**Һәҙиә**. Эйе (*илай*).
**Йәш Һәҙиә**. Түҙ, һығылып төшмә – "Ир-ҡыҙ" бул! (*Алға сыға.*) Ә мин Һомайҙы... барыбер табасаҡмын!..

**Ҡысҡырып сығып китә. Рәжәпте күтәреп Динислам инә.**

**Һәҙиә**. Нимә булды, Динислам?
**Динислам** (*Рәжәпте иҙәнгә һала*). Иншар бысаҡ менән... сәнсте.
**Барый**. Ҡайҙа ул ҡәбәхәт?
**Динислам**. Ҡасты, тота алманым, ҡараңғы ине...
**Һәҙиә**. Гармунда нисек матур уйнай инең! (*Рәжәптең кәүҙәһе янына теҙләнә.*) Нимәгә, кемгә кәрәк булды был... вәхшилек?

**Ут һүнә. Шул замандағы йыр яңғырай. Яңынан ут ҡабынғанда Ғөбәй менән Һәҙиә өҫтәл артында яҙышып ултыралар. Гөлгәүһәр сәй әҙерләй.**
**Гөлгәүһәр**. Кейәү, ҡыҙым, сәйҙе өсөнсө ҡабат ҡайнаттым.
**Һәҙиә** (*күңеле күтәренке*). Рәхмәт, әсәкәйем! Бөгөн илһамым бар, яҙыуҙан туҡтап булмай.
**Гөлгәүһәр** (*ҡолаҡтарына күрһәтеп*). Барыбер ишетмәйем, ҡыҙым.
**Һәҙиә**. Их, ишетмәйһең шул. (*Барып Гөлгәүһәрҙе ҡосаҡлай.*) Ярай әле, ул заһәр, ҡурҡыныс тиф сиренән иҫән-һау ҡотолдоң (*Ғөбәй янына килә*). Ҡара әле, Ғөбәй... Бына әле трактористар, эшселәр хаҡында әҫәр яҙҙым. Тағы пландарым бар – үҙебеҙҙең Һамар башҡорттары хаҡында уйланам, йоҡлай алмайым. Эшләргә лә, уҡырға ла кәрәк, ә ваҡыт етмәй. Әле лә, бәхетемә (*Гөлгәүһәрҙе яңынан барып ҡосаҡлай*), әсәйем үҙебеҙ менән йәшәй. Юғиһә (*бармаҡтарын бөгөп бара*) кер йыуырға, өй йыйыштырырға, ашарға бешерергә, яҙырға, Булат улымды ҡарарға нисек өлгөрөр инем?
**Гөлгәүһәр** (*ҡолаҡтарына күрһәтеп*). Ишетмәйем, тағы шул яҙыу-һыҙыу хаҡында бәхәсләшәһегеҙме?
**Һәҙиә** (*башын һелкеп*). Эйе!... (*Ҡул хәрәкәттәре менән һөйләргә тырыша.*) Эй, әсәкәйем-бәғеркәйем... Сәләмәтлегем ҡаҡшамаһа, Мәскәүгә барып Литературный институтҡа уҡырға инер инем. Сөнки, бына мин тырышам, яҙам, ләкин күп нәмәләрҙе белеп еткермәйем. Камил, теүәл белемем булһа, әҫәрҙәрем өҫтөндә лә эшләүе еңел булыр ине.
**Гөлгәүһәр** (*йылмайып ҡул һелтәй*). Үҙегеҙ генә ултырығыҙ, мин күршеләргә инеп хәлдәрен беләйем әле. (*Сыға.*)
**Һәҙиә** (*әсәһен оҙатҡас*). Ғөбәй, әсәйҙе яңыса яҙырға, уҡырға өйрәтеп булыр микән?
**Ғөбәй**. Булыр-булыр, бергә өйрәтербеҙ... Ҡайҙа әле, нимә яҙҙың? (*Уҡый.*)

*Эй Салауат, дуҫың Пугач менән*
*Күрһәгеҙ ине, хәҙер беҙ нисек*
*Россияның бөтөн милләттәре*
*Туған булдыҡ,*
*уны*
*бөйөк*
*ил итеп!..*

Йә, танауыңды төшөрмә, Һәҙиә, – быныһы ярай. (*Ҡағыҙҙарын ҡарай.*) Ниңә өндәшмәйһең?

**Һәҙиә**. Кеше һүҙенән ялҡтым, Ғөбәй. Имеш, теге-был әҫәрҙе Һәҙиә түгел, ә ире яҙған... (*Ауыр һулап.*) Ғөбәй, үҙең күрҙең дәһә – "Айбикә"не төн йоҡоларымды ҡалдырып яҙҙым бит!

**Ғөбәй** (*яҡыныраҡ килеп ултыра, йыуата*). Дошмандар һүҙенә ҡолаҡ һалма, Һәҙиә, бирешмә, үҫ итеп яҙ – һинең үҙ стилең, үҙ телең бар. (*Өҫтәлдән китап ала.*) Тыңла әле, Фирҙәүсиҙең "Шаһнамә"һенән "Сиявуш" бүлеге. (*Уҡый.*)

*...Йәшәү көсө – ҡаны тамған урында*
*Шытып сыҡты ҡыҙыл сәскә болонда.*

*Ул "Сиявуш ҡаны" тигән гөлсәскә,*
*Шунан мәңге юл буйында үҫәсәк.*

*Арыҫландай был батыр шулай ауҙы.*
*Кинәт шунда ҡара дауыл ҡуҙғалды,*

*Ҡараңғылыҡ баҫты ҡояшты, күкте.*
*Ҡурҡышҡан халыҡ Горуйҙы һүкте.*

*Тик ни сара? Мәңге йоҡола батыр,*
*Ул йоҡонан кем һуң уянып ҡайтыр?!*

*Үтер йылдар, күп быуаттар,*
*замандар,*
*Әммә быны уята алмаҫ улар.*

*Бына шулай уның ғүмере киҫелде,*
*Ҡалды ерҙә дастаны, исеме...*

Бына Фирҙәүси нисек яҙған!

**Һәҙиә** (*ҡабатлай*).

*Бына шулай уның ғүмере киҫелде,*
*Ҡалды ерҙә дастаны, исеме...*

(*Ауыр һулап.*) Көндән-көн сәләмәтлегем ҡаҡшай, ә яҙаһы әйберҙәрем...

**Ғөбәй** (*һүҙҙе икенсегә бороп*). Һәҙиә, һин... теге... (*Ян-яҡҡа ҡарай ҙа бышылдап ҡына.*) Юғарынан ҡот осҡос хәбәрҙәр килә. Мәскәүҙә партия, ил етәкселәрен ҡулға алғандар. Шауҡымы оҙаҡламаҫ, бында ла килеп етәсәк. Хәлдәр яҡшы түгел.

**Һәҙиә**. Һыу болғана башланымы?

**Ғөбәй**. Ярай, был әлегә имеш-мимеш хәбәрҙәр генә! (*Һүҙҙе икенсегә бороп.*) Ә беҙгә яҙырға кәрәк. Алма беш, ауыҙыма төш тип ятмайыҡ... Әйҙә, тәмле итеп сәй яһа булмаһа.

**Һәҙиә** (*Ғөбәйгә һыйына*). Әлдә һин бар, Ғөбәйкәйем! (*Күкрәген тотоп.*) Сир үҙен һиҙҙерә... (*Сер сискәндәй.*) Ғөбәй, минең иҫ киткес, ҙ-у-у-у-р маҡсатым бар.

**Ғөбәй**. Тыңлайым, ниндәй маҡсат ул?

**Һәҙиә** (*тороп китә*). Максим Горький кеүек ҙур, мәғәнәле әҫәр яҙыу!.. Р-о-м-а-н!

**Ғөбәй**. Р-о-м-а-н! (*Баҫа.*) Ә ниңә?.. Мин "Коммуна"ны тамамлармын, ә һин романыңды яҙырһың!

**Шомло көй яңғырай. Хәрби, үҙенең эйәрсәндәре – Битараф һәм Раһипты эйәртеп, ҡалҡыулыҡҡа сығып баҫа. Хәрби башына фуражка, өҫтөнә хәрби кейем кейгән. Раһип күн курткала, Битараф аңлайышһыҙ яугир кейемендә. Һәҙиә менән Ғөбәй уларҙы күрмәй.**

**Һәҙиә** (*Ғөбәйгә һыйынып*). Рәхмәт, Ғөбәй!.. Әллә, үҙем дә һиҙмәйсә, Һомай ҡошон күрҙемме икән?... Улыбыҙ Булат – үҙе бәхет ҡошо бит!

**Ғөбәй**. Ысынлап та, һуңғы ваҡытта ҡанатлы ҡошҡа әйләндең, Һәҙиәм!

**Һәҙиә** (*йылмайып*). Мин әллә ысынлап та ҡанатлы ҡошмо?.. (*Баҫа, ҡулдарын ҡанаттар кеүек елпей.*) Мин – Һомай, бейеккә-бейеккә, болоттарға, Ҡояшҡа осам!..

**Ғөбәй менән Һәҙиә өҫтәл артына ултырып, һөйләшә-көлөшә сәй эсәләр. Тик уларҙың тауышы ишетелмәй.**

**Хәрби**. Күрәһегеҙме, ниндәй һоҡланғыс, күркәм ғаилә!.. Беҙ төҙөгән йәмғиәттә барыһы ла бәхетле!

**Раһип**. Һеҙҙең аҡыллы етәкселек

һөҙөмтәһендә иҫ киткес еңеүҙәргә ирештек, Хужам!

**Хәрби** (*ҡәнәғәт йылмайып*). Шулаймы? (*Ҡапыл үҙгәреп.*) Дөрөҫ, беҙ хакимлыҡты ҡулға алып, ил менән етәкселек итәбеҙ (*тамаҡ ҡырып*), етәкселек итәм!.. (*Ҡыҙып-ҡыҙып һөйләй.*) Миллионлаған халыҡ өҫтөнән идара, хакимлыҡ итеү, уларҙың рухын һындырып, ихтыярыма буйһондороу (*ҡәнәғәт йылмайып*) – бала саҡ хыялым ине. Бөтмәҫ ләззәт кисерәм, аңлайһыңмы, ләззәт, л-ә-з-з-ә-т!

**Раһип** (*мәкерле, аҫтыртын*). Эйе, эйе, аңлайым, был хистәр миңә лә таныш, Хужам!.. Ҡасандыр һине йәберләгән кешеләрҙең түбәнһенеп баш эйеүе – ысынлап та, иҫ киткес рәхәтлек тойғоһо уята!

**Шул замандағы марш яңғырай. Артта Хәрбиҙең портреты төшкән ҙур полотно күтәрелә.**

**Хәрби кеше.** Гениально! (*Ҡәнәғәт йылмайып.*) Мин һәм халыҡ! Халыҡ һәм мин – бөйөк хаким!.. (*Етдиләнә.*) Мин теләгемә ирештем, мин еңдем... Халыҡ хәҙер минһеҙ – хакимһыҙ йәшәй алмай! (*Раһипҡа.*) Күтәр әләмде, беҙ еңдек!

**Раһип**. Эйе, тик... (*Юрый туҡтап ҡала.*)

**Хәрби**. Әйтеп бөтөр!

**Раһип**. Тик, Хужам, һуңғы ваҡытта халыҡ араһында бихисап зыялылар, шәхестәр, хатта "батырҙар" барлыҡҡа килде! Улар халыҡты беҙгә, йәғни... һеҙгә ҡаршы ҡотортоп, хакимлыҡты үҙ ҡулдарына алырға уйлайҙар икән, тигән... имеш-мимеш һүҙҙәр, ғибрәт йөрөй.

**Хәрби** (*ҡото осоп*). Нисек?.. Кемдәр улар?

**Раһип** (*ялт иттереп кеҫәһенән яҙыу сығара*). Бына уларҙың исемлеге.

**Хәрби** (*ентекләп ҡарай*). Ышанмайым, ышана алмайым! (*Арлы-бирле йөрөй*). Беҙ... ҡайһы берҙәре менән ҡулға-ҡул тотошоп батшаны еңдек, беҙ... төҙөнөк...

**Раһип**. Һәр яугир... генерал булырға хыяллана, Хужам!

**Хәрби**. Шикләнә, һиҙенә инем!.. (*Арлы-бирле йөрөй.*) Ғәрлек!.. Яуыздар, ике йөҙлөләр, енәйәтселәр!.. Туҡта!.. (*Ныҡлы ҡарарға килеп.*) Башҡаларына үрнәк булыр! Мин уларҙы... (*исемлеккә ҡарап*) дошмандарым, дөрөҫөрәге... "халыҡ дошманы" тип иғлан итәм! (*Ҡултамғаһын ҡуйып, Иншарға бирә.*) Ғәйептәрен, мәкерҙәрен халыҡ алдында фашлағыҙ, ҡаты хөкөмгә дусар итегеҙ!

**Раһип** (*еңел һулап, ситкә*). Мин был мәлде... айҙар, йылдар буйы тилмереп көттөм!

**Хәрби**. Миңә ҡаршы ҡоторталармы? (*Зәһәрләнеп.*) Атырға, ҡырырға кәрәк дошмандарҙы – үлеләр проблема тыуҙырмай! (*Портреты янына барып баҫа.*)

**Битараф** (*ситкә*). Көс кемдә – шул дөрөҫ! (*Раһипҡа.*) Төрмәләребеҙҙә урын етерме һуң?

**Раһип**. Етмәһә, винтовкаң бар – дарынды ҡоро тот!.. (*Алға сыға, йүләр кеше кеүек ярһып.*) Боғаҙҙарын сәйнәп өҙәсәкмен... Йөрәгем тулы нәфрәт, үс, мәкер! Мин уларҙы... (*Үҙен саҡ-саҡ ҡулға ала.*) Ҡыҙыл көс – ҡан төҫө, үскә – үс, үлемгә – үлем! (*Әләмде баш өҫтөнә күтәрә.*) Ур-р-р-ра, башланыҡ!

**Битараф** (*ситкә*). Ысынлап "ура", "ҡыра" башлаясаҡ бит... был бәдбәхет!

**Хәрби**. Ошо минуттан... (*әләмгә күрһәтергә уйлай ҙа, бармағы менән портретҡа төртөп*) бар халыҡ миңә, тик миңә генә буйһонорға һәм табынырға тейеш!.. (*Ҡулын сикәһенә ҡуйып, үрә ҡата.*) Халыҡ һәм мин – бөйөк хаким!!!

**Битараф**. Ә теге ҡошто, әкиәт-легендаларҙы...

**Хәрби** (*былдереп*). Улары ваҡ-төйәк, аҙаҡтан! Башта дошмандарҙан арынырға кәрәк! (*Ғөбәй менән Һәҙиәгә күрһәтеп.*) Исемдәрен һорағыҙ әле, кемдәр икән был... бәхетле парҙар?

**Раһип** (*яндарына барып*). Эй, һеҙ кемдәр?

**Ғөбәй** (*баҫа*). Мин – Ғөбәй Дәүләтшин! Был тормош иптәшем – Һәҙиә! Ә һеҙ кем булаһығыҙ?

**Рәһип** (*тамаҡ ҡырып*). Мине танымаған, белмәгән кеше лә бар икән?

**Һәҙиә** (*баҫа*). Һеҙ... (*яҡыныраҡ килеп.*) Тәүбә, Иншар?

**Ғөбәй**. Иншар? Рәжәптең ҡаны һинең...

**Рәһип** (*зәһәрләнеп*). Мин Иншар түгел, ә Рәһип!

**Һәҙиә** (*асыулы*). Иншар-Рәһип!.. Ә мине танымйһығыҙмы?

**Рәһип** (*шаҡ ҡатып*). Ғәжәп?! Теге саҡта Диңгеҙбайҙа һине эҙләп ауылдың аҫтын өҫкә килтерҙек, нисек ҡасып ҡотолдоң, ә?

**Һәҙиә**. Ҡасманым, ышаныслы кешеләрҙең... ҡар баҙында һеҙҙең – аҡ бандиттарҙың китеүҙәрен көтөп яттым.

**Йәш Һәҙиәнең тауышы. Ул сәхнә аша йүгереп үтә.**

**Йәш Һәҙиә**. Әй-һәй-һәй, ишетәһегеҙме? Мин Һомай – бәхет ҡошон эҙләйем... Ҡайҙа ул?.. (*Сығa.*)

**Хәрби**. Әй, иҫемә төштө... (*ҡысҡырып көлә.*) Был сәйер ҡыҙыҡай ниндәйҙер ҡошто күрергә һәм... бер үк ваҡытта "ир" ҙә, "ҡыҙ" ҙа булырға хыяллана ине.

**Рәһип**. Эйе, эйе, Хужам, хәтерегеҙ яҡшы икән! (*Һәҙиә янына барып.*) Ауыҙыңды үлсәп ас, телеңде тый һәм иҫеңдә ҡалдыр: мин – Рәһип! (*Ыҫылдап.*) Миллиондарҙың, шул иҫәптән һеҙҙең, яҙмыш... минең ҡулда!

**Ғөбәй**. Ғазраил булдығыҙмы әллә, Иншар-Рәһип?

**Рәһип** (*Ғөбәйҙе әйләнеп сыға*). Иҫеңдә ҡалдыр, мейеңә һеңдер: мине танымаған, танып белгән... үсле кешеләрем өсөн насар, ҡот осҡос ваҡыт килде. Һеҙ икегеҙ ҙә... (*ҡағыҙ сығарып ҡарай*) исемлеккә ингәнһегеҙ. Һеҙҙе тиҙ арала... (*мылтыҡтан атҡандай*) пух, пух итергә кәрәк! Тик әлегә барығыҙ, ҡамасауламағыҙ, мөһимерәк эштәрем баштан ашҡан...

**Ғөбәй менән Һәҙиә аптырап берберенә ҡарайҙар ҙа өҫтәл артына ултырып яҙа башлайҙар.**

**Битараф** (*Рәһип янына килеп*). Һәҙиәне күргән һайын Һомай ҡош иҫкә төшә... Бармы һуң ул?

**Хәрби** (*етдиләнеп*). Бар ул! Һомай – быуаттар буйы халыҡтың рухын азатлыҡҡа өндәүсе өмөт-хыял ҡошо, белгегеҙ килһә! Ә был – миңә ҡаршы ҡотортоу тигән һүҙ! Кеше бер ваҡытта ла азат була алмай! (*Мәкерле йылмайып.*) Сикһеҙ көс-ҡеүәтем, дәрәжәм менән... ул ҡошто халыҡтың аңынан бәреп сығарыу ауыр булмаҫ, тип уйлайым!

**Рәһип** (*низер уйлап*). Берәмләп сығарырбыҙ, әмер генә бирегеҙ! Бер кеше – бер ҡош, мең кеше – мең ҡош, миллион кеше – миллион ҡош!.. Ҡорбандарҙың иге-сиге булмаҫ!

**Хәрби**. Ҡыҙыҡ, миллион кеше – миллион ҡош!.. Афарин, Рәһип!

**Хәрби сығып китә. Битараф уға эйәрә.**

**Рәһип** (*Ғөбәй менән Һәҙиәгә*). Эй, бында килегеҙ!

**Ғөбәй**. Һеҙ емереүселәр! Һеҙ...

**Рәһип** (*бүлдереп*). Көндәрең һанаулы һинең... (*Револьверын алып Ғөбәйгә төҙәй.*) Пух, пух, пух!

**Ғөбәй**. Китегеҙ , яҡын килмәгеҙ.

**Рәһип**. Мин бер йәбешһәм, һөлөк кеүек йәбешәм. (*Һәҙиәне әйләнеп сыға.*) Ә һин, "Ир-ҡыҙ", әрнеп ғазапланырға, үкһеп-үкһеп иларға әҙерлән.

**Һәҙиә**. Ҡурҡытмағыҙ!

**Рәһип** (*револьверын һелтәп*). Иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ: ҡорал кемдеке – заман шуныҡы! (*Һәҙиәгә текәлеп.*) "Активистка", "кеше талаусы!" (*Зәһәрләнеп.*) Һиңә булған үсем бигерәк яман! Ҡатын-ҡыҙ булмаһаң, күптән...

**Шомло көй яңғырай. Хәрби менән Битараф үтеп китә. Рәһип, револьверын кобураһына һала-һала, уларға эйәрә.**

**Һәҙиә** (*арттарынан ҡарап*). Бала сағымда күргән кешеләр! Тик һаман да аңлай алмайым: төш булдымы ул, әллә өнмө?..

**Мотиҡ инә.**

**Мотиҡ** (*бармағын ирендәренә ҡуйып*). Тс-с-с... (*Ҡул биреп күрешәләр.*) Аллаға шөкөр, иҫән-һау икәнһегеҙ! Төндә... Барый менән Динисламды ҡулға алғандар.

**Ғөбәй**. Ни өсөн?

**Мотиҡ**. Их, белһәм икән...

**Ғөбәй**. Ҡайҙа, таныш түрәләргә шылтыратайым.

**Мотиҡ** (*бүлдереп*). Юҡ, юҡ – файҙаһы булмаясаҡ. Үҙегеҙҙе, берүк үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ... Ә мин хушлашырға индем. Дуҫтарымды ҡулға алғас, мине лә оҙаҡ иректә ҡалдырмаҫтар. (*Һаубуллашып сығып китә.*)

**Һәҙиә** (*артынан бара*). Мотиҡ, хуш, үҙеңде һаҡла!.. (*Ярты юлда туҡтап ҡала.*) Былар барыһы ла... Иншар-Рәһиптың эше.

**Ғөбәй** (*арлы-бирле йөрөй*). Нимә булды был? Башта батшанан, хәҙер быларҙан ҡурҡып йәшәргәме?

**Һәҙиә**. Тыныслан, Ғөбәй, был хаҡта һөйләшмәйек! Туҡта, улыма дарыу эсерергә ваҡыт еткән дәһә... (*Ашығып сығып китә.*)

**Булатты күтәреп Һәҙиә инә.**

**Һәҙиә**. Ғөбәй, ҡайҙа, дарыуын алып кил әле...

**Ниҙер һиҙенеп, баланы һикегә һала, төргәкте аса, нишләргә белмәй әсенеп ҡысҡыра.**

**Һәҙиә**. Булат, Булаткайым!.. (*Һығылып төшә.*) Ғөбәй, улыбыҙ Булат киткән... мәңгелеккә киткән.

**Ғөбәй** (*ашығып Һәҙиә янына килә*). Н-н-н-ни һөйләйһең, Һәҙиә? (*Төргәкте аса, баланы ҡарай ҙа Һәҙиәне ҡулбаштарынан тотоп баҫтыра, ҡосаҡлай.*) Ныҡ булайыҡ – беҙ күрәһене башҡалар күрмәҫ.

**Ҡаты итеп ишек дөбөрҙәтәләр. Һәҙиә балаһын төрөп, күкрәгенә ҡыҫа. Рәһип менән Битараф инә.**

**Рәһип** (*револьверын болғап*). Нимә, кикрегегеҙ шиңдеме?.. (*Ғөбәй янына килеп.*) Һин ниңә, ҡыҙыл ситектәр кейеп, teләһә ҡайҙа "Ғәлиәбаныу" көйөнә бейеп йөрөйһөң?

**Ғөбәй**. Ә ниңә, ярамаймы ни?

**Рәһип**. Һиңә, йөмһүриәттең наркомпрос рәйесенә, улай килешмәй (*Ғөбәйҙе урап сыға*). Әйттем дә баһа, киҫәттем! (*Битарафҡа.*) Ҡулға ал!

**Битараф** (*винтовкаһын алып*). Ҡулдарыңды күтәр!

**Һәҙиә**. Зинһар, туҡтатығыҙ был кәмитте! Беҙҙә ҙур ҡайғы – улыбыҙ Булат вафат... Уны ерләргә ирек бирегеҙ.

**Рәһип**. Был – "кәмит" түгел, ә мин вәғәҙә иткән трагедия. Илдә минут һайын кемдер үлә – арабыҙҙа дошмандар, халыҡ дошмандары күп.

**Һәҙиә** (*Рәһипҡа табан бара, тегеһе сигенә*). Үҙең дә инә һөтө эсеп үҫкәнһеңдер бит?.. Ҡайҙан сыға был тиклем яуызлыҡ, битарафлыҡ, бәғерһеҙлек, ә?

**Битараф**. Миңә барыбер...

**Рәһип** (*Һәҙиәгә бармаҡ менән янап*). Һин, теге... (*Һүҙ тапмағас, Ғөбәйгә екерә.*) Йыйын, тиҙәр!

**Һәҙиә**. Ни өсөн Ғөбәйгә бәйләнәһегеҙ?

**Рәһип**. Тормош-көнкүрештәге "боҙоҡлоҡтары" өсөн! Доноста шулай яҙылған. (*Битарафҡа.*) Алып кит.

**Битараф**. Атла, тиҙәр һиңә, дошман, халыҡ дошманы! (*Төрткөләй, этә.*)

**Ғөбәй**. Хәҙер урап ҡайтам, көт, Һәҙиәм!

**Рәһип** (*эскерле йылмайып*). Ҡайтам, көт, тиһеңме? (*Зәһәрләнеп.*) Киткәндәр... мәңгелеккә китә! (*Битарафҡа.*) Алып кит, күҙемә күренмәһен. (*Ғөбәйгә нәфрәтләнеп ҡарай.*) Наркомпрос рәйесе, имеш!

**Ғөбәй** (*Рәһипҡа*). Яуыз, йәлләд!

**Рәһип**. Эйе, мин йәлләд – палач!

**Ғөбәй**. Иртәме-һуңмы барыбер дөрөҫлөк еңәсәк, тфү!.. (*Рәһип яғына төкөрөп сығып китә.*)

**Һәҙиә балаһын күтәреп унын артынан эйәрә. Рәһип ҡаршы төшә.**

**Һәҙиә**. Ебәрегеҙ, мин дә Ғөбәй менән китәм!

**Рәһип**. Башта... балаңды ерлә! (*Ғөбәйҙең артынан ҡысҡыра.*) Дөрөҫ, мин йәлләд – палач! Төндә камерала, допрос ваҡытында, иҫбатлармын.

**Һәҙиә** (*һығылып төшә*). Ни өсөн, ни өсөн? Унын бит ғәйебе юҡ!

**Рәһип**. Ғәйепһеҙ кеше булмай! (*Һәҙиәне әйләнеп йөрөй.*) Һылыу ҡатын булып етештең... Теләһәң, ханбикәнән дә яҡшыраҡ йәшәр инең.

**Һәҙиә**. Күпме ҡәбәхәтлек эшләнең, нисек телең әйләнә?

**Рәһип**. Кем кемгә... (*уҫалланып*) ҡәбәхәтлек эшләгәндер бит? Кемдәр йорттобоҙҙо, мөлкәтебеҙҙе тартып алды? Кемдәр атай-әсәйемде ваҡытынан алда ҡәбергә тыҡты? Кемдәр, ғәйебен дә иҫбатлап тормайынса, ағайымды атты?.. (*Күкрәгенә һуғып.*) Онотолмай, онота алмайым, төштәремдә күрәм, һаташам, янам... Атайымдың төндәр буйы ыңғырашып илағаны, ағайымды атҡан мылтыҡ тауыштары әле булһа ҡолағымда яңғырай. (*Ҡоророп сығып китә.*)

**Һәҙиә** (*балаһын күкрәгенә ҡыҫа*). Балам, берҙән-берем, йән киҫәгем, япа-яңғыҙ тороп ҡалдым бит! Ярай әле, әсәйем бар, юғиһә... (*Арлы-бирле йөрөй.*) Әллә үҙем дә... артыҡ үҙ һүҙле, тәкәббер булдыммы? Халҡымда бит “Ауыҙы йомшаҡ ҡолон биш бейәне имә” тигән әйтем бар?! Юҡ, юҡ, былай ҙа башыма һыймай – нисек, ни өсөн (*Рәһип киткән яҡҡа ҡарап*) был йәлләд, палач менән һөйләшәм әле?.. (*Һулҡылдап илай.*) Хоҙайҡайым, ни өсөн? Сабыйҙар бит гонаһһыҙ була!.. (*Ғөбәй киткән яҡҡа ҡарап.*) Ғөбәй, Ғөбәйкәйем, һинһеҙ нишләрмен, нисек йәшәрмен? Ярһыған күңелемә ҡайҙан тыныслыҡ табайым һуң?.. (*Ҡалҡыулыҡҡа менеп һауаға ҡарай.*) Һомай – бәхет ҡошом, ҡайҙа һин?.. Булһаң, күрен, ауыр миңә, ауыр...

**Йәш Һәҙиә** (*сыға, йыуата*). Бар ул, бар!

**Һәҙиә**. Ышанмайым, ышанмайым – тамам өмөтөм өҙөлдө.

**Йәш Һәҙиә** (*алға сыға*). Өмөт өҙөлһә лә,.. маҡсатыбыҙ бар! Батыр ҡыҙ – “Ир-ҡыҙ” булырға әсәйемә һүҙ бирҙең!

**Һәҙиә** (*ҡапыл*). Эйе, эйе!.. Ә ниңә, бәхетһеҙ булһаң да... (*Рәһип киткән яҡҡа ҡарап*) был бәдбәхеттәргә үс итеп “Ир-ҡыҙ”, ил ҡыҙы булмаҫҡа!

**Йәш Һәҙиә**. Дөрөҫ уйлайһың!.. (*Артҡа сигенеп сығып китә.*)

**Һәҙиә**. Мин әлегә ирекле, ирекле ҡош...

**Шомло көй яңғырай. Һәҙиә балаһын ҡосаҡлап уң яҡҡа ташлана. Унын алдына сәнскеле тимерсыбыҡтан эшләнгән кәртә ҡуялар. Һулға, артҡа йүгерә. Тик ҡайҙа ғына бармаһын, ҡаршыһына кәртәләр сыға. Ул ситлек эсендә ҡала. Хәле бөтөп, һығылып төшә. Тынлыҡ. Арттан атыу тауыштары ишетелә.**

– Дауыт Юлтый?
– Мин! (*Атыу тауышы.*)

– Төхвәт Йәнәби?
– Мин! (*Атыу тауышы.*)

– Афзал Таһиров?
– Мин! (*Атыу тауышы.*)

– Булат Ишемғолов?
– Мин! (*Атыу тауышы.*)

– Бәшәр Хәсән?
– Мин! (*Атыу тауышы.*)

**Шомло көй яңғырай. Һәҙиә баҫа. Ҡалҡыулыҡҡа Хәрби, Рәһип һәм Битараф сығып баҫа.**

**Рәһип** (*Һәҙиә янына килеп*). Миңә рәнйейһеңме?.. (*Кинәт үҙгәреп.*) Әллә ғазапланып илайһыңмы?

**Һәҙиә**. Юҡ, иламайым!.. (*Үҙен тәртипкә килтерә.*) Күрмәйһеңме ни, ике аяғымда ла ныҡлы баҫып торам.

**Рәһип**. Шулай тиһеңме?.. (*Һәҙиәне әйләнеп сыға.*) Һаман да һылыуһың, һаман да...

**Һәҙиә** (*бүлдереп*). Ҡара йөҙ: йәнемде алһаң да, тәнемде ала алмаҫһың!

**Рәһип** (*ҡапыл зәһәрләнеп*). Ҡарышма, зинһар, ҡарышма! (*Һәҙиәне әйләнеп йөрөй.*) Һин ҡарышҡан һайын йөрәгемдә яңынан-яңы аңлайышһыҙ тойғолар уяна, йәнем ҡотора! Ҡабат ҡарышаһы булма!.. (*Хәйләкәр йылмайып.*) Бәлки, әсәйең Гөлгәүһәрҙе ҡулға алырға кәрәктер?

**Һәҙиә**. Зинһар, әсәйемә теймәгеҙ?!

**Рәһип**. Эй, онотҡанмын – ул һаңғырау бит әле! (*Тантаналы итеп.*) Нимә, бөгөлдөң, һығылдыңмы инде, "һандуғас"?

**Һәҙиә**. Әсәйем өсөн башымды эйәм... Үҙем өсөн – юҡ!

**Рәһип** (*тештәрен ҡыҫып*). Нимә, Рәһип хәтле Рәһип бер меҫкен, бисара ҡатындың рухын һындыра алмаҫ тиһеңме?

**Һәҙиә**. "Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ" тигән халҡым! (*Йылмайып.*) Тик ни ғәжәп: һинән тамсы ла ҡурҡмайым! (*Еңелсә генә йүткереп ала.*)

**Рәһип** (*төкрөктәрен сәсеп*). Их, ошо ҡорт саҡҡан телеңде... Үкенерһең, ярһып-ярһып иларһың әле!

**Һәҙиә**. Илаһам да... күрһәтмәй илармын!

**Рәһип, ни әйтергә белмәйенсә, ашығып ҡалҡыулыҡҡа менә. Хәрбиҙең ҡолағына ниҙер бышылдай, теге һе ымлап ризалыҡ бирә. Битараф винтовкаһын тотоп сығып китә. Шомло көй яңғырай.**

– Ғөбәй Дәүләтшин?

– Мин! (*Атыу тауышы.*)

**Һәҙиә** (*әсенеп*). Ю-ю-ю-ҡ! (*Хәрбигә.*) Ни өсөн?.. Ошо берҙән-бер һорауыма, зинһар, яуап бирегеҙ? Ни өсөн?.. Ҡайҙа дөрөҫлөк, ҡайҙа ғәҙеллек?..

**Хәрби кеше өндәшмәй сығып китә. Рәһип уға эйәрә.**

(*Алғы планға сығып, ҡараштарын йыраҡҡа төбәй*). Иле, халҡы өсөн йәнен ҡыҙғанмаған Ғөбәй халыҡ дошманы булғас, мин кем булам һуң? Аңламайым, аңлай алмайым... (*Төргәген күкрәгенә ҡыҫып, ҡарашын йыраҡҡа төбәп ҡатып ҡала.*)

**Шомло көй яңғырай. Тауыштар ҡабатлана.**

– Ғабдулла Амантай!

– Мин... (*Атыу тауышы.*) Мин... Мин... Мин... (*Тауыштар йырағая бара.*) Мин... Мин... Мин...

**Ут һүнә.**

## Икенсе бүлек

**Ҡараңғыла һаман да "Мин, мин..." тигән кеше һәм мылтыҡ атҡан тауыштар яңғырай. Ут Һәҙиәне яҡтырта. Ул һаман да ҡараштарын йыраҡҡа төбәп баҫып тора.**

**Һәҙиә** (*етди*). Арҙаҡлы улдарыбыҙ, данлы шәхестәребеҙ харап булып бөтә лә баһа?! (*Портрет янына барып.*) Халҡымдан маңҡорт яһап, милләтте юҡҡа сығарырға тырышаһығыҙмы?.. Юҡ, бында әле беҙ бар, беҙ әле?.. Их!.. (*Һығылып төшә.*) Был ҡара, дәһшәтле ташҡынға берәм-берәм ҡаршы тороу мөмкин түгел шул!.. (*Өҫкә ҡарап.*) Ҡайҙа һин, Һомай ҡошом, алып кит үҙең менән, алып кит! Мин риза, мин... (*Ҡуйынынан ҡаурый ала, баҫа.*) Юҡ, юҡ, китә алмайым, Һомайҡайым, ғәфү ит. Ғәзиз әсәйемде, яфаға дусар булған иптәштәремде, дуҫтарымды быңдай осорҙа... ташлай алмайым! Көрәшергә кәрәк, көрәшергә!.. (*Ҡағыҙҙарын барлай, уҡый.*)

*Күпме генә болот ҡабармаһын,*
*Ниндәй ел-дауылдар ҡупмаһын,*
*Ҡояш ҡалҡмай ҡалмай көн һайын,*
*Тик һынмаһын бәхет тотҡаһы...*

(*Дәртләнеп.*) Дөрөҫ, дөрөҫ!.. Ел-дауылдар, ғәрәсәт күпме генә ҡотормаһын, барыбер аҙаҡтан ҡояш сыға, ҡ-о-я-ш!.. Романымды нисек тә яҙып бөтөрөргә кәрәк! Яҙырға, яҙырға, яҙырға...

**Шомло көй яңғырай. Ҡалҡыулыҡта Раһип менән Битараф пәйҙә була. Һәҙиә, ҡағыҙҙарын төйөнсөккә төрөп, бала кеүек итеп күкрәгенә ҡыҫа.**

**Һәҙиә** (*үҙенә*). Ныҡ бул, Һәҙиә, бирешмә!

**Раһип** (*ҡәнәғәт йылмайып Һәҙиә янына килә*). Йыйын, "ҡошсоҡ", һиңә лә сират етте.

**Һәҙиә** (*иҫе китмәгәндәй*). Мин әҙер, киттек.

**Раһип** (*аптырап*). Нисек әҙер?.. Ҡурҡмайһыңмы?

**Һәҙиә**. Һинән түгел, үлемдең үҙенән дә ҡурҡмайым.

**Раһип**. Үлемдән ҡурҡмайһыңмы?.. (*Ҡотороп арлы-бирле йөрөй.)* Һин әле... үлемдән ҡурҡмайһыңмы?.. (*Ниҙер уйлап.*) Биғәйбә, мин һиңә... ғүмер бүләк итәм! Үҙ күҙҙәрең менән күрерһең, ышанырһың: ерҙә изгелек менән яуызлыҡ, дөрөҫлөк менән ялған, мәкер һәм мөхәббәт гел йәнәшә йөрөй!

**Һәҙиә**. Беләм, был яңылыҡ түгел.

**Раһип** (*төйөнсөккә күрһәтеп*). Бынынһы... нимә?

**Һәҙиә** (*күкрәгенә ҡыҫа*). Бынынһы... – тыуасаҡ балам! Бөтөн шатлығым, өмөтөм ошо... төйөнсөктә!

**Раһип** (*шикләнеп*). Балаң... үлде бит.

**Һәҙиә**. Был төйөнсөктә... тыуасаҡ романым!

**Раһип**. Роман?.. (*Ҡурҡып.*) Һин... һин роман яҙҙыңмы?.. (*Төйөнсөктө алырға ынтыла, Һәҙиә бирмәй.*) Роман хаҡында онот – тарихты хәҙер беҙ яҙабыҙ! Ә төйөнсөгөңдө... (*Тартып ала ла атып бәрә.*) Я-ҙ-ы-у-с-ы, имеш?! (*Битарафҡа.*) Бар, тышта көт!

**Битараф**. Миңә барыбер... (*Сыға.*)

**Раһип** (*яйлап ҡына*). Дөрөҫөн әйтәм, ҡатын-ҡыҙ булараҡ һин миңә оҡшайһың, ә я-ҙ-ы-у-с-ы булараҡ... һин сүп! Сөнки (*портретҡа ымлап*) беҙҙең бөйөк яҙыусыбыҙ, шәхесебеҙ, юлбашсыбыҙ берәү генә!

**Һәҙиә**. Шәхестәре булмаған халыҡтың киләсәге юҡ – шуға тырышаһығыҙмы?

**Раһип**. Борон заманда кемдер: "Беҙ башта "бөйөктәр"ҙе тар-мар итәбеҙ, аҙаҡтан данлайбыҙ!" – тигән. Ниндәй фәһемле һүҙҙәр!

**Һәҙиә**. Ахмаҡлыҡ! (*Йүткерә.*)

**Раһип** (*ҡото осоп ситкә тайпыла*). Әһә, юрый ҡыланаһыңмы, үлгең килмәйме? (*Битарафҡа.*) Эй, ин әле!

**Битараф** (*инә*). Нимә булды?

**Раһип**. Алып кит был... "яҙыусы"ны! (*Сыға.*)

**Битараф** (*винтовкаһын Һәҙиәгә төбәп*). Атла!

**Һәҙиә** (*төйөнсөгөнә күрһәтеп*). Зинһар, үҙем менән алырға рөхсәт итегеҙ!

**Битараф**. Миңә барыбер!.. (*Ян-яҡҡа ҡарай ҙа төйөнсөктө алып бирә, юрый ҡысҡыра.*) Атла, тиҙәр һиңә!

**Һәҙиә** (*төйөнсөгөн күкрәгенә ҡыҫа*). Рәхмәт!

**Битараф**. Әйҙә, әйҙә!

**Сығалар. Ут һүнә. Эт өргән, һаҡсылар ҡысҡырған тауыштар ишетелә. Ут ҡабат ҡабына. Лазарет. Һәҙиә һикелә ятҡан килеш ниҙер яҙа. Барый инеп, янына ултыра.**

**Барый**. Етәр, бер аҙ ял ит, Һәҙиә!

**Һәҙиә** (*башын күтәреп*). Барый, дуҫҡайым, тыңла әле!.. (*Быуылып йүткерә башлай.*) Зинһар, ситкәрәк кит, сирем йоҡмаһын.

**Барый** (*Һәҙиәгә дарыу эсерә лә ҡағыҙын ала*). Ҡурҡма, мин бит доктор! Ҡайҙа, бир әле. (*Уҡый.*)

*Күп тә тормай килде яуыҙ минут,*
*Бәхетемде ҡулдан алды инде.*
*Күп теләктәр менән күп өмөттәр*
*Әллә ҡайҙа йыраҡ ҡалды инде...*

Ысынлап та өмөтһөҙлөккә бирелгәнһең, Һәҙиә.

**Һәҙиә**. Эй, бынығын былай ғына... Ә бына романым, романым бер генә минутҡа ла башымдан сыҡмай... (*Мендәрен арҡаһына ҡуйып, йайлап ултыра.*) Өфөлә, йылдан артыҡ – ун өс ай буйы, политтотҡондар “карабы”нда ун кешелек камерала ҡырҡтан ашыу кеше тонсоғоп ятҡанда ла... тимер юл вокзалында, ни булырын да белмәй, сәғәттәр буйы теҙләнеп торғанда ла буласаҡ романым хаҡында ғына уйланым... Әле лә геройҙарымды әүеш-тәүеш килтерәм, үҙҙәрен улай ҙа, былай ҙа итәм. (*Йүткереп ала.*) Фашистар менән һуғыш нисек бара, хәбәр юҡмы?

**Барый** (*ишек яғына ҡарап ала*). Юҡ! (*Дарыу эсерә.*) Ял ит.

**Һәҙиә**. Иҫән булһа, Ғөбәй ҙә фронтта булыр ине. Ғәҙелһеҙлек...

**Барый** (*бүлдереп*). Т-с-с-с! (*Ян-яғына ҡарай.*) Беҙ барыбыҙ ҙа – ғәҙелһеҙлек ҡорбаны. Нимә, Мотиҡ менән мин Америка шпиондарымы?.. Бер “йүнһеҙ”гә йәмғиәтебеҙ сирле, ә беҙ, табиптар, уны һауыҡтырырға бурыслыбыҙ, тип ысҡындырған инем, шул уҡ төндә ҡулға алдылар! Мотиҡ, Динислам менән бер камерала яттыҡ.

**Һәҙиә**. Уларҙы ла ғазапланылармы?

**Барый**. Эйе, Динислам төнгө һорауҙарға, язаларға түҙә алманы. Мотиҡ менән мине ун йылға хөкөм иттеләр.

**Һәҙиә** (*үҙен саҡ тотоп*). Уф, романымды яҙайым, исмаһам.

**Эттәр өрә. Кемделер әрләй-әрләй Битараф инә.**

**Битараф** (*Барыйға*). 359-сы тотҡон янында артыҡ оҙаҡ тотҡарланаһығыҙ шикелле?! (*Ҡулын һелтәп.*) Эй, хәҙер барыбер инде... Яҡташыңды юлға әҙерлә, иреккә сығаралар – дүрт яғы ҡибла!

**Барый** (*шатланып*). Ысынлапмы?

**Битараф**. Мин тәмәке тартып инеүгә әҙер булһын! (*Сыға.*)

**Барый**. Тимәк, юғарыға яҙған хаттарыбыҙҙың файҙаһы тейгән.

**Һәҙиә** (*ҡулын һелтәп*). Һәй!.. (*Баҫа, ҡулъяулығына ҡарай.*) Бында ҡан төкөрөп ятҡансы...

**Барый**. Ҡара әле, һиңә ни булды? (*Йыуатып.*) Гөлгәүһәр апай янына ҡайтырһың. Тыуған яҡтың саф һауаһы, таҙа һыуы йәнеңә, тәнеңә шифа булыр, ҡымыҙ эсерһең. Иң мөһиме, әҫәреңде яҙып бөтөрөрһөң!

**Битараф инә. Һәҙиә менән Барый ҡағыҙҙарға ҡарап бәхәсләшә, уларҙың тауыштары ишетелмәй.**

**Битараф** (*ситтән генә тегеләрҙе күҙәтә*). Роман хаҡында бәхәсләшәләр, буғай?.. Эйе, әҫәрен матур итеп, килештереп яҙа шикелле! Үҙе тегеү цехында күлдәк теккәндә ҡулъяҙмаһын ҡараштырып сыҡҡайным. Афарин!.. (*Ҡурҡып, ян-яғына ҡарай.*) Бахыр, сирләмәһә бында ғына ятҡан булыр ине лә... Иреккә сыға, имеш?! Унда бит фашистар менән ҡот осҡос һуғыш бара!.. (*Ҡурҡып, ян-яғына ҡарай.*) Эй, миңә барыбер инде... (*Юрый ҡысҡыра.*) 359-сы тотҡон, иреккә сығаһың, ашыҡ... (*Үҙ-үҙенә.*) Миңә барыбер: бында үлде ни ҙә... тегендә, тыуған яғына ҡайтып үлде ни?..

**Ут һүнә. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы көйҙәр яңғырай. Ҡабат ут янғанда өҫтәл артында Раһип ултыра. Һәҙиә инә. Ул ҙур төйөнсөк күтәргән.**

**Һәҙиә** (*шаҡ ҡатып*). Һ-һеҙ? (*Төйөнсөгөн өҫтәлгә ҡуя.*)

**Раһип** (*ҡурҡып баҫа*). Т-т-төйөнсөк?

**Һәҙиә** (*портретҡа ымлап*). Нимә, арт яғығыҙға типтеләрме?

**Раһип** (*өҫтәлгә һуға*). Молчать! Бында һорауҙы мин бирәм.

**Һәҙиә**. “Үкереп үгеҙ булмаҫһың,

екереп хужа булмаҫһың!” тигәндәр ата-бабаларыбыҙ, борон... (*Йүткереп ала.*) Һеҙҙең арҡала сәләмәтлегем тамам насарланды.

**Рәһип**. Бигерәк тә Мордовия лагерында ятҡандамы?

**Һәҙиә**. Эйе, тап өҫтөнә баҫтығыҙ. Тик “Йылан ағыу тапҡан ерҙән бал ҡорто бал таба!” тигән халҡым. Биографиямдан бысраҡ эҙләмәгеҙ! Лагерь булһа ла, эшемде дөрөҫ баһаланылар: хәрби производствола трехсотница булғаным өсөн, профорг һәм урындағы газиттәрҙә актив ҡатнашҡаным өсөн миңә “отличница” исеме бирҙеләр. Портретым Почет таҡтаһында торҙо.

**Рәһип**. Аҡланырға теләйһеңме?.. (*Портретҡа ҡарап ала.*) Сирле булмаһаң...

**Шомло көй яңғырай.**
**Ҡалҡыулыҡҡа Хәрби сыға.**
**Ул ғәҙәти кейемдә.**

**Рәһип** (*Хәрбиҙе күреп, ҡапыл үҙгәрә*). Был... (*төйөнсөккә ымлап*) нимә килтерҙегеҙ?

**Һәҙиә**. “Ырғыҙ буйында” исемле роман!

**Рәһип**. Роман?.. (*Юғалып ҡала.*) Ә-ә-ә, ниндәй уйҙар менән яҙҙығыҙ?

**Һәҙиә**. Әҫәрем башҡорт халҡының рухи ҡеүәтен һәм азатлыҡ өсөн көрәшен сағылдыра. Һеҙ вәғәҙә иткән бәхетле тормош...

**Хәрби** (*бүлдереп*). Иҫеңдә ҡалдыр, иптәш Дәүләтшина: кешене бәхетле итеп була, әммә ирекле һәм... азат итеү, ғәфү ит, мөмкин түгел! Был – тарихи хәҡиҡәт!

**Шомло көй яңғырай. Битараф инә. Хәрби уның ҡолағына ниҙер бышылдай ҙа сығып китә.**

**Битараф** (*Рәһипҡа винтовкаһын төҙәп*). Киттек!

**Рәһип**. Ни өсөн?

**Битараф**. Уяулығыңды юғалттың! (*Һәҙиәгә күрһәтеп.*) Был ниндәй ҡатын?

**Рәһип**. Ябай ҡатын... Һәҙиә исемле!

**Битараф**. Ябай ҡатын түгел шул – яҙыусы!

**Рәһип** (*көлә*). Яҙыусы?.. (*Һәҙиәгә бармағы менән төртөп.*) Ул бит яҙа белмәй... Дөрөҫөрәге, ҡәләм тирбәтеп ҡараусы... бисара ҡатын.

**Битараф**. Бисара ҡатын түгел ул, ә – Һ-ә-ҙ-и-ә Дәүләтшина! Һин уның яҙған хәтирәләрен, китаптарын уҡығаның бармы?

**Рәһип**. Юҡ! Уның... китаптары ла бармы ни?

**Битараф** (*ҡыҙып*). Шуны ла белмәгәс, ниңә уға ҡандала кеүек ҡаҙалдың, ә? Күреп тораһың да баһа: кәүҙәһендә сыҡмаған йәне генә ҡалған... Атла, бәлки, үҙеңде лә (*ян-яҡҡа ҡарап*) был юлы йәһәннәмгә оҙатырҙар!

**Рәһип** (*шашынып көлә*). Минеме?.. Мин йөрөгән һуҡмаҡта шайтан ботон һындырған, белдеңме? (*Һәҙиәгә.*) Ҡабат осрашҡанға тиклем!

**Битараф**. Киттек!

**Рәһипты төрткөләп алып сыға. Һәҙиә йүткерә-йүткерә уларға эйәрә. Ут һүнә. Шул осорҙағы көй яңғырай. Ут яна. Рәһип өҫтәл артында яҙып ултыра. Ул яңы костюмда, күҙлек кейгән. Һәҙиә инә.**

**Һәҙиә**. Һаумыһығыҙ! Инергә ярай-мы? (*Рәһипты танып туҡтап ҡала.*) Һеҙ?

**Рәһип** (*күҙлеген һала*). Мин үлемдән ҡотолоуҙың... йөҙ хәйләһен беләм!

**Һәҙиә**. Көрәш дауам итә, былай булғас!

**Рәһип**. Эйе, дауам итә һәм көрәш ҡорбанһыҙ булмай! Һин...

**Һәҙиә** (*бүлдереп*). “Һин” икән, “һин” булһын! Һәр нәмәне лә үҙ аршының менән генә үлсәйһегеҙ, тфү – үлсәйһең! Тик...

**Рәһип** (*һикереп тора*). Нимә тик? Күҙеңде асып ҡара! Ун, йөҙ, мең йыл үтер! Ә нимә үҙгәрер һуң? Дөрөҫ,

һыуҙар аҡмай тормаç, көн менән төн алышыныр, туҡтауһыҙ йыл миҙгелдәре үҙгәрер... Тик иçеңдә ҡалдыр: Һәҙиә... Дәүләтшина – донъя нисек кенә үҙгәрмәһен, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт шул килеш ҡаласаҡ – ерҙә вәхшилек, үҙ-ара ыҙғыштар, ҡан ҡойғос һуғыштар бер ваҡытта ла тынмаясаҡ! “Кем көслө – шул хаҡлы!” тиҙәрме. Тарих быны мең тапҡыр ҡабатланы инде!

**Һәҙиә**. Шаҡ ҡатырһың – иçке ауыҙҙан яңы һүҙ! Нисек кенә булмаһын, тарихта һәр саҡ хәҡиҡәт еңгән!

**Рәһип**. Дөрөç, еңгән, тик – ваҡытлыса ғына.

**Битараф инеп, уларҙы күҙәтә.**

**Һәҙиә**. Хәҡиҡәттән ҡурҡаһыңмы? Дөрөç ҡурҡаһың: хәҡиҡәт үлемһеҙ, мәңгелек!.. (*Ситкә китеп йүткереп килә*.) Һинең менән бәхәсләшергә хәлем дә, ваҡытым да, теләгем дә юҡ.

**Рәһип**. Теләгең юҡмы, әллә... хәлеңме?

**Һәҙиә**. Дөрөç, яҙлы-көҙлө сирем көсәйә. Дауаланырға аҡсам юҡ. Ярай әле, яҡшы кешеләр осрап торҙо: һуғыштан һуң Өфөлә йәшәгәндә суска майы менән ярҙам иттеләр, иретеп эстем. Хәҙер Бөрөлә кәзә аçырайым, шуның һөтөн эсеп һауығам, юғиһә... (*Туҡтап ҡала*.)

**Битараф** (*Һәҙиә янына килеп*). Матур ғына кейенеп алғанһың, әллә яҡшы эш таптыңмы?

**Һәҙиә**. Эйе, мунсала эшләйем.

**Битараф** (*яҡыныраҡ килеп*). Мунсала? Ҡайҙа ул... мунса?

**Һәҙиә**. Бөрө ҡалаһында.

**Битараф**. Һеҙ шунда йәшәйһегеҙме?

**Һәҙиә**. Эйе, һуңғы ваҡытта, хәлемә инеп, шунда йәшәргә рөхсәт бирҙеләр – бында, баш ҡалаға, килеп йөрөргә яҡын, уңайлы булды. (*Шатланып*.) Беләһегеҙме, бөгөн беренсе тапҡыр тауыҡ йомортҡаһы тейәлгән машинаға ултырып килдем, бигерәк уңайлы. Башҡа саҡта йәйәүләп йә атҡа ултырып, юлда ҡуна-ҡуна килә инем. Заманалар яҡшы яҡҡа үҙгәрә!

**Битараф**. Ә ҡайҙа... яҙышаһығыҙ һуң?

**Һәҙиә**. Мунсаның... бер бүлмәһендә. Хәрефтәрем кәкре-бөкрө яҙыла инде, сөнки унда... тәҙрә юҡ, шуға күрә көндөҙ ҙә, төндә лә шәм яндырырға тура килә. (*Ҡапыл*.) Юҡ, юҡ, берүк зарлана тип уйламағыҙ! Романымды теләһә ниндәй шарттарҙа, ҡан төкөрөп торһам да, йөрәгемдең һуңғы тибешенә ҡәҙәр яҙасаҡмын!

**Хәрби инә. Битараф уның янына йүгерә.**

**Рәһип** (*юғалып ҡала*). Теге, ни... Ниндәй бөйөк һүҙҙәр!

**Һәҙиә**. Бөйөк түгел, ә йөрәгемдән әсенеп сыҡҡан һүҙҙәр! Кем дә булһа халҡыбыҙҙың үткәне хаҡында дөрөçөн яҙырға тейештер бит?

**Рәһип** (*ҡурҡып*). Дөрөçөн? Нисек дөрөçөн? (*Ни эшләргә белмәй, ҡулъяулығын алып маңлайын, елкәләрен һөртә*.) Башҡа яҙыусылар, һинеңсә... “алдап” яҙаларmы? (*Хәрбигә, портретҡа ҡарап ала*.) Аңлатып бир?

**Хәрби күкрәген тота, сүгәләй. Битараф уны ҡултыҡлап алып китә. Рәһип еңел һулап ҡуя.**

Һине... Бөрө ҡалаһында Зәйнулла Сафинға кейәүгә сыҡҡан, тип ишеттем, шул дөрөçмө?

**Һәҙиә**. Дөрөç! Тик өйләнгән өсөн... ҡыçҡаһы, беҙҙе ғаилә менән Силәбе өлкәһе Сулея станцияһына ебәрҙеләр.

**Битараф инә.**

**Рәһип** (*Битарафҡа ҡарап торғандан һуң*). Ҡалдырығыҙ, ҡарап сығырмын... Фекерҙәремде әйтермен. (*Дарыу ҡаба, графиндан һыу ҡойоп эсә*.)

**Битараф** (*төйөнсөккә ымлап*). Хужа был романды ентекләп уҡып сығырға бойорҙо. Тарихты бутап, беҙҙең хаҡта “насар” итеп яҙмаһын, тине.

**Һәҙиә**. Ҡурҡмағыҙ – романым әлеге осорҙо түгел, ә революцияға тиклем һәм шунан һуңғы йылдарҙы ғына эсенә ала!

**Битараф** (*хәйләкәр йылмайып*). Миңә... барыбер! (*Сығa*.)

**Рәһип** (*ентекләп ҡарай*). “Ырғыҙ буйҙарында”... Оһо-һо, р-о-м-а-н! (*Яңылыш ысҡындыра*.) Ә ниңә Фадеевҡа, Тихоновҡа жалоба яҙҙың?

**Һәҙиә** (*әләктереп ала*). Жалоба түгел, хат!

**Рәһип**. Жалоба шул, хат түгел!

**Һәҙиә**. Их, сәләмәт... сәләмәт булһаммы?!

**Һәҙиә сығып китә.**

**Рәһип** (*арлы-бирле йөрөй*). Ошо ҡатын арҡаһында нисә тапҡыр йәнем ҡыл өҫтөндә ҡалды, тфү, “яҙыусы” имеш?!

**Битараф инә.**

**Битараф** (*төйөнсөктө асып ҡарай*). Ентекләп, ижекләп уҡып сыҡ! (*Рәһипҡа яҡынайып*.) Һин Һәҙиәнең... тырнаҡ осона ла тормайһың, әтрәгәләм.

**Рәһип** (*аптырап*). Нимә?

**Битараф** (*винтовкаһын төҙәп*). Их, минән генә торһа икән?!

**Рәһип**. Һәҙиәне яҡлап... йәнеңдә һаҡлап ҡалырға тырышаһыңмы?

**Битараф**. Күҙеңде асып ҡара – икебеҙ бер кәмәлә йөҙәбеҙ!

**Битараф сыға. Рәһип арлы-бирле йөрөй ҙә, төйөнсөктән ҡағыҙҙар алып, йотлоғоп уҡый башлай, ҡәләм менән ҡайһы бер һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙа. Һәҙиә инә. Ут уны яҡтырта.**

**Һәҙиә** (*быуылып йүткереп ала*). Ауырыуым көсәйә – ашығырға кәрәк... (*Портретҡа бара*.) Ни өсөн әҫәрем бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай? Ә бит ҡулъяҙмамды Барыйҙан башҡа берәүҙең дә аҙағына тиклем уҡып сыҡҡаны булманы. Әллә... йылдар буйы тоҙһоҙ әҫәр яҙып булаштыммы?.. Шулай, төшөнкөлөккә бирелгәндә, бер нисә мәртәбә ҡулъяҙмаларымды утҡа ташларға уйланым, Ағиҙел-Ағиҙелкәй буйына төшөп һыуға ағыҙа яҙҙым... (*Эске кесәһенән ҡаурыйын ала, оҙаҡ ҡына ҡарап тора*.) Янына инмәҫ, һөйләшмәҫ өсөн биш алтын бирер инем, тик... романымдың яҙмышы әлегә уның ҡулында!..

**Ут яна. Рәһип, тороп, портрет янына барып баҫа.**

**Һәҙиә** (*инә, тамаҡ ҡыра*). Инергә ярайҙыр?

**Рәһип** (*урынына барып ултыра*). Һинме? Килдеңме?.. Әҫәреңде уҡып... теге... (*Баҫып, арлы-бирле йөрөй*.) Был әҫәрең менән ни әйтергә теләнең? (*Ултыра*.)

**Һәҙиә**. Бер үк балыҡ башы?! (*Үҙен ҡулъа алып*.) Романым шул: аҙ һанлы башҡорттарҙың, уның байҙарының һәм батрактарының нисек йәшәгәндәрен, үҙ-ара ҡайһылай көрәшкәндәрен күрһәтеү... (*Үҙен саҡ-саҡ тыйып*.) Уф, түҙемлегем ҡалманы... (*Рәһиптың ҡаршыһына килеп ултыра*.) Романымды уҡып сығаһың һәм...

**Рәһип** (*бүлдереп*). Әл-лә-лә, күҙгә төтөн ебәрмә! (*Баҫа*.) Тыңла әле, нимә яҙғанһың! (*Бер битен алып уҡый*.) Тәк, тәк... Имай әйтә: “Ай, Совет власы... күпкә түгел ул, тауҙан аҡҡан ямғыр һыуы ни, ул ни”... Тәк, тәк!..

**Битараф, инеп, ҡалҡыулыҡҡа менеп баҫа.**

**Рәһип**. “Беҙҙең ҡәҙерле муллабыҙ... (*Битарафты күргәс, яңынан ҡысҡырып уҡый*.) Беҙҙең ҡәҙерле муллабыҙ һәм мосолман ағай-эне! Һеҙҙең хәйерфатихағыҙ арҡаһында иҫән-һау йөрөп, һеҙҙә инде бына икенсе тапҡыр дин байрамы – Ҡорбан ғәйетен үткәрәбеҙ...” (*Һәҙиәгә яҡынайып*.) Нимә был?... Ошомо йылдар буйы яҙған романың? Был әҫәрең өсөн һине ҡабат...

**Һәҙиә** (*бүлдереп*). Елкәгеҙҙе ҡабартмағыҙ, гражданин начальник! Дуға менән бесән саптырырға уйлайһығыҙмы? Барып сыҡмаç, һиҙеп тораһығыҙ: ел икенсе яҡтан иçә башланы.

**Раһип**. Телең әремле, кесерткәнле һинең.

**Һәҙиә**. Тел ҡылыстан үткерерәк!

**Раһип**. Беҙ ҡушҡанса яҙһаң, әллә нисә китабың...

**Ҡапыл Хәрбиҙең портреты гөрһөлдәп аçҡа төшә. Битараф ашығып сығып китә. Раһип ҡурҡып арлы-бирле йөрөй.**

**Һәҙиә**. Бына, һәр ваҡиғаның, дәүерҙең башы, аҙағы була!.. (*Ултыра*.) Бысаҡҡа бысаҡ килеп йәшәнек! Зинһар, бер мәртәбә булһа ла дөрөçөн әйт әле: ни өсөн мине, Ғөбәй менән бергә, юғары язаға хөкөм итмәнегеҙ?

**Раһип**. Белмәйем, мин һине... башта яраттым, Ғөбәйҙән үлеп көнләштем, буғай? Аҙаҡтан, сирләгәс, йәлләнем. (*Онотолоп китә*.) Ғөмүмән, сибәр, матур ҡатындарҙың барыһын да яраттым, үлеп ирҙәренән көнләштем... Көсһөҙ заттарға мөхәббәтем урғылып торғандыр, моғайын?!

**Һәҙиә** (*көлөргә тырыша, быуылып йүткерә башлай*). Көлкө ҡапсығы сиселмәй, ғәфү ит, күптән көлгәнем юҡ. (*Етдиләнеп*.) Был – мөхәббәт түгел, ә ҡырағайлыҡ, үҙ-үҙеңде яратыу, үҙ һүҙеңде һүҙ итеү, аҡты аҡ, ҡараны ҡара тип танымау, биләгән дәрәжәң менән маһайыу ғына!

**Раһип**. Мин көслө булдым, мин...

**Һәҙиә** (*бүлдереп*). Һин бер ваҡытта ла көслө булманың, ә көнсөл, эскерле булдың... Ғүмерең болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоп үтте, шуға үкенмәйһеңме?

**Раһип** (*тантаналы*). Ә мин... һыуҙы яуыз ниәт менән юрый болғаттым. Сөнки болғансыҡ һыуҙа үҙемә кәрәк "эре балыҡтар"ҙы эләктереп... (*кеçәһенән исемлекте сығара*) йәһәннәмгә оҙатырға уңайлы булды. (*Еңел һулап*.) Мин маҡсатыма ирештем!

**Һәҙиә** (*нәфрәтләнеп*). Хәтерләйһеңме, теге саҡта Хужаң: "Эттең туйған ере бар, тыуған ере юҡ!" – тигән ине? Шул саҡта һин аçтыртын ғына йылмайған инең?

**Раһип** (*йылмайып*). Бала ғына булһаң да, һиҙгәнһең икән... Дөрөç, мин ул саҡта, мәкерле уйҙарымды тормошҡа ашырыр өсөн, Хужаның арт яғын да үбергә әҙер инем.

**Битараф инә.**

(*Ҡапыл зәһәрләнеп*.) Һеҙ, азатлыҡ өсөн көрәшәбеҙ тип, ил батшаһын, беҙҙе: байҙарҙы, туғандарымды үлемгә дусар иттегеҙ, халыҡты алдап, илде емерҙегеҙ... Шул саҡта йыйылған нәфрәт, асыу йөрәгемде, йәнемде, ҡанымды телгеләне, һәм мин үс алырға ант иттем! Ҡунаҡ ашы – ҡара ҡаршы: башта һеҙ беҙҙе ҡырҙығыҙ, аҙаҡтан, ҡулдан килгәнсә... беҙ, тфү... мин һеҙҙе (*графиндан һыу ҡойоп эсә*) тамуҡҡа оҙаттым!

**Битараф** (*мылтығын ҡороп*). Ысын йөҙөң асылдымы, ғәйебеңде таныныңмы, ҡәбәхәт?!

**Раһип**. Яңылышаһың, бында иң ғәйепле кеше һин! Ҡулыңда ҡорал бар килеш ниңә был фажиғәне башта уҡ туҡтатманың? Ниңә миллионлаған "ғәйеплеләр"ҙе теге донъяға оҙаттың?

**Битараф**. Намыçым таҙа: һәр саҡ һин биргән әмерҙәрҙе үтәнем!

**Раһип**. Эйе, һиңә һәр саҡ "барыбер" булды. Белгең килһә, һинең битарафлығың миңә файҙа ғына килтерҙе. (*Битарафҡа яҡынайып*.) Бар, тышта көт... юғиһә. Һинең ғәйепте фашлаусы документтар (*муйынынан күрһәтеп*) бына бынан!

**Битараф** (*ҡурҡып*). Ярай, ярай, етте... (*Үҙ алдына*.) Әлегә... (*Сыға*.)

**Раһип** (*ҡағыҙ ала*). Романыңда... Имайҙың ошо һүҙҙәре оҡшаны миңә

(*уҡый*): “Ай, Совет власы күпкә түгел ул, тауҙан аҡкан ямғыр һыуы ни, ул ни!..” Шәп әйтелгән, афарин, Һәҙиә! Шул һүҙҙәрең өсөн генә әҫәреңде баҫтырырға йыйынған инем, тик, ғәфү ит... (*Битараф киткән яҡҡа ымлап*) үҙең күрәһең, ирек бирмәнеләр.

**Һәҙиә** (*ҡағыҙҙарҙы ҡарап*). Үҙеңә кәрәк һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙып ҡуйғанһың икән... Тик бер-ике һүҙ менән генә тарихты алдап булмай! “Үткәндәрҙе өйрәнмәй тороп, киләсәкте белеү мөмкин түгел!” тигәндәр бит. Шул күҙлектән сығып яҙҙым романымды. Халҡым алдында намыҫым таҙа!

**Раһип**. Ниңә әҫәреңдә... (*күкрәгенә һуғып*) мин, Хужа,.. Битараф юҡ?

**Һәҙиә**. Һеҙ идара иткән дәүергә – ҡот осҡос осорға килеп етә алманым... Ә романымда халҡымдың бәхетле миҙгелен – азатлыҡ, ирек өсөн көрәшә башлаған йылдарын дөрөҫ итеп тәфсирләнем!

**Раһип**. Иҫеңдә ҡалдыр, Һәҙиә Дәүләтшина: бер генә ил башлығына ла... хәҡиҡәтте яҙған яҙыусы кәрәкмәй! Кем арбаһына ултырғанһың, шуның йырын йырларға кәрәк. Мәңге шулай булған һәм буласаҡ!..

**Һәҙиә**. Юҡ, килешмәйем... Заманаға, хакимдарға буйһонмаған халыҡ ижады бар: әкиәт-легендалар, риүәйәттәр, бәйеттәр, йырҙар!

**Раһип**. Халыҡ ижады?

**Һәҙиә**. Эйе... Яҙыусыларҙы язаларға, китаптарын баҫтырмаҫҡа, хатта яндырырға була... Ә халыҡ ижады – еңелмәҫ, мәңгелек ул! Миҫал килтерергәме? Һин күптәрҙең башына еттең, тик Һомай – бәхет ҡошон еңә алманың!

**Раһип** (*уйланып*). Унынһы дөрөҫ!.. (*Ҡапыл, шашынып*.) Мин, иҫәпһеҙһанһыҙ дошмандарҙы теҙләндергән Иншар-Раһип, һинең Һомай ҡошоң һәм... ябай бер ҡатынды, һине – яҙыусыны еңә алманым... Ғәрлек... Ғәфү... Еңә алманым...

**Һәҙиә**. Юҡҡа ғына мәңгелек ваҡыт тәгәрмәсенә таяҡ тығып маташтың. Һинең дәүерең, көсөң бөттө, йондоҙоң һүнде инде...

**Раһип** (*ҡотороп сығып китә, тышта шашынып ҡысҡыра*). Ҡалдырығыҙ, теймәгеҙ, минең йәшәгем, йә-шә-гемкилә...

**Ут һүнә. Ҡабат ут ҡабынғанда Һәҙиә ятҡан килеш ниҙер яҙа. Барый, инеп, янына ултыра. Ул ҡартайған, күҙлек кейгән.**

**Барый**. Хәлдәрең нисек, Һәҙиә?

**Һәҙиә**. Сирем йоғошло бит, зинһар, яныма килмә, Барый.

**Барый**. Мин бит доктор, Һәҙиә!

**Һәҙиә**. Һаҡ бул, тиеүем... (*Илһамланып*.) Их, дуҫҡайым! Һин яҙыусының нисек әҫәр тыуҙырыуын күҙ алдына ла килтерә алмайһың! Ҡатын-ҡыҙ, бала тапҡас үҙен нисек еңел тойһа, яҙыусы ла әҫәрен тамамлағас, шулай еңеләйеп ҡала... (*Шат*.) Барый, тыңла, һинең өсөн яҙҙым! (*Уҡый*.)

*Көн дә тыңлай доктор йөрәгемде,*
*Иҫенә ала бик күп белемен.*
*Күренеп тора ихлас һөйләгәне,*
*Ярҙам иткеһе килеүен:*
*“Ҡайһы йөрәк сире шулай була –*
*Бер елкенә, тағын бер бөтә;*
*Ун биш тамсы ғына дарыу эсһә,*
*Тыныслана, уға шул етә.*
*Ә был һинең йөрәк, ни өсөндөр,*
*Көнө-төнө ярһый, туҡтамай,*
*Әллә инде уны ярһытамы*
*Төндәр үткәреүең йоҡламай?..”*

**Һәҙиә йүткерә башлай,**
**ҡулъяулыҡ алып, ауыҙын ҡаплай.**
**Барый дарыу эсерә.**

**Барый**. Һәҙиә, матур хикәйәләр, повестар яҙҙың, әле романыңды тамамланың. Әйт әле: һин бәхетлеме?

**Һәҙиә** (*етдиләнә*). Урыҫтарҙа “Һыуға

һәнәк менән яҙылған", тигән әйтем бар. Романым, ижадым да шулай булып сыҡмаҫмы, тип ҡурҡам.

**Барый** (*аптырап*). Һин икеләнәһең...

**Һәҙиә**. Төрлө саҡ була, Барый... Ә бәхет тигәндән? Нимә ул бәхет?.. (*Йылмайып.*) Бәхет – ул йәшәйештең, тормоштоң шатлыҡлы мәлдәре! 1937 йылға тиклем тормошомда ундай саҡтар бихисап булды: яратҡан кешем Ғөбәйгә кейәүгә сыҡтым, донъябыҙҙы йәмләп улыбыҙ Булат тыуҙы. 1927 йылда – "Һылыуҡай пионерка" исемле беренсе хикәйәм, 1930 йылда "Айбикә" повесым донъя күрҙе. Байтаҡ шиғырҙар яҙҙым. 1934 йылда Бөтөн Союз яҙыусыларының беренсе съезында делегат булдым, Максим Горький менән осраштым. 1936 йылда Минскиҙа яҙыусыларҙың өсөнсө пленумында ҡатнаштым. Шунан алдағы йылда хикәйәләр йыйынтығы баҫтырған инем. Күп тапҡырҙар күсеп йөрөргә тура килде ул осор: Куйбышевта, Мәскәүҙә, Өфөлә, Йылайыр, Баймаҡта йәшәнек – яҙыусы өсөн ҙур бәхет бит ул! Төрлө халыҡты күрҙек, уларҙың көнкүреше, тормошо менән ныҡлап таныштыҡ. Тағы нимә?.. Ә-ә-ә, 1936 йылда "Айбикә" повесы урыҫ телендә баҫылып сыҡты.

**Барый**. Ғәфү ит, Һәҙиә! Берҙән-бер улың... Булаттың үлеме?

**Һәҙиә**. Уныһы шәхси ҡайғым! Нишләйһең, яҙмыштан уҙмыш юҡ! Әсәйем был яҡты донъяға ун ике бала тапҡан. Шуларҙан... мин һәм Һиҙиәт кенә иҫән-һау үҫкәнбеҙ.

**Барый**. Һиҙиәт?

**Һәҙиә**. Эйе, Тик уны ла... 1918 йылда, Йылайыр урманында, аҡтар язалап үлтергән.

**Барый**. Ғәфү ит, белмәй инем.

**Һәҙиә**. Ә бына 1937 йылда... Беҙҙе тапанылар, иҙҙеләр.

**Барый**. Эйе, булды инде... (*Һүҙҙе икенсегә бороорға теләп, тантана менән.*) Хәҙер етәксе алышынды, илдә үҙгәрештәр башланды... (*Ҡулдарын ыуып.*) Былай барһа, китабыңды ла баҫтырырбыҙ, Дәүләтшина Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы!

**Һәҙиә**. Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы?.. Ҡыҙыҡ, ун ете йыл былай ҙурлап, ихтирам менән өндәшеүсе булманы!

**Барый**. Һинең быға хаҡың бар.

**Һәҙиә**. Рәхмәт, дуҫҡайым! Бына ун һигеҙ йыл, көндө төнгә, төндө көнгә ялғап, романымды яҙҙым. Ни өсөн, тиһеңме? Сөнки Горький: "Эшсе халыҡ үҙенең нимә эшләгәнен, тарихын белергә тейеш!" – тигәйне. Шуны иҫбатланым әҫәремдә. Тағы, тағы, тағы яҙыр инем, тик... (*Туҡтап ҡала, ҡулъяулығын алып ҡарай.*) Миңә бит... ни бары ҡырҡ туғыҙ йәш!

**Барый** (*тәьҫир яһарға тырышып*). Шул ҡырҡ туғыҙ йыл эсендә ниндәй ҡатмарлы, һоҡланырлыҡ юл уҙҙың, Һәҙиә! Ҡот осҡос осорҙа йәшәп тә, бөгөлмәнең, һығылманың – романыңды яҙып бөтөрҙөң! Кемдер, йөҙ йыл йәшәп тә, был тиклем эштәрҙе башҡарып сыға алмаҫ ине!

**Һәҙиә**. Рәхмәт! (*Ситкә боролоп ята.*)

**Барый**. Ни булды, Һәҙиә? Һин... илайһың?

**Һәҙиә**. Мин илай белмәйем, тик күҙҙәремә йәш тығылды... (*Ҡалҡып ултыра, күҙҙәрен һөртә.*) Шул тиклем маҡтағас, илһамым килде... (*Ян-яғына ҡарап.*) Барый, яҙырға ҡағыҙҙарым бөткән дә баһа.

**Барый**. Хәҙер алып киләм. Тик, зинһар, тыныс ҡына ят. (*Сыға.*)

**Һәҙиә** (*мендәрен арҡаһына ҡуйып ултыра*). Их, тыныс ҡына ятып буламы һуң?.. (*Яҙа башлай ҙа ҡәләмен ҡуя.*) Эй, бәхет тигәндән, докторға һөйләргә оноттҡанмын. Миңә бит ҡартәсәй булыу бәхете тәтене... (*Баҫа. Ҡурай моңо яңғырай.*) Бөрөлә йәшәгәндә ирем Зәйнулланың ейәне бар ине. Булат улымдан ҡалған кейемдә, ҡаталарын кейҙерҙем тегегә. Ә ул: "Өләсәй,

мине яратаһыңмы?” – ти. “Яратам, балаҡайым”, – тимен. “Ә ниңә һуң “әп” итмәйһең?” – ти. Ә мин, ул ни тиклем яҡын, ҡәҙерле булһа ла, сирем йоға күрмәһен тип, үҙемә яҡын килтермәҫкә тырыштым балаҡайҙы... (*Күҙҙәрен һөртә.*) Бына шулай, доктор! Ә һин һорайһың тағын, бәхетлеме, тип. Минең өсөн борсолма, Барый, бәхетле мин, бәхетле! Дөрөҫ, романым баҫылып, китап тышында исем-фамилиямды күрһәм, теге донъяға тыныс ҡына китеп барыр инем. Тик, ни өсөндөр, ни өсөндөр, береһе лә ярҙам итергә теләмәй!?

**Һәҙиә урынын йыя, ҡулына ҡағыҙҙар ала, сайҡалып китә, ултыра. Быуылып-быуылып йүткерә лә, ҡулъяулығын ауыҙынан алып, оҙаҡ ҡына ҡарап тора.**

Ғүмерем... көрәшеп үтте: дошмандарым менән дә, үҙем менән дә... Ауыр ваҡыттарҙа ҡул һалырға, үлергә теләгән, йыйынған саҡтар ҙа булды. Ундай саҡта: “Быныһы – еңел юл, бирешмә, бирешмә, бирешмә, Һәҙиә!” – тип мең тапҡырҙар ҡабатлағанмындыр... (*Йылмайып.*) Күпме генә тырышһалар ҙа, әҙәм аҡтыҡтарына барыбер, барыбер бирешмәнем – үҙ һүҙемде һүҙ иттем: еңдем, ә сир... сир (*ауыр һулап*) яман инде – уға ҡаршы тора алманым! Ул еңде! (*Ҡабат ҡулъяулығына ҡарап.*) Бәхилләшергә ваҡыт – дәртем бар барын, ә дарманым ҡыл өҫтөндә генә! (*Төйөнсөгөн ҡосаҡлап, ҡалҡыулыҡҡа менеп баҫа.*) Бәхет, ирек, бәйһеҙлек, азатлыҡ өсөн көрәштә ғазап сиккән ғорур, ҡаһарман халҡым! Һеҙгә... (*Төйөнсөгөн аяҡ осона ҡуя*) ике ҡулъяҙмамды ҡалдырам. Ҡыҙғаныс, икеһенең береһен дә китап итеп баҫтырырға өлгөрмәнем. Үҙегеҙ шаһит: һуңғы һулышыма тиклем көрәштем! (*Ҡуйынынан бәләкәй төргәк сығара.*) Ә былары... романымды, хатта өҙөктәрен булһа ла ваҡытлы матбуғатта сығармаҫ өсөн төрлө “хаталар”, “сәбәптәр” табып яҙылған формаль яуап хаттары... (*Төргәкте төйөнсөк янына ҡуя.*) Тағы нимә? Ә, кисә Ташкенттан, Мотиҡ дуҫыбыҙҙан, хат килде. Барый менән илай-илай уҡыныҡ. “Өҙөлөп һағындым, ҡайтам, көтөгөҙ!” – тигән. (*Йылмайып.*) Мотиҡ дуҫҡайым, асыуланма: уттан һыуға, һыуҙан утҡа инеп йәшәнем, бәхил бул...

**Йәш Һәҙиә** (*сыға*). Юҡ, бәхет ҡошон таба алманым! (*Һәҙиәгә килеп һыйына.*) Бармы һуң ул, кем күргән уны?

**Һәҙиә** (*сәсенән һыйпап*). Бар ул ҡош, бар! Ул – һәр кемдең йөрәгендә, рухында!

**Йәш Һәҙиә**. Тимәк... һин Һомайҙы күрҙең?

**Һәҙиә**. Эйе, минең бәхет ҡошом – ошо (*эйелеп төйөнсөктө һыйпай*) Һомай-романым ул! (*Тирә-яғына ҡарап.*) Ҡыҙғаныс, бәхилләшергә... бер йән эйәһе юҡ! (*Йәш Һәҙиәне ҡосаҡлай.*) Ярай әле, һин бар, бала сағым! (*Ҡуйынынан ҡаурый ала.*) Әсәйемдең иң ҡәҙерле бүләге! (*Бушлыҡҡа “Яҙыусы” тип яҙа.*) Һәҙиә яҙыусы булһын, роман яҙһын тип, ҡасандыр был ҡаурыйын Һомай... Ырғыҙ буйында төшөрөп ҡалдырған! Рәхмәт, ҡошҡайым! (*Ҙур итеп өндәү билдәһе ҡуя.*)

**Йәш Һәҙиә**. Әлбиттә, шулай! Һин әллә шикләнәһеңме?

**Һәҙиә**. Юҡ, юҡ, шикләнмәйем... Тарихҡа күҙ һал: борон-борон замандарҙа ла яҙыусылар әҫәрҙәрен ҡаурый менән яҙғандар! (*Ҡаурыйын бирә.*) Мә, әсәйемә бирерһең – романымды яҙып бөтөрөп, һуңғы нөктәһен ҡуйырға өлгөрҙөм... (*Тирә-яғына ҡарап.*) Их, Барый менән генә бәхилләшә алманым... (*Еңел һулап.*) Өҫтөмдән тау төшкәндәй булды... Бына, мин – ирекле, мин – азат!..

**Һәҙиә уңға, һулға, артҡа йүгерә,**

**ҡайҙа ла сәнскеле тимерсыбыҡтарға юлығып, ҡабат ҡалҡыулыҡҡа менә.**

Яңылышҡанмын – мин һаман да ситлектә, тотҡонлоҡта икән! Иманым камил: әҙәм балаһы ҡасан булһа ла...

**Ҡурай моңо яңғырай. Һәҙиә тораташтай ҡатып ҡала. Йәш Һәҙиә уны аҡ туҡымаға төрә. Ҡаурый менән ҡалҡыулыҡтың алғы яғына эре хәрефтәр менән "Яҙыусы" тип яҙа ла сығып йүгерә. Алан-йолан ҡаранып Рәһип инә һәм, ҙур төйөнсөктән төргәк алып, ҡуйынына йәшерә. Ҡаршы яҡта Йәш Һәҙиә күренә. Рәһип ҡурҡып, ҡаса-боҫа сығып китә. Уның ҡулында – "Лотфулла ҡыҙы Һәҙиә Дәүләтшина (1905–1954)" тип яҙылған таҡтаташ. Ул уны "Яҙыусы" тигән һүҙҙең аҫтына элеп ҡуя һәм уйланып тора ла, ныҡлы ҡарарға килеп, төйөнсөктө күтәреп алып сығып китә. Ут Һәҙиәне яҡтырта. Барый, сығып, Һәҙиәнең аяҡ осона сәскәләр һала. Ҡурай тауышы аҡрыная.**

**Барый**. "Ырғыҙ" романы Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина вафат булып өс йыл үткәс – 1957 йылда китап булып баҫылып сыҡты. Күп тә үтмәй: "Был романды уҡымай тороп, башҡорт халҡының үткәнен күреү, аңлау мөмкин түгел," – тип маҡтап яҙҙылар.

**Тирә-яҡты сырмап алған сәнскеле тимерсыбыҡтар, Һәҙиәне уратып алған "ситлек" маҡтау һүҙҙәре яңғыраған һайын юҡҡа сыға бара.**

**Битараф** (*гәҙәти кейемдә*). Һәҙиә Дәүләтшинаны мин күреп белә инем.

**Барый** (*Битарафҡа яҡынайып*). Һиңә нисек оят түгел! Һин – атай-әсәйеңде, халҡыңды һатҡан, милләтеңде онотҡан "маңҡорт!"

**Битараф**. Дөрөҫ, заманында арба күсәрҙәрен күп сәкәштерҙем, ғәфү итегеҙ... Тик онотмағыҙ: 1937 йылда Һәҙиәне ҡулға алғанда (*күкрәгенә һуғып*) мин ҡулъяҙмаларын үҙе менән алдырмаһам һәм биш йыл буйы төрмәлә ярҙам итмәһәм, был роман бөтөнләй...

**Барый** (*бүлдереп*). Юғал күҙ алдынан, бәдбәхет бәндә!

**Битараф ҡурҡып сығып китә. Мотиҡ инә. Сәстәре аҡ, күҙлек кейгән.**

**Мотиҡ**. Бына, мин дә тыуған яҡҡа ҡайттым, Һәҙиә. Тик һуңлап, бик һуңлап ҡайттым, ғәфү ит?! (*Сәскәләр һала. Гәзит алып уҡый.*) Бына, тыңла... "Ырғыҙ" романы – Һәҙиәнең ижад подвигы ул!" тип данлағандар. (*Икенсе битте аса.*)

*Юҡ, Һәҙиә, һүҙең тутыҡмаҫ,*
*Илең һине ғүмер онотмаҫ!* –

тип һиңә мәҙхиә йырлағандар.

**Барый**. "Ырғыҙ" романы яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның аҡҡош йыры булды, гүзәл, көслө, тулҡынландырғыс йыр!"– тип бер-береһен уҙҙырып һөйләнеләр.

**Ғәлиулла, инеп, сәскәләр һала. Ул оло йәштә, таяҡҡа таянған.**

**Мотиҡ** (*журнал алып уҡый*). "Һәҙиә Дәүләтшина башҡорт әҙәбиәтендә ҡатын-ҡыҙҙарҙан иң беренсе яҙыусы – тәүге ҡарлуғас булды. Әммә ул ҡарлуғас ҡына булып ҡалманы, бөркөт булып бик юғарыға күтәрелде, йыраҡ осто", – тип яҙғандар.

**Ғәлиулла**. Һәҙиә ҡыҙым, ҡотлайым! "Ырғыҙ" романы өсөн һиңә республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләген бирҙеләр!

**Гөлгәүһәр, инеп, Һәҙиәнең алдына сәскәләр һала.**

**Гөлгәүһәр** (*ҡуйынынан ҡаурый сығарып ҡарап тора*). Һәҙиәкәйем, ҡәҙерлем! (*Күҙ йәшен һөртә.*) Күпме һүҙҙәр, ваҡиғалар, легендалар хаҡында һораша инең… “Атай-әсәйҙәр теле менән яҙырға тырышам, уларға тап төшөрлөк булмаһын, яңылышлыҡтар китмәһен”, – тип ҡабатлай-ҡабатлай яҙҙың бит романыңды, күҙ нурым!

**Йәш Һәҙиә** (*күккә ҡарап*). Тс-с-с!.. Әсәй, ишетәһеңме?.. Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина үҙенең архивы – ҡулъяҙмалары хаҡында һорай? (*Ҡағыҙға яҙып бирә.*)

**Гөлгәүһәр** (*уҡый*). Ғәфү ит, ҡыҙым, – мин ғәйепле! Күңелемә оҡшамаған бәндәгә ышандым!..

**Ҡысҡыра-ҡысҡыра Рәһип инә**.

**Рәһип**. Бында алып килегеҙ, бында!.. Ҡайҙа оркестр?.. Ҡайҙа фотоға, киноға төшөрөүселәр?.. Журналистар ҡайҙа?.. Халҡыбыҙҙың бөйөк яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшинаға бюст асабыҙ!

**Һәҙиәнең аяҡ осонан сәскәләрҙе йыйып ала. Йәш Һәҙиә сығып, Һәҙиәне етәкләй, һәм улар артҡа китеп, ҡараңғылыҡҡа инеп юғалалар. Бюсты индереп, Һәҙиә баҫып торған урынға ҡуялар. Оркестр башҡарыуында марш яңғырай. Йүгереп Йәш Һәҙиә инә. Ул китаптар тотҡан.**

**Йәш Һәҙиә**. Бына, күрәһегеҙме? Ошо ул Һомай – бәхет ҡошо!.. (*Гөлгәүһәр янына килә.*) Мә, әсәкәйем, ал!

**Гөлгәүһәр**. Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! (*Китапты алып, ентекләп ҡарай.*) Сөбханалла!.. (*Ижекләп уҡый.*) “Һә-ҙ-иә Дәү-ләт-ши-на”, “Ыр-ғыҙ”! (*Күкрәгенә ҡыҫа.*) Ниһайәт, ҡыҙым, үҙенең нәҙерен үтәгән, Аллаға шөкөр! (*Күҙ йәштәрен һөртә.*)

**Йәш Һәҙиә**. Мәгеҙ, алығыҙ!..

**Барыйға, Мотиҡҡа, Ғәлиуллаға китаптар тарата.**

**Рәһип** (*ҡулын һуҙып*). Миңә, миңә юҡмы ни?

**Йәш Һәҙиә.** Юҡ! (*Үтеп китә.*) Бына ул, Һомай – бәхет ҡошо! (*Китапты баш өҫтөнә күтәреп, ҡош кеүек талпына.*) Бер урында талпына ла талпына, талпына ла талпына – халҡым күрһен, бәхетле булһын, ти! (*Гөлгәүһәргә һыйына.*)

**Барый** (*бюст янына килә*). Хөрмәтле Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы! Бына, һуңлап булһа ла, теләгегеҙ (*китапты бюст алдына ҡуя*) тормошҡа ашты.

**Гөлгәүһәр** (*бюст янына килә*). Һәҙиәкәйем, берҙән-берем! Хыялың тормошҡа ашты: “Ир-ҡыҙ” – ил ҡыҙы булдың! Мин бәхетле, сикһеҙ бәхетле әсә!

**Барый**. Тағы бер һөйөнсө: балалар, үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт бүләге булдырылды!

**Гөлгәүһәр**. Көткән бәхетең һуңлап, бик һуңлап килде, Һәҙиәм, бәғер киҫәгем!

**Рәһип** (*алъа сыға*). Хөрмәтле Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы! Һеҙҙең иҫ киткес талантығыҙ алдында баш эйәм… (*Теҙләнеп баш эйә, баҫа.*) Иптәштәр! Данлыҡлы яҙыусыбыҙ Һәҙиә Дәүләтшина… халҡыбыҙҙың иң талантлы, иң… иң… иң…

**Рәһип елкенеп һөйләй. Барыһы ла, боролоп, бюстҡа ҡарап баҫа. Ҡурай моңо көсәйә. Шаршау ябыла.**

# Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан

## ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?

*Рәссамдың төп эш материалы – буяу менән киндер, ҡоралы – бумала, композиторҙың – төрлө тауыштар менән ниндәйҙер музыка ҡоралы, скульпторҙың – мәрмәр таш (йә металл, ағас...), ҡоралы – сүкеш, ҡасау булһа, әҙиптең эш материалы ла, эш ҡоралы ла – һүҙ генә. Ябай ғына һүҙҙәрҙән ул һоҡланғыс «картина» ла яҙа, «симфония» ла тыуҙыра, «һәйкәл» дә юнып (ҡойоп!) ҡуя. Хатта шул уҡ композиторҙы, рәссамды, скульпторҙы ижадҡа йыш ҡына әҙип рухландыра. Уйлай китһәң, мөғжизәнең дә мөғжизәһе! Ә был мөғжизә үҙе нисегерәк ярала һуң?*

*Тәҡдим ителгән рубрика сиктәрендә әңгәмәләрҙә күтәрелгән проблемаларға, бигерәк тә әҙәби телгә ҡағылышлы фекер алышырға билдәле тел белгесе, филология фәндәре докторы, профессор* ***С. Ш. ПОВАРИСОВТЫ*** *саҡырҙыҡ.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Суфиян Шәмсетдин улы, Һеҙ – бәлиғ булыу осорон, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарын иҫәпкә алмағанда, ғүмерегеҙ буйына мәктәптә, юғары уҡыу йортонда уҡытыусы булып эшләгән кеше. Үҙегеҙ яҙыусы ла, драматург та, тел белгесе лә. Образлы тел, әҙип теле хаҡында ниҙәр әйтергә мөмкин?**

**Суфиян ПОВАРИСОВ:**

– Был өлкә күптәндән ентекле өйрәнелә. Мәҫәлән, рус классиктарының (А. С. Пушкин, М. Ю. Лермонтов, М. Е. Салтыков-Щедрин, Н. Г. Чернышевский, Л. Н. Толстой, А. П. Чехов, А. М. Горький), украина яҙыусыларының (Иван Франко, Т. Г. Шевченко һ. б.) теле, стиле тураһында күп кенә фәнни хеҙмәттәр нәшер ителгән. Ғәлишер Нәуаи, Ғабдулла Туҡай, Абай Ҡонанбаев әҫәрҙәренең сәнғәтсә эшләнеше өйрәнелгән. Егерменсе быуаттың 60-сы йылдарында “Вопросы литературы” журналында әҙәби әҫәрҙәрҙең тел-стиле хаҡында бәхәс-дискуссия ойошторолдо. 1966 йылда Төркмән Фәндәр академияһында “Развитие стилистических систем литературных языков народов СССР” тигән тема буйынса бик файҙалы конференция булып үтте.

Үткән быуаттың икенсе яртыһында әҙәби әҫәрҙәр теле, яҙыусылар теле мәктәптәрҙә лә уҡытыла башланы. Дүртенсе, бишенсе синыфтарҙа уҡ балаларға сағыштырыу, метафора, эпитет, йәнләндереү тураһында башланғыс мәғлүмәт бирелә, фразеологик берәмек, мәҡәл-әйтем өйрәнелә. Юғары синыфтарҙа образлылыҡ, идеялылыҡ, эмоциональлек донъяһына инеп китәләр. Автор хикәйәләүе,

персонаждар телмәре, поэтик синтаксис кеүек ҡатмарлыраҡ күренештәргә иғтибар ителә. Юғары уҡыу йорттарында иһә әҙәби әҫәрҙәр телен өйрәнеү буйынса ла курс эштәре, диплом эштәре яҙыла, махсус курстар, семинарҙар үткәрелә. Шуларҙан сығып, академик В. В. Виноградов вуздарҙа яҙыусылар телен махсус фән булараҡ өйрәнергә ҡуша. Маҡсатына иреште талантлы ғалим!

Шулай ҙа фәндең аталышында теүәлһеҙлек сире бар әле. Башҡорт дәүләт педагогия университетында ул башта “Лингвистический анализ художественного текста” (“Әҙәби әҫәрҙәр теленә лингвистик анализ”) тип йөрөтөлдө. Шуға яҡын “Практик стилистика” хис-тойғо менән бәйле. Лингвистик анализ ваҡытында уҡытыусы уларға ныҡ иғтибар итмәй. Яҙыусылар телен өйрәнеү, – академик В. В. Виноградов әйткәнсә, телгә лә, әҙәбиәткә лә яҡын торған фән. Ләкин тегеһенә лә, быныһына ла ҡарамай. Айырым фән булыуҙы дәғүә итә. Ярай, шөкөр, маҡсатҡа ирешелде. Ә инде “лингвистик анализ”ды “филологик анализ” тип төҙәтергә тура килде. Юғарылағылар беҙҙең ҡыйыулыҡҡа ҡаршы килмәне. Сөнки “филолог” һүҙе, киң күңелле кешеләй, телде лә, әҙәбиәтте лә үҙ эсенә ала.

Кем шөғөлләнергә тейеш яҙыусылар телен өйрәнеү менән: телсеме, әҙәбиәтсеме? Был – беҙҙең икмәк тип, ең һыҙғанып тигәндәй, әҙәбиәтсе был дилбегәгә тотонғайны, тегеһе шартлап өҙөлдө лә ҡуйҙы. Дилбегә өҙөклөгөн телселәр ялғап ебәрҙе. Мәсьәлә шунда. Әҙәбиәтсе башта образ тураһында уйлай. Уй уны образдан һүҙ-һүрәткә сәйәхәт иттерә. Һүҙ-һүрәттең тамыры ғына түгел, нигеҙе лә, төрлө грамматик саралар ярҙамында ҡатмарландырылып ойошҡан бер бөтөн лексик-семантик мәғәнәһе лә бар. Ул мәғәнәләр донъяһында ваҡыт-ваҡыт асыҡлауы ҡыйын булған өслүби (стилистик), образлылыҡ гәүһәрҙәр йәшеренгән. Бының серен асып һалырға “ҡоро” әҙәбиәтсенең көсө етмәҫ. Шуға күрә әҙәбиәтселәр, тупаҫ итеп әйтһәк, был етди шөғөлгә ҡул һелтәне. Телсе образлылыҡты һүҙҙең тамырынан, нигеҙенән, морфологик сараларынан эҙләй. Икенсе төрлө әйтһәк, уның алтыны һүҙҙән образға сәйәхәт итә. Был күңел сәфәре улар өсөн емешле булды.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Шулайҙыр. Әммә әҙәби әҫәрҙе телсе күҙлегенән генә өйрәнеү әлеге лә баяғы бер яҡлылыҡҡа этәрә...**

**Суфиян ПОВАРИСОВ:**

– Эйе. Шуның өсөн дә һуңғы йылдарҙа “яҙыусы теле”, “әҙәби әҫәрҙәр теле”, “әҙәби тел тарихы” тигән терминдар ҡулланыла башланы. Беренсеһе айырым әҙипкә ҡарай, икенсеһе үҙ ҡоласына бөтә яҙыусыларҙы һыйҙыра ала, өсөнсөһө шулар нигеҙендә барлыҡҡа килгән фәнде тәшкил итә. Мәгәр уларҙың өсөһө өсөн дә тикшереүсенең тел һәм әҙәбиәт фәне маһиры булыуы мотлаҡ. “Язык Толстого”, “Язык Пушкина”, “Язык Лермонтова” тигән игеҙәк атамалар рус филологтарын да ялҡытты шикелле. Рус ғалимдары тел йәки әҙәбиәтсе өсөн махсус тема табыуҙы хупланылар. Б. Н. Головин “Об изучении языка художественных произведений” (1962 г.) тигән хеҙмәтендә телсе өсөн шундай темалар тәҡдим итә: “Язык романа А. С. Пушкина “Евгений Онегин”, “Категория времени в русской художественной речи XIX века”, “Славянизмы в поэзии Державина” һ.б. Әҙәбиәтселәр өсөн: “Образ Татьяны Лариной и языковые средства романа”, “Лирический герой К. Симонова и язык поэта”, “Роль сравнительных оборотов в литературном формировании образа Чичикова” һ.б. Бында проблема төрлөлөгөнә һикереш һиҙелә. Шулай ҙа уйламайынсараҡ һикереү сире бар. Әҙәбиәтселәр өсөн тәғәйенләнгән “Роль языковых средств в формировании образной системы рассказов К. Паустовского”, минеңсә, телселәр өсөн ҡулайыраҡ.

Яҙыусы телен өйрәнгәндә тикшереүсе ғалим үҙен серле, ҡуйы, ҡалын урмандарҙа, хуш еҫ бөркөп торған сәскәле болондарҙа йөрөгәндәй, Ағиҙел, Дим, Ҡариҙел йылғаларына ҡарап моңайғандай хис итә. Быны йөрәккә, күңелгә, бөтә тәнмөсәгә, ҡанға әҙәби әҫәрҙең эстетик тәьҫире тип ҡарарға кәрәктер. Ниндәй йөрәк бит әле ул? Урал батырҙыҡы, Йософ Баласағуниҙыҡы, Ҡол Ғәлиҙеке, Салауат Юлаевтыҡы, Аҡмулланыҡы, Туҡайҙыҡы, Ғәлимйән Ибраһимовтыҡы һымаҡ иманлы, ғәййәр, айбарлы, ялҡынлы, утлы йөрәкме? Ғаләм йөрәге, йондоҙҙар йөрәге, ҡояш йөрәге, ер йөрәге бар. Әҙәби әҫәрҙәр үҙәгендә – кеше йөрәге. Был йөрәктең ҡан тамырҙары әлеге ғаләм, йондоҙ, ҡояш, ер йөрәге тамырҙары менән тоташ. Яҙыусы был серлелекте ҡәләм оҫтаһы булараҡ асыҡлай. Сөнки уның ҡәләм осонда төрлө яҙмышҡа дусар булған кеше образы эленеп тора.

Был ҡатмарлы сағыштырыуҙарҙы мин нәфис әҙәбиәт өслүбе хәсиәтенә яраҡлаштырып ҡулланам. “Художественность литературы. Поэтика. Стиль (М.: Наука, 1975, с. 16)” тигән хеҙмәтендә Н. К. Гей уны фәнни өслүб хосусиәте ҡалыбына һалып аңлата: “...при исследовании художественности мы проникаем внутрь замкнутой системы, сложного и целостного организма, который предстает живым образованием бесконечных взаимодействий и связей, и наша мысль постоянно проделывает путь от слова к образу, от формальной структуры к художественной правде и концепции произведения, а затем от общего содержания возвращается через все звенья формы к материалу, организованному в структуре целое, подчиненное единому принципу”.

Рус филологтарының “от слова к образу” *(һүҙҙән һүҙ-һүрәткә)* тигәне еңеүсе ғибәрә булып сыҡты. Хәҙер яҙыусылар телен өйрәнеү менән тел ғалимы күберәк шөғөлләнә. Әммә уларҙа, әле әйткәнсә, бер яҡлылыҡҡа китеү бар. Яҙыусының һүҙ хазинаһын, фразеологик берәмектәрен, һүрәтләү-тасуирлау сараларын, поэтик синтаксисын һәм башҡа яҡтарын тикшергәндә, сәнғәтлелек мәсьәләһе, ҡағылған етем бала һымаҡ, бер яҡ ситтә үгәйһетелеп ҡала, “ҡоро” лингвистик анализ өҫтөнлөк ала. Был өҫтөнлөк, аш өҫтөндәге тәмһеҙ өрөләй, күңелдә китә. Р. Сыздыкованың Абай теле, С. Әмировтың Туҡай теле тураһында яҙған докторлыҡ диссертациялары шулай булып сыҡты. В. Хаҡов һәм Ғ. Сәйетбатталовтың яҙыусылар телен тикшергән хеҙмәттәрендә эстетик зауыҡҡа, һүрәтләү-тасуирлау сараларын әҙәби әҫәрҙең идея йөкмәткеһенә бәйләп ҡарауға аҙ иғтибар ителә.

Рус филологтарында ла был етди, ауыр, сетерекле мәсьәләнең асылы һаман асыҡланып бөтмәй әле. Сөнки уның методик айышы ныҡлап өйрәнелмәгән. Шуға күрә, ожмах ишегенә ҡурҡа-ҡурҡа ғына барған әрүах һымаҡ, был фәнгә ҡәләм төртөргә шөрләберәк киләләр.

Төрки телле ғалимдар донъяһында ла эштәр ал да гөл түгел. Бына нимә ти ҡаҙаҡ филологы А. И. Исхаҡов: “Проблемы развития стилистической системы казахского литературного языка до сих пор не изучены. Некоторые имеющиеся работы, посвященные изучению языка произведений отдельных писателей и поэтов, пока еще не могут стать основанием для изучения исчерпывающих выводов и серьезного обобщения». Үзбәк ғалимдары У. Т. Тургунов, У. Н. Насыров: “Стилистика художественной литературы остается еще мало исследованной областью узбекской филологии. Если не считать отдельных работ и статей, то можно утверждать, что узбекское художественное творчество в стилистическом плане еще не изучено на уровне современных требований”. Татар ғалимы М.Ә. Зәкиев: “...анализ развития татарского литературного языка является самой

отсталой областью филологической науки”. Башҡорт филологияһында ла был мәсьәлә оҙаҡ ваҡыт ҡыҙғаныс хәл менән килешеп йәшәне.

Дөрөҫ, һүҙ сәнғәтенә иғтибар итеү төрки телле халыҡтарҙа ла күптән килә. Быны тормош, йәшәйеш, төрлө тарихи, ижтимағи шарттар талап итә. 922 йылда, әйтәйек, ислам дине ҡабул ителә. Шуға бәйле рәүештә яҙма ғәрәп графикаһына күсерелә. Төрки телдәрҙә ғәрәп һүҙҙәре Ағиҙел тулҡындарылай ағыла башлай.

Шул осорҙа уҡ (унынсы быуаттарҙа), унан һуң да, ҡолоҡ йылдарында көйгән үләндәргә ҡыҙғанып ҡарағандай, төрки телдәрҙең киләсәк балҡышына шикшөбһә белдереү касафаты башлана. Төрки телдәр (үзбәк, төркмән, әзербайжан, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, башҡорт, татар һ.б.) ярлы, улар менән әҙәби әҫәр ҙә, фәнни хеҙмәт тә яҙып булмай, йәнәһе. Шул замандың атаҡлы филологы Мәхмүт Ҡашғари, һүҙ төркөмдәренә грамматик анализ яһап, төрки телдәрҙең ғәрәп теленән һис тә ҡайтыш булмауын иҫбат итә.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Башҡорт әҙәби теленең бөгөнгө торошон өйрәнеүгә туҡталайыҡ әле.**

**Суфиян ПОВАРИСОВ:**

– “Хәҙерге милли тел” тип һөйләшәбеҙ. Милләт булып ойошоу өсөн халыҡтың бер урынға (территорияға) тупланыуы, тел дөйөмлөгө, шул халыҡтың мәҙәниәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән психологик үҙенсәлек, иҡтисади хосусиәт булыу шарт. Һәр хәлдә, философтар, тарихсылар, филологтар “милләт” һүҙенең ошо хәсиәтенә тоғролоҡло булырға тырыша. Был тырышыу гәзит, журнал сәхифәләрендә, төрлө фәнни хеҙмәттәрҙә яҡтыртыла.

Әҙәби әҫәрҙәр телен, яҙыусылар телен өйрәнеүҙе Башҡорт дәүләт университетында бөтә донъяға танылған атаҡлы ғалим-тюрколог, профессор, яҙыусы Ж. Ғ. Кейекбаев ныҡлап башлап ебәргәйне. Иң әүәл башҡорт яҙыусыларының һүҙ ҡулланыу оҫталығы, был өлкәлә осрап торған хаталар тураһында Яҙыусылар берлегендә сығыш яһаны ул. Был сығыш “Ағиҙел” журналында ла баҫылып сыҡты. 1993 йылда “Башҡорт әҙәби теленең тарихы” нәшер ителеү (Өфө, “Китап”, авторҙары – Э. Ф. Ишбирҙин, И. Ғ. Ғәләүетдинов, Р. Х. Халиҡова) буласаҡ яңы фән юлына йәшел сиҙәм булып түшәлде.

Башҡорт менән татар ҡан-ҡәрҙәшлеген йәнә нығытыу өсөн булдырылған “Ҡәрҙәшлек кәштәһе” ойошторолоуы һәр беребеҙгә мәғлүм. Йәғни башҡорттарҙың иң аҫыл әҫәрҙәре Ҡазанда татар телендә, татарҙарҙыҡы Өфөлә башҡорт телендә сығарыла. Уларҙың тел, стиль үҙенсәлектәрен тикшергәндә лә әлеге ҡан-ҡәрҙәшлек сифаты асыҡлана. Әллә яҙмыш, әллә яңылыш, тигәндәй, был ауыр йөк минең яурынға ла төштө. Ҡол Ғәли, Салауат Юлаев, Мөхәммәдйәр, Утыҙ Имәни, Ғ. Ҡандалый, Ғ. Туҡай, Ғ. Ибраһимов, М. Ғафури, Ғ. Бәширов, Һ. Таҡташ, М. Йәлил, С. Хәким, К. Тикчурин, Н. Иҫәнбәт, С. Ҡудаш, М. Кәрим, Р. Бикбаев, Ж. Кейекбаев, Н. Асанбаев, М. Ғәли, Р. Ғарипов, И. Ғиззәтуллин, С. Мифтахов, Ә. Әминев, С. Шәрипов, Р. Камал, Дәрдмәнд, И. Юзеев, Р. Миңнуллин, Ғәли Ибраһимов, Р. Сафин, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Наил Ғәйетбайҙарҙың һүҙ алтындары тураһында махсус фәнни мәҡәләләр яҙып баҫтырҙым. Өфөлә “Һүҙ һәм сәнғәтле телмәр”, Ҡазанда “Мәктәптә әҙәби әҫәрҙәр телен өйрәнеү” тигән китаптарым донъя күрҙе. Әле яңы китап әҙерләү менән мәшғүлмен. 40 яҙыусының 20-һе – башҡорт, 20-һе татар буласаҡ. Өфөлә башҡорт телендә, Ҡазанда татарса сығарырға өмөтләнәм. Дуҫлыҡ кәштәбеҙ йөрәктәребеҙҙе йәнә нығыраҡ бәйләһен, тим.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Был йүнәлештә актуаль ҡала килгән проблемаларҙы атап булмаҫмы?**

**Суфиян ПОВАРИСОВ:**

– Проблемалар күп. Шуларҙың береһе – әҙәби телдең диалекттарға мөнәсәбәте. Һәр милләттең, милли телдең еңеп йәшәүе өсөн Урал батыр ныҡлығы кәрәк. “Айбарлы ирҙәр бар сағында, баҙынмаҫ дошман илемә”, – тип әйтергә яратҡан боронғо ата-бабаларыбыҙ. Айбарлы теле булған милләт күкрәк киреп йәшәй. Бөгөнгө милли телдең тамырҙары ырыу, ҡәбилә, халыҡ телендә. Ул уны үҙ балаһылай ҡәҙерләп, һөйөп, иркәләп үҫтерә. Милли әҙәби тел уны эшкәртә, игәүләй, ҡайыҙлай. Сөнки тел төҙөклөгөндә милләттең аҡ йөҙө лә сағыла.

Яҙыусылар телен әҙәби телгә, диалекттарға мөнәсәбәттә тикшереү ҙә ҡыҙыҡлы. Н. Г. Чернышевский былай ти: “…изучение языка писателей дает основания… учить влияние одного писателя на другого; можно со значительной вероятностью определить область, откуда приходил писатель, который отразился в его произведениях. Кроме того, изучение языка писателей известной эпохи должно дать представление о грамматическом строе языка в эту эпоху”. Өҫтән ҡарағанда, былары ла кәрәк. Ләкин уның “йәшел сиҙәме” артыҡ бер яҡлы. Гөрләп торған баҡсаның бер мөйөшөндә ҡыҫылып ҡалған тар урын һымаҡ ҡына. Шул хаҡта әйтә академик В. В. Виногардов: “…здесь ставятся и формируются лишь частные и притом вовсе не специфические, не основные задачи изучения языка художественной литературы. Художественные произведения рассматриваются главным образом как памятники истории литературного языка и исторической диалектологии. Проблемы внутренних признаков, своеобразных качеств языка самой художественной литературы, вопросы о специфических особых приемах и принципах их исследования тут еще даже не поставлены”.

Диалектизмдарҙы йәки урындағы һүҙҙәрҙе артыҡ күп ҡулланыу ашҡа тоҙҙо кәрәгенән артыҡ һалыу менән берҙер ул. Тоҙ күп төшһә – аштың тәме китә. Диалектизмдар әрһеҙләнеп әҫәргә күп керһә – әҙәби телдең төҫө боҙола. А. А. Потебня һүҙҙәрҙәге эске мәғәнәне “внутренняя форма” тип атай. “Форма” һүҙе әлеге йәшел сиҙәмде төҫһөҙләндерә түгелме? Шуны уйлаптыр, В.В. Виноградов “план содержания”, “план выражения” тигән терминдар тәҡдим итә. Быныһы “Һүҙҙең эсе – алтын, тышы көмөш” (Абай ғибәрәһе) тигәнгә тура килә. Гәрсә ҡолаҡ ҡабул итһә лә, йөрәккә ятмай ул өс термин. Әйтелгәнсә, әҙәби әҫәр матурлыҡ, нәфислек, эстетика менән бәйле. Шуны әйтеү ҙә урынһыҙ булмаҫ кеүек. Ул өс термин төрлө лексик мәғәнәле һүҙҙәрҙең (исем, сифат, рәүеш, ҡылым һ.б.) өслүби хосусиәтен асыҡлау йәһәтен генә күҙ уңында тота. “Внутренняя форма”, “план выражения”, “план содержания” (эске мәғәнә, тышҡы сара) айырым һүҙҙәрҙә генә түгел, сағыштырыу, метафора, эпитет, йәнләндереү һ.б. һүрәтләү-тасуирлау сараларында ла, фразеологик берәмек, мәҡәл, әйтем, төрлө поэтик биҙәктәрҙә лә бар. Ул ғәжәп ҡатмарлы. Шуғамылыр һаман фәнни яҡтан өйрәнелмәйенсә ҡала килә.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Конкрет яҙыусының теле, әлбиттә, ул йәшәгән осор менән ныҡлы бәйле… Ҡәләмдәштәр менән аралашыу, остаз итеп ҡабул иткәндәрҙән өйрәнеү…**

**Суфиян ПОВАРИСОВ:**

– Шулай. Әйтәйек, Болғар осоро теленең торошон белеү өсөн Ҡол Ғәлиҙең "Ҡиссаи Йософ" поэмаһының телен тикшереү мотлаҡ. Шулай ҙа фәндең вазифаһы унын менән генә сикләнмәй. Ул яҙыусының үҙенә генә хас индивидуаль өслүбен асыҡлау өсөн дә кәрәк. Асыҡланыу бер милләт эсендәге ҡәләм оҫтаһының икенсе ҡәләм оҫтаһы өслүбенә оҡшаш булыуы менән дә бәйле. Ф. Исәнғолов, мәҫәлән, С. Агиш өслүбе йоғонтоһонда яҙыуы тураһында әйтә торғайны. Башҡорт дәүләт университетындағы бер осрашыуҙа Ғ. Бәширов Ғ. Ибраһимовтан һөйләм төҙөргә, Ә. Еники һүҙҙәрҙең эске мәғәнәһен (алтынын) аңлауға Ф. Хөсни тел юморлығына өйрәнеүҙәре тураһында һөйләгәйнеләр.

Башҡа милләт һүҙ сәнғәте оҫталарына эйәреү ҙә бар. Д. Исламов, әйтәйек, М. Шолохов талантына табынып яҙа. Француз яҙыусыһы Эмиль Золя "Жерминаль" романын яҙыр алдынан Л. Н. Толстой янына кәңәшкә килә. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Ер шарындағы барлыҡ илдәр бер-береһе менән мөнәсәбәттә йәшәгәндәй, яҙыусыларҙың индивидуаль стиле лә тора-бара дуҫлашып китә. Ә инде ғөмүмән алғанда, тел-стилдә гәрсә милли рух һаҡланһа ла, әлеге "дуҫлашыу" дауам итә, милли рух һүҙҙәр, фразеологизмдар, мәҡәл-әйтемдәр, төрлө һүрәтләү-тасуирлау саралары ҡулланыуҙа, һөйләм төҙөүҙә һәм башҡа үҙенсәлектәрҙә сағыла. Һиндостанда, мәҫәлән, ҡыҙҙарҙың матур күҙе һыйыр күҙенә сағыштырыла. Сөнки унда һыйыр изге мал, изге йән булып иҫәпләнә. Дөйә балаһы башта бик матур, күркәм, нәфис була. Күҙ теймәһен тип, ҡырҡ көнгә саҡлы уны кешегә күрһәтмәйенсә һаҡлайҙар, төнөн йондоҙҙарҙан да йәшереп тоталар. Ысынлап та, бәләкәй саҡта бик матур икән ул дөйә балаһы. Шуға күрә көнсығыш төрки халыҡтарҙа йәш ҡыҙҙарҙың һылыу, нәфис, гүзәл кәүҙәһе дөйә балаһында булған һәммә нәзәкәтлелектәр менән сағыштырып тасуирлана. Башҡорттарҙа, татарҙарҙа йылылыҡты май менән сағыштырыу ғәҙәте бар: "Өйгөҙ бигерәк йылы икән – май кеүек".

Абайҙың "Һүҙҙең эсе – алтын" тигәне бар. Ул башҡа милләттәрҙә лә ҡулланыла. М. Ғафури "Шағирҙың алтын приискаһында" тигән әҫәрендә "алтын" һүҙе тура мәғәнәле. М. Ғафури 1905 – 1917 йылдарҙа яҙған әҫәрҙәрендә "алтын" һүҙен егермегә яҡын урында ҡуллана. Һәр береһендә ул яңы мәғәнә аңлата. Тыуған илде, тыуған тупраҡты ҙурлау: " И, ерем, алтын кеби күренә һинең тупраҡтарың" ("Һабансының йыры"); хәҡиҡәтте белдереү: "Ер өҫтөндә ҡасан бөтөр алтын, шунда сығыр хаҡлыҡ" ("Хәҡиҡәт"); һатлыҡ йәндәрҙе фаш итеү: "Кем бар һуң һары алтынға һатылмаған, үҙ-үҙен алтын менән шат ҡылмаған" ("Һатлыҡтар"); намыҫ, выждан, күңел сафлығын һаҡлау: "Выжданымды һатмайым алтын, көмөш һәм ынйыға" ("Выждан теләге") һ.б. М. Горькийҙың "Детство", "В людях", "Мои университеты" тигән әҫәрҙәрендә "алтын" һүҙе 50-ләп урында ҡулланыла.

Дәрдмәндтең тел-стиле хаҡында яҙған фәнни мәҡәләмде "Дәрдмәндтең һүҙ алтыны" тип атағайным. 2010 йылдың июль айында "Ҡыҙыл таң» гәзите Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың Дәрдмәнд тураһында "Алтын тамырлы ижад» тигән бик етди, йөкмәткеле, аң-аҡылға, хис-тойғоға бай биш мәҡәләһен баҫтырып сығарҙы.

Бындай миҫалдарҙы С. Юлаев, Аҡмулла, С. Агиш, Б. Бикбай, З. Биишева, Һ. Дәүләтшина, М. Кәрим, Н. Нәжми, Н. Асанбаев, Р. Ғарипов, Р. Бикбаев, Р. Назаров, Х. Назар, Н. Ғәйетбай һ.б. һүҙ сәнғәте оҫталары әҫәрҙәренән дә килтереп була. Шөкөр, бай, матур, гүзәл тәбиғәтле, алтынлы, һандуғаслы, баллы Башҡортостан ере яҙыусылар теленә алтын асҡыс биреп тора. Ғ. Ибраһимов,

Ә. Еники, Ф. Кәрим, И. Юзеев, Н. Фәттәх кеүек татар әҙиптәрен дә ошо шәфәғәтле Башҡортостан ере ҡәләм оҫтаһы итте.

Былар менән мин яҙыусылар телен өйрәнеүҙең әһәмиәте ҙур икәнлеген әйтергә теләйем.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Художестволы әҙәбиәткә генә түгел, ғөмүмән, телгә иғтибарҙы арттырыу өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?**

**Суфиан ПОВАРИСОВ:**

– Элек (иҫке Русия мәмләкәтендә) техник вузға инеүселәр имтиханды иң әүәл һүҙ сәнғәте буйынса биргән. Техник вузға булған физика, математиканы сәйнәп килгән инде ул, йәнәһе. Ә бына буласаҡ инженерҙың эске донъяһы, эстетик зауығы, фекер йөрөтөү ҡөҙрәте, кешелеклелек сифаты, мәҙәни ғилеме ни дәрәжәлә икән? Шуларҙы асыҡлау өсөн һүҙ сәнғәте ҡылына сиртеп ҡарағандар. Моңо булһа ҡылдың, сират күперенән юғары уҡыу йортона үтә алған буласаҡ инженер. Юҡ икән – кире борғандар. Бәлки, шуны уйлаптыр, беҙҙә лә һуңғы ваҡытта буласаҡ инженер, врач, юрист, экономист һ.б. фән әһелдәре өсөн һүҙ сәнғәте буйынса махсус дәрестәр ойошторола башланы. Бирһен Хоҙай. Әйткәнем фәрештәнең “амин” тигән сағына тура килһен!

Яҙыусының тел-стиль үҙенсәлеген тикшереү – ғәжәп ауыр шөғөл. Быны өсөн был фәндең йәнен, ҡан йөрөшөн, йөрәген аңларҙай махсус белгестәр әҙерләргә кәрәк. Академик В. В. Виноградов кеүектәр тюркология донъяһында һаман юҡ әле. Булыр. Өмөт итәйек. Шайтан ғына өмөтһөҙ була. “Телдең лексик хазинаһы, грамматик төҙөлөшө барлыҡ яҙыусылар өсөн уртаҡ, яҙыусының индивидуаль стиле шул уртаҡлыҡты үҙенсә ҡулланыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә”, – тип ябай ғына әйтәбеҙ ҙә ҡотолабыҙ. Үҙенсәлектең йөрәге бар. Ана шул йөрәкте таба белеү мотлаҡ.

Мәсьәлә шунда. Һәр яҙыусының (прозаик, шағир, драматург) үҙ өслүбе йәки стиле булған кеүек, ул хосусиәтте фәнни ерлектә тикшереүсе филологтарҙың да үҙ маһирлығы булмайынса ҡалмай. “Кол Ғәли теле”, “Салауат Юлаев теле”, “Мәжит Ғафури теле”, “Мостай Кәрим теле”, “Һәҙиә Дәүләтшина теле”, “Зәйнәб Биишева теле”, “Рауил Бикбаев теле”, “Рәми Ғарипов теле” тип әйтеү генә мәсьәләнең тамырын асыҡламай әле. Шул тамырҙа йөрәк бар. Йөрәк эсендә – һүҙ гәүһәре.

Яҙыусының тел-стиль үҙенсәлеген тикшергәндә, һүҙ, фраза, мәҡәл-әйтем, һүрәтләү-тасуирлау сараһы һәм башҡаларҙың идея-йөкмәткене асыҡлауына, сюжет-композиция төҙөклөгөн нығытыуға, йәнле картина тыуҙырыуына, уларҙың тышҡы донъя менән бәйләнешенә, автор образына, уның эстетик идеалына иғтибар ителә. Былар менән генә лә эш бөтмәй әле...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Эйе, кешене уратып алған ысынбарлыҡтың сиге юҡ, тибеҙ икән, әҙәм балаһының рухи донъяһы тураһында әйтеп тороу ҙа кәрәкмәй. Был илаһиәтте сағылдырыусы һүҙ сәнғәте лә бер ниндәй ҡыҫаларға, ҡоршауҙарға һыя алмауы, тимәк, тәбиғи. Әммә парадокс шунда: кешелек аҙымлап булһа ла сикһеҙ донъяны асырға, хыялдағыһын ысын итергә ынтыла. Был ынтылышты күрһәтеүҙә лә, һөҙөмтәле итеүҙә лә һүҙҙең, телдең алыштырғыһыҙ роль уйнауы бәхәсһеҙ. Һәр саҡ үҫештә, үҙгәрештәге телдең үҙен, һүҙ сәнғәте серҙәрен өйрәнеү ҙә актуаллеген бер ҡасан да юғалтмаясаҡ.**

# ӨМӨТТӘРҘЕ ҺҮНДЕРМӘЙЕК

*(Йомғаҡлау)*

Баҫмабыҙҙы даими уҡып барыусылар хәбәрҙар: журнал 2010 йылдың сентябренән әлеге һанына тиклем, Башҡортостан яҙыусыларының XV съезына бағышлап, әҙәбиәтебеҙ торошона, әҙәби мөхиттәге проблемаларға бәйле әңгәмәләр ойоштороҙо. Һөйләшеүҙә әүҙем ҡатнашҡан ҡәләмдәштәребеҙгә – әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйеновҡа, Суфиян Поварисовҡа, Факиһа Туғыҙбаеваға, Гөлсирә Ғизҙәтуллинаға, Йомабикә Ильясоваға, Наил Ғәйетбайға, Флорид Бүләковҡа, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайға, Азамат Юлдашбаевҡа, Зәки Әлибаевҡа, Ҡамса Мортазинға, Айһылыу Йәғәфәроваға редакция сикһеҙ рәхмәтен еткерә. Артабан да рухиәтебеҙ хаҡына шәхсән ижадыбыҙҙа ғына түгел, дөйөм башҡорт әҙәбиәте тип янныуҙарыбыҙ бушҡа булмаһын!

Әңгәмәләрҙе башта уҡ күҙаллаған форматта алып барырға тырыштыҡ. Йәшерен-батырыны юҡ: обойма-теҙмәләр, дөйөм хәбәр, бөҙрә һүҙҙәр, шымалау-ялтыратыуҙар артына ышыҡланып, юҡты бар итеп күрһәтергә ынтылыусы бәғзеләрҙең материалын кире ҡайтарырға ла тура килде.

Хаттар, ҡайтауаздар уйландыра. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһынан филология фәндәре кандидаты, доцент Рәйсә Илишева, әҙәбиәтебеҙ тип, ихлас борсолоп, бына ниҙәр яҙа: *«Әңгәмәләрҙә урын алған фекерҙәр рухи булмышыбыҙ, милли мәҙәниәт, әҙәбиәт тарихы хаҡында уйланған бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр. Ошондай тәрән мәғәнәле, ихлас, дөрөҫөн тура ҡарап әйтергә баҙнат иткән һөйләшеүҙең күптән булғаны юҡ ине. Ни ҡамасауланы, тип һорауҙары мөмкин. Уға Ғайса Хөсәйеновтың шунда уҡ урын алған фекере менән яуап бирергә була. Арҙаҡлы ғалимыбыҙ былай ти: «Ағиҙел» ниәтләгән бөгөнгө һөйләшеү бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең, ғөмүмән, рухиәтебеҙҙең торошона, бурыстарына бәйле фекер алышыу матур традицияға, дауамлы йолаға әйләнеп китһә икәнсе». Күпте күргән аҡһаҡал үҙе үк әйтеп торғас, тимәк, ундай йола булмаған, юғиһә, һис юғында уның тергеҙелеүе хаҡында һүҙ барыр ине...*

*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәби тәнҡит бүлеген асыу тәкдимен хупларға кәрәктер. Ихтимал, мәсьәләне хәл итеүҙә был берҙән-бер юл да түгелдер. Мәҫәлән, фәнни-теоретик йүнәлештәге башҡортса айырым журнал булһа, һис артыҡ булмаҫ ине... Яңы журнал идеяһының*

*күптәрҙә тираж, аҡса мәсьәләһе менән бәйле скепсис уятасағын аңлап торабыҙ. Ләкин бындай талап һәм маҡсаттар барыбер ҡуйылырға тейештер. Маҡсат билдәләнмәһә, уны тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләү мәсьәләһе бөтөнләй ҡуйылмаясаҡ бит... Материал мәсьәләһеме? Уның киң әйләнешкә инмәгән бер төрө хаҡында әйтеп үтке килә. Был – әленән-әле яҡлауға сығып торған башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса диссертациялар һәм уларға яҙылған рецензиялар. Һуңғылары әҙәби әҫәргә генә түгел, ә ғилми эштәргә бирелгән баһа улар. Һәр диссертацияға кәмендә 7-8 рецензия яҙыла. Уларҙың журнал варианттары эшләнһә, исмаһам, киң ҡатлам уҡыусылар әҙәбиәт ғилеме, әҙәбиәт тарихы өлкәһендә ниндәй яңылыҡтар булып ятҡанын белерҙәр ине. Ә бөгөнгө көндә диссертация нигеҙендә эшләнгән монографияларҙы ғалимдар үҙ аҡсаһына нәшер итергә мәжбүр, улар әҙ тираж менән донъя күрә, күбеһе 100 дананан да артмай һәм автор эшләгән уҡыу йорто тирәһендә таралып та бөтә. Шулай итеп, әҙәби мөхит тыуҙырырға һәләтле бер ресурс төптө файҙаланылмай. Тамсы тама-тама таш тишә. Ул монографияларҙа көндәлек тәнҡит даирәһенә хеҙмәт итерлек материал тулып ята, тәрән анализ өлгөләре бар. Моғайын, күп кенә яҙыусылар үҙ әҫәрҙәренә буласаҡ кандидаттар биргән баһаны белмәй ҙә ҡалалыр әле. Ә диссертация яҡлауҙарына килгәндә, улар асыҡ режимда үтә...*

*Ғ.Б.Хөсәйеновтың «таш йорттар алдында тирмәләрен ҡороп ултырған башҡорттар» образы иҫкә төшә: әҙәбиәтебеҙҙә яңыға, заманса фекерләүгә мохтажлыҡҡа әсенеп яҙа бит ғалим...»*

Хәйбулланан «Ағиҙел»дең бер һанын да ҡалдырмай уҡып барыусы Дауыттың да (фамилияһын күрһәтмәгән) бөгөнгө әҙәбиәтебеҙгә ҡағылышлы теләктәре иғтибарға лайыҡ: *«Яңы ғына сыҡҡан әҫәрҙәргә бәйле һүҙ ҡыҙыҡһыныу уята. Ваҡытында әйтеп барырға тырышығыҙ әле...»*

Әбйәлилдән, Ҡыйғынан, Балтастан килгән хаттарҙа һөйләшеүҙең актуаллегенә баҫым яһала, ҡыйыу ҡараштары өсөн редакция хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт белдерелә.

Исемен дә, ҡайҙан булыуын да әйтеп тормаҫтан телефондан берәү (тауышына ҡарағанда урта йәштәрҙәге) былай тине: «Беләһегеҙме: мине Флорид Бүләковтың: «Дирижер булып тыуып та аяуһыҙ яҙмыш арҡаһында фермала эшләргә мәжбүр ителгәндәрҙең ниндәй ғазаптар аша был донъя менән бәхилләшеүен асыҡ беләмдер кеүек» тиеүе тетрәндерҙе... Уйланмай йәшәйбеҙ, ә уйланһаң, уйылып китерлек...»

Ғөмүмән, байтаҡ булды шылтыратыусылар. Әңгәмәләрҙе хуплап ҡабул итеүҙәрен, теләктәш булыуҙарын, милли матбуғат, телебеҙ, әҙәбиәтебеҙ тип борсолоуҙарын еткерҙеләр. Әҫәрҙәрҙең тормошсан булырға тейешлеге хаҡында һүҙ күп булды.

Кимәлде һаҡлаусы әҙәбиәт тормоштоң художестволы сағылышы булыуы аксиома. Художестволы, образлы сағылышы! Тимәк, ул донъяуи ысынбарлыҡты дөйөмләштереп (типиклаштырып), дөрөҫ күҙалларға, тормошто киңерәк, тәрәнерәк аңларға, матурлыҡты күрә белергә ярҙам итә, әшәкелеккә ҡарата нәфрәт тыуҙыра. Художестволы дөрөҫлөк менән ысынбарлыҡ тулыһынса тап килә алмай. Әммә «шағирәнә ялған»дың да (Ғ.Туҡай) ышандыра, художестволы әҫәргә ҡуйыла торған талаптарға

яуап бирә алыуы, булған хәлде бәйән итһә лә, ниндәйҙер материалдың художестволы әҫәр булараҡ ҡабул ителмәүе, ҡабул итерлек булмауы бар. Алдашырға ярамай. Һүҙ уйнатып, шыма һөйләп, халыҡты ҡаҡҡа ултыртыу ғәфү ителмәҫлек гонаһ. Шундай таҫма телдәр, оҙон ҡулдар, һарыҡ тиреһе ябынған бүреләр халыҡты һуңғы сиккә еткереп килә бит... Әлбиттә, ыңғайға үҙгәрештәр өсөн аныҡ эш кәрәк. Ләкин аныҡ эш алдынан дөрөҫлөккә ҡурҡмай, тура ҡарайыҡ. Шунһыҙ булмай. Хәҡиҡәт хаҡына утҡа ингәндәр, дарға атлағандар, Себер һөрөлгәндәр... «Һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем» принцибы менән йәшәһәк, түбән тәгәрәү дауам итәсәк. Бөгөнгө хәлебеҙ менән килешеп йәшәү – йән әшәкелеге ул.

Халыҡты һуңғы сиккә еткермәҫкә, һуңғы сиккә етмәҫкә, тормошта барыбер ҙә ғәҙеллек еңеренә, изгелектең тантана итәсәгенә өмөттәрҙе һүндермәҫкә ине...

*Бер ҡәләмдәш әңгәмәләргә ҡарашын редакция хеҙмәткәре аша еткерҙе: «Әңгәмәләрҙе ойоштороусы үҙ фекерен уҡыусыларға көсләп таға...».*

Фекерҙе белдерергә мөмкин. Уны ҡабул итергә йә итмәҫкә мөмкин. Уйланғаны, зиһенлеһе ни өсөн ҡабул иткәнен йә итмәгәнен нигеҙләй алыр. Ә уйһыҙынан, моңһоҙонан, үҙ аршынынан башҡаны белмәгәненән ниндәйҙер фекерҙе ҡабул итһә лә, итмәһә лә фәтеүә булмаҫ. Әгәр ҙә инде, һин был фекерҙе миңә көсләп тағалар, тиһең икән, тимәк, үҙеңдең төплө генә фекерең юҡ, үҙ дәғүәләреңде белдерерлек ныҡлы нигеҙең юҡ, күпселекте ылыҡтырырҙай дәлилең юҡ. Тик үҙеңдең үшәнлегеңә, үжәтлегеңә, кирелегеңә барып, дәлилле ҡарашты уйлап та тормай (сөнки уның өсөн аҡылды эшкә егергә, мәғлүмәтле булырға кәрәк шул) инҡар итеү генә бар. Тәрәнгәрәк төшөү өсөн был ғына ла аҙ әле. Бында һүҙ уйнатып ҡына ҡотолоп булмай – һүҙ артынса эш кәрәк, ә икеһе өсөн дә йөрәкле, ғәҙел булыу зарур. Ә һайыраҡ ерҙә йөҙөү ҡурҡыныс түгел. Сәпелдәргә, һыу сәсрәтергә мөмкин. Хатта һыуҙы болғатырға ла була, ә унда инде ысын «балыҡсы»ға хөрриәт... Кемдер хатта «Ағиҙел»де болғатырға теләй. Барып сыҡмаҫ! «Ағиҙел» – ул бөгөнгө әҙәбиәт. Ә бөгөнөбөҙ ал да гөл тип әйтә алабыҙмы? Беҙ упҡынға килеп еткәнбеҙ! Шул хәлебеҙҙә лә маҡтанышып ҡына йөрөйөкмө ни?! Янабыҙ! Саң ҡағырға (Бить в колокола!) кәрәк, ә туй дөңгөрөнә ваҡыты ҡулай түгел. Байрамдар ҙа булыр, тик башта донъябыҙҙы ипкә-һапҡа килтереп, ил-йортобоҙҙоң ҡотон ҡайтарайыҡ.

Фекергә килгәндә... Берәй художестволы әҫәрҙе фекерһеҙ йәки идеяһыҙ күҙ алдына килтереп буламы? Тик һәләтле әҙип уны образ аша еткерә. Был образлы фекерҙе лә бит кемдеңдер ҡабул итмәүе мөмкин. Һәм был ҡабул итеү-итмәүҙең сәбәптәре төрлөсә буласаҡ.

Ә теге йәки был идеология хөкүмәт әһелдәре, сәйәсмәндәр тарафынан көсләп тағылмаймы ни, тиерҙәр. Бында ла шул уҡ ҡануниәт хөкөм һөрә. Тик масштабтар икенсе лә, мөмкинлектәр башҡаса (көслөнөкө – дөрөҫ!). Сөнки бында ла башы булған кеше (барон Мюнхгаузен әйткәнсә, баш иңдә генә бит – уйланыр кәрәк) бер нәмәне лә уйламай эшләмәҫ, үҙен көтөүҙәге һарыҡ хәленә төшөрмәҫ, кешелек бәҫен (башҡортлоғон!) һаҡлар. Тап ана шул үҙ аллы фекерләй белмәү, уйланырға теләмәү (сөнки үҙ аллы фекерләргә ынтылыш артынса уҡ эшмәкәрлегең өсөн яуаплылыҡ тойғоһо ла ҡалҡып сығасаҡ) арҡаһында бит хатта ки ижад әһелдәре лә

теге йәки был идеяға һуҡырҙарса хеҙмәт итте, ә уйлылары кәрәк-кәрәкмәгән идеология сиктәрендә лә халҡы өсөн мөмкин булғанды эшләргә тырышты. Ә тамаҡ хаҡына, дан-шөһрәт бәрәбәренә ҡараны – аҡ, аҡты – ҡара тиеүселәр булды һәм киләсәктә лә уларҙың тамыры ҡоромаҫтыр.

Һүҙҙә лә, эштә лә иң мөһиме – ниәттәрҙең изге булыуы! Диндең – йоламы ул, намаҙлыҡҡа баҫыумы, ураҙамы – барыһы алдынан ниәт ҡылыуҙы талап итеүе осраҡлы түгел. Ниәттәребеҙ изге булһа, ҡайҙалыр, ҡасандыр төрлө сәбәп менән ебәргеләгән хаталарыбыҙҙы үҙебеҙ үк асыҡлай алырбыҙ һәм үҙебеҙ үк төҙәтербеҙ.

Ғөмүмән, редакция, әңгәмәләрҙе ойоштороп, ҡуйылған маҡсаттарға иреште, тип иҫәпләйбеҙ. Ғайса Хөсәйеновтың: «Бындай һөйләшеүҙәр матур традицияға әйләнһен ине»,– тип теләктәр белдереүенең, Рәйсә Илишеваның уны күтәрмәләп алыуының бойомға ашыу-ашмауы ҡәләмдәштәребеҙгә, әҙәбиәтебеҙҙең артабан ниндәйерәк юлдан китеүенә бәйле. Редакциянан эш ҡалмаҫ. Асылда, бөгөнгө «Ағиҙел» – әҙәбиәтебеҙҙең барометры ул. Барометрҙың теүәл эшләүен теләп кенә тынысланмайыҡ, ә көн (әҙәбиәт!) торошон билдәләр әҫәрҙәр ижад итәйек, уларҙы мәлендә күрә, тәғәйен баһалай беләйек! Шул осраҡта ғына әҙәбиәтебеҙ тормош дәреслеге кимәленә күтәрелер.

**P.S.** Әңгәмәләргә бәйле, ғөмүмән, «Ағиҙел»гә ҡарата “Башҡортостан” гәзитендә (26.02.11) ысынбарлыҡҡа тап килмәгән, логик яҡтан томанлы ҡараш үткәрелә. Комментарий бирмәҫкә булдыҡ. Хәҡиҡәт кемдәлеген белергә теләгән уҡыусы баҫмабыҙҙағы һөйләшеүҙәрҙе яңынан күҙҙән кисерер, оппоненттарҙың сығыштарын барлар һәм һығымтаны үҙе яһар... Шулай ҙа ярты йылдан ашыу барған дәлилле фекер алышыуҙы юҡҡа сығарырға маташыуҙы аңлауы ҡыйын. Авторға бер генә һорау бирге килә: шундай түбәнлеккә тәгәрәнекме ни, ҡәләмдәш?!

«Ағиҙел» иһә кемдәргәлер ярау өсөн түгел, ә башҡорт әҙәбиәте киләсәге өсөн, утты үҙенә алып, алға ынтылыр, сөнки даръя, күлдән айырмалы рәүештә, үҙ сафлығын бары хәрәкәттә, алҡынып ағыуҙа ғына һаҡлай аласаҡ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

# Шағир йәшнәүе

*... Йөрәгемде аттым күккә.*
*... Йәшнәп ҡуйҙы йәшен.*
**Рәшит Назаров.**

Алтмышынсы йылдарҙа шиғриәткә килгән йәштәр араһында ғына түгел, барлыҡ башҡорт әҙәбиәтендә Рәшит Назаров ижады күренекле урын алып тора. Тапҡыр образлылыҡ, тәрән фекер, ташып торған темперамент, үҙенең бер шиғырында әйткәнсә, хатта «боҙҙо боҙға һуғып ут сығарыу» һәләте — был сифаттар тиҙ арала уҡыусыларҙың иғтибарын тартты.

Рәшит Назаров — тотош башҡорт әҙәбиәтенең иң серле ҙур таланты. Уның хаҡында замандаштары байтаҡ фекерҙәр әйтте. «...Сөнки ул — ғәҙәти тынлыҡты ҡапыл яҡтыртып, һәр быуынды — олоһон да, кесеһен дә — һоҡландырған, таң ҡалдырған йондоҙ — талант. Ә ҙур таланттарҙың сере — мәңгелек», — тигәйне шағир ижадын ике тиҫтә йылдан ашыу өйрәнеүсе Риф Мифтахов.

Рәшит Назаров шиғырҙары йөрәкте һәм аҡылды бер юлы арбай. Образлылығы менән бер уйландырһа, тәрән фекерҙәре менән өҫләтә ғәжәпләндерә. Уҡыған һайын тәьҫирле. Осрашҡан һайын серле. Танышҡан һайын яңыса яңғырай. Ошо булалыр инде ысын ижад, уның серле һәм илаһи көсө!

*...Мин һәр һүҙҙе*
*Һурып алам йөрәгемдән,*
*Ҡындан һурған хәнйәр һымаҡ...*

Ни тиклем поэтик оҫталыҡ, илаһи образлылыҡ, һүҙҙең ҡөҙрәте!

Рәшит Назаровтың гөлтләп ҡабынырға торған күңеле шиғыр менән «һаташыуҙарға» килтергәндә тиңдәштәре, бәлки, аңлап та бөтмәгәндер был егеттең ни менән дөрләгәнен. Йөрәк-аҡылы, уй-хыялы, хис-тойғолары, башына һалынған фантазиялары ни тиклем генә уны «хыялый» яһамаһын, шағир шиғыры менән һөйләшә:

*...Ос, тынъыһыҙ фантазиям,*
*Күкте ергә түңкәреп ос!*
*Балҡыһын Ер баш осонда,*
*Аяҡ аҫта йөҙһөн космос...*
*Мәңгелек һәм сикһеҙлекте*
*Усыңа ҡыҫ шыъыфлатып.*
*Ҡаъып төшөр аҡ ҡаъыҙъа*
*Йондоҙҙарҙы шыбыфлатып...*

Аҡ ҡағыҙға йондоҙҙарҙы «шыбырлатып ҡағып» төшөрөү һәләте һәм бәхете — һирәктәрҙең генә өлөшө. Бындай образлылыҡҡа етеү өлгөһө ҡайһы шиғриәттә бар икән?! Тик Назаров поэзияһында ғыналыр ул. Бындай талант — әсә һәм тәбиғәттең донъяға биргән иң тиңһеҙ бүләге ул.

Тыуған еребеҙҙә шундай дәү талант булғанына ҡыуанырға ла ҡыуанырға ғына ҡала.

Рәшит Назаров ижады — йондоҙ бейеклеге, йыһан бөйөклөгө. Нимә ул шиғриәт? Ул — тылсымлы көс. Ул һине йәшәтә, йәшәртә, йәшнәтә, йәшкәҙәтә. Шағир менән уҡыусыны ошо төшөнсәләр бәйләй булһа кәрәк. Әгәр яҙған шиғырҙарында кешене йәшәтер, өмөтләндерер, йәшәртер дәрт, йәшнәтер сатҡы, илатыр һағыш, уй-хис һәм дә моң юҡ икән, шағир исем-шәрифен күтәреүҙәре ауырҙыр. Рәшит Назаровтың шиғриәтенә ошо талап-бейеклектәрҙән ҡарау кәрәктер бөгөнгө заманда. Ул уҡыусыһынан айырылһа ла, үргә, бейеклектәргә, алыҫ йондоҙҙарға ынтылыу хыялы, эске рухының осоуы, улай ғына ла түгел, талпынып-ҡанатланып осоуы менән, күңелдәрҙе яулауы менән һаман да беҙҙең арала.

Өлгөлө, ҡанатлы-образлы һүҙҙәргә үлсәү юҡ, тиҙәр. Рәшит Назаровтың сикһеҙ уй-хыялдарын сағылдырған һүҙҙәренә бигерәк тә. Шиғриәт ҡанундары буйынса, нимәне сағылдырыу түгел, ә нисек һынландырыу, ни кимәлдә һүрәтләү төп ролде уйнарға тейеш. Һүрәтләү үҙенсәлеге — образлылыҡ, образлы фекерләү ҡеүәһе шиғриәттең иң төп ыҙаны, яҙыусының ижад концепцияһы ул. Шағир ижадында традицион образдар, символик алымдар көслө. Шағир һүҙ ҡәҙерен, уның бәҫен белеп, тойоп, йөрәге аша үткәреп яҙа белде. Рух киңлегенә, рух азатлығына ынтылыу хас уның шиғырҙарына. Тәүге әҫәрҙәре баҫылып сығыу менән йәшәп килгән традицияларҙы, шиғриәт ҡанундарын, инерция һәм ғәҙәт буйынса ярамһаҡланыуҙарҙы, исем өсөн генә тәнҡитләүҙәрҙе боҙҙо, үҙ юлы менән китте. Әлбиттә, олоһо ла, кесеһе лә уның һәләтен тиҙ күреп алды: һоҡланды, ғәжәпләнде, хайран ҡалды. Сөнки башҡаса мөмкин дә түгел ине. Йәш шағир башҡорт әҙәбиәтенә тотош яңы уй-тойғолар, яңы ижад концепцияһы алып килде. Ижад башында уҡ ул үҙенә, туған теленә күңел тантанаһы, етди мөнәсәбәт аша килә. Туған телен әсәгә тиңләй, тел ҡәҙере — йөрәк ите, ти шағир.

*...Миңәме ни һине оноторъа!*
*Туъан телем, әсәм һөтөләй...*

Йыһанға бәйле әҫәрҙәре бик үҙенсәлекле:

*...Аҡ кцбеккә төштө атым,*
*Ауыҙлыъын сәйнәп,*
*Сөнки китте*
*Ҡотороноп, ярһып алып ҡасты.*
*Ер менән кцк ҡушылды ла,*
*Ары кцсте офоҡ,*
*Юл ялтаныр ҡалды ҡурҡып,*
*Ауыл алыҫлашты.*
*Урман...*
*Болон...*
*Соҡор...*
*Ярҙар...*
*Ә ат һаман саба!*
*Бына ҙур тау, йөҙөн ҡаплап,*
*Сытырлыҡҡа боҫто.*
*Зәп-зәңгәр кцк ҡалтыранды,*
*Йыйырылды йөҙө...*
*Һәм кинәт...*
*Ер, талпынып бер,*
*Башым аша осто...*

Был шиғырҙа бер генә күренеш тә ҡәҙимгесә түгел: ер менән күк бутала, офоҡ ҡаса, юл ҡурҡып ялтана, тау, йөҙөн ҡаплап, сытырлыҡҡа боҫа, күк йөҙө йыйырыла... Ер кешенең башы аша осоп үтә! Ваҡиғалар эсендә барыбер шағирҙың лирик геройы үҙәктә һынлана. Донъя менән шәхес мөнәсәбәтендә кешенең эске донъяһы үҙгәрә, башын күтәреп йәшәргә тырыша. Уның көсө арта, ҡоласы

киңәйә, ер хужаһына әйләнә бара. Ярһып сабып барған аттан ҡолаһа ла, Ер уның башы осонан осоп үтә! Ул Ерҙә булып ятҡан ваҡиғаларға йыһандан ҡарай һымаҡ, шуға ла шиғырҙағы хәрәкәттәр ҙә үтә лә йылдам, күҙ асып йомған арала хәл ителә, ҙур көсөргәнешлелек, йылдамлыҡ өҫтөнлөк итә. «Күк йылмая», «Йыһан түренә», «Үҫеүсе киңлек», «Йондоҙҙар туйы» һ.б. шиғырҙарында ла йыһан романтикаһы бөркөлә, космос моңо ҡолаҡҡа салынғандай: «Ерҙең өҫтөн байҡап үттем, ялын ҡосоп ярһыу күктең», «Планетаны, йәшен һымаҡ, бер секундта үттем урап», «Бел: был йондоҙ — минең йөрәк, тик ул инде бейегерәк», «Моң ағыла, моң ағыла, өнһөҙ моң — күктән... Етегән йондоҙ — эй, гитарам, — кем уйнай икән?», «Иҫ китмәле бер туй күктә, йондоҙҙар туйы...» Эйе, шағир ижады космосты өйрәнеү, яулау дәүеренә тура килде. Уның ярһыу шиғри темпераменты, баш бирмәҫ сая хыялдары ошо хаҡта һөйләй, ошо фекерҙе нығыта. Ул күберәк романтик һәм фәлсәфәүи солғаныште юғары кимәлдәге поэтик образдар тыуҙыра. Уға күтәренке рух, ҡанатлы хыял хас.

«Хушлашайыҡ, йырым» шиғыры менән Рәшит Назаров йондоҙло мәле менән моңһоу ғына хушлаша кеүек:

*...Һөйлә, дуҫым, ерҙә, ошо ерҙә*
*Йәш бер моңһоу шағир булғанын;*
*Күккә осҡан,*
*Һөйөү шишмәһенән*
*Һирпеп кенә алған һыуҙарын...*
*Бер ҡасан да һөйәм тимәгән ул,*
*Тик яратҡан янып, өҙөлөп,*
*Боҙ ҙа хатта дөрләп китер ине,*
*Күсһә уға ошо эҫелек...*

*...Хушлашайыҡ, дуҫым,*
*хушлашайыҡ,*
*Ҡалды ҡайын. Йәш тә, таныш та...*
*Бөтәһе лә унда — тыуған ерҙә,*
*Бөтәһе лә унда — алыҫта.*

Рәшит Назаровтың лирик геройы тышҡы яҡтан бик сабыр күренһә лә, ысынында иһә ул — янып-көйөп, йөрәген йомарлап тотоп, ашҡынып, уйхыялдарға бирелеп йәшәүсе актив позициялы шәхес, фекер эйәһе. Шағирҙың сикһеҙ фантазияларға бай геройы тәрән хистәр, яҡты хыялдар менән йәшәй. Уйҙары йүгерек, аҡылы зирәк, күңеле саф, теләге изге уның. Мөхәббәтте лә үҙенсә аңлай: сәскәгә наҙлы ҡояшы ла, яҙғы ямғыры ла кәрәк. Ысын мөхәббәттең дә күҙ йәшһеҙ генә булыуы мөмкинме һуң? Поэтик биҙәктәр, фәлсәфәгә тиң образдар менән байытыла һәр шиғыр юлы... Уның шиғырҙарындағы образдар йән аҙығы ла, күңел тыныслығы ла, күңел ярһыулығы ла бирә. «Рәшит Назаровтың шиғриәте Ер-әсәгә табынған, намыҫына тоғролоҡло ысын хеҙмәт кешеһе менән бөйөк. Уның был һыҙаттары күҙгә салынып ҡына ҡалмай, улар ярылып ята. Был шиғриәт ҡайһы осорҙа ла яңы күренеш булып ҡаласаҡ», — ти Рауил Бикбаев.

Рәшит Назаров ижады менән ентекле танышҡанда былдай баһаның хаҡлығына ныҡлы инанаһың.

**Рәүеф ШАҺИЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

## «Ҡариҙел буйында ҡалам...»

*(Ярулла Вәлиевтың тыуыуына 90 йыл)*



Мәғрур тауҙар араһынан ажарланып аҡҡан Ҡариҙел йылғаһы Нуриман районы киңлектәрендә һалмаҡланып, яҡын-тирәләге туғайҙарҙа бихисап күлдәр хасил итеп, Ағиҙелгә ыңғайлай. Ошо йылғаның һул яҡтағы бейек ярын һыулаған Бикмырҙа ауылында 1921 йылдың буранлы мартында Ярулла Носратулла улы Вәлиев – буласаҡ яҙыусы – донъяға килә.

Тыуған ауылында башланғыс, күрше Үктәйҙә ете йыллыҡ мәктәптә белем алғандан һуң, Өфө ҡалаһындағы Баһау Нуриманов исемендәге педагогия рабфагында уҡый. Һуңынан Ярулла Вәлиев Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбендә уҡытыусы, РОНО-ла инспектор, район «Еңеү юлы» гәзитендә яуаплы сәркәтип, мөхәррир булып эшләй. 1945 йылда өлкә партия мәктәбенә уҡырға инә, ситтән тороп Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай.

Ярулла Вәлиев, бәғзе прозаиктар ише, башҡорт әҙәбиәтенә тәүҙә шиғырҙар яҙып аяҡ баҫа. 1938 – 1941 йылдар арауығында республиканың ваҡытлы матбуғатында уның исем-шәрифтәре менән баҫылған шиғырҙарын йыш осратырға була.

1947 йылдан журналистикаға ныҡлап тотона. 1963 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Үҙебеҙҙең кеше» исемле тәүге хикәйәләр йыйынтығы, 1965 йылда «Хәйерле иртә, Исмәғил!» повесы айырым баҫма булып сыға. Әҫәр әҙәбиәт һөйөүселәр, бигерәк тә мәғариф хеҙмәткәрҙәре араһында ҙур резонанс тыуҙыра. 1970 йылда – «Бөркөттәр оя ташламай» романы, ә 1976 йылда «Һин минең берҙәнберем» повесы донъя күрә.

Әҙип әҫәрҙәренең төп геройҙары – ергә ереккән хеҙмәтсәндәр. Уның бар ижады – Ҡариҙел туғайҙарында мөлдөрәшкән күлдәр кеүек, күңелдәрҙә урын алып, ер кешеһенә, саф мөхәббәткә дан йырлай.

**Әхмәҙин ӘФТӘХ.**

# СӘСӘНДӘН ҺҮҘ ҠАЛА



*Шәһәрғәзе сәсән*

Гүзәл Ноғманова һүрәте.

*«Килер бер көн, халыҡ һеҙҙең дөрөҫ, хәҡиҡәт һүҙегеҙҙе уҡыр. Һеҙҙең исемде зекер итерҙәр, иҫкә алырҙар. Дөрөҫлөк – һеҙҙең яҡта, тарих быны иҫбатлар. Мин дә шулай эшләйем. Туҡтауһыҙ яҙам – иң дөрөҫ юл шул…»*

(Таһир Байышевтың Шәһәрғәзе Ғәбдиевҡа хатынан.)

*Баймаҡ районының Һаҡмар, Таулы, Әмәндәк йылғаларын һыулаған Икенсе Этҡол, Байым, Үрге Яйыҡбай (Нуғай), Түбәнге Яйыҡбай (Нуғай), Үрнәк, Ниғәмәт, Ҡуяндар ауылдарының шәжәрәһен төҙөгән, шул төбәктең тарихын яҙған шағир, сәсән Шәһәрғәзе Шаһыбал улы Ғәбдиевтың (1898 – 1979) бер дәфтәре бар. Уны сәсәндең замандашы Уйылдан Әүбәкер улы Зарипов (1917 – 1982) хәҙерге алфавитҡа ауҙарып, ғаилә ҡомартҡыһы итеп ҡатыны Зөләйха инәйгә (Ишйәровтар тоҡомонан) ҡалдырған. Әле ул дәфтәр Учалы ҡалаһында Зариповтарҙың кейәүе Факил Хәмзә улы Әминевта һаҡлана.*

*Шәһәрғәзе Ғәбдиев – XX быуатта илебеҙҙә булған дүрт һуғышты ла үткән яугир, золом, төрмәләр һындыра алмаған батыр рухлы уҙаман. Ул – тыуған ауылы Икенсе Этҡолдоң ижтимағи тормошонда әүҙем ҡатнашып, һәр нәмәгә үҙ ҡараш-фекере булған илһөйәр азамат. Ғәбдиев күренекле башҡорт ғалимдары, милли әҙәбиәтебеҙҙең иң-иңдәре менән хатлашып, күрешеп йәшәгән. Мәҫәлән, Шәйехзада Бабичты күреп-белгән, Рәми Ғарипов менән хатлашҡан, күрешкән, телсе Т. Ғ. Байышев менән дуҫ булған.*

*Сәсән иҫке төрки телендә белем алған, ғәрәпсә уҡыған, урыҫ телен Темәстә үҙләштергән. Башҡа һабаҡтарҙы тормош уға үҙе өйрәткән. 2006 йылда уҡытыусы, төйәкте өйрәнеүсе Азамат Тажетдинов, Шәһәрғәзе сәсәндең китабын баҫтырып, ҙур эш башҡарҙы.*

*1925 йылдарҙа ижад ителгән «Ирек алғас» тигән шиғырында Ғәбдиев түбәндәге юлдарҙы яҙа:*

*Уян, башҡорт, хәҙер ирек бирелде,*
*Ташла иҫке наҙан динеңде.*
*Фән-техника менән белем алып,*
*Һөйөп һаҡла тыуған илеңде.*

*Шәһәрғәзе Ғәбдиев төҙөгән шәжәрә Байым ауылынан башланып китә. Түбәндә уның ауылдар тарихына ҡараған бер өлөшөн тәҡдим итәбеҙ.*

***Хәмиҙә МИНҺАЖИТДИНОВА.***

## *Борон-борон заманда...*

Иң баштағы Айыуҡара улдарынан – Иҫәнбирҙе, ә унан – Йомағол, Ыҫтанғол, уларҙан Динебәк, Мөхәмәтйәр тыуа. Динебәктән – Байым, Мөхәмәтйәрҙән Килдеғужа һәм Ғәҙелғужа донъяға килә. Килдеғужанан – Хисаметдин, унан – Зариф; Ғәҙелғужанан Ғәбделсәлим, Ғәбделсәлих, Ғәбделвәлит, Ғәбделхәмит, Баязит тыуа. Уның улы Мостафа, уның улы Муллайән, уның улы Ғәлимйән, уның улы Сабирйән. Мостафиндар, Хәлитовтар, Вәлитовтар, Шаһиморатовтар, Сәлиховтар – бер туғандар.

XVIII быуат урталарында Моҫтай ауылынан хәҙерге Байым ауылы ултырған ергә Динебәк килеп урынлаша. Моҫтайҙа ҡалған ағай-энеләре: «Ата-бабаның ерен ташлап киттең»,– тип һуҡранғас, Динебәк: «Алыҫ ер түгел әле, килер ҙә күрешербеҙ, ат етәр әле»,– тигән. Шунан бирле был ауылды «Атйетәр» тип йөрөтә башлағандар.

Байым дини белем ала, ишан дәрәжәһенә етеп донъя ҡуйғас, 1816 йылдан ауылға уның исемен бирәләр. Был дата Байым ишандың ҡәбер ташына ла яҙып ҡуйылған. Әйтергә кәрәк, Динебәк бында яңғыҙ килеп ултырмаған, уның менән башҡа нәҫелдәр ҙә килеп төпләнгән.

Байымдың улдары: Хажиәхмәт, Шаһмөхәмәт, Мөхәмәтғәле. Хажиәхмәттән таралған оло тармаҡлы нәҫел хәҙер – Байымовтар, Мөхәмәтғәленең балаларының балалары Ғәлин фамилияһында йөрөй. Байымда ҡалмыҡтар араһы ла бар. Өҙлөкһөҙ булып торған башҡорт-ҡаҙаҡ яуҙарының береһендә әсир төшкән Көтәҫәй исемле бер ҡаҙаҡ ҡатынды ошо ауылдан алып, аҙаҡ башҡортлашып киткән. Көтәҫәйҙең Аҡымбәт, Ҡотломбәт исемле ике улынан ҡалмыҡтар араһы таралған. Һуңыраҡ Йәмәт исемле ҡаҙаҡ күсеп килеп, башҡорт араһын тулыландырған. Йәмәттең Ғабдрахман тигән улы булып, унан – Йәноҙаҡ, унан – Ҡаһарман, унан Беймөхәмәт тыуған. Беймөхәмәттең улдары: Ильяс, Дауыт, Әхәт, Илдус, Самат, Уйылдан, Вахит, Мәжит, Фирғәт. Барыһы ла Абдрахманов фамилияһында йөрөй. Ә бына ырыу исеме алған Бөрйән олатай тураһында төплө мәғлүмәт туплап булманы. Бөрйән тураһында әкиәттәр, легендалар, мәҫәлән, Күсәк батыр тураһында, күп булыуға ҡарамаҫтан, улар хәҡиҡәткә тап килмәй.

Бөрйән Болғар ханлығы дәүерендә үк йәшәгән булһа кәрәк. Хәсәнғата ахундың 1909 йылда баҫылып сыҡҡан «Төрк тарихы»нан күренеүенсә, Бөрйән башҡорттары тәүҙә Каспий диңгеҙе тирәһенә саҡлы сәселеп йәшәгән. Монгол яуы һәм башҡалар тыныҫһыҙлай башлағас, шул уҡ Бөрйән тоҡомонан булған мадъярҙар Дунай буйына күсенә. Мишәрҙәр һәм башҡорттарҙың шул уҡ бөрйән тоҡомонан ҡайһы берҙәре шул тирәләрҙә – хәҙерге Һарытау, Һамар, Пенза, Сембер өлкәләрендә төпләнеп ҡала. Бөрйәндәрҙең ҙур өлөшө кире төп Ватанына ҡайта. Бөрйәндәрҙең башлығы Алтай тауҙары яғынан килеп, фин ҡыҙын ҡатынлыҡҡа алып, Урал, Ирәндек тауҙары, Йайыҡ һәм Ағиҙел йылғалары тирәһендә урынлашҡан Омғор була. Уның төп исеме икенсе төрлө булһа кәрәк, сөнки «Төрк ҡәүеме тарихы»нда был турала түбәндәгесә яҙылған: Нух бәйғәмбәрҙең өсөнсө улы Яфаттөрк. Шул Яфаттың улы булған Яфас. Үҙе урынына батша итеп улы Төрктө ҡалдыра. Шулай итеп, (хакимлыҡты) атанан улға ҡалдырыу менән бергә, Юфаҫтан (Яфаҫ) алтынсы быуынға ҡәҙәр мосолман дине һаҡланған. Аланса хандан һуң килгән Ҡарахан заманында ислам дине бөтөнләй бөткән. Ҡарахандың Уғузхан тигән улы ислам динен тергеҙгән. Ҡарахан улының был эшенә ҡаршы баш күтәрергә әҙерләнгән, ләкин Уғуздың ҡустылары, берләшеп, ағаларының диненә һәм аҡылына баш һалған, ти. Уғузхан уларҙы үҙенә килеп ойоусылар итеп, ойғор тигән исем биргән (304-се бит). Шунан һуң

уларҙы «Ойғор төрктәре» тип йөрөтә башлағандар. Уғузханға килгән туғандарҙың иң олоһо Уйғоз исемле булыуын һөйләгән риүәйәт бар.

Ошо ойғорҙоң өлкән улы – Башойғор исемлеһе – был яҡтарға килеп урынлашыусы. Был хәлдәр, әлбиттә, күп быуаттар элек булған. Шулай итеп, Бөрйәндең был тирәгә килеп урынлашыуы бынан бер мең йылдар (йәки VI – VII быуаттарҙа – **Ғ. Ш.**) самаһы элек булырға тейеш. Бөрйәндәрҙең иң боронғо ауылдары – хәҙерге Баймаҡ районындағы Иҫәнбәт, Моҫтай, Ғәҙелша. Ул заманда ауылдар бик ваҡ булып, иң ҙуры ун йорттан артмаған. Күбеһенсә берәр-икешәр, өсәр өйләп ултырғандар. Бөрйән үҙе Моҫтай ауылы урынында торған. Уландарҙан уландар тыуып, атаһынан башҡа сыҡҡандары мал аҫрауға, һунар итеүгә уңайлы урмандар һайлап ултырыр булған. Шул рәүешле Иҫәнбәт, Абҙаҡ, Атанғол, Ғәҙелша һ. б. ауылдар барлыҡҡа килгән. Һуңыраҡ башҡорттар бейҙәргә бүленеп, һәр ырыуҙан берәүҙе бей итеп һайлап, уға буйһоноп йәшәй башлай. Бейҙәрҙең төньяҡтағылары – Себер, көнбайыштағылары – Болғар, бөрйәндәр, үҫәргәндәр, түңгәүер, ҡыпсаҡ, тамъяндар Нуғай хандарына буйһонғандар. Бөрйән үҙ дәүерендә бей булған, күп йылдар үтеп, башҡорттар Мәскәү батшалығына баш һалған заманда бөрйәндәрҙең бейе Иҫке бей булған.

Урыҫтар килеп хөкөм йөрөтә башлағас, бер ергә йыйылып ауыл булып ултырып, олоҫ төҙөргә указ сығарыла. Бынан алда Ғәҙелша ауылынан Этҡол тигән кеше уландары, ағай-энеһе менән хәҙерге Беренсе Этҡол урынына нигеҙ һала. Бөрйәндәр Ирәндектең көнсығышында, Яйыҡ менән Ирәндек араһында, йәшәгән. Яйыҡ аръяғын ҡаҙаҡтар биләгән. Һуңғылары һәр ваҡыт башҡорттарға сапҡындар яһап, малдарын йә ҡатын-ҡыҙҙарын урлап йонсота. Үҙ нәүбәтендә, башҡорттар ҙа үс ҡайтара. Быны «барымта» һәм «ҡарымта» тиҙәр. Бер ваҡыт Әбдерәш батыр тоҡомо Көрәй батыр етәкселегендә барып, ҡаҙаҡтарҙы бик ныҡ ҡыйрата. Артабан уларҙың үс алыуынан (ҡарымтаһынан) ҡурҡып, Көрәй батыр хәҙерге Икенсе Этҡол ауылынан үрҙәрәк, ҙур тау аҫтындағы туғайға килеп төпләнә. Был урын хәҙер «Көрәй тауы» тип аталып, урыны әле лә билдәле. Бер нисә йылдан ҡаҙаҡтар, күмәкләп килеп, бик күп малдарҙы әйҙәп алып китә. Башҡорт батырҙары, тиҙ генә бер-береһенә хәбәр итеп, барымтасыларҙы ҡыуа сыға. Һаҡмар аръяғындағы бер үҙәктә ҡаҙаҡтарҙы ҡамап, бөтәһен дә ҡырып һалалар. Үҙәк башы «Ҡаҙаҡ үҙәге» тип атала. Был – «Һәүәнәк» совхозының Һаҡмар фермаһынан бер саҡрым түбән тәрән һаҙлы урын (хәҙерге Ҡаҡтуғай ауылы тирәһе).

Һуғыш үҙәктең башындағы яйпыла булған. Беҙ бала саҡта (яҡынса XX быуат башы) олатайым, шул ерҙә кеше һөйәктәре тулып ята, тип һөйләй торғайны. Был яуҙа ике ҡыҙы менән Көрәй батыр ҙа ҡатнаша һәм ошонан һуң Әмәндәк йылғаһы буйына күсеп ултыра. Шунда вафат була, ҡәбере лә шунда. Ҡаҙаҡтар башҡорттар яғына килмәй башлай.

Этҡолдоң тәүге төйәген хәҙер ҙә «Иҫке ыҙма» йәки «Иҫке урын» тип йөрөтәләр. Йылғаның ике яғында өй, кәртә урындары күҙгә бәрелеп тора. Һыулы үҙәк тамағындағы бәләкәй генә таш морондо «Мәржен таш» тиҙәр. Шул тау башында Мәрженбикә исемле бай ҡатын йәшәгән. Ә морон ҡаршыһын «Жиһанша төбәге» тиҙәр. Күрәһең, ул кеше шунда көн иткән. Ул заманда Таулы йылғаһы мул һыулы, туғайҙары батҡыл булып, буйынан-буйы һыу менән тулған.

Хәҙерге Раһай тауы менән Көрәй тауы араһындағы өлкән зыярат оло юл буйында булған. Хәҙерге һарыҡ фермаһы кисеүенән тауға тура сығып киткән машина юлы үткән тирәҫтә 1921 йылғы аслыҡта үлгәндәрҙең ҡәберлеге тапалып ята. Унда йөҙәрләгән кешене бер соҡорға күмгәндәр. 1848 йылда ауыл хәҙерге урынына күсенһә лә, Этҡол исемен һаҡлап ҡалған. Иҫке урынды хәҙер «Иҫке

ыҙма» тип йөрөтәләр. Өй урындарына ҡарағанда, 15-ләп йорт самаларға мөмкин. Шулай итеп Икенсе Этҡол ауылы барлыҡҡа килгән.

Иһәкәй олатайҙан Иҫән ауылы барлыҡҡа килә. Айыуҡараның Мостафа тигән улы Моҫтай ауылына исем биргән. Динебәк тигән улы, үрҙә әйтелгәнсә, Байым ауылына нигеҙ һала. Бөтә ауылдар ҙа ошо рәүешле барлыҡҡа килгән. Быларҙан тыш, төрлө тарихи болалар арҡаһында башҡа өлкәләргә сәселешеп киткән бөрйәндәр ҙә күп.

Тамъян-түңгәүерҙәр менән бөрйәндәрҙең еренә бер һыҙат булып ҡарағай-ҡыпсаҡтар килеп ултырған. Бөрйән шул ҡарағай-ҡыпсаҡ менән, ер өсөн булһа кәрәк, үҙ-ара ыҙғышта үлтерелгән. Уның ҡәбере хәҙерге Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй (Шүлгән) ауылына яҡын урында. Ошо зыяратты, әкиәттәргә эйәреп, Ҡара Ҡоломбәт Дефелдән-Бабсаҡ ҡәбере тип бутайҙар. Был – мотлаҡ хата.

## Урыҫҡа баш һалғас…

Башҡорттар Мәскәү батшалығына ҡушылып, ерҙәренә баярҙар, заводчиктар килеп тула башлағас, башҡорттар баш күтәрергә мәжбүр була. Батша хөкүмәте ҙур ғәскәр ебәреп, хәрәкәтте аяуһыҙ баҫтыра. Башҡорттар тағы ла ҡуҙғала – был юлы күтәрелеш тағы ла ҡанһыҙыраҡ итеп баҫтырыла. 200 йылдар самаһы шулай дауам итә. Ихтилалдарҙы баҫтырыу өсөн батша тарафынан ғәскәр башлығы итеп ебәрелгән генералдар, полковниктар Зимин, Сергеев, Хохлов, Амеров, Сояз, Хвоновский, Портнев, Татищев, Повладскийҙар башҡорттарҙы аямай ҡыра, аҫа, тереләй яндыра, ҡабырғаларынан ырғаҡтарға элә, тимер шешкә ултырта. Ирҙәрен бәйләп ҡуйып, улар алдында ҡатын-ҡыҙҙарын мәсхәрәләйҙәр, еткән ҡыҙҙарын башлыҡтарына, хужаларына өләшеп бирәләр. Ҡатындарҙы, ҡыҙ балаларҙы урыҫ байҙарына таратып биреп, суҡындыралар, ҡол итәләр. Бик күптәрен сит илдәргә ҡыуып алып китеп, ҡоллоҡҡа һаталар, күбеһен юҡ итәләр, ауылдарҙы яндыралар. Урыҫ батшалығына үҙ ирке менән ҡушылған башҡорттарға «эскерһеҙ ярҙам» шулай була.

Ҡот осҡос ҡанһыҙ фажиғәләрҙән башҡорттоң дүрттән бер өлөшө генә тороп ҡалыуға ҡарамаҫтан, халыҡ яңынан үрсеп китә.

Тиңе булмаған йыртҡыслыҡтарҙан иҫән ҡалыу өсөн халыҡ урмандарға, тау араларына ҡасырға мәжбүр була. Бөрйән башҡорттары ла әҙәм аяғы баҫмаған, йыртҡыс хайуандар ғына йәшәгән урындарға, Иҙел буйына, соҡорло, ҡаялы йылға буйҙарына ҡаса. Был хәл Башҡортостандың бөтә урманлы мөйөштәрендә лә күҙәтелә. Шул ерҙәрҙә күп йылдар ҡасып йәшәүселәрҙән бик күп ауылдар барлыҡҡа килә.

Болалар баҫылып, батша хөкүмәте солох иғлан иткәс, 1848 йылда, тарҡау йәшәгән халыҡтар бергә йыйылып, ауыл булып ултырырға, болаларҙан ҡасып киткән кешеләргә үҙ туған ырыуҙарына ҡайтып йәшәргә мөмкин, тигән указ сығарыла. Ҡасып киткәндәрҙең ҡайһылары ағай-энеләре, туғандары янына Ирәндек, Урал тауҙарына, Һаҡмар һыуы буйҙарына кире ҡайта. Икенселәре иһә шул яҡтарҙа йөҙәр йылға яҡын йәшәү арҡаһында өйрәнеп, шунда ерләшеп ҡала. Хәҙерге Бөрйән районы халҡы ана шул ҡасып йәшәгәндәрҙән үрсеп киткән дә инде (һүҙ тик Бөрйән ырыуы тураһында. – **Ғ. Ш.**)

Тарихсылар килеп, ырыуҙар, ауыл тарихын һораша башлаһа, әллә ни тарихи мәғлүмәттәре булмауға ҡарамаҫтан, хәҙерге Бөрйән районы ауылдарына төбәп, ҡолсоралар үҙҙәрен – Янһарынан (Яңы Собханғол), ә таулыҡайҙар, Баштиренән (Кейекбай) килгәнбеҙ, тип бөтөнләй булмағанды һөйләй. Асылда төп бөрйәндәр Баймаҡ районы халҡы була.

«Бөрйән» исеме менән йөрөгәс, ғәҙәттә, улар бөрйәндәр менән баймаҡтар

һөйләшендәге айырмалыҡҡа һылтана. Район исемен ғәҙәттә ырыу исеменән алалар, ә башҡортта Баймаҡ ырыуы юҡ. Телдәге ҡайһы бер үҙенсәлектең сәбәптәре ырыуҙарҙың айырымлығын аңлатмай. Ундай айырма бер район ауылдарында ла күҙәтелергә мөмкин.

Бына шундай ҡатмарлы, һәләкәтле замандарҙа Моҫтай ауылынан күсеп китеп, Иҫке ыҙмаға нигеҙ һалған Этҡол ҡарт Әтек ауылына китеп, шунда вафат булған. Уның улы Солтанғол да шунда йәшәп донъя ҡуйған. Илдә тыныслыҡ урынлашҡас, Солтанғолдоң улы Яҡуп мулла Этҡолға ҡайтып, ағай-энеләре менән ауыл уртаһынан аҡҡан Рәжәп йылғаһының Таулыға ҡойған ерендәге бәләкәй туғайға өй һалып урынлаша. Иҫке Этҡол был урындан бер саҡрым ашыуыраҡ Таулы буйында тороп ҡалыуға ҡарамаҫтан, был ауылға ла Этҡол тип исем ҡушыла. Жаббар олатайҙың улдары һәм бүләләре иҫке урындан ҡуҙғалмай, шунда йәшәп, һуңынан Рәжәп тамағының юғары яғына күсенеп, Таулы буйы урамына нигеҙ һала.

Яҡуп мулла шул уҡ туғайҙың көнсығыш яғында мәсет күтәрә. Тирә- яҡтан кешеләр күсеп килә башлағас, бәләкәй туғай бик тиҙ тула. Урын етешмәү сәбәпле, халыҡ ауылды Таулының Һаҡмарға ҡушылған еренә күсермәк була. Ҡайһы берәүҙәр шунда күсеп тә барған, һаҡлыҡ иген өсөн мөгәзәй ҙә һалынған. Мөгәзәйҙең икенсе тапҡырға яңыртып төҙөлгәне аҙаҡ колхоз келәте булып китә.

Был урында ла һыймай башлағас, этҡолдар Ҡабаҡ башына урам һала. Урыны тигеҙ булмағанға күрә, уны «Ҡыя урам» тип йөрөтәләр. Теге ауыл «Түбәндәге Икенсе Этҡол» йәки «Таулы тамағы» тип атала башлай. Хәҙер «Нигмәт» исеме менән берләште. Үрнәктәге магазин урамы шул.

Йосоптан һуң муллалыҡ улы Әхмәткә күсә. Ул ғәжәп бай кеше ине, унан һуң Әхмәттең ҡустыһы Мансурҙың Вахит тигән улы, унан ары Әхмәттең улы Хөснөтдин байҙың улы Хәбибулла мулла булды. Муллаларҙың һуңғыһы шул.

Таулы буйындағы урамға Әмин мулла мәсет һалдырып, уның улы Хажмөхәмәт, уның улы Мәхмүт имам була. Һуңынан Икенсе Этҡол ауылы ике мәсетле, баҙарлы, ҙур ауылға әйләнә. Идараһы – мәркәзе лә шунда була. Мин Бөрйән тарихын яҙа торғас, Этҡол ауылы тарихына оҙаҡ туҡталып киттем.

## Нуғайҙар, ҡалмыҡтар, ҡаҙаҡтар

Бөрйән олатай бынан меңәр йылдар самаһы элек йәшәгән булырға тейеш, тигән фекер әйткәйнем. Бәлки, улай уҡ түгелдер. Шулай ҙа 6-7 йөҙ йылдар самаһы элек булыуы ихтимал. Сөнки Сыңғыҙ хандың ейәне Бату хандың Урал тауҙары, Яйыҡ йылғаһы аша Волгаға бәреп инеүе 1236 йылда булған. Тап шул осорҙа башҡорттарҙың бөрйән – мадъяр – мишәр ырыуҙарының Волга буйында монголдар баҫып ингән ерҙәргәсә хәтлем йәйрәп йәшәгән заманы булған. Монгол яуынан ҡурҡҡан мадъярҙар көньяҡҡа күсенеп китһә, бөрйәндәр иһә төньяҡҡа ҡарай сигенә. Хәҙерге Һарытау һәм Һамар өлкәһендә йәшәгән башҡорттар шул заманда күсенеп барған Бөрйән ырыуы кешеләре була. Һамар губернаһы Николаевск өйәҙендә йәшәгән башҡорттарҙы, Емельян Пугачев ғәскәренә эйәреп киткәнлектән, «Пугач башҡорттары» тип йөрөтәләр. Улар ҙа – бөрйәндәрҙән.

Олатайым Мөхәмәтрәхимдең бер туған апаһы Нуғай ауылынан Фәхри мулланың ҡатыны булып, шул оләсәйҙән Таһира, Шәмсениса исемле ике ҡыҙы ҡалған. Таһира Байым ауылы Ғәлләмгә барған. Уның Сафа исемле улы бар. Шәмсениса Таулыҡай ауылы Хөбби Мусинда ине. Хөббиҙең улдары Зәйнулла, Ғаззали, Әғзәмдәрҙең балалары беҙгә шул яҡтан туғандар. Олатайым Бүреле тигән түңгәүер ауылынан Бибибаян исемле ҡатын алған. Йомаш ауылында бер бажаһы булған. Шул бажаһынан Рыҫҡужа, Ғабдрахман тигән улдары Юлыҡ

ауылында йәшәне. Хәҙер шул Рысҡужа улы Шәрифйән Йомашта көн итә, ул да беҙгә туған. Дәүләткилде ҡыҙы Сәхип Исхаҡ ауылынан Мәҡсүт улы Ғәлиҙә булған. Шуның ҡыҙы Байым ауылы Төхфәт Мәмбәтҡоловта булды. Хәнифә улдары – Һибәт, Сөнғәт.

*Ҡулъяҙмала был «постскриптум» итеп, күсермәне эшләүсе У. Зарипов былай ти: «Күсереп яҙылды Сочи ҡалаһында «Юг» пансионатында ял итеп ятҡанда. 2/VI – 1976 йыл. У. Зарипов».*

Әбдерәш (Ҡыҙыл Нуғай) ырыуының иң боронғо кешеһе Өмбәт. Уның улы Ҡарағол, уның улы Ялпыбей, уның улы Ишәйбей, уның улы Ишкенәбей, уның улы Көрәй, уның улы Дәүләт, уның улы Арап, уның улы Әбдерәш, уның улы Батырша, уның улы Мәһәҙей, уның улы Ғабдулла. Әбдерәш тирә-йүндә дан тотҡан батыр булып, ауыл шуның исеменә аталған. Был тарихты 1919 йылда шағир Хәбибулла Ғәбитов Ғөбәйҙулланан һорашып, шул саҡтарҙа нәшер ителгән «Аҡъюл» журналында яҙып сыҡҡан. Мин шунан күсереп яҙып алғайным. Уларҙы «Нуғай» тип атауҙарын былай тип һөйләйҙәр.

Александр II батшалыҡ иткән заманда Рәсәй империяһында көсләп суҡындырыу башлана. Нуғай ханлығы заманынан ҡалған нуғай татарҙары хәҙерге «Һамар яғы» тип йөрөтөлгән төбәктә күпләп йәшәгән була. Суҡындырып йөрөүселәр Әбдерәш ауылына килеп сыҡҡас, халыҡ: «Беҙ ҙә – нуғайҙар, әллә ҡасан суҡынғанбыҙ»,– тип алдап ебәргән дә шунлыҡтан «Нуғай» аталған, имеш. Был хәҡиҡәтҡә тап килмәй, сөнки ул саҡтарҙа башҡорт араһына килеп ултырған ҡалмыҡ башҡортҡа әйләнә торған булған. Ҡаҙаҡ та, мишәр ҙә, татар ҙа башҡортлашҡан. Шуға күрә ҡайһы бер башҡорт ауылдары «мишәр» тип йөрөтөлә. Әбйәлил һәм Бөрйән райондарындағы Әбелмәмбәт ауылдары ана шундайҙарҙан. Ҡаҙаҡтар һәм ҡалмыҡтар күпселек ауылдарҙа бар.

Йылайыр районындағы Ҡашҡар ауылы халҡы, мәҫәлән, – ҡалмыҡ тоҡомдары. Юлдыбай ауылында ла шул тоҡом вариҫтары көн итә. Ул ауыл «Ғүмәр» тип аталырға тейеш булып та, Юлдыбай старшина булғас, уның исеме ҡушылған. Ҡыҙыл Нуғайы ла шул уҡ нуғайҙарҙан тороп ҡалып, башҡортлашып китеүе ихтимал.

«Ҡалмыҡтар» тип тарихта татар-монголдар йөрөтөлгән. Сыңғыҙхан, Бату хандарҙың ғәскәрҙәренән ҡалған улар. Урындағы халыҡ менән тығыҙ аралашыу һөҙөмтәһендә, төҫ-ҡиәфәттәре, исемдәре башҡорттарға оҡшап бөткән. Монголдарҙан һуң башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайыш яғын – Ҡазан, төньяҡ-көнсығышын – Себер, көньяҡ-көнсығыш өлөшөн Нуғай ханлыҡтары биләп торған. Беҙҙең күрше ауыл булған Үрге һәм Түбәнге Яйыҡбай ауылдары ла ана шул «Әбдерәш нуғайы»нан килгән Яйыҡбайҙан таралған.

Хәҙерге ике Нуғай араһындағы Әмәндәк һыуы буйындағы «Ҡыҙыл Нуғайы» тип йөрөтөлгән Әбдерәш ауылына өс бер туғаны менән ҡаҙаҡтар талауынан ҡасып килгән Яйыҡбай ҡарт нигеҙ һалған. 1848 йылғы указдан һуң ике башҡа ауыл булып, «Үрге» һәм «Түбәнге Яйыҡбай» исеме менән аталып киткән ауылдар барлыҡҡа килгән.

Тарихтан күренеүенсә, Бөрйән ерҙәре бик ҙур булған. Төрлө яҡтан килеп сығып торған ҡайһы бер көслө халыҡтар уларҙы үҙҙәренә буйһондорған. Үҙҙәре менән әсирлеккә алып китеп, тарҡауланырға, тарҡалырға мәжбүр иткәндәр. Заманалар үтеп, батша хөкүмәте үҙ хакимлығын нығытҡас, бөрйәндәрҙең төп үҙәге булған ергә Ғәҙелша ауылынан килеп, Һаҡмар ҡушылдығы Ҡышлауыр йылғаһы буйындағы ауылға нигеҙ һалыусы Этҡол булған. Беренсе Бөрйән олоҫо Беренсе Этҡол ауылы тирәһендә ойошторола. Төрлө яҡтан кешеләр күсеп килеп, ауылдар күбәйгәс, Темәс ауылында Икенсе Бөрйән олоҫо барлыҡҡа килә. Һуңыраҡ әлеге Иҙел буйы яғында ерләшкән бөрйәндәрҙән Өсөнсө Бөрйән олоҫо ойошоп, уның үҙәге бәләкәй генә Мәндәғол ауылында урынлаша. 1925 йылда

ауыл янып киткәс, үҙәкте Иҫке Собханғолға күсерәләр. Революция алдынан Дүртенсе Бөрйән-Таналыҡ олоҫо ойошторолоп, идараһы Баймаҡ ауылында булды. Темәстә Бөрйән-Түңгәүер кантоны торған заманда (1919 – 1923), Төркмән ауылда Бишенсе Бөрйән олоҫо төҙөлөп, бер аҙҙан бөтөрөлә. Бөрйән олоҫтары Орск өйәҙе Ырымбур губернаһына буйһона. Шуларҙан Беренсе Этҡол һәм Темәс ауылдарында рус-башҡорт мәктәптәре асыла. Темәстә больница һалынып, унда беренсе табип булып Бикарыҫлан Собханғолов эшләй. Ул ҡартайып үлгәс, был вазифаны күп йылдар Хәбибрахман Атласов башҡара. Совет власы уға «атҡаҙанған табип» исеме бирә. Атласов 83 йәшкә етеп, Өфөлә вафат була. Сығышы менән ул хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡарғалы ауылынан. Бөтә Бөрйән олоҫтарына Темәс өҫтөнлөк итте, сөнки унда – баҙар, сауҙагәрҙәр күп йәшәй, йәрминкәһе лә ҙур була. Шулай уҡ уҡыу-уҡытыу үҙәктәре, мәҙәни усаҡтар ҙа шунда урынлашҡан.

1913 йылдан башлап завод һалынып, баҙар, йәрминкәләр асылып, халҡы күбәйгәнлектән, Баймаҡ ауылы күтәрелеп китә. Унда «аңлы» эшселәр килеп сығып, революцион пролетар «ҡаҙанышы» менән тарих битенә ингән урыны ла бар. Шул ваҡыттан алып ауылда фажиғәле, ҡанлы ваҡиғалар ҙа аҙ күҙәтелмәй. Башҡорттоң тәүге етәкселәре Зәки Вәлидов, Әмир Ҡарамышев, Ғимран Мәһәҙиев, Ғабдулла Иҙелбаевтар ҙа шунда булды. Поленов, Руденколар тарафынан ҡырылған халыҡтың иҫәбе-һаны юҡ. Ошо дүрт Бөрйән олоҫында 1911 йылға хәтлем бер генә урыҫ ауылы ла булмай, тик Темәстән бер саҡрым түбәндә күн заводы хужалары һәм шуларҙың эшселәре генә урыҫтар була. Юлыҡ ауылында Сизов тигән бер-ике күнсе йәшәй. Баймаҡта электән рудник булып, төрлө байҙар алтын йыуҙырып килгәнлектән, унда ла байтаҡ урыҫ төпләнә. Был ауыл элек хәҙерге Хоҙайбирҙин урамының бирге башында 20 – 25 өйҙән дә артмаған бәләкәй генә башҡорт төйәге ине. Алтын приискыһы асылғас, бында урыҫтар килә. Улар башбаштаҡланып, алтын йыуҙырып алып китә.

Байҙарҙың береһе Гәрәев фамилиялы булғанлыҡтандыр инде, 1910 йылға хәтле Баймаҡты «Гәрәев» тип йөрөтәләр. Һуңынан байҙар берләшеп, завод һалдырып, Каванов тигән кешене идарасы иткәс, эш көсәйеп китә. Ауыл тағы ла «Баймаҡ» исеме менән йөрөтөлә башлай. Николай II батшаның эшлекһеҙлеге арҡаһында, Урал аръяғы райондарының ҡаҙылма байлыҡтарын Англия, Франция, Италия ҡуртымға алып эшләтә. Баймаҡ баҡыр заводында Италия оҫталары эшләй, Иран (Персия) һөнәрселәре лә була. Ул заманда машиналар булмағас, бөтә эш ат көсө менән башҡарылып, шахталарҙан руда ҡул көсө менән сығарыла.

1910 йылда Әхмәр ауылы халҡы, үҙҙәренең йәйләү урынын һатып, унда Ҡазан губернаһынан килгән урыҫтар урынлаша, һөҙөмтәлә «Казанка» тигән тәүге урыҫ ауылы барлыҡҡа килә. 1911 йыл Беренсе Этҡол, Буранбай ауылдары үҙ йәйләүен Кананикольск урыҫтарына һатып ебәргәс, унда Аҡморон ауылына нигеҙ һалына.

Үрге, Түбәнге Яйыҡбай ауылдары халҡы үҙҙәренең «Ҡарағай үҙәк» һәм «Талды үҙәк» тигән йәйләүҙәрен һатҡас, унда Оло Эйек буйынан Бикеш ауылы кешеләре килеп ултыра. Шулай итеп, 1913 йылда Бикеш ауылы барлыҡҡа килә. Артабан ошонда уҡ Төйәләҫтән, башҡа ерҙәрҙән килеп урынлашалар. 1916 йыл Түбә руднигы асыла, 1923 – 1925 йылдарҙа Сибай руднигы ойошторолоп, 1955 йылда ул ҡалаға әйләнә. 1925 йыл Ленинград инженерҙары менән мин бригадир сифатында разведка үткәрҙек. Сибай руднигы һалынасаҡ урында бер барак, мунса, ҡарауылсы өйө генә бар ине. Хәҙерге Солнечный урамынан Электрификация урамына тиклем бик ҙур һаҙлыҡ булып, уның уртаһында Бәләкәй Сибай ауылы тора ине. Хәҙерге Ҡамышлы үҙәктә Өлкән Сибай байҙарының йәйләү урыны булды. Беҙ, разведка эшселәре, баҙар һайын Ҡыҙыл ҡасабаһына йәйәүләп барып, аҙыҡ-түлек һатып ала торғайныҡ.

Бик күп рудниктар асылып, бер нисә йыл эшләгәндән һуң ябылдылар: Байҡара, Алғаҙы, Мәмбәт, Күлйортау. Һуңғы икеһе яңынан асылып, эшләп маташты. Ә бына Ольховкалағы, Юлалылағы рудниктар туҡтап ҡалды. Семеновск ҡасабаһындағыһы иһә бер туҡтамай эшләне. 1930 йыл колхозлашыу башланғас, халыҡ рудниктарға таралып, ҡайһы бер бәләкәй ауылдар ҙур ауылдарға ҡушылып, байтағы юҡҡа сыҡты. Улар: Аҡбай, Дауыт, Байрамғол, Исхаҡ, Һаҡмар, Ҡыҙыл Ҡарағай, Иҙелбай, Бәләкәй Сибай, Атайсал, Әпсәләм, Ҡарағай, Туғыҙбай һ. б. Байҡарала бик ҙур алтын приискыһы булып, унан һәм Ишбирҙе приискыһынан ҡиммәтле ҡыҙыл алтын сыҡты. Түбә ҡасабаһында башта (1922 – 1926) айына утыҙ бот алтын сығаралар ине.

Беренсе донъя һуғышы һәм 1921 йылғы ҡаты аслыҡ ваҡытында туҡтап ҡалған Баймаҡ баҡыр заводын ошо Түбә алтыны аяҡҡа баҫтырып, ул яңынан эшләй башланы. Тик Сибай көсәйеп киткәс, 1957 йылда баҡыр заводы бөтөнләй туҡтап ҡалды. Хәҙер унда машиналар төҙөү заводы ғына эшләй.

Шулай итеп, бөрйәндәрҙең төп ватаны булған Баймаҡ районы мәғдәндәргә бай булыуы менән тирә-йүндә дан тота. Бында, алтын менән баҡырҙан тыш, бик күп төрлө ер аҫты байлыҡтары ҡуҙғатылмай яталыр әле. Сибай рудаһы әле Сибай, Магнитогорск, Екатеринбург, Медногорск ҡалалары предприятиеларын тәьмин итеп тора.

Бөрйән ырыуы вариҫтары хәҙерге Баймаҡ, Бөрйән райондарында ауыл-ауыл булып йәшәй. Совет власы килгәс, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы икегә бүленеп, Үҙән, Байназар ауылдары – Бөрйән районына, Хәлил, Әлмөхәмәт ауылдары – Әбйәлил, Билал Баймаҡ районына ҡушыла. Баймаҡҡа түңгәүерҙәрҙән Әбделкәрим ауыл Советы ҡушыла.

Икенсе Этҡол ауылы 1913 йылға саҡлы ике мәсетле, ике мәктәпле, ҙур ғына баҙарлы ауыл булып, идара үҙәге лә шунда ине. 1918 йылғы тифтән, 1921 йылғы ҡаты аслыҡтан ауылдың ярты халҡы тиерлек ҡырыла. 1927 йыл Икенсе Этҡолда урман хужалығы идаралығы төҙөлөп, ҙур ғына таҡта ярыу заводы эшкә тотона. Иген һаҡлау пункты, урман хужалығы, һүнеп ҡалған баҙар тергеҙелеп, ике ауыл ҡала кеүек ҙурая. «Ҡыҙыл байраҡ» колхозы идараһы, алты магазин була. 1941 – 1945 йылдарҙан һуң етәкселеккә береһенән икенсеһе эшлекһеҙерәк етәкселәр килеп, ауылды тарҡата башланы. Башта урман хужалығы ябылып, идаралыҡ Бикешкә күсерелде, унан һуң бик бай китапхана Темәс ауылына күсерелде. Аҙаҡ «Ҡыҙыл байраҡ» колхозы «Үрнәк»кә ҡушылып, идара Ниғәмәт ауылына күсерелде. Был кампанияны ул саҡта Баймаҡ район Советы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләгән Һиҙиәт Күсәбаев ойошторҙо. Ауыл Советы рәйесе итеп выжданһыҙ, шәхес культы шымсыһы Мырҙаҡаев тигән әҙәмде килтерҙе. Колхоз рәйесе итеп шундай уҡ Шығатай Мусинды ҡуйҙылар. Гөрләп торған Икенсе Этҡол ауылы шулай тар-мар ителде. Урындағы халыҡ ҡаты нәфрәт менән көрәшеп ҡараһа ла, Өфөлә тегеләрҙең яҡлаусылары булғас, халыҡ теләге иғтибарһыҙ ҡалды. Дөрөҫ, һуңынан был бәндәләр район тарафынан шелтәләнде-шелтәләнеүен. Ә бит халыҡ ауыл Советына йомош менән 20 – 25 саҡрым үтеп йөрөргә мәжбүр булды. Бикештән 25 – 30 саҡрым ауылдарға сельпонан тауар ташынылар. Колхоз идараһы ла шул уҡ иң ситтәге ауылда булғанлыҡтан, халыҡ йомошҡа илай-илай бара ине. Икенсе Этҡол әле лә районда ҙур ауылдарҙан һанала. Уның урыны ла ситке ауылдар өсөн уңайлы ине. Эшлекһеҙ етәкселәр халыҡ өсөн бер афәт икән…

**Материалды баҫырға Хәмиҙә МИНҺАЖИТДИНОВА әҙерләне.**



**Марат**
**ӘМИНЕВ**

**ЮМОРЕСКАЛАР**

## Һуғым

– Ауыҙ тултырып ит ашар көн булырмы-юҡмы? – тип һуҡранды ҡарт, ҡалағы менән шыйыҡ өйрәһен болғата-болғата.

– Быҙау алып үҫтерәйек һуң, – тип элеп алды сәй әҙерләп йөрөгән ҡарсығы.– Нисек тә ҡарарбыҙ әле, малһыҙ донъяның рәте юҡ шул.

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Йәйге йәмле кистәрҙең береһендә уларҙың ихатаһында бер йәшлек башмаҡ пәйҙә булды. Байтаҡ бурысҡа батһалар ҙа, ҡарт менән ҡарсыҡтың ҡыуанысы ҙур ине. Был шатлыҡты көндән-көн арта барған мәшәҡәттәр ҙә һүрелтә алманы. Ҡартҡа көн режимын киҫкен үҙгәртергә тура килде. Әбейе менән ике сәғәт һайын яйлап ултырып сәй эсеүҙәрҙе, йәштәштәре менән эскәмйәгә теҙелешеп гәп һатыуҙарҙы һағынып һөйләргә генә ҡалды. Хәҙер иртән тора ла, балтаһын ҡыҫтырып, ут күршеһе Вәзиргә керә. Аҙна-ун көн эсендә мунса бурап, иҙән-түбәһен түшәп, мейесен ултыртып ҡуйҙылар. Сиратта – Хәйбулланың йортона төкөтмә бурау, унан Сәлихтың аҙбарын рәтләү тора. Барыһы ла мал аҙығы хаҡына инде. Биш һыйыр тотҡан Вәзир – ике сана бесән, ырҙын табағы мөдире Хәйбулла центнерлап комбикәбәк вәғәҙәләй, шуға Сәлих көтөүгә сығырға шундуҡ ризалашты.

Кис тә тынғы юҡ. Көтөүҙән ҡайта белмәгән башмаҡты эҙләп хәлдән тая, тапһа ла, ҡасыу яғын ғына ҡараған мал менән ярышыу етмеш йәшлек ҡартҡа еңел түгел. Ғәжәп, юғары ҡан баҫымынан, баш ауыртыуҙан, йөрәк өйәнәгенән яфаланған ҡарт ауырыуҙарын бөтөнләй онотто – уның дауаланырға ваҡыты ла ҡалмай.

Башмаҡты Яңы йыл алдынан ғына һуйҙылар.

---

*Марат Әминев (1967) Ғафури районы Һабай ауылында тыуып үҫкән. Уҡыусыға «Йәштәр тауышы» серияһында нәшер ителгән «Хикмәтле төш» китабы, республика матбуғатында баҫыла килгән юмористик хикәйәләре аша таныш. «Һәнәк» журналының яуаплы сәркәтибе булып эшләй.*

– Ите матур күренә, тас май, шул хәтлем ҡарауға ни, – тип һөйләнде ҡарт ҡәнәғәтлек менән. Мал һуйышырға ҡайтып төшкән балалары, тағанға эленгән түшкәләрҙе һыйпап, ярыша-ярыша баш ҡаҡты. Ҡарт уларға тәү күргәндәй ҡарап ҡуйҙы. Ҙур ғына икән дә уның ғаиләһе. Ана бит, өс ҡыҙы, ике улы, уларҙың хәләл ефеттәре, балалары – өйгә лә һыймайҙар хатта. Ҡарсығының да, үҙенең дә юбилейына ла был тиклем йыйылмағайнылар. Балаларына аҡыл ултыра, тимәк, ата-әсәне ҡәҙерләргә кәрәклеген аңлағандар. Ҡарттың күңелен ғорурлыҡ хисе биләне. Ул эргәһенә килеп баҫҡан, быйыл ғына пенсияға сыҡҡан оло ҡыҙының арҡаһынан һөйөп алды.

– Ейәнең, кәләш алам, ти бит, атаҡайым, туйға аҡса еткерә алмай хитланабыҙ, берәй бот һуғым һатып алырға ине лә... – Ҡыҙы, һүҙен дауам итә алмай, танауын тартты, ҡулъяулығы менән күҙ тирәһен һөрткөләне.

– Бәй, ниндәй һатып алыу ти ул? Алып китегеҙ алғы ботон, аҡсаһы кәрәкмәй.

Ҡапыл урамда тауыш ҡупты, бер аҙҙан оло улының ҡатыны кәртәгә һөйәлеп, шарылдап илап ебәрҙе.

– Итһеҙ нисек ҡыш сығырбыҙ икән, тип ҡайғыра, икебеҙҙең дә эш хаҡын ҡыҫҡарттылар бит, кризис, – тип ғәйепле төҫ менән аңлатты улы ҡатынының ҡылығын.

Ҡарт сығырынан сыҡты:

– Артҡы ботон һал машинаңа, тапҡанһығыҙ ҡайғырыр нәмә!

– Атай, эсәк-бауырын арттыр әле, пирожкийы тәмле була. Киленең ҡойҡа ярата, баш-тояғын да алып китһәк инде? – Кинйәһе һораулы ҡарашын төбәп торҙо ла өҫтәп ҡуйҙы: – Алған бөтә эш хаҡы фатирға түләүгә китеп тора шул, баҙарҙан да алыр инек тә.

Ҡарт ҡулын ғына һелтәп ҡуйҙы...

– Ауыҙ тултырып ит ашап булырмы бер, юҡмы?– Тәрилкәһенән бәләкәй генә ит киҫәге тапҡан ҡарт һуҡранып ҡуйҙы.

– Быҙау алып үҫтерәйек, бер бешерерлек кенә ит ҡалды,– тине ҡарсығы, унан ҡартының асыулы ҡарашын шәйләп, өҫтәргә ашыҡты: – Икәүҙе алайыҡ, нисек тә ҡарарбыҙ әле!

## Төтөн еҫе

Күршеләр нимәлер яндыра, ахыры, төтөн еҫе өйгә тула башланы. Рәфит тәҙрәгә күҙ һалды. Баҡһаң, күрше баҡсалағы сүп-сарға ут төрткәндәр, ә Заҡуан үҙе лә, ҡатыны ла күренмәй. Аһ, аҡылһыҙҙар, хәҙер янғын сығып, эргәләге мал аҙбарындағы бесәнгә эләкһә, үҙҙәренең донъяһын ғына түгел, ярты ауылды һәләк итәсәк бит. Рәфит тышҡа атылды. Усаҡ янында күршеһенең плащы ғына күренә. Плащын алайым тиһә, бәй, үҙе лә шунда йоҡлап ята. Бигерәк ябыҡ әҙәм, ауылдағы иң ябыҡ кеше мин, тип юҡҡа маһаймай шул. Рәфит усаҡты һүндереп, лаяҡыл иҫерек күршеһен өйөнә өҫтөрәне. Быны тәҙрәнән күҙәтеп торған ҡатыны менән аҙаҡ алкаш күршеләрен рәхәтләнеп һүктеләр.

– Пластик тәҙрә алып ҡуяйыҡ, тип күпме әйтәм, тыңламайһың, – тип үпкәләп ҡуйҙы ҡатыны. – Бер ниндәй тауыш, бер ниндәй еҫ өйгә кермәҫ ине.

– Һаман бер балыҡ башы, – тип башын сайҡаны Рәфит. – Һуң, төтөн еҫен һиҙеп сыҡмаһам, бөтә донъяның көлө күккә осор ине бит.

Иртәгәһен эштән ҡайтышлай магазинға керҙе. Сират ҙур, барыһы бер булып Ямал ҡарсыҡты тыңлай.

– Заҡуан кисә эҫе мунсаға инеп, еҫ тейҙереп үлә яҙған, – тип сутылдай телдәр ҡарсыҡ. – Ярай әле, күршеһе күреп, күтәреп алып сыҡҡан тегене.

Рәфит аптыраушта ҡалды. Оһ, өлгөр был күршеһе, ни арала мунса инеп, ни арала иҫтән яҙғансы эсә, тиһең.

Ике-өс көндән эштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың күршеһен эт итеп әрләүҙәренә ҡолаҡ һалды.

– Заҡуан бисәһен күршеһенән көнләшә икән, үс итеп, мунсаһына ут төрткәнме, күршеһе абайламаһа, донъяһының күле күккә осор ине.

– Ҡайһы күршеһе икән, әллә беҙҙә эшләгән?..

Рәфитте шәйләп ҡалған ҡатындарҙың хәбәре өҙөлөп ҡалды.

Ял көнө баҙарҙа бер төркөм һатыусыларҙың Заҡуанды йәлләп һөйләүенә ғәжәп итте. Тауарҙарын да, һатып алыусыларҙы ла онотҡан былар.

– Ҡатыны күршеһе менән нық гуляйт һуҡтыра икән, шуға түҙмәй, йортон, мунсаһын яндырған, ярай әле, пожарныйҙар һүндереп өлгөргән, ҡатынының һөйәре менән бысаҡҡа бысаҡ килгәндәр, милиция араламаһа, ҡырылышып бөтөрҙәр ине...

Ғәжәп, Рәфитте күргәс тә һатыусылар, ләстит сәйнәүҙән туҡталып, эштәренә тотондо. Ҡара әле, ярты баҙар таный икән дә уны. Район үҙәге, ун биш мең халыҡ йәшәй, тип уйламаҫһың да. Берәүҙәр йәлләп, икенселәре уҫал итеп ҡарай, бер әзмәүерҙәй ир, йәшәй беләһең, маладис, тип иңбашына ауырттырғансы һуғып китте.

Өйгә ҡайтып кергәс, ҡатыны тамам һушын алды. Илауҙан күҙҙәре шешенеп бөткән, ишек төбөндә бер сумаҙан тора.

– Бар, сығып кит Заҡуандың бисәһе янына, иркенләп йәшәгеҙ, бөтә ауыл һеҙҙе һөйләй, – ти был, сеңләп-сеңләп.

Рәфит ҡапылда яуап бирергә һүҙ тапмай торҙо. Шул саҡ танауына төтөн еҫе бәрелде. Тәҙрәгә күҙ һалды. Заҡуандар баҡсала тағы усаҡ яҡҡан, үҙҙәре күренмәй.

– Пластик тәҙрәләр алып ҡуйырға кәрәк, – тип үҙ алдына һөйләнеп ҡуйҙы Рәфит, шартлап янған усаҡҡа битараф ҡына ҡарашын ташлап. – Бер ниндәй тауыш та, шурт та кермәҫ өйгә.

## Мөхәббәтле йорт

Беҙҙең ауылға былтыр уҡытырға килгән Гөләндәм менән лесничий Ҡәүи араһында ысын мөхәббәт ҡабынды – ундайҙы бер китапта ла уҡығаным, бер кинола ла күргәнем юҡ әле. Бер-береһенән һөйөү тулы ҡараштарын да алмай, етәкләшеп кенә йөрөйҙәр, әйгенәм. Мөхәббәт тау ҙа аҡтарта, диңгеҙ ҙә кистертә, ти. Ҡәүи, былай, диңгеҙ кисеп йөрөмәне, буғай, тау аҡтарыу түгел, уға үрмәләгәнен дә шәйләмәнем. Шулай ҙа егетлеген күрһәтте ул – Гөләндәмгә өйлөк ағас бүләк итте. Тура килһә килә бит – “КамАЗ”дар ҡәҙерле йөктәрен бушатып та китте, мөхәббәттең ҡайнар ялҡыны һүрелә лә башланы.

Күп тә үтмәй, Гөләндәм менән ауылдың иң данлыҡлы балта оҫтаһы Кәбир араһында ҡупҡан ғишыҡ усағы бөтә донъяны йылытырлыҡ ҡайнарлыҡта дөрләне. Кәбир үҙенең бригадаһы менән хәтәр ҙур бураның һуңғы рәттәрен һалғансы дауам итте ул.

Бер аҙҙан шәхси пилорамаһынан көн-төн таҡта һатҡан Ғәлимйән, район үҙәгендә пластик тәҙрәләр менән сауҙа иткән Вафир, электрик Сәғәҙәт, “Газель” машиналы Мәрүән дә ошо уҡ мөхәббәт даръяһына сумып-сумып алды. Шуныһы:һәр береһе көсөнән, дарманынан килгәнсә әлеге йортто төҙөүгә үҙ өлөшөн индерҙе.

Гөләндәмдең йорто ауылыбыҙҙың оло биҙәге хәҙер. Туй күлдәге кейгән ҡыҙ кеүек, барыһын да күрке-матурлығы менән һоҡландыра. Шулай булмай, баҡса йә аҡса емеше түгел, мөхәббәт емеше ләһә!

## Осрашыу

Ғилман сәй эсергә ултырҙы. Ҡош телендәй икмәк телеменә башта балғалаҡтың осона эләктереп май һыланы, дәфтәр бите ҡалынлығында сыр ҙа телеп алды. Тартмалағы тоҡсайҙан ике печенье алды ла, бер аҙ уйланып торғас, берәүһен кире һалып ҡуйҙы. Киске табынға әҙерлек шуның менән тамамланды. Яһалған сәйен бер уртлап өлгөрҙөмө-юҡмы, ишек ҡаҡтылар. Ҡартлас, аппетит боҙоусыны әрләй-әрләй, урынынан ҡуҙғалды.

– Халиҡ!

Төнгә ҡарай килгән ҡунаҡ, бәй, йәшлек дуҫы Халиҡ таһа! Ҡыҙыу холҡо арҡаһында милиционер менән ыҙғышып, эш олоға китеп, хөкөм ителгәйне ул. Төрмәлә лә өлгөлө тоткон булмағандыр, срок өҫтәй торғас, йәмғеһе ун йыллап стажы йыйылып киткән. Йәш кеше лә түгел бит әле, Ғилман кеүек үк, етенсе тиҫтәне ваҡлай. Бөгөн генә сығарғандар ҙа, тура бында килгән икән.

– Тамуҡтан ҡотолғанһың, ҡотлайым, ҡартайған көндә һиңә лә әҙәмсә йәшәп ҡалырға кәрәк бит. – Ғилман дуҫын күреүгә шатланды ғына.

– Үҙең нисек йәшәйһең, пенсиялалыр?

– Хәҙер икенсе йыл эшләмәйем, алты мең һум пенсия алам, шуның дүрт меңе фатирға, электрға, телефонға түләүгә оса. Ике мeңен тартып-һуҙып еткерергә тырышыла... – тип уфтанып ҡуйҙы хужа.

– Элекке һымаҡ рестарандарҙа ғына типтерә алмайһың әтеү, ә?

– Ресторан түгел, ашханаларҙың да ишегенең ҡайһы яҡтан асылғанын онотатом хәҙер. Пенсияға сыҡҡаны бирле театрға түгел, мунсаға ла йөрөй алмайым, аҡса еткереп булмай. Оят булһа ла әйтәйем, һыуыткыста аялай ҙа ит ҡалманы, ә пенсия аҡсаһына тағы ике аҙна бар. Һин, Халиҡ, сәйеңде эсеп ултыр, барынан ауыҙ ит, шөкөр – шул тамуҡтан иҫән-аман сыға алдың.

– Машинаң, баҡсаң да бар ине бит әле. – Ҡунаҡ өҫтәлдәге бөтә һыйҙы – бер печеньены алды ла, яртыһын һындырып, кире һалды.

– Машина ватыҡ, ремонтларға аҡса юҡ, баҡсаға йөрөргә лә еткереп булмай, һатам тиһәң – алыусы юҡ, хәҙер йәштәр беҙҙең һымаҡ баҡсала ҡаҙынырға дәрт итмәй бит. Ҡарәле, Халиҡ, һин дә хәлеңде һөйлә әле, ул тамуҡта нисек түҙҙең, нисек тере ҡала алдың?

– Нимәһен һөйләйһең, унда ашаталар, кейендерәләр, артистар килгеләй, аҙна һайын мунса индерәләр, бер ниндәй донъя мәшәкәте менән йонсомайһың, вә ләкин ирек кенә юҡ.

– Минән яҡшыраҡ йәшәгәнһең бит әй, – тип ҡысҡырып ебәргән Ғилман ҡунағына йәлләп ҡарап ҡуйҙы. – Пенсионер тормошо бик ауыр ул, түҙә алырһыңмы икән, бер уйһыҙ ғына көн итергә... был һиңә төрмә түгел!

## Белгес

Директор уйға һалды әле. Иртүк йыйып алды ла хәтәр хәбәр әйтте:

– Яңы йылдан ойошманы финанслауҙы кәметәләр, кризис икәнен беләһегеҙ, һеҙҙең бүлекте бөтөрөп, бер генә кешене ҡалдырырға тура киләсәк.

Башҡа тимер таяҡ менән һуҡтылармы ни! Штаттан һыҙалар, былай булғас. Сәлимйән ағай ҡала инде, кем булһын тағы. Директор яҡташ, бергә уҡығандар, йәшерәк саҡта йән дуҫтар булғандар. Абзыйҙың "зәм-зәм" һыуын мулыраҡ уртлап, айҙың бер аҙнаһын эшкә сыҡмауын, һуң килеп иртә ҡайтыуын кем иҫәпкә алыр тиһең. Өс ай ғына стажлы Хәйернас та бар-барлыҡҡа, һы, уны ҡалдырмаҫтар, шәт. Профессиональ барымы юҡ, йомош-юлға саҡ эшкинеп килә.

Минең һымаҡ бында биш йыл ҡайнамаған бүлектең бөтә мәшәҡәттәрен нисек кенә тырышһа ла, йырып сыға алмаясаҡ.

Иртәгәһен директор өсөбөҙҙө тағы саҡыртып алды.

– Ҡыҫҡартыуҙар тураһында һүҙ булғайны, үпкәләмәгеҙ, – тине ул, ҡарашын йәшереп. – Бүлек бөтөрөлә, өсөгөҙ урынына бер генә кеше ҡала. Арағыҙҙа иң лайыҡлы, иң эшлекле кешене үҙегеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ – Хәйернас ул!

Аяҙ көндө йәшен атһа йәки ер убылһа ла, аптырамаҫ инем. Бер нәмәне биш аңлатып та бер ни төшөнмәгән Хәйернас иң лайыҡлы белгес, имеш, тфү!

Был ғәжәп хәлдең айышына төшөнөргә үҙемдең генә баш етмәне. Шуға, директорҙың кабинетынан сыҡҡас та, Сәлимйән ағайға йәбештем:

– Нишләп Хәйернас иң лайыҡлыһы, һин дә, мин дә түгел?

– Эй, ҡустым, ҡустым, – ҡыҫҡартылыуын бик тыныс ҡабул иткән ағай арҡамдан һөйөп алды. – Ниңә юҡҡа аптырайһың, бик дөрөҫ эшләне директор, арабыҙҙа иң шәп белгес ул.

– Хәйернасмы? – Баш әйләнеп, йығылып китә яҙҙым.

– Ул булмай кем булһын? Бына үткән аҙнала директор шәмбе көн эшкә сығырға ҡушҡас, һин нимә тигәйнең?

– Былай ҙа өлгөрәбеҙ бит, тинем.

– Дөрөҫ. Ә Хәйернас директорҙың кабинетынан сыҡҡас та, йәкшәмбелә лә эшләтергә кәрәк беҙҙең кеүектәрҙе, ялҡаубыҙ, яй ҡуҙғалабыҙ, тине. Ҡысҡырып, директор ишетерлек итеп әйтте. Һин, ҡустым, директорҙың мунса һалғанын беләһеңме?

– Оҫталар кәрәк, тигәйне шул.

– Үәт, үәт. Һин ишеттең дә оноттоң. Ә бына Хәйернас балта тота белгән туғандарын хужаның баҡсаһына алып барып, мунсаһын “под ключ” эшләп биргән. Бер тин аҡса ла алмаған.

– Ялағай икән.

– Йәшәй белә, тиң. Тәүге көн эшкә килгәс, урамда туп типкән бала-сағаны күреп, Хәйернас нимә тигәйне, хәтерләйһеңме?

– Ун бер дүрәк бер туп артынан йүгерә...

– Шулай тигәйне шул. Ә бына директорҙың әшнәләре менән ял көндәре футбол уйнауын белгәс, бөтөнләй үҙгәрҙе. Спорт гәзиттәрен, ҡиммәтле журналдарҙы һатып алып, өҫтәленә һала, туп тибергә лә өйрәнде. Туҡтатмаһаң, футбол тураһында сәғәттәр буйы һөйләй ала.

– Аңланым, ағай, – тим, зиһенем асылып китеүенә ҡыуанып. – Хәйернас оҙаҡламай директорҙың урынбаҫары ла булыр, артабан да үрләр – ысынлап та, иҫ киткес белгес икән шул!

– Дөрөҫ! – ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Сәлимйән ағай. – Бөтөнләй үк өмөтһөҙ кеше түгелһең икән, тырышһаң, бәлки, һин дә арыу белгес булып китерһең, ә? Йәшһең бит әле!

## Башлыҡ ҡотлауы

Яратам да һуң Яңы йыл кисен! Тәмле-татлы бер аҙналыҡ ризыҡты бер ултырыуҙа һоғонаһың, шампан шарабын аттыраһың, ҡәҙерле кешеләрең менән рәхәтләнеп күңел асаһың. Шулай ҙа иң ратҡаным – сәғәт телдәре ун икене һуғыр алдынан ил башлығының ҡотлауын тыңлау. Тормошобоҙҙоң көндән-көн яҡшыра барыуын, йылдың хәтәр шәп үтеүен мин шул саҡта ғына белеп ҡалам.

Бәләкәй сағымда орден-миҙалдары түшенә һыймаған яҫы ҡашлы ил башлығын тыңларға яраттым. “Оҙаҡламай илдә коммунизм таңы атасаҡ”

тигәнендә шатлыҡ йәштәре эсеп ултырған компотҡа субырлап тамғанын әле лә хәтерләйем. Төн йоҡоһон ҡалдырып, 1 ғинуар таңын да ҡаршыланым бит әле, йәнәһе, коммунизмлы таңды беренсе булып күрә берәү.

Түбәһендә үс аяһындай миңе булған ил башлығы ҡотлаған саҡтарҙа иһә үҫмер егет инем. Магазиндарҙа өс литрлы тоҙло ҡыярҙан башҡа бер нәмә булмаған, икмәк менән һөттө лә һыу буйындай сират тороп алған осорҙа йәшәүе лә күңелле һымаҡ ине. Йәш саҡ, ҡыҙҙар яратҡан саҡ, бөтә донъяға ғәжәпләнеп һәм һоҡланып баҡҡан саҡ. Бөтәбеҙ ҙә бер тигеҙ – ярлы, шуға берберебеҙгә терәкбеҙ, кәрәкбеҙ. Ил башлығының “Үҙгәртеп ҡороу, демократия юлынан хәтәр шәп барабыҙ, тормошобоҙ көндән-көн матурлана” тигәненә бәхәсһеҙ ышанабыҙ.

Власҡа документтар менән эшләргә яратҡан, мәңге һалмыш ҡиәфәтле “Понимаешь” килгәс тә Яңы йыл менән ҡотлауҙарҙы һағынып көтөп алдым. Ни тиһәң дә, ул һөйләй белә ине шул. “Хаҡтар артһа, рельсҡа ятам” тип тә шаҡ ҡатырҙы бер заман. Тик хаҡтар уны тыңлап торманы, унлата, йөҙләтә тапҡыр артты ла китте. Поезға тапалыусылар, рельсҡа ырғыусылар араһында ғына ил башлығының фамилияһы күренмәне. Сираттағы Яңы йыл кисендә күҙ йәштәрен һөртә-һөртә отставкаға китте, понимаешь.

Донъяла ғәҙеллек юҡлығына, берәүҙәрҙең туйып һикереүенә, икенселәрҙең осон-осҡа ялғап саҡ йәшәүҙәренә әле лә йыл буйы аптырайбыҙ. Ә бына Яңы йыл кисендә ил башлығының күңелдәргә үтеп инерлек хәстәрлекле тауышын, тап киләһе йылдан тормоштоң яҡшыра башлаясағын ишеткәс тә, балаларса ҡыуанабыҙ, барыһы ла һәйбәт буласағына ышанабыҙ.

Ярай, сәғәт телдәре сәғәт 12-гә яҡынлаша, яңы башлыҡтың ҡотлауын тыңлайыҡ әле. Әгәр хәҙер ҙә “Киләһе йылдан беҙ һәйбәт йәшәйәсәкбеҙ” тигәнде ишетһәм, үҙенә бер һорау менән хат яҙып ебәрәм әле. Ул хатта ике һүҙ генә буласаҡ: “Ә беҙ?”

## Ҡоҙоҡ

Баҡсала ҡоҙоҡ ҡаҙырға булдым әле. Эште ниҙән башларға икән? Ҡаршылағы күршем Рәмилгә кәңәш иттем.

– Нимәһе бар уның? – тип ҡулдарын йәйеп ебәрҙе теге. – Нейҙәр һатып алаһың да, биш- алты ней саҡырып ике көн нитһәгеҙ – эше лә бөттө.

– Әллә... – тим, елкәне тырнап.

Күршем, үәт, аңра, тигәндәй, аптырап ҡарап ҡуйҙы.

– Йомро бетон ҡулсалар һәр мөйөштә һатыла хәҙер, – тип миңә йәлләүесле ҡарап аңлата башланы был. – Яртышар метрлыны ун штук ал, сөнки һыу бында биш метрҙан сыға. Унан биш-алты егет алып кил дә ҡаҙҙыр. Ҡаҙый бараһың, ҡулсаны берәмләп төшөрә бараһың. Ике көндә – ҡоҙоғоң гатауай. Оҙаҡ уйлама, йортоң менән мунса араһына тот та ҡаҙ.

Ике баштан өс баш яҡшы. Уң яҡ күрше Фазылдан да кәңәш һораным.

– Аҡсаң артып барамы ни? – тип бот сапты Фазыл. – Ҡулсалар ҡыйбатҡа төшә ул. Һатып ал, тейәп килтер. Ер ҡаҙыуы ла анһат түгел, бына мин һыу сыҡҡансы һигеҙ метр ҡаҙыттым үзбәктәрҙе яллап, алтын хаҡына төштө. Бырау алып ҡаҙ ҙа торба төшөр. Иң осһоҙо шул булыр. Рәмилде тыңлама һин. Шул да булдымы баҡсасы! Былтыр ике тоҡ бәрәңге сәсеп, бер тоҡ ҡаҙып алғанын иҫлә.

Өсәүҙән дүртәү яҡшы. Һул яҡ күрше Ғәлимйәнгә йүнәлдем. Баҡсасылыҡ серҙәренә арналған китап сығарған кеше. “Алмағас алма бирһен өсөн уға һыу һибергә кәрәк” тип башлана китабы.

– Ҡоҙоҡто август айында, һыу ҡатламы аҫта саҡта, ҡаҙырға кәрәк, – тип белдерҙе мунса яғып йөрөгән ағайыбыҙ. – Һыу юлының ҡайҙан үткәнен ике алюмин тимерсыбыҡ ярҙамында ла белеп була. Ә Фазылды тыңлама һин, помидор менән ҡыярға аш ҡалағы менән һыу һибеп, аҙаҡ, нишләп уңыш әҙ икән, тип аптырап йөрөгән әҙәм бит. Ҡарәле, күрше, – Ғәлимйән ағай йәнләнеп китә. – Баҡсабыҙға һыу үткәргес торбалар һуҙып, крандан ғына һыу алырһығыҙ, тип вәғәҙә биреүҙәренә биш йыл булды бит. Белмәйһеңме, вәғәҙәләрен үтәргә йыйынмайҙармы икән?

Мин өндәшмәйем. Үәт, әй, ваҡыт үтә генә. Һыу үткәргәндәрен көтөп, көн һайын бер күршенән һыу ташып, һәр береһенән ҡоҙоҡ ҡаҙыу серҙәрен һорашып йөрөүгә лә биш йыл булған икән. Уның ҡарауы, Ғәлимйән ағай һымаҡ китап яҙырлыҡ мәғлүмәт тупланым. Ул китап шундай һүҙҙәр менән башланасаҡ: “Йәшелсә-емеш үҫтереү өсөн уға һыу һибергә кәрәк. Һыуҙы ҡоҙоҡтан алалар. Бына ҡоҙоҡ эшләүҙең утыҙ туғыҙынсы варианты...”

## Дауаландым

Ҡапыл йөрәк сәнсеп ҡуйҙы. Бер аҙҙан тағы, тағы. Нишләргә? Бәй, класташым Минетдин кардиолог та баһа. Осрашҡан һайын, кил үҙемә, йөрәк шаяртмай ул, аҙна-ун көн ятып дауаланып сығырһың, тип өгөтләй бит. Телефон номерын йыя һалдым.

– Айырым палата әҙерлә, дуҫ, һиңә дауаланырға киләм!

Тик Минетдин кикректе тиҙ шиңдерҙе. Баҡһаң, хәҙер кардиология үҙәгенә эләгеү еңел түгел икән. Йә инфаркт үткәрергә, һис юғында врач ҡабул иткән саҡта йөрәгеңде тотоп йығылырға тейешһең. Бер ҙә булмаһа, һаулыҡ һаҡлау министрлығынан йәки баш врачтан “һалығыҙ” тип шылтыраттырырға кәрәк.

– Баш врачҡа үҙем керермен, – тип һүнгән өмөттө ҡабаттан терелтте Минетдин. – Тик һин миңә лә бер изгелек эшлә инде. Малай быйыл мәктәпте бөтә, нефтяник булырға уйы. Шуға шәп репетитор кәрәк.

– Күршем нефть университеты профессоры бит, бөгөн үк һөйләшәм, – тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙем, мәсьәләнең еңел генә хәл ителеүенә ҡыуанып.

Профессор өмөттө аҡланы. Иң осһоҙ хаҡҡа уҡыусынан студент яһарға ризалашты. Бер юлы үҙ ҡайғыһын да һөйләп алды. Сит илдәге дуҫы, бөтә донъяға танылған ғалим ҡунаҡҡа килергә тейеш икән. Тик уға айыу тиреһе вәғәҙә иткән дә, уныһын таба алмай ҡаңғыра, имеш.

– Һис тә борсолма, – тип тынысландырам күршене. – Бажам – атаҡлы һунарсы, берәй нәмә уйлап табыр.

Баш ҡаланан дүрт йөҙ саҡрым районда йәшәгән бажам ихлас кеше ул, ҡосаҡлап ҡаршыланы. Мин тейәп килтергән күстәнәстәрҙе ауыҙ иткәс, телдәр асылып, етәкселәрҙе, ҡатындарҙы, бөгөнгө тормошто һүгеп туйғас, төп мәсьәләгә күстек.

– Табам мин һиңә айыу тиреһен, осһоҙға ғына, – тип һөйөнсөләне бажа. – Әхмәҙулла бабай заманында ун бишләп тайыш табанды алған, бергә барып һөйләшербеҙ. Һин дә миңә бер изгелек эшлә инде. Мылтыҡҡа рөхсәт ҡағыҙы йүнләп бирһәң, милиционерҙар алып киткән ике мылтыҡты ҡайтарышһаң, машинаға техосмотр үткәртеп бирһәң, шәп булыр ине.

– Аҡса кәрәккәнгә генә һатам тирене, алығыҙ, изгелеген күрегеҙ, – тип ҡыуандырҙы түшәгендә ауырып ятҡан Әхмәҙулла бабай. – Тик, уландар, йөрәк шаяра бит әле, балнисҡа ғына урынлаштырһағыҙ ине мине.

– Булыр, – тим, ҡыуанып. – Класташым шәп кардиолог, һеҙҙе һә тигәнсе аяҡҡа баҫтырыр.

... Ҡапыл йөрәк сәнсеп ҡуйҙы. Бер аҙҙан тағы, тағы. Мәтрүшкәләп, баллап сәй эсәйем дә ятып торайым. Иң шәп дауа шул булыр.

# Йылмайыу хаҡы

Ҡала ситенән баҡса алғайным. Бәләкәй генә йорто, мунсаһы бар ҙа ул, тик арыу ғына ремонт кәрәк. Киттем яҡындағы ауылға оҫта эҙләп.

Уңмаған юлға сыҡҡанмын, ахыры. Булған оҫталар йә ҡалымда, йә загулда икән.. Юлда осраған ике-өс кеше:

– Йылмаяҡ бәндә бар, тик уға әйтә күрмә, хаҡты ҡутара һорай, – тинеләр. Башҡа сара ҡалмағас, барып таптым теге оҫтаны. Бик мөләйем кеше икән үҙе былай, йөҙөнән йылмайыу китмәй. Ауылдаштары һалған шик-шөһбә бик һағайтҡас, ҡаты, иркен һөйләшергә булдым.

– Көнөнә биш йөҙ һум түләйем, иртәнән кискә тиклем тир түгергә риза булһаң – эшләйбеҙ, – тим, үҙемдең ҡыйыулыҡҡа үҙем һоҡланып.

– Һөйләштек, – оҫта ҡулымды ҡыҫты ла баҡсаһына йүнәлде. – Берәй биҙрә бәрәңге ҡаҙып алайым әле, ашарлыҡ булған бит, аҙыҡ-түлек һатып алып тормаҫһың.

Бер аҙ телдән ҡалып торҙом. Бәй, гел йылмайып торған был әҙәм әүлиәнең үҙе ләһә. Ауылдаштары яратмаған була бит әле, үҙҙәре йыйын жулик булғас.

Йылмаяҡ оҫта электр бысҡыһы, таҡта йыша торған станогын да үҙе менән алырға булды.

– Инструменттар эҙләп йөрөмәҫһең инде ағайыңда бар саҡта...

Оҫта бөтә әйберҙәрен “Жигули”йына тейәй башлағас, миңә оят булып китте:

– Иртән алып, кисен килтереп йөрөрмөн, машинаңды ҡуҙғатма, – тим.

Йылмаяҡ күңелдә әсир итерлек итеп йылмайҙы:

– Бәлә һалырға яратмайым, беҙ бит – әҙәм балалары, бер-беребеҙҙең хәленә керә белергә тейеш.

Был һүҙҙәр мине тамам һеңгеҙәтте.

– Көнөнә меңәр һум түләрмен, абзыҡай, – тим.

Йылмаяҡ оҫтаның йөҙөндә бер мускулы ла һелкенмәне:

– Мең икән мең, үҙең beләһең.

Баҡсаға барып йышыу станогынан бер таҡта ла үткәреп өлгөрмәнек, нимәлер төтәп сыҡты. Йылмаяҡ бер ҡулы менән станогын, икенсеһе менән йөрәген тотто.

– Йә, Хоҙай, үткән аҙнала ғына күпме аҡса түгеп алыштырғайным бынау әтнәкәһен, сәсрәне бит тағы, таҡтаһы ла йүнле түгел шул, шау ботаҡ.

– Үҙем һатып алырмын, нимәләр кәрәген генә әйт тә... – Минең утҡа баҫҡан бесәй кеүек сәбәләнгәнде күреп, оҫта тынысланды, йөҙөнә ғәҙәти йылмайыуы ҡайтты. Унан һатып алырға запчастар исемлеген тottороп, мине ҡалаға йүгертте. Төштән һуң электр бысҡыһының ярты детален алыштырҙыҡ. Унан станокка яңы ҡайыш килтерҙем.

Кис етте. Көнө буйы өс таҡта йыштыҡ та икәүҙе быстыҡ. Ҡайтырға йыйынғас, Йылмаяҡтың машинаһы ҡыҙмаҫ булды. Сервисҡа таҡтырып алып барғас, унда ат хаҡына ремонтларға риза булдылар.

– Ремонт уртаҡ булыр инде, үҙ ризығым, инструменттарым менән һиңә эшләп йөрөйөм бит, – тине былай ҙа ҙур ауыҙы ҡолағына еткән Йылмаяҡ, бер гонаһы булмаған саф ҡарашын төбәп.

Көлөп ебәрҙем. Йылмайыу ҡайһы саҡта бик ҡыйбатҡа төшә икән.

### Әхмәтзәки Вәлиди Туған йылын йомғаҡлау тантаналары

Әхмәтзәки Вәлиди көндәре программаһында (билдәле булғанса, тыуыуына 120 йыл тулыуға арнап, 2010 йыл ТӨРКСОЙ илдәрендә Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан ителгәйне) Башҡортостанға ТӨРКСОЙҙан килгән мәртәбәле делегация ҡатнашты. Тәүҙә хөрмәтле ҡунаҡтар күренекле ғалим һәм дәүләт эшмәкәренең тыуған яғына – Ишембай тарафтарына сәфәр ҡылды. Торатау итәгендәге "Ырыуҙар ташы" комплексын ҡарағандан һуң, улар 2-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыусылар менән осрашты. Көҙән ауылы – Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғәзиз йәнтөйәге. Бында мәшһүр төркиәтсе музейы менән танышыу алыҫ араларҙы яҡынайтып килгән илселәрҙә онотолмаҫ тәьҫораттар уятты.

Хөрмәтле ҡәрҙәштәр Ғафури районының Еҙем-Ҡаран ауылында Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры музейын да ҡараны. Өфөгә ҡайтҡас иһә, ТӨРКСОЙ вәкилдәре Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала бөйөк ғалимға таҡтаташ асыу тантанаһында ҡатнашты.

Ошо уҡ көндө Әхмәтзәки Вәлиди йылына йомғаҡ яһалды. БР Мәҙәниәт министры Аҫҡар Абдразаҡов, халыҡ-ара сараға арналған бай программа тулыһынса үтәлде, киләсәктә Төркиә менән Башҡортостан араһында алмаш гастролдәрҙең ойошторолоуы күҙ уңында тотола, тип белдерҙе. ТӨРКСОЙ илселәре иһә олуғ ғалимдың исемен мәңгеләштереүгә тос өлөш индергәндәре өсөн Башҡортостан етәкселегенә ҙур рәхмәт күндерҙе. Әхмәтзәки Вәлиди исеменә бәйле программа сиктәрендә Өфө ҡалаһы Совет районы хакимиәте менән Анкара ҡалаһы Кечиорен районы мэрияһы араһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Ҡәрҙәштәр билдәләүенсә, Төркиәнең Тарсус ҡалаһындағы урамға бөйөк яҡташыбыҙҙың исеме бирелгән. Истамбул университетында Әхмәтзәки Вәлидигә арнап таҡтаташ асылған. Ялов ҡалаһында алдынғы илдәрҙең атаҡлы ғалимдары ҡатнашлығында «түңәрәк өҫтәл» үткән, Ҡаҙағстанда, Әзербайжанда, Ҡырым Автономиялы Республикаһында (Украина) ғилми-ғәмәли конференциялар ойошторолған.

Кисен Конгресс-холға күренекле йәмәғәт эшмәкәрҙәре, фән һәм сәнғәт әһелдәре йыйылды. Тантананы инеш һүҙ менән БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина асты, ә ТӨРКСОЙҙың генераль секретары Дюсен Касеинов менән РФ Мәҙәниәт министрлығы вәкиле Александр Ненашев тәбрикнамә әйтте.

Былтыр Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы «Әхмәтзәки Вәлиди Туған» тигән иҫтәлекле миҙал булдырғайны. Тантана барышында тәүгеләрҙән булып миҙалды ТӨРКСОЙҙың генераль секретары Дюсен Касеинов алды. Шулай уҡ уның урынбаҫары Фырат Пурташ, Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы, Төркиә Фәндәр академияһы ағзаһы Иҫәнбикә Туған, Анкара ҡалаһының Кечиорен районы мэры Мостафа Ак, Төркиәнең Мәҙәниәт һәм туризм министры урынбаҫары Кемаль Фахир Генч, Әзербайжандың Мәҙәниәт һәм туризм министрлығы вәкиле Эльчин Гафарлы, Ҡаҙағстандың Мәҙәниәт министрлығы вәкиле Аҫҡар Турғанбаев, БР Мәҙәниәт министрлығының ТӨРКСОЙҙағы вәкиле Әхәт Сәлихов,

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, драматург Нәжиб Асанбаев, философия фәндәре кандидаты Әмир Юлдашбаев, БДУ профессоры, тарих фәндәре докторы Марат Ҡолшәрипов та бүләкләнде. Миҙалдарҙы һәм Маҡтау грамоталарын БР Фәндәр академияһының вице-президенты Нияз Мәжитов тапшырҙы. Кисәнең икенсе өлөшөндә байрам концерты үтте.

***

Журналист, яҙыусы Рәүеф Насировҡа 75 йәш тулыу айҡанлы әҙиптең тыуған яғы – Учалы районының Ҡужай ауылында осрашыу булып үтте. Унда ҡала һәм район хакимиәте етәкселәре, төбәк яҙыусылар ойошмаһы, «Учалы», «Яйыҡ» редакциялары коллективтары, БДУ филиалы етәкселеге, башҡа йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, ауылдаштары, туғандары ҡатнашты.

Иртәгәһенә юбилей тантанаһы Учалы филармонияһында дауам итте. Юбилярҙы Өфөнән БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев, урынбаҫарҙары Ҡәҙим Аралбаев менән Ришат Дихин, Учалы төбәк яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе Эдгар Вилданов, ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт, мәғариф бүлектәре вәкилдәре һ.б. тәбрикләне.

***

Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театрында төбәк яҙыусылар ойошмаһының ултырышы үтте. Йыйында Хәмит Ирғәлин үҙе етәкләгән ойошма эшмәкәрлегенә ыңғай баһа бирҙе.

Ошонда уҡ кисен шиғриәт байрамы уҙҙы. Сарала Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев, уның урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев ҡатнашты.

***

Үҙәк ҡала китапханаһының үҫмерҙәр бүлеге "Башҡорт әҙәбиәтенә исемдәр ҡайтарабыҙ" проектын башлап ебәрҙе. Проекттың беренсе осрашыуы билдәле башҡорт шағиры, йәмәғәт эшмәкәре, фронтовик Ғәйнан Әмири ижадына бағышланды. Осрашыуҙа БР-ҙың Яҙыусылар союзы идараһының өлкән консультанты, яҙыусы Рәшит Низамов, матбуғат ветераны Рәйсә Кәримова, Республика башҡорт лицей-интернаты уҡыусылары сығыш яһаны.

Бындай осрашыуҙар китапханала артабан да дауам итәсәк.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзында йыл әйләнәһенә төркөм-төркөм уҡытыусылар менән әҙәби осрашыуҙар күптән һәйбәт традицияға әүерелде. Улар, ғәҙәттә, Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтына курстарға килгән була.

Был юлы Өфө ҡалаһының Октябрь районы һәм республиканың төрлө райондарынан курсҡа йыйылған уҡытыусылар алдында С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, шағирәләр Зөһрә Ҡотлогилдина, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина сығыш яһаны.

**Ҡотлайбыҙ!**

Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән, 70 йәше тулыу айҡанлы, шағир Сафуан Әфтәх улы Әлибаев Салауат Юлаев ордены менән наградланды.

***

Көйөргәҙе районы хакимиәте яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Баязит Бикбай исемендәге премия лауреаттарын билдәләне. Район премияһы Көйөргәҙе яҙыусылар ойошмаһының етәксеһе шағир Кинйәғәле Абдуллинға, балалар яҙыусыһы Нәсимә Йосоповаға, шағирә Зөһрә Ҡотлогилдинаға, район мәҙәниәт йорто хеҙмәткәре Йәмилә Рамаҙановаға тапшырылды.